# Ағиҙел

Өфө,
май
2010

5(1045)


ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ


Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.05. 2010. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 487 экз. Һатыуҙа хаҡы иреклe. Заказ № 2.0057.10

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2010 (5, 1045)**

# БЫЛ ҺАНДА:

*Бөйөк Еңеүгә – 65 йыл!*

**Әхмәт-Гәрәй Йәнғәлин.** Башҡортостан һуғыш йылдарында. .........5
**Хәким Хисамов.** Беҙ Берлинда. ....................................................22
**Сабир Йыһаншин.** Еңеү парады. .................................................29
Еңеү көнөн ҡайҙа, нисек ҡаршыланығыҙ? *(Һорау – яуап.)* ............37

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Суфиян Поварисов**. Беҙ фронттан ҡайтҡанда. Роман-хәтирә. Аҙағы. ..........................................................................................44
**Талха Ғиниәтуллин.** Бысҡаҡ ямғыр. Хикәйә. ...........................101
**Радик Әхмәтов.** Ленинград әбейе. Хикәйә-хәтирә. ..............121

ШИҒРИӘТ

**Кәбир Аҡбаш.** Һуғыш ҡатындары. Поэма. ..............................124
**Миңлегөл Хисамова.** «Әсәң күңелеләй саф, изге…» Шиғырҙар. ...........................................................................131
**Рәмил Йәнбәк.** «Бик инанғым килә...» Шиғырҙар. ................139

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Фәнил Күзбәков.** Йәштәр тауышы: ни ишетелә, нисек ишетелә? ........................................................................................148

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Рамаҙан Өмөтбаев.** Көмөш даға. Повесть. Башы. ...................155
**Зөбәржәт Йәнбирҙина.** Йән өҙөлә. Шиғырҙар. .......................167

ҺЫУ – ТЕРЕКЛЕК СЫҒАНАҒЫ

**Мәхмүт Хужин.** Тәбиғәт хөкөмө. .................................................172

*2010 – Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу йылы*

**Мәхмүт Хужин.** Бөйөк рус яҙыусыһы Антон Чехов… иҫәпсе. .....185

«АҒИҘЕЛ»ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

*65 лет – Великой Победе!*

**А. Янгалин.** Башкортостан в годы войны.

**Х. Хисамов.** Мы в Берлине.

**С. Зиганшин.** Парад Победы.

Где и  как встретили День Победы? *(Вопрос – ответ.)*

ПРОЗА

**С. Поварисов.** Когда возвращались  с фронта *(роман-воспоминание)*. Окончание.

**А. Генатулин.** Пепелище *(рассказ)*.

**Р. Ахметов.** Ленинградская старушка *(рассказ-воспоминание)*.

ПОЭЗИЯ

**Кабир Акбаш** *(поэма)*, **М. Хисамова, Рамиль Янбек** *(стихи)*.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Ф. Кузбеков.** Голоса молодых: что слышно, громко ли слышно?

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Р. Уметбаев.** Серебряная подкова *(повесть)*. Начало.

**З. Янбердина** *(стихи)*.

ВОДА – ИСТОЧНИК ЖИЗНИ

**М. Хужин.** Приговор природы.

*2010 – год Всероссийской переписи населения*

**М. Хужин.** Великий писатель Антон Чехов… переписчик.

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир  – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип  – 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары – 292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре – 277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере  менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

*Бөйөк Еңеүгә — 65 йыл*

# БАШҠОРТОСТАН ҺУҒЫШ ЙЫЛДАРЫНДА

Илебеҙгә мәкерле рәүештә баҫып ингән яуыз дошманды ҡыйратыу, Еңеү көнөн яҡынайтыу өсөн республика халҡы бөтә көсөн һалып, фронтты һалдат, ҡорал һәм яғыулыҡ, автомашина һәм трактор, арба-сана һәм ат, аҙыҡ-түлек, йылы әйберҙәр, яугирҙарҙы үҙ ҡулдары менән әҙерләгән төрлө бүләктәр менән өҙлөкһөҙ тәьмин итеп торҙо. Һуғыш башланыу менән бөтә ҡала һәм район үҙәктәрендә, айырым предприятиеларҙа, хатта ауылдарҙа ла митингылар, йыйылыштар үтте. 22 июнь кисендә Өфөлә үткәрелгән митингыла 10 меңдән ашыу кеше ҡатнашыуы билдәле. Стәрлетамаҡ ҡалаһында 23–30 июндә 94 митинг һәм 85 йыйылыш үткәрелгән. “Дошманды үҙ ерендә тар-мар итәбеҙ!” лозунгыһы аҫтында егеттәр һәм йәш ирҙәр фронтҡа ебәреүҙе һорап, хәрби комиссариаттарға, партия ойошмаларына, ауыл Советтарына ғариза тапшыра. 22 – 24 июндә Өфөлә 1270 кеше хәрби комиссариаттарға ошондай үтенес менән мөрәжәғәт итә. Стәрлетамаҡта – 380, Әбйәлил районында – 300-ҙән ашыу, Ҡыйғыла – 150, Шишмәлә – 120, Ишембайҙа 50-нән ашыу кеше һуғышҡа китергә үҙ теләген белдерә. Бынан тыш, Стәрлетамаҡта 23 – 30 июндә – 1770, Әбйәлил районында 685 кеше халыҡ ополчениеһына яҙыла. Ике көндә республика буйынса 3 меңдән ашыу кеше фронтҡа тиҙерәк ебәреүҙе һорап ғариза яҙа[1]. Дөйөм мобилизация буйынса 1942 йылдың 1 ғинуарына ҡәҙәр Башҡортостандың ҡала һәм район хәрби комиссариаттары яу ҡырына 231993 кешене оҙата. Шул иҫәптән Өфөнән – 20393, Стәрлетамаҡтан – 3254, Бәләбәй ҡалаһы һәм районынан – 5616, Бөрө ҡалаһы һәм районынан – 5356, Әлшәй районынан – 5332, Ғафуриҙан – 5247, Өфө районынан – 5549, Туймазынан – 7 мең, Илештән – 4488, Саҡмағоштан – 4449, Мишкәнән – 4 мең, Көйөргәҙенән – 4096 кеше һ.б[2]. Бынан тыш, РКП(б) Өлкә Комитеты – коммунистарҙы, ВЛКСМ Өлкә Комитеты комсомолецтарҙы оҙатыу менән шөғөлләнә. 1941-1942 йылдарҙа республика фронтҡа 23 меңдән ашыу коммунисты, 62 мең комсомолецты оҙата.

Бөрйән районында һуғыш алдынан 10037 кеше йәшәгән. 1941 йылдың июнь – декабрендә 868 кеше яу ҡырына китә. Һуғышҡа тәүгеләрҙән булып китеүселәр араһында атайым Мөхәмәтрәхим, биш бабайым: Ғәлимнас, Тайып, Әбделғәни, Зәйнулла, Кәлимулла һәм өс ағайым: Усман, Мәүлетҡол, Хәбибулла Йәнғәлиндар була. Атайымдың иң кесе ҡустыһы Миңлебайҙы фронтҡа 1942 йылда 18 йәшендә алғандар. Шулай итеп, һуғышта Йәнғәлиндарҙан ун яугир ҡатнашып, алтыһы һәләк була. Әсәйем яғынан алынған Вара, Кәбир, Сәләхетдин ағайҙарҙың береһе лә әйләнеп ҡайтмай. Фронтҡа тәүгеләрҙән булып китеүселәр араһында атайымдың дуҫтары – Ғилман Шәмиғолов, Фәйзрахман Мерәҫов, Батыргәрәй Ҡотлобаев, ике туған ҡустыһы Ғилман Биккинин, Хәйрулла Сәғитов, Ғафур Сәғитов, Ғәлимйән Баймөхәмәтов, Солтан Айытбаев, Хәмзә Сафиуллин, Ырыҫмөхәмәт Ильясов, Халиҡ Ҡарағолов, Ибраһим Мөхәмәтйәров һ.б. бар[3].

Һуғыштың тәүге мәлендә илебеҙ бик ҙур юғалтыуҙар кисерә. 1941 йылдың 10 июленә тиклем Ҡыҙыл Армияның бер миллионға яҡын яугиры һәләк була, ике миллионы әсиргә эләгә. Ғәскәрҙәребеҙ 22 мең пушка һәм миномет, 6 мең танк, 3,5 меңгә яҡын самолет юғалта. Самолеттарҙың ике меңгә яҡыны һауаға күтәрелеп тә өлгөрмәй. Бик күп яғыулыҡ, ҡорал һәм хәрби кейем-һалым, аҙыҡ-түлек менән тулы складтар баҫҡынсылар ҡулына эләгә. Дошмандың ни бары 77313 һалдаты һәм офицеры юҡ ителә.

Бик күп юғалтыуҙар кисергән Ҡыҙыл Армияны тулыландырыу, яңы ойошторолған хәрби частарға кешеләр йәлеп итеү өсөн Дәүләт оборона комитеты (ГКО) 1941 йылдың августа һуғышҡа ебәреү йәшен үҙгәртергә мәжбүр була. 1941 йылдың августына ҡәҙәр 23 – 36 йәштәгеләр генә саҡырылһа, яңы ҡарар буйынса хәрби комиссариаттар хәрби хеҙмәткә яраҡлы 18 – 50 йәштәгеләрҙе ала башлай. Ошо ҡарар нигеҙендә Башҡортостан хәрби комиссариаты 1942 йылдың 1 октябренә ҡәҙәр фронтҡа өҫтәмә рәүештә 178 мең кеше, 63758 ат, 13265 арба, 559 еңел һәм йөк автомобиле, 685 трактор оҙата[4]. ГКО-ның ҡарары буйынса 16 – 50 йәштәге бөтә ир-егет хәрби курстарҙа ниндәй ҙә булһа хәрби һөнәр үҙләштерергә тейеш була. Быының өсөн бөтә ил буйынса хәрби-уҡыу пункттары (хәрби курстар) ойошторола. 1941 йылдың көҙөндә Башҡортостанда 924 ошондай пункт асылып, уларҙа 83 мең кеше төрлө һөнәр үҙләштерә. Республикала шулай уҡ комсомолдар һәм комсомол булмаған 18 – 24 йәштәге егеттәр һәм ҡыҙҙарҙан автоматсылар, снайперҙар, пулеметсылар, минометсылар, элемтәселәр әҙерләү өсөн махсус хәрби курстар эшләй. Атап үткән пункттар һәм курстарҙа 200 мең автоматсы, 39 меңдән ашыу снайпер, пулеметсы, минометсы, элемтәселәр (айырыуса – ҡыҙҙарҙан) әҙерләнә. Яугирҙарҙы Өфө, Белорет, Стәрлетамаҡтағы өс аэроклуб, өс атлылар (Бөрө, Ғафури, Нуриман райондарында), ике уҡсылар клубтары, автомашина йөрөтөүселәр мәктәптәре лә әҙерләй. Ҡыҙыл Тәре йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе фронт һәм госпиталдәр өсөн 4 меңдән ашыу шәфҡәт туташы әҙерләп сығара[5].

Һуғыш башланыу менән республикаға көнбайыш өлкәләрҙән өс хәрби учреждение, 18 хәрби уҡыу йорто күсеп килә. Мәҫәлән, Ҡыҙыл Армияның Генераль штабы һәм Хәрби-Сәйәси академиялары, Рига һәм Гомель ҡалаларынан хәрби пехота, Сорочинскиҙан пулеметсылар, Ленинградтан артиллерия, Севастополдән зенитсылар училищелары һ.б.

Республика етәкселәре һәм Башҡортостан хәрби комиссариаты был учреждениеларға урын табып, кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеп, тиҙ арала офицерҙар әҙерләй башлай. Хәрби учреждениелары һәм хәрби уҡыу йорттары менән бергә республикаға ете хәрби склад та күсенә. Башҡортостанға күсерелгән 100-ҙән ашыу дәүләт учреждениеһы араһында СССР-ҙың Дәүләт контроле, Нефть сәнәғәте, Элемтә, РСФСР-ҙың Сәнәғәт, Социаль тәьминәт министрлыҡтары, Украина Фәндәр академияһы, ете ғилми-тикшеренеү (шул иҫәптән Маркс, Энгельс, Ленин (ИМЭЛ) институты, ете юғары уҡыу йорто: Мәскәү нефть, Рыбинск авиация, 1-се Мәскәү, Витебск һәм Киев медицина, Орел педагогия, Мәскәү китапхана институттары, Украинаның яҙыусылар, композиторҙар һәм рәссамдар йәмғиәттәре бар[6]. Уларҙың барыһына ла урын табырға, аҙыҡ-түлек һәм башҡа кәрәк-яраҡ менән тәьмин итергә кәрәк була. Республика етәкселәре ашығыс рәүештә хәл итеүҙе талап иткән тағы бер мәшәҡәт – Мәскәү, Ленинград, Смоленск, Минск, Житомир һәм Шахта ҡалаларынан, Воронеж һ.б. өлкәләрҙән килгән 43 балалар учреждениеһын урынлаштырыу. Ә был – 24 интернат, 20 балалар баҡсаһы, 15 балалар йорто, дүрт ауырыу балалар йорто, йәғни 4950

бала тигән һүҙ[7]. Был балаларға ла тиҙ арала төрлө ҡала һәм райондарҙа урын табылып, улар кейем-һалым, аҙыҡ-түлек, башҡа кәрәк-яраҡ, тәрбиәселәр менән тәьмин ителә.

Документтарҙан күренеүенсә, һуғыш йылдарында Башҡортостанда 47 госпиталь эшләп, 31-е 1941 йылда ойошторола. 1941 йылдың июнь-июлендә – 7, август – декабрҙә тағы 17 госпиталь асыла. 1941 йылдың июнь – декабрендә яраланған яугирҙары менән бергә Башҡортостанға көнбайыш өлкәләрҙән ете госпиталь күсерелә. Уларҙың ҡайһы берҙәре һуғышҡа ҡәҙәр эшләп килгән Шафран, Йоматау, Янғантау һ.б. санаторийҙары нигеҙендә ойошторола. Ҡалғандары (эвакогоспиталдәр) 1942-1943 йылдарҙа асыла һәм барыһы ла республика етәкселәре, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тырышлығы менән дарыуҙар, башҡа кәрәк-яраҡ, аҙыҡ-түлек, шәфҡәт туташтары һәм табиптар менән урындағы иҫәпкә тәьмин ителә. 27 госпиталь Өфө, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Бәләбәй ҡалаларында, икешәре Шафран, Яңауыл, Аксаков һәм Раевка ҡасабаларында урын таба. Йоматау, Шишмә, Аксен һәм Әлкә станцияларында, Янғантау санаторийында берәр госпиталь урынлаша[8]. Һуғыш йылдарында уларҙа 250 меңдән ашыу яралы һәм ауырыу яугир дауалана. Яралыларҙың – 70, сирлеләрҙең 90 проценттан ашыуы һаулығын нығытып, сафҡа баҫа[9].

Башҡортостанға көнбайыш төбәктәрҙән күсерелгән сәнәғәт предприятиеларына эйәреп килгән эшселәр, техниктар һәм инженерҙарҙы, уларҙың ғаиләләрен урынлаштырыу ҙа республика етәкселегә өҫтөнә төшә. Предприятиеларҙың эшен яйға һалырға, күбеһенең профилен ҡырҡа үҙгәртеп, һуғыш өсөн продукция етештереүҙе көйләргә, ә бының өсөн предприятиеларҙы сеймал, ҡорамалдар менән тәьмин итергә, эшселәрҙе яңы эшкә өйрәтергә кәрәк була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күсенеп килгән предприятиелар иҫәбе беҙҙә төрлөсә йөрөтәлә. Берәүҙәр, 90-дан ашыу, 100-гә яҡын, 100-ҙән ашыу, икенселәр, 150, 170, 172 сәнәғәт предприятиеһы, айырым цехтар һәм производстволар күсерелгән, тип яҙа. ВКП(б) Өлкә Комитетының 1944 йылдың 6 декабрендә Үҙәк Комитетҡа ебәргән отчетында асыҡ итеп, "һуғыш йылдарында Башҡортостанда ҡурҡыныс янаған райондарҙан 86 сәнәғәт предприятиеһы урынлаштырылды", тип яҙылған[10]. Ул ваҡыттарҙа ВКП(б) Үҙәк Комитетына ысынбарлыҡҡа тап килмәгән мәғлүмәт тапшырған кешене күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Ҡайһы бер тарихи хеҙмәттәрҙә, көнбайыштан күсерелгән предприятиелар Өфө, Стәрлетамаҡ, Белорет ҡалаһында ғына урынлашҡан, тип яҙылған. Ғәмәлдә иһә 43 предприятие – Өфөлә, унауһы – Стәрлетамаҡта, дүрте – Белоретта, өсәүһе – Благовещенск ҡалаларында, өсәүһе – Ҡарлыман станцияһында, икешәре – Бөрө һәм Бәләбәй ҡалаларында, ҡалғандары Дәүләкән, Бүздәк, Таутөмән станцияларында һәм Красный Ключ ҡасабаһында урынлаша[11].

Сәнәғәт предприятиелары менән бергә килгән эшселәр, инженерҙар, техниктар, республикаға эвакуацияланған кешеләр тураһында ла тарихи хеҙмәттәрҙә төрлөсә мәғлүмәттәр күрһәтелә. Берәүҙәр, республикаға 247 мең кеше ҡасып килгән, тиһә, икенселәр – 256 мең, өсөнсөләр 278 мең кеше, тип раҫлай. Беҙҙеңсә, "Очерки по истории Башкирской АССР" (Өфө, 1966 й.) тигән хеҙмәттәге "республикаға 247 мең кеше ҡасып килгән", тигән мәғлүмәт ысынбарлыҡҡа тап килә[12]. Бүлектең авторҙары – З. И. Сираев менән И. П. Савельев.

Башҡортостан етәкселәре алдында республиканың бөтә иҡтисади, сәйәси

һәм ижтимағи тормошон фронт ихтыяждарына яраҡлаштырыу, һуғышҡа әҙерлекле, кәрәк-яраҡ һәм аҙыҡ-түлек менән тәьмин ителгән ғәскәри частарҙы оҙатыу, ҡорал, төрлө ярыулыҡ, кейем-һалым, аҙыҡ-түлек һәм башҡа кәрәк-яраҡ менән артабан тәьмин итеүҙә ҡатнашыу бурысы ҡәтғи ҡуйыла. Документтарҙан һәм тарихи әҙәбиәттән күренеүенсә, сәнәғәт предприятиеларының күбеһе фронт ихтыяждарына яраҡлашыу эшен 1942 йылдың июнь-июлендә тамамлай. Мәҫәлән, Одесса ҡалаһынан Стәрлетамаҡҡа күсерелгән станоктар заводы 1942 йылдың апрелендә илдең оборона заводтарына үтә лә кәрәкле тәүге 36 өр-яңы станок эшләп, йыл аҙағына ҡәҙәр ай һайын шундай 170 – 180 станок сығара. 2 мең станок етештереп, 1943 йылда завод эшселәре Ленин орденына лайыҡ була[13]. Ошонда уҡ миналар ҙа эшләгәндәр. Өфө тау ҡорамалдары заводы 1941 йылдың аҙағында уҡ шахталар өсөн еңел вагонеткалар, һыу һәм ҡом һурғыстар, лебедкалар урынына артиллерия снарядтары, миналар етештереүҙе үҙләштерә. Өфө йылға пароходтары төҙөү заводы ла тиҙ арала самолеттар өсөн киң табанлы саңғылар етештерә башлай. Благовещенскиҙағы машиналар эшләү һәм Өфө яҙыу машинкалары заводтары танкыларға ҡаршы гранаталар, ҡул гранаталары һәм миналар эшләүгә күсә[14]. Белореттағы ҡорос тимерсыбыҡ һәм ҡалын сымдар заводы – авиация предприятиелары өсөн юғары сифатлы тимерсыбыҡ, төрлө ҡалынлыҡтағы сым, ә металлургия комбинаты оборона заводтары өсөн юғары сифатлы ҡорос һәм суйын, авиация бомбалары, мина һәм снарядтар, данлыҡлы “катюша”лар өсөн айырым деталдәр сығара. Һуғыш йылдарында комбинатта ҡорос һәм суйын етештереү бер ярым тапҡырға арта. Тирлән металл прокаты заводы оборона предприятиелары өсөн юғары сифатлы ҡорос табаҡтар етештерә. Өфө паровоздар ремонтлау заводы ҡеүәтле локомотивтарҙы йүнәтә башлай, дүрт бронепоезд, авиация бомбалары, миналар һәм төрлө калибрҙағы снарядтар етештерә. Рыбинск, Мәскәү, Ленинград ҡалаларынан килгән өс предприятие һәм Өфө моторҙар заводы нигеҙендә ойошторолған ҡеүәтле Өфө моторҙар заводы һуғыш йылдарында 97 мең авиация двигателе эшләп сығара. Өфө фанера комбинаты авиация заводтары өсөн махсус фанера һәм пушкаларға киң табанлы саңғылар етештерә[15].

Бөйөк Еңеүҙе яҡынайтыуҙа Башҡортостан геологтары, нефтселәре һәм нефть эшкәртеүселәренең өлөшө айырыуса ҙур. Нефтселәребеҙ 5 миллион тоннанан ашыу нефть сығара. Быға 1943 йылдың сентябрендә Кинйәбулат (Ишембай районы – **Ә. Й.**), Туймазы девон нефть ятҡылыҡтарын асыу булышлыҡ итә. Һуғыш йылдарында республикала бөтәһе һигеҙ яңы ятҡылыҡ асылып, нефть бирә башлай. Өфө нефть эшкәртеү заводында сеймал эшкәртеү бер ярым тапҡырға артып, меңәрләгән тонна юғары сифатлы авиация бензины, мазут, кәрәсин, мотор майы етештерелә. Яу ҡырындағы һәр өсөнсө самолет һәм танк, йөк машинаһы беҙҙә сығарылған яғыулыҡта эшләй.

Көнбайыш өлкәләрҙән күсерелгән заводтар нигеҙендә бер нисә яңы сәнәғәт тармағы, шул иҫәптән химия сәнәғәте, барлыҡҡа килә. 1941–1945 йылдарҙа тәбиғи каучук, махсус спирт һәм сода заводтары төҙөлөп, еңеү өсөн продукция етештерә.

Республиканың еңел сәнәғәте предприятиелары: Өфөләге тегеү һәм аяҡ кейемдәре, Дәүләкән һәм Стәрлетамаҡ аяҡ кейемдәре, Стәрлетамаҡ, Өфө, Бөрө кейем фабрикалары, Өфө күн заводы эшселәре яугирҙар өсөн өҫ һәм аяҡ кейемдәре тегә. Башҡортостан хөкүмәте ҡарамағындағы сәнәғәт предприятиелары граната, мина, шул иҫәптән танкыларға ҡаршы ауыр һәм ҡеүәтле миналар,

арба, сана, саңғы, быйма, поход кухнялары, котелоктар, тимер йәки алюмин һауыттар һәм алюмин көрөшкәләр етештерә[16].

Республика аҙыҡ-түлек сәнәғәтенә ҡараған 16 он тартыу һәм ит комбинаты, май, дүрт спирт һәм араҡы, һыра заводтары, консерва комбинаттары, 1943 йылда сафҡа ингән Ҡарлыман шәкәр заводы һ.б. предприятиелар аҙыҡ-түлекте фронт, госпиталдәр, балалар йорттары һәм баҡсалары өсөн генә етештергән, тип әйтһәк тә, хата булмаҫ.

Һуғыш алдынан колхозға ингән һәм "кулактарҙан азат ителгән» ауылдар ҙур ауырлыҡтар кисерә. 1940 йылға ҡәҙәр шәхси хужалыҡтарҙың 99,6 проценты, сәсеүлектәр иһә тотошлайы менән коллективлаштырыла. 3982 колхоз 436 мең шәхси хужалыҡты берләштереп, республикала 1836 миллион колхозсы иҫәпләнә. Колхозға инергә теләмәгән хужалыҡтар 10,5 мең самаһы була. Уларҙың яртыһының һыйыры, күбеһенең аты булмай. 1940 йылда Башҡортостанда 57 совхоз иҫәпләнә. 1930–1934 йылдарҙа 25,5 мең шәхси хужалыҡ, шул иҫәптән 1931 йылда 6042 ғаилә, йәғни 32279 кеше[17] "кулак"ка сығарылып, Себергә, Төньяҡҡа ҡыуыла. Улар араһында 14957 бала ла була. Шул арҡала республика иң тырыш, иң егәрле, ерҙе, ер эшен яратҡан, уға тоғро кешеләрен юғалта. Был юғалтыуҙа, партия органдары менән бер рәттән, ауылда йәшәгән батрактарҙың, ялҡау, көнсөл ярлы-ябағаның да ғәйебе ҙур. Ярлы-ябаға йыйылыштары ҡарары буйынса тырышып эшләгән һәм һәйбәт йәшәгән кешеләрҙең өйҙәрен, һарайҙарын, тирмәндәрен, төрлө хужалыҡ ҡорамалдарын, малдарын, аҙыҡ-түлеген, хатта кейем-һалымын тартып алғандар. Был мөлкәттең күбеһен ярлы-ябаға үҙенә алған йәки арзанға һатып ебәргән. Ошо кешеләр колхозсы булып китә лә инде.

Һөҙөмтәлә ауыл хужалығы бер урында тапана башлай. 1931–1940 йылдарҙа бер гектарҙан уртаса 7 центнер иген йыйып алына. 1940 йылда, мәҫәлән, колхоз һәм совхоздар 180 млн. бот иген урып ала. Шул уҡ ваҡытта түбән хаҡ менән дәүләткә иген тапшырыу планы артҡандан-арта бара. 1926–1929 йылдарҙа дәүләткә игендең 18 проценты һатылһа, 1940 йылда иһә дәүләт яртыһын бушлай тиерлек тартып ала. Игенде, ғөмүмән, ауыл хужалығы продукцияһын дәүләткә күпләп тапшырыу 1933-1934 йылдарҙағы аслыҡҡа килтерә. Ул айырыуса башҡорттар күпләп йәшәгән Бөрйән, Балаҡатай, Мәсетле, Ейәнсура, Хәйбулла һәм башҡа райондарҙа көслө була. 1933 йылдың 2 мартында ВКП(б)-ның Бөрйән район комитетының беренсе сәркәтибе Яппар Ибәтуллин менән район Советы башҡарма комитеты рәйесе Солтангәрәй Юлсурин Өлкә Комитет сәркәтибе Ә. Әсхәтуллин менән Халыҡ Комиссариаты Советы рәйесе З. Булашевҡа ҙур хат менән мөрәжәғәт итә[18]. Унда Бөрйән районында ҡаты аслыҡ башланыуы, халыҡтың 85 процентының асығыуы тураһында әйтелә. Астан үлеүселәр ҙә күп була. Шул йылда колхоз-совхоздар дәүләткә 43 миллион бот иген тапшырыуға ҡарамаҫтан, аслыҡтан интеккән райондарға бер нindәй ҙә ярҙам күрһәтелмәй.

Коллективлаштырыу айырыуса малсылыҡҡа ҙур зыян килтерә. 1929–1933 йылдарҙа йылҡы малы ике мәртәбәгә кәмеп, 1940 йылда 461 мең башҡа ҡала. Һыйыр малы – 42, һарыҡ-кәзә 70 процентҡа кәмей[19]. Колхозсылар һәм совхоз эшселәренең матди хәлен һалымдарҙың өҙлөкһөҙ артып тороуы ла насарайта. 1931–1940 йылдарҙа бер хужалыҡҡа ауыл хужалығы һалымы 4 һумдан 81 һумға, йәғни 20 тапҡырға арта. Колхозға инмәгән хужалыҡтар иһә һалымды 120 һум түләргә мәжбүр була. Бынан тыш, колхозсылар йыл һайын артып торған натуралата һалым да түләп, дәүләткә үҙ хужалығынан ит, һөт, йөн, тире тапшырырға мәжбүр ителә.

Һуғыш колхоз һәм совхоздарҙың хәлен тағы ауырлаштыра. 1941–1945 йылдарҙа фронтҡа алынған, төрлө сирҙән һәм аслыҡтан үлеүселәр иҫәбенә колхозсылар 1,836 миллиондан 1,577 миллионға тиклем ҡала. 1941 йылдың яҙында баҫыуҙарҙа 8128 трактор эшләһә, 1946 йыл башында улар 6662 ҡала. Тракторҙарҙың күбеһенә етди ремонт талап ителә. Йөк машиналары иһә 4505-тән 861-гә ҡала[20].

1945 йыл аҙағында хужалыҡтарҙа йылҡы малы 119 меңгә тороп ҡала. Тимәк, һуғыш йылдарында йылҡы малы республикала сама менән 342 меңгә кәмей, сөнки 1941 йылдың июнь – декабрендә генә фронтҡа 50 меңдән ашыу менге ат оҙатыла. 1941 йыл аҙағы – 1942 йыл баштарында ойошторолған 112-се һәм 113-сө атлы дивизияларға ла 13355 менге ат бирелә. Күпмелер менге ат Өфөләге 2-се запас атлы бригадаға һәм Туймазылағы 9-сы һәм 15-се запас полктарға тапшырыла. Тарихсы Т. Х. Әхмәҙиевтың иҫәбе буйынса, фронтҡа 71500 менге һәм йөк аты оҙатыла. Икенсе бер ышаныслы сығанаҡта, Башҡортостандан фронтҡа 139 мең меңге һәм йөк аты оҙатылған, тип әйтелә[21].

Колхоз һәм совхоздарҙың һөрөнтө ерҙәре лә кәмей, уларҙы эшкәртеү һәр ваҡыт йүнәтеүгә мохтаж тракторҙарға, ҡаты эштән хәлһеҙләнгән аттар һәм үгеҙҙәргә, ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро һәм үҫмерҙәр елкәһенә төшә. 1942 йылдың башында иһә ер эшкәртеүгә һауын һыйырҙар һәм башмаҡтарҙы ла йәлеп итергә мәжбүр булғандар[22]. Ҡайһы бер колхоздарҙа һабан һәм тырмаларға ҡатын-ҡыҙҙар, үҫмерҙәр үҙҙәре егелеп эшләй. 1943 йылдың йәйендә Волга буйын, Көньяҡ Уралды, Көнбайыш Ҡаҙағстан һәм Себерҙе солғап алған ҡоролоҡ Башҡортостанды ла урап үтмәй. Көтөүлек һәм сабынлыҡтарҙа үлән көйөп бөтә, көҙөн йыйылған иген 1942 йылға ҡарағанда 1477 центнерға кәмерәк була. Малтыуар өсөн бесәнде лә етерлек әҙерләй алмайҙар. Шул арҡала ҡышлау осоронда мал-тыуар, айырыуса эштән йонсоған аттар, күпләп астан ҡырыла. Атап үткән сәбәптәр республикала сәсеүлектәрҙең ҡырҡа кәмеүенә килтерә. 1940 йылда иген сәсеүлектәре 2,997 миллион гектар биләһә, 1945 йылдың яҙында 1,861 миллионға ҡала. Һуғып алынған иген дә 2250 тоннанан 975 тоннаға ҡәҙәр кәмей. 1943 йылда гектар уңышы 3-4, 1944 йылда 4 центнерҙан артмай[23]. Совет хөкүмәте һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1942 йылдың 12 апрелендәге ҡарары буйынса техникаһыҙ, атһыҙ һәм ирҙәрһеҙ ҡалған ауыл йылына 120 көн ялһыҙ эшләргә тейеш була. 12 – 16 йәшлек үҫмерҙәр өсөн был норма 50 көн тәшкил итә. Башҡортостанда үҫмерҙәргә 80 көн эшләү бурысы ҡуйыла. Эшкә яраҡлы колхозсы һәм үҫмер күрһәткән норманы бер ниндәй сәбәпһеҙ тултырмаһа, ул мәхкәмә ҡарары менән колхозда алты ай буйы бушҡа эшләргә мәжбүр ителә. Бына ошондай шарттарҙа аслы-туҡлы, ял һәм йоҡо күрмәй эшләгән колхозсылар, нығынып етмәгән малай-үҫмерҙәр, ҡарт-ҡоро, совхоз һәм МТС эшсәндәре, сәнәғәт һәм төҙөлөш предприятиеларының йәшелсә һәм емеш хужалыҡтары 1941–1944 йылдарҙа дәүләткә 2,7 миллион тонна иген, 383 мең тонна картуф, 54,5 мең тонна йәшелсә тапшыра. Был ошо йылдарҙа йыйып алынған барлыҡ уңыш тигәнде аңлата, сөнки иген, ит, һөт, башҡа продукттарҙы күпләп етештергән Украина, Дон, Кубань, Белоруссия дошман ҡулында була.

Һуғыш йылдарында мал-тыуарҙың, ғөмүмән, кәмеүе күҙәтелә. Һыйыр малы, мәҫәлән, 925 мең баштан 826 меңгә, шул иҫәптән һауын һыйырҙар 473 меңдән 424 меңгә, сусҡалар 210 меңдән 94 меңгә, кәзә һәм һарыҡтар 2,239 миллиондан 1,327 миллионғаса аҙая[24]. Быға 1943 йылғы ҡоролоҡ та йоғонто яһай. Шуға ҡарамаҫтан, колхоз һәм совхоздар сәнәғәт һәм төҙөлөш предприятиеларына,

дәүләткә 980,7 мең центнер ит, 3,231 миллион гектолитр һөт, бик күп һыйыр һәм сусҡа майы, бал һ. б. аҙыҡ-түлек тапшыра[25].

Фронтҡа алынған кешеләр иҫәбе буйынса ла тарихсылар бер фекерҙә түгел. Профессор Р. С. Әйүпов 1994 йылда донъя күргән китабында, яуға республиканан 556,6 мең кеше киткән, тип яҙа. Тарихсы Т. Х. Әхмәҙиев иһә был иҫәпте 559671 кешегә еткерә. "Подвиги их – бессмертны" тип аталған белешмәлә, һуғышҡа 795 меңгә яҡын кеше киткән, тип яҙылған. "Герои народного подвига" тип аталған йыйынтыҡта (Өфө, 1978 й., 12-се бит), һуғыш йылдарында республиканан фронтҡа 705 мең кеше киткән, тип әйтелә. Башҡа хеҙмәттәрҙә 500 мең һәм 715 мең кеүек мәғлүмәттәр ҙә бар. Уларҙың береһе лә ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Башҡортостан Статистика идаралығы иҫәбе буйынса, һуғыш алдынан беҙҙә 3,233 миллион кеше йәшәгән[26]. 20 – 54 йәшлектәр, йәғни һуғышҡа алыныу йәшендәгеләр, 1,261 миллион иҫәпләнгән. Әгәр ҙә уларҙың яртыһы ир затынан булһа, һуғышҡа 631 мең кешене алырға мөмкин булған, тип фараз итәйек. Ләкин арала сирлеләр, ғәриптәр, ҡыҫҡа буйлы кешеләр һ.б. кеүек һуғышҡа ярамағандар ҙа булған. Һуғышҡа яраҡлыларҙың күпмелер өлөшө завод-фабрикаларҙа, төҙөлөштә, колхоз-совхоздарҙа эшләгән, 54-55 йәштәге ирҙәр олоғая, армияға алыныу йәшенән сыға барған. Әгәр ҙә 631 мең кешенең барыһын да һуғышҡа алһалар, тылда кем эшләр ине? Тимәк, һуғыш йылдарында фронтҡа 705 – 795 мең кешене бер нисек тә саҡырып булмаған. Тағы ла бер дәлил. Статистика буйынса, 1943 йылда Башҡортостанда ауыл хужалығында 16 – 50 йәштәге 183 мең ир-егет һәм 463206 ҡатын-ҡыҙ, йәғни 666440 кеше эшләгән. Шуларҙың 100 меңгә яҡыны ғәрип, йәғни эшкә яраҡһыҙ булған. Әлбиттә, колхозда 12 – 15 йәшлек үҫмерҙәр һәм ҡарт-ҡоро ла эшләгән, ләкин ауыл хужалығы эштәрен тейешле кимәлдә башҡарыу өсөн 1943 йылда кәмендә 952 мең кеше кәрәк булған. Ҡала һәм ҡасабаларҙа ла эшкә яраҡлы кеше етешмәгән[27]. Күренеүенсә, һуғышҡа кешеләр алыу мөмкинлеге 1943 йылда уҡ ҡырҡа сикләнгән.

Рәсми һәм башҡа документтарға күҙ һалайыҡ. ВКП(б) Өлкә Комитеты тарафынан бирелгән отчетта 1941 йылдан 1944 йылдың 1 июленә ҡәҙәр республиканан фронтҡа 559671 кеше, шул иҫәптән 2971 ҡатын-ҡыҙ ебәрелде, тип әйтелә. Һуғышҡа 72462 менге һәм йөк аты, 5128 еңел һәм йөк автомашинаһы, 743 трактор һәм 13265 арба ла оҙатыла[28]. БАССР-ҙың хәрби комиссары И.М. Агапитовтың ВКП(б) Өлкә Комитетына биргән мәғлүмәте буйынса, 1941 йылдан 1944 йылдың 1 июненә ҡәҙәр Ҡыҙыл Армияға 56941 кеше алына. Ошо иҫәпкә 1922–1926 йылғы егеттәр, оборона заводтарына эшкә ебәрелгән 18370 кеше лә керә. Оборона предприятиеларында эшләгәндәрҙе иҫәпкә алмаһаҡ, профессор М.А. Бикмеевтың иҫәбе буйынса, һуғышҡа бөтәһе 547700 кеше оҙатыла. 1944 йыл аҙағына ҡәҙәр республиканан һуғышҡа 13130 кеше китә, ә 1945 йылдың 1 ғинуарынан майына ҡәҙәр тағы 14189 кеше алына. Шулай итеп, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында мобилизация буйынса һуғышҡа 575019 кеше китә, 50 – 55 йәштән оло 18370 кеше оборона заводтарына эшкә ебәрелә[29]. Тимәк, һуғышҡа һәм оборона заводтарына алынған кешеләр халыҡтың 18,3 процентын тәшкил итә. 1939 йылдың сентябренән 1941 йылдың йәйенә ҡәҙәр мобилизация буйынса 125 мең кеше алыныуын иҫәпкә алһаҡ, 1939 йылдың сентябренән һуғыш аҙағына ҡәҙәр Ҡыҙыл Армия сафына 700 мең кеше саҡырылыуын күрәбеҙ. Был мәғлүмәт бынан биш йыл элек минең БР хәрби комиссариатының мәғлүмәт бүлегенән алған иҫәпкә тура килә. Бүлектә һаҡланған документта, Бөйөк Ватан

һуғышы йылдарында республиканан һуғышҡа 701866 кеше алынған, тип яҙылған. Был һан шик тыуҙырмай.

Һуғышҡа алынғандар БАССР-ҙа, Пермь, Свердловск, Силәбе өлкәләрендә ойошторолған ғәскәри частарҙы өҙлөкһөҙ тулыландырып, яҡын-тирәлә урынлашҡан хәрби училищеларға ла ебәрелә. Һуғыш башланыу менән, 1939 йылда Өфөлә ойошторолған һәм бөтә кәрәк-яраҡ менән тулыһынса республика иҫәбенә тәьмин ителгән 186-сы һәм Стәрлетамаҡта ойошторолған 170-се уҡсы дивизиялар фронтҡа китә. 1941 йылдың сентябрендә һуғышҡа Өфөлә һәм Өфө районында ойошторолған 361-се уҡсы дивизия, октябрь-ноябрҙә Дим станцияһында, Благовещенск ҡалаһы һәм районында ойошторолған 74-се һәм 76-сы атлы дивизиялар китә. Һуғыш башланыу менән, Әлкә станцияһында урынлашҡан 17-се запастағы уҡсы бригада 1941 йылдың сентябрь – декабрендә генә фронтҡа тулыһынса хәрби әҙерлек үткән 32 меңдән ашыу яугирҙы оҙата[30].

1942 йылдың апрелендә һуғышҡа тулыһынса республика иҫәбенә ҡорал, иң яҡшы менге аттар, хәрби кәрәк-яраҡ менән тәьмин ителгән 112-се Башҡорт атлы дивизияһы ла оҙатыла. Унда Баймаҡ районынан – 207, Күгәрсендән – 188, Учалынан – 187, Ғафуриҙан – 174, Ишембайҙан 170 ир-егет була. Ғөмүмән, дивизияла башҡорттар 91,7 процент тәшкил итә. Благовещенск һәм Туймазы ҡалаларында ойошторолған 113-сө Башҡорт атлы дивизияһында ла башҡорттар 82 процент була[31]. Әммә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеп еткерелмәү арҡаһында, был дивизия 1942 йылдың 2 мартында тарҡалып, айырым полктары һуғышҡа 1942 йылдың яҙында һәм йәйендә ебәрелә. Ҡалған өлөшө Туймазыла ойошторолоп, шунда уҡ урынлашҡан 9-сы запастағы полкка һәм 112-се Башҡорт атлы дивизияһына бирелә.

Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтергә кәрәк: 112-се һәм 113-сө атлы дивизияларҙы ойоштороу тураһында ГКО тарафынан бер ниндәй ҙә әмер булмай. И. Сталинға һәм Комитеттың башҡа етәкселәренә ярамһаҡланып, был тәҡдимде ВКП(б) Өлкә Комитетының беренсе сәркәтибе И. Аношин менән Халыҡ Комиссариаты Советы рәйесе С. Ваһапов яһай. 1941 йылдың ноябрь башында улар ГКО-ға, имеш, патриот рухлы башҡорт халҡы һуғышҡа үҙенең милли дивизияларын ебәрергә теләй, тип мөрәжәғәт итә.

1941 йылдың 13 ноябрендә Комитет ике башҡорт дивизияһын ойошторорға ризалыҡ бирә[32]. Һәр дивизияла кәмендә өс алай (полк) һәм башҡа ғәскәри төркөмдәр, мәҫәлән, санинструкторҙар, дивизияны аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүсе һәм һуғыш припастары етештереүсе взводтар, башҡа ғәскәри берәмектәр була. 1942 йылдың ғинуарында 112-се дивизияла 3713 яугир теркәлгән. 1942 йылдың мартына дивизия тулыһынса әҙер булып, 11 апрелдә яуға китә һәм 2 майҙа Курск өлкәһенең Турдей станцияһында 8-се атлы корпусҡа ҡушылып, июнь баштарында һуғышҡа инә. Ҡорал менән етерлек тәьмин ителмәгән дивизия шунда уҡ ҙур юғалтыуҙар кисерә. 1942 йылдың 3 ноябрендә үк полковник М. М. Шаймуратов дивизияны кешеләр һәм аттар менән тулыландырыуҙа ярҙам һорап республика етәкселәренә хат яҙа. Шул уҡ йылдың 30 декабрендә Ҡыҙыл Армияның кавалерия частары буйынса инспекторы генерал Обухов Сталинград һуғышында бик күп кешеһен юғалтҡан дивизияны аяҡҡа баҫтырыу өсөн ВКП(б) Өлкә Комитетына тағы бер хат яҙып, 1 мең яугир һәм 1,5 мең ат кәрәклеген белдерә[33]. Ярҙам, әлбиттә, күрһәтелә, һәм был хәл дивизияға Сталинград һуғышында артабан да ҡатнашырға мөмкинлек бирә. Ошо һуғышта яугирҙарының яртыһын, бик күп хәрби техникаһын, аттарын юғалтҡан 112-се

Башҡорт атлы дивизияһы Ворошиловград (хәҙер – Луганск) ҡалаһы яғына 8-се атлы корпус ҡарамағына (командиры – генерал-майор М. Д. Борисов) ебәрелә. Дивизияла сама менән 2,5 мең яугир ғына ҡалып, ул аттар менән – 35, орудие һәм минометтар менән 30 – 40 процентҡа ғына тәьмин ителә. Патрон, граната һ.б. һуғыш кәрәк-яраҡтарына, аҙыҡ-түлеккә лә ҡытлыҡ кисерә[34]. Шуға ҡарамаҫтан, корпус командиры генерал Борисов М. М. Шаймуратовҡа дошман тылына тәрән рейдҡа әҙерләнергә бойороҡ бирә. Шаймуратов дивизияның хәлен аңлатып ҡарай, ләкин Борисов тыңларға ла теләмәй. 1943 йылдың 11 февралендә 112-се атлы дивизия үҙенең һуңғы юлына сыға. Дошман тылына үтеп инеп, ул ике аҙна самаһы ҡаты алыштарҙа була һәм, ҡамауға эләгеп, тар-мар ителә. 20 февралдә дивизиянан 550 яугир ғына ҡала. Патрондарһыҙ һәм гранаталарһыҙ төркөмдө 21 – 23 февралдә тағы яңы алыштар көтә. 23 февралдә дошман ҡамауын йырып сыҡҡан майор Т. Т. Күсимов алайында ни бары 80 кеше ҡала. Уларҙы рейдта ҡатнашмай, штабта көтөп ултырған дивизия командиры урынбаҫары полковник Г. А. Белов ҡаршылай. Ҡамауҙан сыҡҡанда генерал М. М. Шаймуратов, дивизия комиссары Д. Ш. Аритҡолов һ.б. бик күп командирҙар үлеп ҡала[35]. Шулай итеп, пропаганда маҡсатында “башҡорт халҡының ғорурлығы” тип йөрөтөлгән 112-се Башҡорт атлы дивизияһы тар-мар ителә, исеме лә юҡҡа сыға. 1943 йылдың 14 февраленән һуң ул “16-сы гвардия атлы дивизияһы” исемен йөрөтә. Иҫән ҡалған яугирҙарҙы Ворошиловград ҡалаһының бер ситендә урынлаштыралар. Февраль аҙаҡтарында Башҡортостандан 9-сы запастағы атлы полктан бер төркөм яугир килеп ҡушылғас, дивизия 3 марттан 8-енә ҡәҙәр Төньяҡ Донец йылғаһы буйында оборона тота. 9 мартта яугирҙар янына бүләктәр менән Башҡортостандан делегация килеп төшә. Унда Сәғит Агиш, Кирәй Мәргән, Хәбир Ғәлимов, Ғата Сөләймәнов, Зәйтүнә Бикбулатова, Фәйзи Ғәскәров, халыҡ сәсәне Сәйет Исмәғилев һ.б. булып, улар 112-се Башҡорт атлы дивизияһынан нимә ҡалғанын күреп ҡайта. 14 апрелдән дивизия 7-се атлы корпус составында резервта тора, ә 13 майҙан 12 июлгәсә Воронеж өлкәһендә ял иткәс, тарҡатылған 4-се атлы корпус, башҡа атлы частар, 9-сы запастағы атлы полк, Украинанан, Краснодар һәм Ставрополь крайҙарынан, Ҡаҙағстан, Урта Азия республикаларынан алынған һалдаттар менән тулыландырыла. Элекке командирҙарҙан Т. Т. Күсимов, С. Х. Хәбиров, Ә. Йосопов яңы 16-сы гвардия атлы дивизияһында өлкән командирҙар рәтендә була. Дивизия командиры итеп полковник Г. Белов тәғәйенләнә.

Һуғыш барышында, 186-сы, 170-се, 74-се, 76-сы һәм 112-се дивизияларынан тыш, Башҡортостандан фронтҡа башҡа ғәскәри берәмектәр ҙә китә. Мәҫәлән, Өфөлә ойошторолған 214-се уҡсы, Бәләбәйҙә һәм Аксен станцияһында тупланған 1124-се айырым уҡсы бригада. Башта Харьков ҡалаһында ойошторолоп, тәүге алыштарҙа ҙур юғалтыуҙар кисергән һәм 1942 йылдың июнендә бында күсерелгән 300-сө уҡсы дивизия Туймазыла, Ҡандрала яугирҙар, хәрби кәрәк-яраҡ менән тәьмин ителеп, октябрҙә һуғышҡа оҙатыла. Шул уҡ айҙа 1941 йылда Дим станцияһында ойошторолған 361-се уҡсы дивизия ла фронтҡа китә. Красноусольск ҡасабаһында ойошторолған 219-сы уҡсы дивизия 1942 йылдың аҙағында фашистар менән алышҡа ебәрелә.

Башҡортостандан оҙатылған ғәскәри частар араһында Өфөлә ойошторолған 4-се уҡсы бригада, запастағы 2-се атлы бригада, 30-сы һәм 97-се уҡсы полктар, 40-сы минометсылар бригадаһы, Әлкә станцияһында урынлашҡан 27-се һәм 366-сы уҡсы, Иглиндағы 1095-се, Таутөмәндәге 1096-сы, Бүздәктәге 1097-се һәм

1098-се артиллерия, Туймазылағы 15-се запастағы атлы, Бүздәктәге 120-се, 121-се һәм 123-сө минометсылар, Таутөмәндәге 134-се, 144-се һәм 146-сы минометсылар, Салауат Юлаев исемендәге 1292-се танкыларға ҡаршы һәм Аллағыуат ауылындағы элемтә алайҙары ла бар. Шулай итеп, һуғыш алдынан һәм һуғыш барышында 30 ғәскәри часть ошонда ойошторолоп, фронтҡа китә. Республика фронтҡа дүрт – "Полководец Александр Суворов", "Александр Невский", "Салауат Юлаев", "Уфимец" бронепоездарын да бирә[36]. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар тураһында тулы мәғлүмәттәр тарихи хеҙмәттәрҙә, дәреслектәрҙә осрамай. Былар ҙан тыш, Башҡортостан халҡы оборона фондына 355 миллион һум, авиация эскадрильялары һәм танк колонналары ойоштороу өсөн дә аҡса йыйып тапшыра. Мәҫәлән, "Комсомолец Башкирии" авиция эскадрильяһын төҙөүгә йәштәрҙән 20 миллион һумдан ашыу йыйыла, "Башкирский истребитель" авиация эскадрильяһын туплауға халыҡ 132 миллион һум йыйып бирә. Ошоларға өҫтәп, республикала 1,3 млрд. һумлыҡ дәүләт хәрби займы һатыла[37].

Фронтҡа һәм госпиталдәргә республика халҡы 83 мең пар бийма, 21 мең тун, 29 мең йылы куртка һәм йылы салбар, 35 мең ҡолаҡсын бүрек, 300 меңдән ашыу пар йөн ойоҡбаш һәм бейәләй ебәрә. Дәүләткә тапшырыуҙан тыш, Башҡортостан халҡы бүләк итеп 362 вагон аҙыҡ-түлек тә ебәргән. Был 500 тонна ит, 47 тонна һыйыр майы, 108 тонна бал, кәнфит һәм шәкәр, 291 тонна печенье һәм прәник, 486 мең йомортҡа, 360 меңгә яҡын шәхси бүләк тигән һүҙ[38].

Башҡортостандың һуғыш йылдарындағы тарихта эҙ ҡалдырған тағы бер һыҙатын әйтмәй үтеп булмай. Ул – дошмандан азат ителгән өлкәләрҙең халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙа ҡатнашыу. ВКП(б) Үҙәк Комитеты һәм СССР Хөкүмәте кәңәше буйынса, Башҡортостан 1943 йылдың йәйендә Ворошиловград өлкәһен шефлыҡҡа ала ла уның хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙа бик ҙур ярҙам күрһәтә. 1943 йылдың аҙағына ҡәҙәр Ворошиловград өлкәһенә 80 металл эшкәртеү станогы, 57 электр моторы, 91 вагон төрлө сәнәғәт йыһазы, 143 трактор, 150 сәскес, 142 һабан оҙатыла. 1944 йылда Донбасс шахталарын аяҡҡа баҫтырыу өсөн 23,1 мең станок, электр моторы һәм инструмент, 400 кубометр ағас, ике тонна тимерсыбыҡ һәм башҡа кәрәк-яраҡ ебәрелә. Ворошиловград, Харьков, Сталинград, Курск, Смоленск, Воронеж, Ленинград һәм Тверь өлкәләренең ауыл хужалығын тергеҙеү өсөн 1943-1944 йылдарҙа республиканан 146 мең баш мал, шул иҫәптән 8,7 мең ат, оҙатыла[39].

Хеҙмәтсәндәрҙең батырҙарса тырышлығын хөкүмәт үҙенсә баһаларға тырыша. 1942–1945 йылдарҙа республикала ордендар менән – 987, миҙалдар менән 879 кеше бүләкләнә. Һуғыш йылдарында арымай-талмай эшләгәндәре өсөн 1945–1948 йылдарҙа 423229 кешегә "1941–1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында фиҙакәр хеҙмәте өсөн" миҙалы бирелә[40]. Шулар араһында туғандарым: Тайып һәм Ғиззәт Йәнғәлиндар, Гөлниса, Зарифа, Зөлхизә, Фәхерниса инәйҙәр, Йәнифә, Канифа, Зәғифә апайҙар, Ғилман ағайҙар һ.б. бар[41].

Башҡортостандан һуғышҡа киткән ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙҙар ҙа үҙҙәрен һынатмай. 186-сы уҡсы дивизия бер нисә көн Полоцк ҡалаһы эргәһендә дошманды Көнбайыш Двина йылғаһы аша сығармай тора. Һуңынан Мәскәү янында, Сталинградта, Курск дуғаһында, Белоруссия һәм Балтик буйы республикаларын азат итеүҙә ҡатнаша. Афанасий Карманов, 1941 йылдың 23 июнендә дошмандың өс самолетын бәреп төшөрөп, беренсе булып Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. 1941 йылдың 23 июнендә фронтҡа киткән 170-се уҡсы дивизия 1941-1942 йылдарҙа барған ҡаты һуғыштарҙа Белоруссияны һәм

Польшаны азат итеүҙә ҡатнаша. 361-се уҡсы дивизия – Мәскәү эргәһендәге һуғыштарҙа, Тверь, Псков өлкәләрен, Латвияны, 214-се уҡсы дивизия Сталинград янында, Курск дуғаһында, Украинаны азат итеүҙә, Львов-Сандомир операцияһында, Чехословакияла һәм Германияла барған һуғыштарҙа, Берлинды яулап алыуҙа ҡатнаша. Дивизияның 10 меңдән ашыу яугиры орден һәм миҙалдар менән бүләкләнеп, унауһы Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. 300-сө уҡсы дивизия (1943 йылдың 17 апреленән – 87-се гвардия дивизияһы) Сталинград янында, Ростов өлкәһендәге ҡаты һуғыштарҙа бик күп юғалтыуҙар кисерә. Башҡортостан яугирҙары иҫәбенә тулыланып, көс йыйғас, дивизия Ҡырымды, Донбассты, Литваны азат итеүҙә, Кенигсберг ҡалаһын алыуҙа ҡатнаша. 124-се айырым уҡсы бригада ла Сталинград янында, һуңынан Калинин фронтында һуғыша. Красноусольск ҡасабаһында ойошторолған 219-сы уҡсы дивизия 1943 йылдың февралендә Харьков өлкәһендә үткәрелгән хәрби операцияла, Яңы Оскол һәм Харьков ҡалаларын азат итеүҙә ҡатнаша. Яҡташтарыбыҙ (120-се, 122-се, 146-сы миномётсылар һәм 1097-се артиллерия полктары) Ленинград өсөн һуғыштарҙа була. Курск дуғаһындағы ҡаты һуғыштарҙа беҙҙә ойошторолған 186-сы, 214-се, 219-сы уҡсы дивизиялар ҡатнаша. Башҡортостандың егет һәм ҡыҙҙары төрлө хәрби частарҙа, партизан отрядтарында батырҙарса һуғыша[42]. Ҡаһарманлығы өсөн 200 меңдән ашыу яугир орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә, Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була, Дан ордендарының тулы кавалерына әүерелә.

Ләкин Бөйөк Ватан һуғышына ҡағылған мөһим мәғлүмәттәр, минеңсә, етди тикшереүгә мохтаж, сөнки һәләк булғандар, батырлығы өсөн Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ яугирҙар, Дан орденының тулы кавалерҙары төрлө йылдарҙа нәшер ителгән ғилми йыйынтыҡтарҙа, журнал һәм гәзит биттәрендә, башҡа баҫмаларҙа һаман да төрлөсә сағылдырыла. 1994–2000 йылдарҙа “Китап” нәшриәтендә сыҡҡан 22 томлыҡ “Хәтер” документаль йыйынтығында, мәҫәлән, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандарҙың исемлеге бирелгән. Инеш һүҙҙә тарих фәндәре кандидаты Т.Х. Әхмәҙиев, Башҡортостандан һуғышҡа киткән 277 кеше Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған, шуларҙың 228-е республикала тыуып үҫкән, 35 кеше Дан орденының тулы кавалеры булған, тип яҙа. Ләкин был мәғлүмәттәр ысынбарлыҡҡа тап килмәй.

“Подвиги их – бессмертны” тип аталған икенсе белешмәлә, республиканан фронтҡа 795 мең кеше киткән, 300 меңгә яҡыны әйләнеп ҡайта алмаған, тип әйтелә. Батырлығы өсөн 279 кеше Советтар Союзы Геройы, 37-һе Дан орденының тулы кавалеры исеменә лайыҡ булған, тип өҫтәлгән (Өфө, “Китап”, 2000, 5-се бит). Был һандарҙың да дөрөҫлөгө шик тыуҙыра. Инеш һүҙ – тарих фәндәре кандидаты Ғ. Д. Ирғәлиндыҡы.

Документаль йыйынтыҡтар һәм белешмәләр – төп нөсхә, уларҙың фәнни нигеҙгә ҡоролоуы мотлаҡ. Ошондай ышаныслы сығанаҡтарҙың береһе – энциклопедия. Беҙ ҙә “Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия”ға мөрәжәғәт итәйек. Уның 42-се битендә былай тип яҙылған: “Һуғыш йылдарында фронтҡа республиканан 575 меңдән ашыу кеше оҙатыла. Уларҙың һәр өсөнсөһө һәләк була... Башҡортостанда тыуған һәм хәрби хеҙмәткә алынған 261 кеше батырлыҡ күрһәткәне өсөн Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була, Муса Гәрәевҡа был исем ике тапҡыр бирелә, 36 яугир Дан орденының тулы кавалеры була”. Хәҙер энциклопедияның 208-сы битен асып ҡарайыҡ. “Бөйөк Ватан һуғышы” тип аталған мәҡәләнең аҙағында былай тиелгән: “Башҡортостанда тыуған 261

кешегә Советтар Союзы Геройы исеме бирелде... 35 яугир Дан орденының тулы кавалеры булды". Мәҡәләнең авторы – БДУ профессоры Р.С. Әйүпов. Ошо уҡ автор "Республика Башкортостан в годы Великой Отечественной войны" тип аталған баҫмаһында бөтөнләй икенсе һандар килтерә. "В годы войны наша республика направила в армию, на флот 559,6 тыс. человек. ...Более 200 тысяч солдат, офицеров и генералов из Башкирии были награждены орденами и медалями, а 278 удостоены звания Героя Советского Союза". 200 меңдән ашыу кешенең ордендар һәм миҙалдар менән наградланыуы дөрөҫләнә, ҡалғандары – юҡ.

Энциклопедияның 262-се битендә тарих фәндәре кандидаты Г. Т. Хөсәйенова тарафынан яҙылған мәҡәләлә Башҡортостандан фронтҡа алынған Дан ордененың тулы кавалерҙары исемлегендә 37 кеше атала. Шуларҙың икәүһе – М. А. Малахов менән Г. М. Бродовиков, имеш, Башҡортостанға һуғыштан һуң күсеп килгән. Ғәмәлдә иһә Малахов Ауырғазы районының Болотино ауылында тыуып үҫеп, фронтҡа ла шунан киткән. Һуғыштан һуң беҙгә ике түгел, ә өс кеше күсеп килгән – П. И. Анпилогов, Г.М. Бродовиков, С. С. Туснолобов. Шулай итеп, ошонда тыуып үҫкән йә булмаһа эшләп, һуғышҡа Республика хәрби комиссариаты тарафынан саҡырылған кешеләрҙән 34 кеше Дан ордененың тулы кавалеры булған. 523-524-се биттәрҙә Г. Т. Хөсәйенова һәм И. Ғ. Кәримова Башҡортостандан сыҡҡан Советтар Союзы Геройҙарының исемлеген килтергән. Унда ла хаталар һәм буталсыҡтар байтаҡ. Мәҫәлән, һуғышҡа ҡәҙәр ҙә, унан һуң да тыуған ауылы Шығайҙа балалар уҡытҡан Шаһи Ямалетдиновҡа Советтар Союзы Геройы исеме 1964 йылда бирелгән, тип яҙыла. Ғәмәлдә иһә ул был маҡтаулы исемде 1946 йылдың 15 майында алған. Икенсе миҫал. Советтар Союзы Геройҙары Василий Кузьмин һәм Николай Кузьмин Башҡортостанға һуғыштан һуң күсеп килгән, тип әйтелә. Был да хата. Төрлө белешмәләр буйынса мин Василий Кузьминдың Стәрлетамаҡ ҡалаһында тыуып, шунда уҡыуын, Өфөлә һәм бер йыл самаһы Әзербайжанда эшләгәнен асыҡланым. 1943 йылдың 12 октябрендә В. Кузьмин батырҙарса һәләк булған. Николай Кузьмин иһә Ярославль өлкәһенең Гаврилово ауылында тыуһа ла, һуғышҡа тиклем бер йылдан ашыу Өфө моторҙар заводында эшләп, фронтҡа 1942 йылдың октябрендә Өфөнән киткән. 1957 йылда нәшер ителгән "Советская Башкирия" тарихи очерктар йыйынтығында "За мужество, отвагу и героизм 190 советским воинам из Башкирии присвоено звание Героя Советского Союза" тип хата мәғлүмәт бирелгән. "Славные сыны Башкирии" исемле очерктар йыйынтығында "более 200 сынов Советской Башкирии удостоены этого высокого звания" тип, ә "Башҡортостан тарихы буйынса очерктар"ҙың 2-се томында (452-се бит) "Башҡортостандан фронтҡа киткән яугирҙарҙың 247-һе Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була" тип яҙылған. 1978 йылда сыҡҡан "Халыҡ ҡаһарманлығы" тип аталған йыйынтыҡта "Башҡортостандан фронтҡа 705 меңгә яҡын кеше оҙатылды. Шулар араһынан 250 кеше Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булды, 20 яугир һуғыштан Дан ордененың тулы кавалеры булып ҡайтты" тип, байтаҡҡа кәметеп күрһәтелә.

Ҡайһы бер авторҙарҙың хеҙмәттәрендә бер үк ваҡиға һәм факт тураһында төрлө мәғлүмәттәр килтерелә. Тарихсы Т. Х. Әхмәҙиев һәм профессор Р.С. Әйүпов һуғыштан әйләнеп ҡайтмағандар, Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булғандар, Дан ордененың тулы кавалерҙары буйынса кеше аптыратырлыҡ һандар килтерә. 1972 йылда нәшер ителгән "Трудовые и ратные подвиги

башкирского народа в годы Великой Отечественной войны” тип аталған мәҡәләһендә Т. Х. Әхмәҙиев, батырлыҡ күрһәткән өсөн Башҡортостандан 250 кеше Советтар Союзы Геройы, 20 кеше Дан орденының тулы кавалеры булған, тип яҙа[43]. 1986 йылда баҫылған “Ратные подвиги воинов из Башкирии на фронтах Великой Отечественной войны” тип аталған мәҡәләһендә автор, һуғыш йылдарында ошонда тыуып үҫкән 228 кеше Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған, 35 кеше Дан орденының тулы кавалеры булып киткән, тип раҫлай (ҡара: “Во имя победы”, Өфө, 1986, 24-се бит). Был һандар дөрөҫ түгел. Тарихсының 1995 йылда баҫылған “Вклад Башкирии в Великую Победу” тип аталған мәҡәләһендә иһә һүҙ Башҡортостандан һуғыш йылдарында 277 кешенең Советтар Союзы Геройы исеменә, 35 кешенең Дан орденының тулы кавалеры исеменә лайыҡ булыуы тураһында бара. Был һандар ҙа ысынбарлыҡты сағылдырмай. Алда әйтелеүенсә, 2006 йылда “История Башкортостана: с древнейших времен до наших дней” тип аталған төплө ғилми хеҙмәттең Бөйөк Ватан һуғышына ҡағылған өлөшөн Т.Х. Әхмәҙиев яҙған. Унда, һуғыш йылдарында Башҡортостандан 278 кеше Советтар Союзы Геройы, 35-е Дан орденының тулы кавалеры исеменә лайыҡ булды, тип теркәлгәйне[44]. Уҡыусы был мәғлүмәттәрҙең ҡайһыһына ышанырға тейеш һуң?

Атап үтелгән хеҙмәтендә профессор Р. С. Әйүпов та, Т. Х. Әхмәҙиевтың һуңғы мәғлүмәтен ҡабатлап, хаталана. Юғары уҡыу йорттары студенттары һәм мәктәп уҡыусылары өсөн 1997 йылда Башҡорт дәүләт университетының бер төркөм тарихсылары тарафынан яҙылған “История Башкортостана. 1917–1990-е годы” тип аталған дәреслеккә күҙ һалайыҡ. Бөйөк Ватан һуғышы тураһында һүҙ уның VII бүлегендә бара. Бүлектең авторы – профессор Р.С. Әйүпов. Беренсенән, ул, Т.Х. Әхмәҙиевҡа эйәреп, республикаға көнбайыш өлкәләрҙән 172 сәнәғәт предприятиеһы күсерелгән, тип яҙа. Икенсенән, автор 1943 йылдың ноябренән һуғыш тамамланғанға ҡәҙәр 35 яҡташыбыҙ Дан орденының тулы кавалеры булды, тип әйтә. Был мәғлүмәттәрҙең ысынбарлыҡҡа тура килмәүе иҫбат ителде.

2001 йылда 9-сы синыф уҡыусылары өсөн “История Башкортостана. XX век” тип аталған дәреслек донъя күрҙе. Авторы – Башҡорт дәүләт университеты профессоры М. М. Ҡолшәрипов. “Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Башҡортостандан фронтҡа 710 меңдән ашыу кеше киткән, – тиелә унда. – Уларҙың 300 меңгә яҡыны һуғыш яланынан әйләнеп ҡайтманы. Башҡортостандан 277 кеше Советтар Союзы Геройы, 35 кеше Дан орденының тулы кавалеры исеменә лайыҡ булған”. Был мәғлүмәттәр ҙә ысынбарлыҡты боҙоп күрһәтә. Ҡыҙғаныс, дәреслек БР Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған. Китаптың 2009 йылда донъя күргән II баҫмаһында ла автор ошо уҡ хаталарҙы ҡабатлай. 152-се биттә, Башҡортостанға көнбайыш өлкәләрҙән 172 сәнәғәт предприятиеһы, айырым цехтар һәм производстволар күсереп килтерелә, тип автор тарихи дөрөҫлөккә ҡаршы килә.

Дәреслектең 158-се битендә автор, 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командиры генерал-майор М.М. Шайморатов һәләк булғандан һуң дивизия менән генерал Г.А. Белов етәкселек иткән, тип яҙа. Белов ул ваҡытта полковник булған, генерал дәрәжәһен 1944 йылдың 15 мартында ғына алған[45]. Дәреслектең 158-159-сы биттәрендә М.Ҡолшәрипов, дивизияның 76 яугиры Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған, тип яҙа һәм шуларҙың һигеҙен атап үтә: генерал Г. Белов, полк командиры Т. Күсимов, офицерҙар Р. Дәүләтов, А. Рудой һәм А. Атаев, рядовойҙар Х. Булатов, Н. Яҡупов, Х. Ҡужаҡов. Был һөйләмдә лә

буталсыҡтар етерлек. Беренсенән, атап үтелгәндәрҙең дүртеһенең беҙгә бер ҡағылышы ла юҡ. А. Рудой – Украинанан, А. Атаев – Төркмәнстандан, Н. Яҡупов –Татарстандан. Икенсенән, Йәүҙәт Булатов рәт һалдаты түгел, ә гвардия өлкән сержанты. Николай Яҡупов та ябай һалдат түгел, ә гвардия өлкән лейтенанты. Морат Ҡужаков та гвардия өлкән сержанты булған. Етмәһә, автор уның исемен дә "Х. Ҡужаҡов" тип яҙып ҡуйған. Автор беҙҙә ойошторолоп, һуғышта батырлыҡ күрһәткән һәм ҙур юғалтыуҙар кисергән хәрби частарҙың дүртеһен генә атай: 112-се Башҡорт атлы, 186-сы, 214-се, 361-се уҡсы дивизияларҙы (157-158-се биттәр). VII бүлекте уҡып сыҡҡас, IX синыф уҡыусыһы, Башҡортостандан фронтҡа ни бары дүрт хәрби часть киткән икән, тип уйлай бит инде.

Башҡортостандан сыҡҡан Советтар Союзы Геройҙары һәм Дан орденының тулы кавалерҙарының ҡыҫҡаса биографиялары, ҡайҙа һәм нисек батырлыҡ күрһәтеүе өс белешмәлә: 1965, 1966, 1968, 1979 һәм 1985 йылдарҙа донъя күргән "Славные сыны Башкирии" тип аталған китапта бирелгән. Был китаптар документаль йыйынтыҡ түгел, ә журналистар тарафынан яҙылған очерктар. Уларҙа һүҙ 275 Герой һәм 33 кавалер тураһында бара. Беренсе мәртәбә Геройҙарҙың һәм кавалерҙарҙың исемлеген тарих фәндәре кандидаты Г.Т. Хөсәйенова менән И.Ғ. Кәримова төҙөп, унда 285 Герой һәм 37 кавалерҙың исеме атала. Исемлектәр 1997 йылда нәшер ителгән "Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия"ла 262-се һәм 523-524-се биттәрҙә бирелгән. Алда әйтелеүенсә, исемлек авторҙары атаған 285 кешенән "Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Башҡортостанда тыуған йәки армияға республиканан алынғандар араһынан 261 һалдат һәм офицер был наградаға лайыҡ булған", тип яҙа. Был мәғлүмәтте лә тикшерергә кәрәк.

2000 йылда донъя күргән "Подвиги их – бессмертны" тип аталған белешмә Бөйөк Еңеүҙең 55 йыллығына ҡарата нәшер ителгән. Һүҙ 279 Герой һәм 37 Дан ордены кавалерҙары тураһында бара. Уларҙың ҡыҫҡаса биографиялары, батырлыҡ күрһәтеп Герой, Дан орденының тулы кавалеры булған ваҡыты аталған. Белешмәнең авторҙары – Р. Ә. Вәлишин, Ғ. Д. Ирғәлин, Н. П. Каменев, И. Ғ. Кәримова, Т. П. Лелюх, С. Н. Мырҙаханова. Инеш һүҙҙе Ғ. Д. Ирғәлин яҙған. "За мужество и героизм, проявленные в годы Великой Отечественной войны, более 200 тысяч воинов из Башкирии были награждены орденами и медалями Советского Союза, 279 человек удостоены звания Героя Советского Союза", – тип яҙа ул. Ошо һандарға иғтибар итәйек. Теге йәки был кеше Башҡортостандан сығып Герой булып китеүен белешмәне төҙөүселәр ике принциптан сығып билдәләгән. Беренсенән, ул кешенең ошонда тыуып үҫеүе мотлаҡ. Икенсенән, ул бында тыуып үҫмәһә лә, фронтҡа ошонан алынырға тейеш.

Асыҡланыуынса, исемлеккә кергән кешеләрҙән етеһе Герой исеменә 1937–1940 йылдарҙа уҡ лайыҡ булған. Алексей Никонов, мәҫәлән, 1937 йылда Испаниялағы граждандар, Владимир Артамонов менән Иван Сухов 1939 йылда японд ар менән Халхин-Гол йылғаһы тирәһендә барған һуғыштарҙа батырлыҡ күрһәткәндәре өсөн ошо исемгә лайыҡ булған. Дүрт кеше: Ғәфиәтулла Арыҫланов, Иван Аляев, Сәхипгәрәй Майский, Григорий Пулькин совет-фин һуғышындағы батырлыҡтары өсөн – 1940 йылдың апрелендә, дүрт кеше: Дмитрий Кармишин, Леонид Кувшинов, Лев Маневич һәм Александр Фролов 1956–1965 йылдарҙа Герой исеменә лайыҡ булған. Дмитрий Кармишин – 1956 йылда Венгрияла булған ваҡиғаларҙа ҡатнашып, батырлыҡ күрһәткәне өсөн. Белешмәлә Башҡортостанға һуғыштан һуң килгән 20 Геройҙың исеме лә бар. Мәҫәлән, Семен Авдошкин беҙгә – 1945 йылдың ноябрендә, Фәйзулла

Әһлетдинов – 1946, Алексей Алымов – 1947, Иван Сериков менән Александр Сидоренко – 1952, Николай Обухов – 1953, Василий Нортенко – 1954, Николай Дегтярь менән Иван Ромашкин – 1956 йылда. Тарихи әҙәбиәттә “яҡташыбыҙ” тип йөрөтөлгән Петр Рогалев Өфөгә – 1959, Матвей Пинский Башҡортостандың хәрби комиссары булып 1960 йылда килгән. Ошоларҙы, йәғни 31 кешене, исемлектән төшөрһәк, 248 ҡала. Улар араһынан да 11 кеше бында тыуып үҫмәгән, фронтҡа ла Башҡортостандан алынмаған, ә һуғышҡа ҡәҙәр ошонда күпмелер ваҡыт йәшәп, эшләп киткән. Мәҫәлән, Алексей Поддубный, Петр Днепров, Иван Корнеев, Борис Номинас, Григорий Танцоров, Павел Алексеев, Иван Гришин, Андрей Лобанов, Василий Шабанов һ.б. Ошондайҙар рәтенә Ғаяз Баймырҙин менән Ғәзиз Мырҙағәлимов та инә. Улар Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында тыуып үҫкән һәм фронтҡа шунан киткән. Башҡорт булыуҙарынан тыш, беҙгә бер ниндәй ҡағылыштары юҡ. Шулай итеп, 248 кешенән ошо 11 кешене лә төшөрһәк, 237 ҡала. Беҙҙеңсә, бына ошо мәғлүмәт тарихи дөрөҫлөккә яҡыныраҡ һәм ғилми хеҙмәттәрҙә, гәзит-журнал биттәрендә, музей стендтарында урын алырға хаҡлы.

Һуғыштан әйләнеп ҡайта алмаған кешеләрҙең иҫәбендә лә буталсыҡтар етерлек. Ҡайһы бер ғилми хеҙмәттәрҙә һәм белешмәләрҙә, 249 мең, 300 мең, 315 мең, 322 мең кеше һуғыштан әйләнеп ҡайтманы, тип яҙҙылар. Был һандарҙың береһе лә дөрөҫ түгел. “Хәтер” китаптарында Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һәләк булған 264581 кешенең исеме бар. 2000 йылда сыҡҡан 21-се һәм 22-се китаптарҙа 73386 кеше теркәлгән. Исемлектәр өҫәү, тәүгеһенә 1 – 20-се китаптарға кермәй ҡалған яугирҙарҙың исемдәре ингән. Икенсе исемлеккә Бөйөк Ватан һуғышына ҡәҙәрге хәрби конфликттарҙа, йәғни Ҡытайҙа, Испанияла, Хәсән күле, Халхин-Гол йылғаһы буйында (Монголия) булып үткән, 1956 йылда Венгрияла, 1968 йылда Чехославакияла һәләк булғандарҙың исемдәре теркәлгән. Өсөнсө исемлектә – Афғанстанда ҡорбан булғандар. Ҡайһы бер тарихсылар тәүге 1 – 20 китаптарҙа теркәлгән яугирҙарға 21-22-се китаптарҙағы 73386 кешене ҡуша ла, Бөйөк Ватан һуғышында Башҡортостан 249 мең, 300 мең, 315 мең, 322 мең кешеһен юғалтҡан, тип яҙа. Был – факттарҙы боҙоп күрһәтеү[46].

Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған яугирҙар исемлеген ентекле өйрәнеп, мин уға кергән кешеләрҙең иҫәбен асыҡланым. Райондарҙан тағы 27461, Өфөнән 3589 – барлығы 31050 кеше тыуған яғына әйләнеп ҡайтмаған. Бынан тыш, 22-се китапты әҙерләп бөткәс, хәрби комиссариаттарҙан һуғышта һәләк булған тағы 241 кеше тураһында мәғлүмәт алына. Тимәк, 31050 кешегә ошо 241-ҙе ҡушһаҡ, Бөйөк Ватан һуғышында 31291 кеше һәләк булғанлығы асыҡлана. Ошоно 1 – 20-се китаптарҙа теркәлгән 245811 кешегә ҡушһаҡ, һуғыштан Башҡортостанға 295872 кеше әйләнеп ҡайтмаған. Был мәғлүмәтте ғилми хеҙмәттәрҙә, журнал-гәзит биттәрендә, музей стендтарында файҙаланырға мөмкин.

Бөйөк Еңеү илгә, республикаға ҙур юғалтыуҙар аша килгән. Мәҫәлән, Архангел районынан һуғышҡа 7703 кеше китеп, уларҙың 5353-сө, йәғни 70 проценты әйләнеп ҡайта алмаған. Асҡын районынан 5314, Баймаҡтан – 5511, Ғафуриҙан – 5724, Ейәнсуранан – 3690, Йылайырҙан – 4877, Салауаттан (район) – 3417, Учалынан 6863 кеше үлеп ҡалған. Шул иҫәптән Советтар Союзы Геройы Хәкимйән Әхмәтғәлин 1944 йылдың 19 июлендә Латвияла барған ҡаты һуғыштарҙа һәләк булған. Беҙҙең Бөрйән районынан һуғышта 1051 кеше башын һалған. Йәнғәлиндар араһынан Хәбибулла ағайым Мәскәү янындағы ҡаты

һуғыштарҙа 1941 йылдың көҙөндә хәбәрһеҙ юғалған. Сәләхетдин ағайым өлкән лейтенант булып хеҙмәт иткән, Карелияла һуғышҡан, Чапаев исемендәге партизандар отряды командиры булған һәм 1943 йылдың ноябрендә һәләк булған.

Тикшерелмәгән, тарихи дөрөҫлөккә тап килмәгән мәғлүмәттәр бер ғилми хеҙмәттән икенсеһенә, мәҡәләнән мәҡәләгә, гәзиттән гәзиткә һ.б. күсеүен дауам итә. Профессор Р.С. Әйүпов 2004 йылда “Ватандаш” журналы биттәрендә (№ 5) донъя күргән мәҡәләһендә “Һуғыш йылдарында республикабыҙ 559,6 мең кеше оҙатҡан, 323 мең кеше Башҡортостанға әйләнеп ҡайтманы, 278 кеше Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булды, “посланец Башкортостана А.Г. Лобанов”, “уроженец из нашей республики П.Л. Рогалев” һ.б., тип ялған мәғлүмәттәр яҙа. 1995 йылда мин “Башҡортостан” гәзитен ҡарап, ҡайһы бер һандарҙы яҙып алдым. 5 майҙа сыҡҡан һанда “Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Башҡортостандан 277 яугирға Советтар Союзы Геройы исеме бирелгән”, тип әйтелә. 7 май һанында “278 һалдат һәм офицер батырлыҡ күрһәткәндәре өсөн Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған”, тип яҙылған. 8 май һанында, “Бөйөк Ватан һуғышына Башҡортостандан 700 меңдән ашыу кеше китә. Батырлыҡтары өсөн 278 кеше Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ, 35 кеше Дан орденының тулы кавалеры була” һ.б. Авторҙарын әйтеп тормайым. Бөйөк Еңеүҙең 60 йыллығын ҡаршылағанда ла ошондай хәл күҙәтелде. Тарих кабинеттарында, музей һәм дан бүлмәләрендә, айырым күргәҙмәләрҙә тикшерелгән, тарихи дөрөҫлөккә тап килгән мәғлүмәттәрҙең урын алыуы мотлаҡ. Беҙ, тарихсылар, тарихи дөрөҫлөктө яҡларға, уға тоғро ҡалырға бурыслы. Ваҡыт үткән, Бөйөк Еңеү көнө алыҫлашҡан һайын яугирҙарыбыҙ кәмей. Башҡортостан Хәрби комиссариатынан ошо йылдың 11 ғинуарында алынған мәғлүмәт буйынса, беҙҙә ни бары 11813 ветеран ҡалған. Шул иҫәптән ике генә Советтар Союзы Геройы – Тажетдин Ғиләжетдинов менән Иван Пикунов һәм Дан орденының тулы кавалеры – Вәлиәхмәт Сөләймәнов.

Һанаулы ғына ҡалған ветерандарыбыҙға байрам көндәрендә генә түгел, ә көндәлек тормошта иғтибар-ихтирамыбыҙҙы һүлпәнәйтергә, кәметергә тейеш түгелбеҙ. Был Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың ветерандарға ҡарата үткәргән һәйбәт һәм маҡтауға лайыҡ сәйәсәтенә лә тура килә.

**Әхмәт-Гәрәй ЙӘНҒӘЛИН,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

## ҺЫЛТАНМАЛАР

[1] *“Документы мужества и героизма. 1941–1945. Башкирская АССР в период Великой Отечественной войны”. Уфа, 1980, с. 19 – 21; Башкирия в годы Великой Отечественной войны. 1941–1945”. Документы и материалы под редакцией И.Д. Иргалина и Г.Р. Мухаметдинова. Уфа, “Китап”, 1995, с. 15, 19, 25, 31, 39-40.*

[2] *“Башкирия в годы Великой Отечественной войны. 1941–1945”. Документы и материалы. С. 378-379.*

[3] *ЦГАОО РБ, ф. 122, оп 1, д 285, лл. 146 – 149, 155, 160, 185, 190.*

[4] *“История Башкортостана в XX веке». Уфа, 2007, с. 175.*

[5] *Ахмадиев Т. Х. Вклад трудящихся Башкирии в Победу в Великой Отечественной войне. 1941–1945 г.г”, “Память”. Книга первая. Уфа, 1994, с. 12.*

[6] *Шунда уҡ, 8-9-сы биттәр.*

[7] *“Башкирия в годы Великой Отечественной войны”. С. 312 – 314.*

[8] Шунда уҡ. 497 – 499-сы биттәр.

[9] Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия. Өфө, 1997, 63-сө бит.

[10] "Башкирия в годы Великой Отечественной войны…" Документы и материалы. Уфа, 1995, с. 119.

[11] Шунда уҡ, 489 – 491-се биттәр.

[12] "Очерки по истории Башкирской АССР". т. 2. Уфа, 1966, с. 405.

[13] "Башкирия в годы Великой Отечественной войны". Документы и материалы. Уфа, 1995, с. 43, 58-59, 95-96.

[14] Шунда уҡ, 49, 50, 60, 93-94-сы биттәр.

[15] "Документы мужества и героизма. 1941–1945" Башкирская АССР в период Великой Отечественной войны. Уфа, 1980, с. 53, 58-59; "Башкирия в годы Великой Отечественной войны. Документы и материалы. С. 49-50, 93-94.

[16] "Документы мужества и героизма". С. 58, 76, 77; "Башкирия в годы Великой Отечественной войны. 1941–1945". Документы и материалы. С. 14.

[17] "История Башкортостана с древнейших времен до наших дней". т. 2, Уфа, 2006, с. 230 – 239.

[18] ЦГАОО, ф. 122, оп 1, д. 12, с. 27 – 29.

[19] "Народное хозяйство Башкирской АССР. 1917–1967". Статистический сборник. Уфа, 1967, с. 54, 69, 70; "Очерки по истории Башкирской АССР". т. 2, 1966, с. 119-120.

[20] "Народное хозяйство Башкирской АССР. 1917–1967". Стат. сборник. Уфа, 1957, с. 55.

[21] Т.Х. Ахмадиев. Башкирская АССР в годы Великой Отечественной войны. 1941–1945". Уфа, 1984, с. 32; "Башкирия в годы Великой Отечественной войны. 1941–1945". Сб. документов и материалов. 1995, с. 191.

[22] Башкирия в годы Великой Отечественной войны. С. 135.

[23] Народное хозяйство Башкирской АССР. 1917–1967". с. 23, 55, 66, 69. 24. Шунда уҡ, 23-сө бит.

[25] "История Башкортостана с древнейших времен". т. 2, с. 273.

[26] "Народное хозяйство Башкирской АССР за 70 лет». Стат. сборник, Уфа, 1989, с.6.

[27] "Башкирия в годы Великой Отечественной войны. 1941–1945". С. 157.

[28] Шунда уҡ, 417-418-се биттәр.

[29] М.А. Бикмеев. Башкортостан в годы второй мировой войны. 1939–1945" Уфа–2000, с. 250 – 252, 313-314.

[30] "История Башкортостана с древнейших времен". т. 2, с. 286.

[31] М.А. Бикмеев. Указ соц. с. 105; Т.Х. Ахмадиев. Указ. соч. С. 44.

[32] "Башкирия в годы Великой Отечественной войны. 1941–1945". с. 373 – 377.

[33] Шунда уҡ, 401-402-се биттәр.

[34] Т.Х. Ахмадиев. Башкирская гвардейская кавалерийская. Уфа, 1999, с. 132.

[35] "Солдаты победы". Уфа, 1970, с. 18.

[36] "Башкирия в годы Великой Отечественной войны. 1941–1945".

[37] Шунда уҡ, 487-488-се биттәр.

[38] Шунда уҡ, 487-се бит; "Очерки по истории Башкирской АССР". т. 2, Уфа, 1966, с. 426-427.

[39] "Очерки по истории Башкирской АССР". т. 2. с. 428; Т.Х. Ахмадиев. Башкирская АССР в годы Великой Отечественной войны. 1941– 1945". Уфа, 1984, с. 224.

[40] "Народное хозяйство Башкирской АССР. 1917 – 1967". Стат. сборник Уфа, 1967, с. 17-18; "Герои тыла". т. 1. Уфа, 2009, с. 4.

[41] "Герои тыла". т.5. Уфа 2009, с. 866, 869, 872, 901.

[42] "Очерки по истории Башкирской АССР". т. 2, с. 440 – 448; История Башкортостана с древнейших времен. т. 2, с. 284 – 297.

[43] "Вопросы истории Башкирии. Советский период". Вып. второй. Уфа. 1972, с. 98.

[44] "История Башкортостана с древнейших времен…" т. 2. Уфа, 2006. с. 229.

[45] Т.Х. Ахмадиев. Башкирская гвардейская кавалерийская. Уфа, "Китап", 1999, с. 224-225.

[46] Ҡара: М.А. Бикмеев. Башкортостан в годы Второй мировой войны. 1939 –1945. Уфа, 2000, с. 348; "Башкирская энциклопедия", т.2. Уфа, 2006, с.35; М. М. Кульшарипов. История Башкортостана. XX век". Уфа, 2009, с. 157.

# Беҙ Берлинда

1945 йылдың 2 майында беҙҙең совет ғәскәрҙәре фашистар Германияһының баш ҡалаһы Берлинды штурм менән алды. Дүрт йыл барған ауыһыҙ һуғышта барлыҡ совет халҡы ошо көндө күреү өсөн бар көсөн, энергияһын, намыҫын биреп тырышты. Һуғыш ауырлыҡтарын еңеүҙә бигерәк тә һалдат һәм офицерҙар, генерал һәм маршалдарыбыҙҙың өлөшө баһалап бөтөргөһөҙ ҙур ине. Кисә генә тирә-йүндәге барлыҡ ҡала һәм ауылдарҙа төтөн-дары еҫе менән тулы ҡараңғы, томанлы көн булһа, 3-4 майҙарҙа иһә, яҙҙың иң матур, йәмле көндәрендә, беҙ иркен тын алып, шатлығыбыҙ эсебеҙгә һыймай, бер-беребеҙҙе Бөйөк Еңеү менән ҡотлап, тыныс күңел менән йәшәй башланыҡ.

Политруктар һәм офицерҙар бөтә һалдаттарға ла өйҙәренә хат яҙып һалырға ҡушты. Оло йәштәге һалдаттарҙы өйҙәренә ҡайтарыу өсөн әҙерләй башланылар. Тәжрибәле өлкән офицерҙарға йәштәрҙе йыйып, тиҙ арала хәрби комендатуралар ойошторорға, ҡалала тулы хәрби тәртип булдырырға ҡушылды. Был комендатураларҙа тәүлек буйына ҡарауылда тороу, һалдаттар, кесе сержанттарҙан ныҡлы патруль, һаҡ хеҙмәте ойоштороу бурысы ҡуйылды.

21 районға бүленгән Берлин ҡалаһы тәүҙә беҙҙең генә ғәскәрҙәр ҡарамағында ине. Бер нисә ай үткәндән һуң союздаштар менән ҡала райондарын бүлештеләр. Совет ғәскәрҙәре ҡарамағына – туғыҙ, Ҡушма Штаттарға – алты, Бөйөк Британияға – дүрт, Францияға ике район эләкте. Союздаштар ҙа үҙҙәренең хәрби хакимиәте менән үҙ райондарына урынлашты. Был ваҡытта беҙҙең алға айырыуса уяу, һиҙгер хеҙмәт итеү талабы ҡуйылды, сөнки айырым урындарҙа совет ғәскәрҙәренә ҡаршы шпионлыҡ эше алып барыусылар барлыҡҡа килде. Беҙ уларҙы бик тиҙ ҡулға алып, тейешле сараһын күрҙек.

Батша Рәсәйе ваҡытында ҡасып ҡалған һатлыҡ йәндәр ҙә «ҡуҙғалып» ҡараны, әммә беҙҙең «Смерш» органдары («Смерть шпионам» хәрби хеҙмәте. – **Х. Х.**) иһә уларға ҡаршы ҡыйыу, аныҡ эш итте. Беҙ үҙебеҙ Петроградтан ҡасып сыҡҡан бер офицерҙы эләктерҙек. Ул ҡыҙы менән бергә шпионлыҡ эше башлаған булған. Ҡулға алынғас, был офицер төрмә камераһында аҫылынып үлде. Берлинда, Калсхорста, Лихтенберг районында, Үҙәк Берзарин комендатураһы һәм мин хеҙмәт иткән комендатура иң һөҙөмтәле эшләгәндәрҙән булып, бик мөһим һәм яуаплы эштәр башҡарҙы. Беҙ маршал Г. К. Жуковтың резиденцияһы – инженер ҡаласығы менән күрше генә йәшәнек. Генерал Горохов етәкселегендәге комендатура идараһы ла Жуковтың кешеләре менән бергә урынлашҡайны. Беҙ улар янына үҙебеҙҙең комендант, майор Салтыков менән йыш ҡына барып йөрөнөк.

Гороховтың штабына үтеү өсөн майор Максимов етәкселегендә эшләгән комендатуранан яҙма рөхсәт алырға кәрәк ине. Комендатурала бер айлап эшләгәс, майор Салтыков менән мине генерал үҙ янына саҡыртып алды. Ҡораллы ҡарауыл аша үтеп, штаб идаралығына кергәс, майор шартына килтереп рапорт бирҙе. Горохов беҙҙе бик йылы ҡаршыланы, ҡулын биреп күреште лә,

ҡаршыһына ултыртып: «Мин һеҙҙе танышырға саҡырҙым. Комендатурала эштәр нисек? Ниндәй ҡыйынлыҡтар бар? Берәй төрлө ярҙам кәрәкмәйме?» – тип һүҙ башланы.

Майор Салтыков: «Комендатурала хеҙмәт уставта ҡушылғанса, һеҙҙең бойороҡ-күрһәтмәләрҙе үтәү йүнәлешендә бара. Офицерҙар һәм һалдаттар бик тырышып хеҙмәт итә», – тип яуапланы.

Генерал иһә: «Очень хорошо, молодцы! Мин үҙем дә һеҙҙең янға барып сығырмын әле», – тип ҡуйҙы.

Шулай ҙа: «Потсдам килешеүе буйынса, төрлө суднолар, катерҙар һ.б. техниканы Советтар Союзына оҙатыу өсөн килгән хәрби диңгеҙселәр төркөмө тәртип боҙа, киоскыларҙы талай, тегендә-бында тауыш күтәреп, һуғыш ойоштора, патрулдәргә буйһонмай», – тигәс, Горохов:

– Ярай, мин уларҙың үҙҙәрен һеҙҙең патруль менән хеҙмәт итергә ҡушырмын, – тип блокнотына теркәп ҡуйҙы.

– Һеҙ үҙегеҙ ҡайһы яҡтарҙан? Тыуған яғығыҙҙан хат алаһығыҙмы? – тип ҡыҙыҡһынғас, Салтыков: «Мин – Себерҙән, ә лейтенант – Уралдан, Башҡортостандан», – тип яуапланы.

Генерал штабынан сығып, үҙенең ҡабул итеү бүлмәһендә беҙгә уңыштар теләп, ихлас оҙатып ҡалды. Комендатураға ҡайтҡас, патруль төркөмөн сафҡа баҫтырып, күрһәтмәләр бирә генә башлағайным, комендатура алдында теге диңгеҙселәр командаһы күренде. Һаҡсыға уларҙы индерергә ҡуштым. Хәрби сафты алып килгән капитан беҙгә ярҙамға килеүҙәре тураһында белдергәс, үҙен «капитан Мишин» тип таныштырҙы.

Мин диңгеҙселәр төркөмөн үҙебеҙҙең патруль командаһына ҡушып, уларға ла маршруттар күрһәтеп, хәрби бурыс ҡуйып оҙатҡас, капитан менән оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ, дуҫлаштыҡ. Диңгеҙселәрҙең башҡалары ла патруль командаһына әүҙем ярҙамлашып, дуҫлашып китте. Беҙҙең районда күҙгә күренеп ныҡлы тәртип урынлашты. Генерал Гороховҡа ошо ярҙамы өсөн күп рәхмәттәр белдерҙек, уның менән ныҡлы бәйләнеш тоттоҡ. Майор Салтыков эш барышы тураһында генералға аҙна һайын тейешле тәртиптә доклад бирә барҙы.

Төрлө лагерҙарҙан йыйылған ҡатын-ҡыҙ репатрианттар йәшәгән дөйөм ятаҡ та беҙ тәртип һаҡлаған районда урынлашҡайны. Был төркөмгә ҡарата айырым контроль булып, махсус эш алып барылды. Репатрианттар завод-фабрикалар станоктарын, төрлө ҡорамалдарҙы Советтар Союзына оҙатыу менән мәшғүл булды.

Был ваҡытта немецтарҙың да хеҙмәт биржаһы, полициялары эшләй башлап, беҙгә ярҙамлаша ине. Элек Себер яҡтарында йәшәп, аҙаҡ Германияға ҡайтҡан «дед Саша» һ.б. иптәштәр беҙгә ярҙам күрһәтеп торҙо.

Икенсе донъя һуғышына сәйәси нөктә ҡуйған Потсдам конференцияһы барышында беҙгә тимер юлдарҙы, станцияны ныҡлы күҙәтеү аҫтында тоторға ҡушылды. Был хеҙмәтте лә беҙ намыҫ менән, һиҙгер башҡарып сыҡтыҡ, сөнки Советтар Союзы етәксеһе Иосиф Сталин Постдам ҡалаһына тимер юл менән килеп, ҡайтҡанда ла шул юлды һайлаған. Сталин беҙ торған биләмә аша үткәндә станцияла туҡталып, уны оҙатып барыусылар тиҙ генә беҙҙең янға килеп, «юлда Сталинды йыуындырырға кәрәк» тип ҡайын утыны табышыуҙы һораны. Беҙ шунда уҡ бер офицер һәм өс һалдатты фанера комбинатына ебәреп, утын тейәттек. Ил башлығын оҙатып йөрөүселәр, тиҙ генә беҙҙең янға килеп, рәхмәттәр әйтеп, юлға сығырға ашыҡты. Кремль хужаһы урынлашҡан вагон махсус рәүештә йыһазландырылып, яғып йыуыныу өсөн мунса ла әтмәләгәндәр икән.

Сталинды оҙатҡандан һуң, комендanttың рөхсәтен алып, үҙебеҙҙә тәрбиәләнгән үҫмерҙәр Володя менән Коля Федорошиндарҙы эйәртеп, Потсдамды ҡарап ҡайтырға киттем. Беҙ ҡалала конференция үткән ҙур баҡсалы һарайҙы

ҡарап, шунда уҡ төн ҡунып, йөрөп ҡайттыҡ. Ул саҡта һарайҙың башында өс ил: Советтар Союзы, АҠШ һәм Бөйөк Британияның флагтары елберҙәй, баҡсаларында билдәле тәртип менән ултыртылған төрлө ағастар, сәскә түтәлдәре тирә-яҡты йәмләп ултыра. Бында бик күп күлдәр, баҡсалар күреп, Верден ҡалаһына еткәс, кире боролдоҡ.

Потсдамды артта ҡалдырып, Берлинға яҡынлашып килгәндә, Коля Федорошин: «Бына беҙ ҙә Потсдам конференцияһын үткәреп ҡайтып киләбеҙ»,– тип беҙҙе көлдөрөп, төрлө кәмит күрһәтеп ҡайтты. Йәнәһе, еңеүсе илдәр башлыҡтары: Ҡушма Штаттар Президенты Трумэн, Бөйөк Британияның Премьер-министры Черчилль һ.б. Сталинды көтөп ултыра. Сталин килеп кергәс, барыһы ла аяғүрә баҫа, әммә береһе генә урынынан ҡуҙғала алмай интегә. Сталин уҫал ҡарашын уға йүнәлтеп, тамаҡ ҡырғас, теге бәндә – Черчилль, бер аяғы протез булыуға ҡарамаҫтан, һикереп тора.

Быларҙы Коля ҡайҙан белгән һәм ишеткәндер. Беҙҙең арала ла «вундеркинд»тар бар икән, тип шатланып, көлөшөп ҡайттыҡ.

Еңеү байрамы артта ҡалып, июнь айы тыуғас, беҙҙең комендатураға баштанаяҡ хром кейемгә төрөнгән, ҡулына сумаҙан тотҡан кеше килеп инде. Ҡулындағы документтарын күрһәтеп, СССР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы буйынса медицина ҡорамалдары һәм мебель алыу өсөн килгәнлеген белдерҙе. Уға Г. К. Жуков менән осрашыу өсөн беҙҙең ярҙам кәрәк икән. Майор Салтыков маршалға нисек үтергә икәнен өйрәтеп, телефон номерын да бирҙе. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы вәкиле шунда уҡ маршал менән һөйләшеп, беҙгә рәхмәттәр белдереп сығып китте.

Бер аҙнанан был кеше шул уҡ сумаҙанын тотоп, бик күп күстәнәстәр менән тағы ла килде. Үҙенең йомошон еренә еткереп башҡарыуҙа Г. К. Жуковтың ныҡлы ярҙам итеүен, алты платформа медицина ҡорамалдары, мебель тейәлгән вагондарҙың беҙҙең станцияла торғанлығын әйтеп, беҙгә тағы ла рәхмәттәр яуҙырып, хушлашып ҡайтырға сыҡты.

Силәбе ҡалаһында тыуған Советтар Союзы Геройы Водопьянов та адъютанты менән беҙҙең янда бер аҙна булып китте. Улар Г.К. Жуков штабына ла инеп йөрөнө. Мин был ҡунаҡтарҙы кино ҡарарға алып барҙым. Шунда китеп барғанда Водопьяновтың адъютанты, полковник минән:

– Был кем, беләһегеҙме?– тип һорай.

– Бик яҡшы беләм, – тип яуаплайым. – Ул беҙҙең Башҡортостан буйынса Юғары Советҡа депутат булып та һайланды,– тигәс, полковник:

– Эйе, ул – беҙҙең уртаҡ герой, беҙ һеҙҙең менән яҡын яҡташтарбыҙ икән,– тип мине ҡосаҡлап уҡ алды.

Киноны ҡарап бөтөргәс, мин уларҙы үҙемә алып инеп, яҡшы итеп һыйлап сығарҙым. Силәбе ҡунаҡтары шулай командировкалары тамамланғансы беҙҙең янға килеп йөрөнө. Беҙҙең комендатурала Советтар Союзынан, шул иҫәптән Мәскәүҙән, ҡунаҡтар күп булды, ә беҙ уларға ысын күңелдән ярҙам итергә тырыштыҡ.

Бер сиған ғаиләһенә лә ярҙам күрһәткәнебеҙ хәтерҙә ҡалған. Был ғаилә Карлсхорст ҡалаһында һуғышҡа тиклем үк йәшәгән икән. Беҙ Лихтенберг районын яулап алғас, хәрби штаб вәкилдәре, хәрби частар өсөн торор урын, фатирҙар кәрәк булғанлыҡтан, бик күп ғаиләләрҙе ситкә күсерергә тура килеп, шул ваҡытта был сиғандарҙы ла күсергәндәр ҙә, улар хәҙер кире ҡайтырға рөхсәт һорай. Мин ғаилә башлығын Салтыковҡа алып индем. Уның документтарын ҡарағанда, 1927 йылда Башҡорт АССР-ының Дәүләкән районында бирелгән справка ла килеп сыҡты. Унда был кешенең артистар төркөмөндә гитарасы булып эшләүе тураһында яҙылғанын уҡығас, майор:

– Суҡынып киткән! Һин бит Берлинға беҙҙән дә алда килеп еткәнһең! Молодец! – тип ҡуйҙы.

Мин сиғанға: «Һин бит миңә яҡташ булаһың»,– тип ебәргәс, майор: «Былай булғас, рөхсәт бирергә мөмкин», – тип был иргә пропуск тултырып тотторҙо.

Сиған беҙҙең янға 10 йәшлек улы менән килгән булған. Атаһы сыҡҡанда малай арбала ултыра ине. Атай кеше улын күтәреп алды ла:

– Улым, бөгөн беҙҙең байрам, шатлыҡ! – тип гитараһын алып, дәртле бейеү көйөн сиртеп ебәрҙе. – Өйгә ҡайтырға рөхсәт бирҙеләр. Уларға ҙур рәхмәт! Әйҙә, һалдаттарға бейеп күрһәт, – тигәс, сиған малайы төрлө фигуралар яһап бейергә кереште.

Өлкән сиған телевидение экрандарында бер нисә тапҡыр күрһәтелгән «Сиған» кинофильмының төп геройы – Будулайға, йәғни артист Михай Волонтирға бик тә оҡшап тора ине. Мин әле лә балаларға ошо киноны ҡараған һайын: «Ана, беҙ Берлинда күргән Будулайҙы күрһәтәләр», – тип иҫкә алам.

Немец халҡы һәм Европа илдәренән килеп, Берлинда ат саптырыу ярыштарын ҡарарға яратыусыларҙың һорауы буйынса, Г. К. Жуков һуғыш ваҡытында ябылып торған ипподромды асырға рөхсәт биргән. Баш ҡала халҡы, ипподромда эшләгән һәм йәшәгән кешеләр өсөн был ваҡиға үҙе бер оло байрам булды. Был көндө беҙ ҙә ныҡлы әҙерләнеп, үҙәк постарҙа тәртип һаҡланыҡ. Мәскәүҙән, хәрби частарҙан, Ленинградтан һәм башҡа ҡалаларҙан ҡунаҡтар күп кенә килгәйне. Мәскәүҙән Совет Ҡораллы Көстәре тыл идаралығы начальнигы, армия генералы Хрулев ҡатыны менән килеп еткән. СССР Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан һәм башҡа урындарҙан да ҡунаҡтар байтаҡ. Уларҙы урынлаштырыу, һаҡлауҙы ойоштороу беҙҙең комендатураға, атап әйткәндә, майор Салтыковҡа йөкмәтелде.

Үҙенең штаб начальниктары менән Г. К. Жуков ипподромда сәғәт ярым тирәһе генә булып китте. Салтыков уларҙы оҙатып йөрөнө. Ә беҙ инде маршалды нисек тә яҡынданыраҡ күреп ҡалырға тырыштыҡ. Бигерәк тә уның беҙҙең майор менән ҡапҡа төбөндә өс минутлап һөйләшеп тороуы хәтергә уйылып ҡалды. Салтыков маршалды беҙҙең комендатураға инеп сығырға саҡырып ҡараған, ләкин Г. К. Жуков: «Рәхмәт, мин бик ныҡ ашығам. «Хужа» менән, (Сталин. – **Х. Х.**) Мәскәү менән һөйләшергә кәрәк», – тип ҡуҙғалып та киткән. Майор бик борсолоп, беҙҙең менән бергә ҡайтты. Г. К. Жуковты барлыҡ офицерҙар, сержанттар, һалдаттар ҙа яратты. Немецтар ҙа: «Руссич дит! Жуков ауст дит!» – тип ҡысҡыра торған булды.

Беҙгә лә Еңеү маршалы Г. К. Жуковты ныҡлап күреү бәхете тейҙе. БыҒаса мин уны Берлинға СССР Хөкүмәтенең сауҙа министры Анастас Микоян килгәндә һәм СССР Юғары Советына һайлауҙар булғанда, офицерҙар клубына үтеп барышлай ғына, күргәйнем. Бына бит яҙмыш нисек?! Маршалды үҙ итеп, ныҡлап күреп, оҙатып ҡалыуыбыҙ беҙҙең өсөн һуңғыһы булған икән. 1946 йылдың апрелендә Г. К. Жуковты Рәсәйгә ҡайтарҙылар ҙа урынына армия генералы Соколовский килде. Штаб генералдары иһә алмашынманы. Беҙгә лә күптәребеҙҙе тиҙҙән тыуған яҡтарға ҡайтара башлаясаҡтарын аңлаттылар.

Бер-ике айҙан һуң Берлин коменданты, беҙ барыбыҙ ҙа тәрән ихтирам иткән Н. Берзарин көтмәгәндә автомобиль бәрелешенә юлығып һәләк булды. Уны беҙ бик ҡайғырып, илашып дауахананан һуңғы юлға оҙаттыҡ. Был юғалтыу барыбыҙ өсөн дә көтөлмәгән ауыр ҡайғы, хәсрәт булды.

...Был көндө Үҙәк комендатурала капитан Глебов менән дежурҙа тора инем. Беҙҙең комендатура «Капитоль» кинотеатрына яҡын ғына, Үҙәк Берлинға тиклем өс кенә туҡталышта урынлашҡайны. «Смерш» та яҡын, йәнәш кенә. Автомобилдәр бәрелешен ентекле тикшергәндән һуң, үлемендә Берзарин үҙе ғәйепле, тинеләр. Комендант юл йөрөү ҡағиҙәләрен боҙған икән. Ҡалғандарҙан бер кем дә ғәйепле түгел: водитель дә, юл сатында торған автомобиль хәрәкәтен

көйләүсе ҡыҙ ҙа. Улар ireккә сығарылды. Үҙәк комендатураны ошонан һуң Шоттур урамына күсерҙеләр. Миңә унда бер тапҡыр булырға тура килгәйне.

Ҡораллы Көстәрҙең тыл идаралығы начальнигы, армия генералы Хрулев Соколовский штабы менән бергә Берлиндағы хәрби частарҙы, комендатураларҙы ҡарап-тикшереп сығырға ҡарар иткән. Шулай тыныс ҡына дежурҙа ултырғанда өлкән сержант Суркан 1-се постан:

– Ике машина менән генералдар килде. Уяу тор. Ҡаршы алырға әҙерлән,– тип хәбәр һалды.

Һикереп тороп рапорт бирергә әҙерләнеүгә, генералдар килеп тә инде. Алдан килгәне – армия генералы Соколовский, ҡалғандары ла мин күреп белгән таныш генералдар икән. Шунлыҡтан рапортты аңлайышлы, теүәл биргәндәй булдым. Соколовский: «Вольно!» – тигәс, мин дә: «Вольно!» – тип тамамланым.

Хрулев: «Иптәш лейтенант, беҙ һеҙҙең нисек хеҙмәт итеүегеҙ, ни рәүешле йәшәүегеҙ менән танышырға килдек»,– тине. Мин шунда уҡ: «Рәхим итегеҙ!» – тип уларҙы ҡабул итеү залына алып сығып, барыһы менән дә таныштырҙым. Майор Салтыков был ваҡытта командировкала булып, үҙенең урынына мине ҡалдырғайны. Мин генералдарҙы һалдаттарҙың казармаларына алып барып, йәшәү шарттарын күрһәтеп, ҡыҫҡаса һөйләп бирҙем. Бүлмәләрҙә яҡты, иҙән йыуылған, карауаттар бөхтә итеп, хәрбиҙәрсә йыйыштырылған. Мин һалдат һәм сержанттарҙың намыҫ менән, ысын патриоттарса хеҙмәт итеүен әйттем.

Шунан һуң төркөм һалдаттар ашханаһына юл тотто. Унда беҙҙе аҡ халат, аҡ ҡалпаҡ кейгән ашнаҡсылар ҡаршыланы. Бар ерҙә – таҙалыҡ, бөхтәлек, тәртип. Тәмле аш еҫтәре килә. Өлкән ашнаҡсы генералдарҙы төшкө ашты тәмләргә саҡырып ҡарағайны ла, ләкин тегеләр рәхмәт кенә белдереп, ҡайтыу яғына боролдо. Ихатала осраған бер взводты туҡтатып: «Ашау-эсеү, тәрбиә етәме?» – тип һорашып та алдылар. Һалдаттар: «Артығы менән етә, беҙҙе комендант, старшина бик яҡшы ҡарай, уларға ҙур рәхмәт», – тип яуапланы. Генералдарҙы оҙатҡас, өҫтән тауҙай йөк төшкәндәй булып, тәрән уйҙарға сумдым. Уларға һоҡланып, ышаныс менән, бындай генералдар, патриот һалдаттар булғанда, һуғыш оҙаҡ йылдар булмаҫ әле, тип ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисерҙем.

Фронтта саҡта ла, комендатурала хеҙмәт иткәндә лә Г. К. Жуковтың беҙҙең хәрби етәксе, ҡурҡыу белмәҫ, намыҫлы, батыр, ҡыйыу маршал булыуы менән ифрат ғорурландыҡ. Уны аллабыҙҙай күреп ихтирам итә һәм ышана инек. Фронтта уның исемен ишетеү менән әллә ниндәй сихри көс, дәрт, энергия, дошманға ҡаты нәфрәт, Тыуған илде яратыу, уны азат итеү өсөн үлергә лә әҙер булыу хистәре солғап ала ине. Маршалдан аҙыраҡ шөрләһәк тә, уның ҡыйыу, зирәк, аҡыллы бойороҡтарын һис һүҙһеҙ үтәргә әҙер булып һуғыштыҡ. Һалдаттарҙы ла, беҙҙең командующий – Еңеү маршалы, тип дәртләндерә инек.

Сит илдәрҙең иң юғары хәрби етәкселәре һәм генералдары беҙ Берлинды яулап алғас, «маршал Жуковты күреп ҡайтаһым килә» тип килә ине.

Советтар Союзы Геройҙары уны, Берлинды, Рейхстаг, Гитлер бункерын күреү өсөн махсус килеп йөрөнө. Экскурсияға килеүселәр ҙә күп булды. Г.К. Жуков менән бергә һуғышып еңеү яулаған генералдар, ҙур дәрәжәле офицерҙар, бик күп дуҫтары ла уның янынан өҙөлмәне. Бына ниндәй юғары хөрмәткә лайыҡ ине беҙҙең Еңеү маршалы Г. К. Жуков.

Беҙ Илларион Рысин менән майор Салтыковтың ярҙамсы офицерҙары булдыҡ. Рысин – Мәскәү егете, спортсы. Ул мине «младший брат» тип йөрөттө. Бик яҡын дуҫлашып, бер-беребеҙгә таянып хеҙмәт иттек. Шунлыҡтан майор ҙа беҙҙе бик яратып, һәр эште ышанып тапшыра торған булды.

Майор Салтыков – ныҡлы сынығыуҙар алған, хәрби батырлыҡтар күрһәткән

кеше. Тыумышы менән Омск яғынан, һаулығы йөҙ-ҡиәфәтенә сыҡҡан «сибиряк». Һәр бойороғон теүәл бирә, уның үтәлешен тикшереп бара торған командир. Үҙебеҙҙең һалдат һәм офицерҙарға ла ул шундай ҡаты талап ҡуя торған булды.

Салтыков та, Рысин да – Бөйөк Ватан һуғышы ордены кавалерҙары. Уларға был награданы Берлин өсөн барған һуғыштарҙан һуң биргәйнеләр. Ә беҙҙе, бер нисә офицерҙы, бүләкләү өсөн штабҡа тейешле материалдар тапшырылыуға ҡарамаҫтан, Берзарин автомобиль бәрелешендә һәләк булғандан һуң, беребеҙ ҙә ул наградаларҙы ала алманыҡ. Күрәһең, материалдар юғалған. Беҙ уларҙы юллап та йөрөмәнек. Гитлерҙың бункерын яулап алыуҙа батырлыҡтар күрһәтеп, Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған полковник Исхаҡ Ғүмәровтың материалдары ла шунда юғалғандыр, тип уйлайым.

Комендант хеҙмәте взводы командиры, лейтенант (ҡыҙғанысҡа ҡаршы, фамилияһы иҫтә ҡалмаған. – **Х. Х.**) Мәскәүҙә тыуып үҫкән. Ул һалдат, сержанттарҙы үҙе һайлап йыйып, патриот рухлы комсомолецтарҙан торған взводты үҙе алып килгәйне. Ул бик тырыш, хәрби уставты теүәл белеп, уларҙы өйрәтә, теүәл үтәлешен дә талап итә ине. Өҫтәүенә, минең Мәскәү янында һуғышҡан комсомолец икәнде белгәс, комсорг итеп билдәләне. Мин взвод командирына һалдат, сержанттарҙы патриотик рухта тәрбиәләүҙә ныҡ ярҙам иттем. Уның менән килешеп эшләнек. Комендатуралағы офицерҙар һәм һалдаттар ҙа илебеҙ, халҡыбыҙ алдында ныҡлы һөйөү тойғоларына бирелеп, алдынғы комсомолецтар булайыҡ, тип хеҙмәт итте. Взводтағы һалдаттарға Николай Островскийҙың «Корос нисек сыныҡты» китабын һәм Бөйөк Ватан һуғышындағы комсомолецтар тураһындағы китап һәм гәзит материалдарын уҡып, таныштырып барҙыҡ. Мин үҙем Үҙәк комендатурала һәм сәйәси бүлектә бик йыш булдым, улар биргән күрһәтмәләрҙе теүәл һәм ваҡытында үтәп барҙым. Сөнки, үрҙә әйтеп үткәнемсә, беҙ Берлиндың иң яуаплы – Г. К. Жуковтың штабы урынлашҡан районда хеҙмәт иттек. Шунлыҡтан беҙҙән икеләтә яуаплылыҡ, хеҙмәттә уяулыҡ, һиҙгерлек талап ителде.

1946 йылдың апрель аҙағына беҙҙе лә өйҙәребеҙгә ҡайтара башланылар. Был юлы инженерҙар һәм уҡытыусыларҙы ҡайтарырға булғандар икән. Беҙҙең комендатуранан тыуған яҡтарға ҡайтыусылар араһына Илларион Рысин – инженер, ә мин уҡытыусы булараҡ эләктек. Икебеҙ ҙә ифрат шатландыҡ, сөнки өйҙә әсәйҙәребеҙ генә ҡалған. Уларға мотлаҡ беҙҙең ярҙам кәрәк бит инде. Беҙҙе штабҡа саҡырып, махсус юл ҡағыҙы тотторҙолар, шунда уҡ аҡсалата иҫәп-хисап та яһанылар. Беҙ бында эш хаҡын икеләтә күләмдә ала инек. Күп кенә «подъемный» ҙа түләнеләр. Өр-яңы хәрби форма, эске кейем һәм шинель техтереү өсөн буҫтау бирҙеләр. Магазиндарға йөрөп, өйҙәгеләргә бүләктәр алдыҡ. Икебеҙгә дүрт сумаҙанды лыҡа тултырып, һыймағанын кейем тоҡсайына һалырға тура килде. Шул уҡ кисте беҙҙе комендатурала ҡалған офицерҙар, сержанттар һәм һалдаттар «дембель» кисәһенә саҡырҙы. Майор Салтыков яҡшы хеҙмәт иткән өсөн маҡтау һүҙҙәре еткерҙе, бик яҡшы һыйланы.

Икенсе кис үҙебеҙҙең ҡарауыл взводы һалдаттарында ҡунаҡ булдыҡ. Улар «дембель» һыйына күптән әҙерләнгән икән. Үҙҙәренең ваннаһында бер йыланбалыҡ (угорь) ашатып, көн дә һыуын алмаштырып ҡарағандар. Тыуған яҡтарына ҡайтыусыларҙы һыйлау өсөн шулай үҙенә күрә бер сюрприз яһарға булғандар. Йыланбалыҡты майор Штеттин ҡалаһынан алып ҡайтҡан. Был балыҡ йәшәүгә харап һәләтле булып, хатта әйберҙәре бушатҡанда ла үлмәй,тере ҡалған. Һалдаттарҙың сюрпризы барыбыҙға ла хуш килде. «Даром рыба – шурпа хороша» тигән кеүек, барыбыҙ ҙа һый хужаларына рәхмәттәр белдереп, һуң ғына таралыштыҡ.

Иртәгәһен ике машина беҙҙе «Силезия» тимер юлы вокзалына килтереп ҡуйҙы. Унда вокзал коменданты, таныш капитан Горле көтөп торған икән. Сығып ҡаршы алды, вагонға урынлаштырҙы. Оҙатып килгән һалдаттар, сержанттар менән ҡосаҡлашып хушлаштыҡ. Эшелон сәғәт-минутында уҡ ҡуҙғалып та китте. Вагондарҙа күбеһе офицерҙар икән. Бер майор:

– Хуш бул! Беҙҙе башҡа саҡырма! Һоро йылан, фашистар ояһы Берлин! – тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Беҙ оҙаҡҡа тынысланып, тәрән уйҙарға сумдыҡ. Ҡапыл, тыныслыҡты боҙоп, Рысин:

– Ничего, младший брат! Мәскәүгә байрамдар үткәнсе ҡайтып өлгөрәбеҙ әле, – тип ҡуйҙы һәм, мине өҫтәлгә саҡырып, стакандарға коньяк ҡойҙо.

– Берәй аҙна беҙҙә ҡунаҡ булырбыҙ. Һиңә Мәскәүҙең матур урындарын күрһәтермен, йәме, – тип ҡулбашымдан һөйөп тә алды.

Польшаның сик буйы ҡалаһын үткәс, теге майор тағы: «Һау бул, Польша!» – тип ҡысҡырҙы. Күп тә барманыҡ, эшелон Брест ҡалаһында туҡтаны. Әлеге майор: «Иптәштәр! Беҙ матушка Рәсәйгә ҡайтып еттек! Ур-ра! Ур-ра-а! Төшөргә була», – тип ҡысҡырып ебәрҙе.

2 майҙа беҙ Мәскәүҙә Рысиндар ғаиләһендә ҡунаҡта ултыра инек, радионан: «Сәғәт өстә стадионда ЦСКА менән Ленинградтың «Зенит» командалары осрашыуы була. Уйынды ҡарарға рәхим итегеҙ», – тиеүгә, беҙ Рысин менән шунда уҡ урыныбыҙҙан тороп, стадионға киттек. Юлда Рысин, телефондан шылтыратып, кем менәндер һөйләшеп тә алды. Күп тә үтмәне, беҙҙе стадион алдында уның директоры Аҡсурин ҡаршы алды, «Берлин ҡунаҡтарына урын бирегеҙ», – тип ул беҙҙе иң яҡшы урынға ултыртып та ҡуйҙы.

Уйын киске алтыла ЦСКА командаһының еңеүе менән тамамланды. Беҙҙе буфетҡа саҡырып, бик яҡшы ҡунаҡ иттеләр. Буфетта Илларион мине дуҫтары менән таныштырып сыҡты. Хөрмәт күрһәткәндәре өсөн рәхмәттәр белдереп, сәғәт 7-лә ҡайтып киттек.

Беҙ ҡайтыуға Рысиндың әсәһе өҫтәл әҙерләп торған. Рысин миңә: «Бына хәҙер әсәйем, эсәһегеҙ, күп эсәһегеҙ,– тип итәк аҫтынан бер «ярты» сығарып ултыртыр әле»,– тигәс, әсәһе, ысынлап та: «Бына – уландар! Һеҙгә минән шул күстәнәс», – тип бер шешә араҡы килтереп тә ҡуйҙы.

– Рәхмәт инде һеҙгә, һуғышсыларға, илебеҙҙе, беҙҙе иң ҙур, ҡурҡыныс бәләләрҙән ҡотҡарҙығыҙ! Һеҙгә ҙур рәхмәт кенә аҙ, барығыҙға ла оҙон ғүмер, бәхет теләйем, һуғыш мәңге булмаһын! – тип әсә кеше беҙҙең икебеҙҙе лә үбеп, һөйөп алды.

Был тулҡынландырғыс һүҙҙәрҙән һуң барыбыҙҙың да күҙҙәребеҙ йәшләнде. Мине иртәгәһен бик күп музейҙар, кинотеатрҙар буйлап йөрөттөләр. Рысиндар ғаиләһе Сокольникиҙа йәшәй ине. Ундағы яңы кинотеатрҙы ла ҡараныҡ. Был бинаны И. В. Сталин һайлау алдынан бүләк иткән икән. Тамаша залында «Каменный цветок» тигән кинофильмды бик яратып ҡараныҡ.

5 – 6 майҙарҙы Берлинда танышҡан летчиктарға барып, ҡунаҡ булып үткәрҙек. Уларҙа мин ҙур ун ике лампалы, телефонлы радиоалғыстар, барыһы ла электр тогы менән эшләй торған башҡа аппараттарҙы күрҙем. Ә ул саҡта беҙҙең төньяҡ-көнсығыш Башҡортостан ауылдарына электр уты үткәрелмәгәйне, шуға күрә бик күп әйберҙәрҙе бүләккә алдым.

Берлин минең хәтеремдә ошолай ҡалған…

**Хәким ХИСАМОВ,**
**һуғыш һәм хеҙмәт ветераны.**

# ЕҢЕҮ ПАРАДЫ

1428 көн  һәм төн дауам иткән Бөйөк Ватан һуғышы фашистик Германияның еңелеүе менән тамамланды. 1945 йылдың 9 майында, 00 сәғәт 43 минутта, Берлин эргәһендәге Карлхорст ҡаласығында, Совет Ҡораллы Көстәре Баш командованиеһы һәм Союздаш экспедицион көстәре юғары етәкселеге (АҠШ, Бөйөк Британия, Франция) вәкилдәре Германияның бер һүҙһеҙ капитуляцияһы тураһындағы актҡа ҡул ҡуйҙы. Был турала Советтар Союзы исеменән эш иткән Маршал Г. К. Жуков тулы итеп яҙып  ҡалдырған (Воспоминания и размышления. М., 1974, 2 том, 302 – 398-се биттәр). СССР Юғары Советы Президиумы 1945 йылдың 8 май Указы менән 9 майҙы «Еңеү көнө»  тип иғлан итте.

Был шатлыҡлы яңылыҡ йәшен тиҙлеге менән бөтә илгә таралды. Ул йылдарҙа ауыл ерҙәрендә радио  эшләмәне. Учалы районы Ильинка  приискыһына был хәбәрҙе телефон аша еткергәндәр. Алтын йыуыусылар, шахталарҙа, бегун фабрикаһында, химия заводында эштәрен ҡалдырып, өйҙәренә йүгерҙе. Госпиталдән ҡайтҡас, алтын йыуыусылар артелендә бухгалтер булып эшләй инем, уларға мин дә ҡушылдым. Эшселәр: «Һуғыш бөткән»,– тип ҡысҡырыша, ҡатын-ҡыҙ илаша. Был хәбәрҙе әсәйем ҡыуанып та, күҙ йәштәре менән дә ҡаршыланы.

– Исмаһам, һине һуғышҡа ебәрмәҫтәр, тик ағайҙарың ғына ҡайта алманы,– тине ул, күҙ  йәштәрен тыя алмайынса.

20 майҙа мин  район хәрби комиссариатында һаулығым буйынса комиссия үтергә тейеш булып, инвалидлыҡты алһалар, армияға  ебәрәсәктәр ине. Бер аҙ тынысланғас, әсәйем һуғышта улдарын, ирҙәрен юғалтҡан яҡындарыбыҙҙы сәйгә саҡырып алырға булды.

Яңғыҙым ҡалғас, тәрән уйға сумдым. Һуғышта үлеп ҡалған ике ағайымдың яҙмышы йөрәгемде  телгеләне.  Әһлетдин ағайым ғаиләһе менән Ильинка приискыһында йәшәне, 1939-1940 йылдарҙа Финляндияға ҡаршы һуғышта яраланып, 1940 йылдың майында госпиталдән ҡайтты. Бер йылдан һуң уны Силәбе өлкәһендәге  Сыбаркүл хәрби лагерына саҡырҙылар. Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт иткән Шәүәли ағайымдың 1941 йылдың көҙөндә ҡайтыуын көттөк. Ләкин шул йылдың майында уларҙың дивизияһын Иваново өлкәһенә күсерҙеләр.

Һуғыш башланғас, ағайымдарҙан «һуғышҡа киттек» тип яҙылған берәр генә хат килде. Әһлетдин ағайымдың ҡатыны Сәлимә еңгә, приискылағы өйөн, атын Учалы руднигындағы өйгә алмаштырып, ике балаһы менән шунда күсеп китте. Рудникта уның атаһы, әсәһе, һеңлеләре йәшәй ине.

Тиҙҙән әсәйем Ғәрифә, Шәрифә апайҙарҙы, Фәтихә әбейҙе, уның килендәре

Латифа, Хөсникамал еңгәләрҙе эйәртеп ҡайтып инде. Германияның еңелеүе, һуғыштың туҡтауы хаҡындағы һөйләгәнемде улар күҙ йәштәре менән тыңланы, шым ғына илашып, үҙҙәренең иң яҡын кешеләрен иҫкә алдылар. Атайымдың ике туған һеңлеһе Ғәрифә апай немецтарҙы ҡәһәрләне:

– Атаһы ла Герман һуғышында һәләк булғайны, улымдың да башын фашист эттәре ашаны,– тине ул, ярһыуын баҫа алмайынса.

– Уның улы, Миңләхмәт ағай, ауылдың иң һылыу һәм көслө егете ине. Яҙҙарын, ауыл уртаһындағы ҡалҡыулыҡ кибеү менән, унда малайҙар көс һынашып, көрәшә. Егеттәр ике ботло герҙе күтәреү, уны йырағырaҡ ырғытыу буйынса ярыша. Миңләхмәт ағайҙың бер кемде лә алдына сығармауын күреп шатланабыҙ. Ике ботло герҙе урыҫ ҡапҡаһы аша ырғытҡан берҙән-бер кеше лә ине ул ауылда. Миңләхмәт ағай приискыла забойщик булып эшләне, һуғыш алдынан ғына күрше ауылдан бик сибәр кәләш алып ҡайтты. Уныһы, йәшләй генә тол ҡалғас, ата-әсәһенә ҡайтып китте.

Һуғышта Шәрифә апайҙың ике улы ла үлеп ҡалды. Оло улы, Рәхмәтулла ағай, хәрби хеҙмәттән сержант булып ҡайтҡайны, арыу ғына сәйәси белем дә алған. Ике йыл алтын йыуыусылар артелендә рәйес булып эшләп, үҙен кешелекле, ғәҙел етәксе итеп күрһәтте. Абҙаҡ ауылынан бик һылыу кәләш алды. Иренең үлеүе тураһында хәбәр килгәс, был еңгәбеҙ ҙә ауылына юлланды. Шәрифә апайҙың кесе улы Фәйзрахман ағай ҙа һуғышта һәләк булды.

Фәтихә әбейҙең дә ике улы һуғыш яланында ятып ҡалған. Олоһо, Мифтахетдин ағай, Ҡыҙыл Армияла хеҙмәт иткәндә, Урта Азияла баҫмасылар менән алышып, унан ҡайтҡас, яңы өй һалып, ғаилә ҡороп йәшәне. Ике улдары бар ине. Мифтахетдин ағай тураһында район гәзите «приискының иң яҡшы забойщигы – стахановсы» тип яҙып та сыҡҡайны. Кесеһе, Мәхмүтдин ағай, фронтҡа райфо мөдире урынбаҫары булып эшләгән еренән алынды. Ҡатыны, Хөсникамал еңгә, ике ҡыҙы менән беҙҙең ауылға, ҡәйнәһе янына күсеп, алтын йыуыусылар артеленә эшкә инде. Тиҙҙән Мәхмүтдин ағайҙың да «Ватан өсөн батырҙарса һуғышып һәләк булыуы» тураһында «ҡара ҡағыҙ»ы килде.

Әсәйем ҡунаҡтарҙы ҡоймаҡ менән һыйларға булды. Уға Латифа менән Хөсникамал еңгәләр ярҙам итеште. Ҡайғыға батҡан яҡындарыбыҙ ҡабаланмай ғына сәй эсте, үҙ-ара һөйләшеп эстәрен бушатты. Күршелә йәшәгән Нәжметдин ағайҙы ла телгә алдылар. «Ҡара ҡағыҙ»ы килгәс, ул дүрт айҙан һуң көтмәгәндә ҡайтып төшкәйне. «Бәлки, беҙҙең уландар ҙа шулай ҡайтырҙар әле»,– тип бер-береһен ышандырырға тырыштылар. Тик уларҙың көткәндәренең береһенә лә тыуған тупраҡҡа аяҡ баҫырға яҙманы.

Алтын йыуыусылар аҙыҡ-түлек менән тапҡан алтынының ауырлығына ҡарап тәьмин ителде. Һәр бер һум алтын аҡсаһына (1 грамм алтын – 1 һум 01 тин боны) ике кило ярым он, 250 грамм ярма йәки макарон, 150 грамм ит йәки колбаса, 100 грамм шәкәр, 50 грамм май, 5 грамм сәй бирелде. Забойсыларҙың эш хаҡы 40 – 60 һум, ер өҫтөндә эшләгәндәрҙең 20 – 40 процентҡа кәмерәк ине. Фронтовик ғаиләләре, пенсионерҙар аҙыҡ-түлек карточкалары менән файҙаланды. Йән башына көнөнә 250 грамм икмәк, айына 1 кило ярма, 1 кило шәкәр бирелде. Был ғаиләләр шулай уҡ айына 100 һум пособие алып, һалымдарҙан, хөкүмәткә ит (56 кг), һөт (220 литр) тапшырыуҙан азат ителде. Һәр ғаилә һыйыр, һарыҡ, кәзә, ҡош-ҡорт аҫраны,

бәрәңге үҫтерҙе. Алтын йыуыусылар ҙа яҡындарына ярҙам итте. Шунлыҡтан, беҙҙең ауылда аслыҡ булманы, тип әйтергә мөмкин.

Һәр урында еңеү шатлығын төрлөсә байрам иттеләр. Ҡала майҙандарында, урамдарҙа, парктарҙа кешеләр йырлашып, бейешеп күңел асты. Беҙҙең ауылда был байрам тыныс ҡына уҙҙы. Бер нисә ғаилә, хәллерәк йәшәгәндәренә йыйылып, ҡыуаныс-ҡайғыларын бүлеште. Байрамдың икенсе көнөндә барыһы ла тынысланып, күтәренке күңел, киләсәккә ниндәйҙер ышаныс менән эшкә сыҡты.

Боронғо замандарҙан дошманды еңеп ҡайтҡан ғәскәрҙәрҙе данлағандар, хәрби парадтар уҙғарылған. Беҙҙең халыҡ та фашистарҙы еңеү хөрмәтенә ҙур тантана буласағына өмөт итте. Еңеү Парады 1945 йылдың 24 июнендә үтте. Хәрби темаларға иң яҡшы китаптар ижад иткән, Советтар Союзы Геройы, беренсе Еңеү Парадында ҡатнашҡан генерал-майор В. В. Карпов был хаҡта бик ентекле яҙып ҡалдырған (Генералиссимус. М., 2003, 2 том, 159 – 194-се биттәр).

Буласаҡ тантана тураһында тәҡдим И. В. Сталиндан сыҡҡан:

– Фашистар Германияһын еңеү хөрмәтенә, бәлки, Мәскәүҙә Еңеү Парады уҙғарырға кәрәктер – тигән ул. – Тантанаға иң ҙур батырлыҡ күрһәткән герой-һалдаттарҙы, сержанттарҙы, старшиналарҙы, офицерҙарҙы, генералдарҙы саҡырырға кәрәк.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар был тәҡдимде хуплап ҡаршы алған.

Парадта ҡатнашыу өсөн һәр фронт (улар – 10) мең кешенән торған йыйылма полк ойошторған. Бынан тыш, Хәрби-Диңгеҙ һәм Хәрби-Һауа флоттары үҙ полктарын әҙерләгән. Тантанала ҡатнашыусыларҙы алдан әҙерләгән яңы формаға кейендергәндәр. Әҙерлек тамамланғас, Сталин фронт башлыҡтарын саҡыртҡан.

– Еңеү Парадын кем ҡабул итергә тейеш?– тип һораған ул.

Барыһы ла: «Еңеү Парадын иптәш Сталин ҡабул итергә тейеш»,– тип яуаплаған.

– Парадты ҡабул итеүсе Ҡыҙыл майҙанға һыбай сығырға тейеш. Атҡа атланып йөрөргә мин ҡартмын инде, – тигән Сталин.

Бөтәһе лә ҡаршы төшкән: «Ниңә атҡа атланырға? АҠШ президенты – ул да баш командующий – парадты машинаға ултырып ҡабул иткән».

Сталин, йылмайып, былай тип яуаплаған:

– Рузвельттың аяҡтары йөрөмәй. Аллаға шөкөр, минең аяҡтарым һау. Традиция буйынса Ҡыҙыл майҙанға күк ат менеп сығырға кәрәк. Беҙҙә ике кавалерист маршал бар: Жуков менән Рокоссовский. Уларҙың береһе парад менән етәкселек итер, икенсеһе парадты ҡабул итер.

24 июндә иртә менән башланған ямғыр туҡтамай яуа. Шуға ҡарамаҫтан, кешеләрҙең кәйефе күтәренке. Ҡыҙыл майҙанды йөҙәрләгән байраҡтар биҙәгән. Парадта ҡатнашыусыларҙың күкрәктәрендә ордендар, миҙалдар ялтырай. Ленин мавзолейы трибунаһына дәүләт етәкселәре күтәрелә. Кремль куранттары сәғәт 10-ды һуҡҡанда, майҙанда күк атҡа атланған Г. Жуков күренә. Уны Рокоссовский ҡаршылай:

– Иптәш Советтар Союзы Маршалы! Ғәскәрҙәр Еңеү Парадына теҙелгән, – тип рапорт бирә.

Маршалдар полктар эргәһенән уҙа. Г. Жуков уларҙы оло еңеү менән ҡотлай. Парадта ҡатнашыусылар өс тапҡыр ҡеүәтле «ура!» менән яуаплай.

Артабан Г. Жуков Ленин мавзолейы трибунаһына менеп, телмәр тота. Оркестр музыкаһы аҫтында йыйылма полктар ҡуҙғала. Һәр полктың алдынан фронт башлығы бара. Полктар Ҡыҙыл майҙандан үтеүгә, оркестр тына.

Көслө барабан тауыштары аҫтында һалдаттар ҡыйратылған фашист дивизияларының йөҙҙәрсә, шул иҫәптән Гитлерҙың шәхси штандартын, Мавзолей эргәһенә ырғыта. Барабандар шыма. Оркестр марш уйнай. Ҡыҙыл майҙан аша хәрби академиялар һәм училищеларҙың курсанттары атлай. Суворовсылар, нахимовсыларҙың сафтары күренә. Парадты күҙәтеүселәр уларҙы йылмайып та, һоҡланып та оҙата. Еңеү Парадын артиллерия, танк, «катюша» колонналары тамамлай. Туҡтамай яуған ямғыр сәбәпле, хеҙмәтсәндәрҙең демонстрацияһы уҙғарылмай.

Йылдар уҙған һайын Бөйөк Ватан һуғышының тарихтағы урыны, әһәмиәте арта. Бөтә донъяны фашистар планлаштырған һәләкәттән һаҡлап ҡалыуҙа Советтар Союзы иң ҙур өлөш индерҙе, фашист башлыҡтарын үҙ ояһында дөмөктөрҙө. Бөйөк Ватан һуғышын, уның геройҙарын мәңгеләштереү өсөн күп саралар күрелде. 1965 йылда 9 май Еңеү Көнө – эш көнө түгел тип иғлан ителде. Мәскәүгә – герой-ҡала, Брест ҡәлғәһенә – герой-ҡәлғә исеме бирелде. Герой-ҡалалар Волгоградҡа, Севастополгә, Одессаға Ленин ордены, Алтын Йондоҙ миҙалы, Ленинградҡа һәм Киевҡа Алтын Йондоҙ миҙалы тапшырылды. 1967 йылда Кремль стенаһы эргәһендә Билдәһеҙ һалдатҡа һәйкәл асылды. 1979 йылда Новороссийск һәм Керчь ҡалаларына герой-ҡала исеме бирелде. 2005 йылда Мәскәүҙә Поклонная горала Еңеү монументы ҡалҡып сыҡты. Г. К. Жуковтың, А. М. Васильевскийҙың, И. С. Коневтың, башҡа полководецтарҙың китаптары, «Бөтә Рәсәй хәтер китабы 1941 – 1945» донъя күрҙе.

Ватаныбыҙҙың намыҫын һәм азатлығын һаҡлауҙа һәләк булған яҡташтарыбыҙҙың яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү өсөн республикабыҙҙа ла күп көс һалынды. Өфө ҡалаһының Еңеү паркында ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы М.Ғ. Гәрәев ҡәберенә уның һыны ҡуйылды. Советтар Союзы Геройҙары А. Матросовҡа һәм М. Ғөбәйҙуллинға һәйкәл төҙөлдө. Советтар Союзы Геройҙарының һәм Дан орденының тулы кавалерҙарының исемдәре яҙылған обелиск ҡуйылды. Бында шулай уҡ һәр районда һәм ҡаланан үлгән яугирҙарҙың һаны күрһәтелгән обелиск та бар. Паркта республиканың Хәрби дан музейы, Өфө ҡалаһының Дим районында Башҡорт гвардия атлы дивизияһының музейы асылды. Ҡалаларҙа, район үҙәктәрендә, байтаҡ ауылдарҙа һәйкәлдәр, бюстар, обелискылар, стеллалар ҡуйылды.

2010 йылда Еңеү паркында Башҡорт атлы дивизияһы командиры, генерал М. М. Шаймуратовтың һәм полк командиры, Советтар Союзы Геройы, генерал Т. Т. Күсимовтың һындары ҡуйыласаҡ. 1965 йылдан Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанында йыл һайын Еңеү Парады уҙғарылып, уның һәр бишенсе йылына юбилей статусы бирелде. Еңеүҙең 60 йыллығы Мәскәүҙә бығаса күрелмәгән ҙур тантана менән уҙҙы. Юбилейға 3 мең ветеран саҡырылғайны: Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһенән – 2600, Рәсәй төбәктәренән – 300, элекке СССР-ҙың союздаш республикаларынан – 100 кеше. Республикабыҙҙан унда А. Ш. Исхаҡов, Н. А. Серавкин, Г. Г. Яҡупов һәм мин ҡатнаштыҡ.

Ул көндәрҙә Мәскәү Ер шарының сәйәси үҙәгенә әйләнде: илле өс дәүләт йә хөкүмәт башлыҡтары, шул иҫәптән Ҡытай Халыҡ Республикаһы рәйесе Ху Цзиньтао, АҠШ һәм Франция президенттары Д. Буш һәм Ж. Ширак, ГФР

канцлеры Г. Шредер, Италия һәм Япония премьер-министрҙары С. Берлускони һәм Д. Коидзуми, юбилей сараларында ҡатнашырға Мәскәүгә килде. Англия һәм Канада премьер-министрҙары Т. Блэр, Пол Мартини, Литва, Эстония, Грузия президенттары Адамкус, Эрни, Саакашвили юбилейға килеүҙән баш тартты. Англия һәм Канада хөкүмәт башлыҡтары быны сәбәбен илдәрендәге көсөргәнешле хәл менән аңлатты. Литва президенты, моғайын, оялғандыр: үҙе теләп 1944 йылдан немец армияһында хеҙмәт иткән, беҙгә ҡаршы һуғышҡан.

Башҡортостан поезы 7 майҙа Мәскәүҙең Ҡазан вокзалына килеп туҡтаны. Вагон алдында беҙҙе майор һәм өлкән лейтенант ҡаршы алды. Уларға эйәреп шәфҡәт туташы ла килгән. Иҫәнләштек. «Медицина ярҙамы кәрәкмәйме?» тип белештеләр. Мәскәү урамдары ныҡ үҙгәргән, төрлө төҫтәге рекламалар менән сыбарланған. Мытищи ҡалаһы яғына сәғәттән ашыу барғас, автобус оборона министрының урман ситендә урынлашҡан дүрт ҡатлы үҙәк ял йорто алдында туҡтаны. Һаҡсы беҙҙең документтарҙы ҡарап торманы. Теркәгән ваҡытта һәр беребеҙгә пакет тотторҙолар:

– Урынлашҡас, ошо документтар менән танышырһығыҙ.

Пакетта – өс көн буласаҡ саралар программалары, исем-фамилияларыбыҙ яҙылған саҡырыу ҡағыҙҙары. Киске сәғәт 7-лә оборона министры С. Б. Иванов менән осраштыҡ. Ул беҙҙе байрам менән ҡотланы, хәрби реформаға ҡағылған ҡайһы бер мәсьәләләрҙе күтәрҙе. Бөйөк Ватан һуғышында Советтар Союзының юғалтыуҙары хаҡында бәхәстәргә яуап итеп, былай тине:

– Мин һеҙгә юғалтыуҙарҙың рәсми мәғлүмәттәрен еткерәм. Хәрбиҙәр һәм граждандар араһында улар 26,6 млн. кеше тәшкил итә. Үлгәндәр – 8.668.400. Санитар юғалтыуҙар (был төшөнсә башҡа илдәрҙә лә ҡулланыла): яраланған – 15.205.592, сирләгән – 3.047.675, туңған – 90.881. Айырым графала: хәбәрһеҙ юғалғандар – 5.059.000, әсир төшкәндәр – 4.559.000.

Министрҙан һуң беренсе булып Арнольд Мери (Эстония) сығыш яһаны. Был илдәрҙе «баҫып алыу» тураһында шәхси фекерен әйтте. Эстония буржуаз армияһында, рота командиры булараҡ, Ленинградҡа яҡынлашҡан фашист ғәскәрҙәренә ҡаршы алышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн, уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелгән.

– Эстония ғәскәрҙәре фашистарға ҡаршы аяуһыҙ һуғышты. Тарихта ошондай миҫал бармы – баҫып алынған илдең армияһы үҙҙәрен «коллоҡҡа төшөргәндәр» менән бер сафта дошманға ҡаршы һуғышҡанмы? – тине ул, беҙгә мөрәжәғәт итеп.

Мериҙан һуң Советтар Союзы Геройҙары Анатолий Дюбко (Белоруссия), Кавказ аръяғынан Сурен Саркисян (Әрмәнстан), Ҡаҙағстандан һәм Урта Азиянан Рәсүл Исетов (Ҡаҙағстан), Рәсәйҙән II-III дәрәжә Дан ордендары кавалеры Леонид Сергеев (Ленинград), Украинанан Дан орденының тулы кавалеры Степан Половинец сығыш яһаны.

Үкенескә ҡаршы, Арнольд Мериҙың һуңғы көндәре фажиғәле була. Һуғыштан һуң ул Эстония ВЛКСМ үҙәк комитетының беренсе секретары булып эшләгән. Ҡаты сирләүенә ҡарамаҫтан, уны хөкөмгә тарттырҙылар. Ике туған ағаһы – Эстония президенты Мери Арнольдҡа ярҙам күрһәтмәй.

Бөйөк Ватан һуғышында беҙҙең юғалтыуҙар хаҡында һуңғы көндәрҙә лә төрлө уйҙырмалар булып тора. Мәҫәлән, тел белгесе Борис Соколов, бер ниндәй сығанаҡтарға таянмайынса, юғалтыуҙарҙы 43 миллион кеше итеп

күрһәтә («Новая газета», 22.06.2009). Германияның юғалтыуҙарын 2,8 млн. итеп билдәләй. Шуныһы билдәле: Германияның һуғышта юғалтыуҙары әлегә тиклем тикшерелмәгән. Ул туралағы документтар йәшерен, сер итеп һаҡлана. Йәнәһе, был мәғлүмәттәр иғлан ителһә, ул кешеләргә ҙур әхлаҡи яра яһаясаҡ. Имеш, кешеләрҙең уларҙы белмәүе хәйерле.

Рәсәй хәрби белгестәре һәм тарихсылар Германияның һәм уның эйәрсендәре – Болгария, Венгрия, Испания, Италия, Румыния, Финляндияның һуғышта үлгән кешеләренең иҫәбен 8.206.600 тип һанай. Бынан тыш, Австрия, Бельгия, Голландия, Норвегия, Польша, Франция һәм Чехияның 2 миллион кешеһе үҙ теләге менән гитлерсыларға ҡушылып, 800 меңе фронтта, ҡалғандары фашистар баҫып алған илдәрҙә уларға ярҙамлашҡан. Беҙгә ҡаршы 1,5 миллион «фольксштурм», 100 мең «гитлерюгенд» (14 – 16 йәшлек үҫмерҙәр) һуғышты. Сит ил эйәрсендәренең һәм фольксштурмдың, «гитлерюгенд»тың юғалтыуҙары тураһында мәғлүмәттәр әлегә юҡ.

8 майҙа иртә менән Мәскәүгә йүнәлдек. Һәр 20 ветеранға граждан кейемендәге полковниктар етәкселек итә. Кремль эргәһендәге Билдәһеҙ һалдат ҡәберенә сәскәләр һалғас, Ҡоралды Көстәрҙең Үҙәк музейында булдыҡ. Ул күргәҙмә материалдарға бик бай икән: ҡоралдар, документтар, портреттар. Ҙур асыҡ йәшниктә меңәрләгән фашист ордендары, эргәһенә йөҙәрләгән немец байраҡтары өйөлгән. Оҙаҡ ҡына атаҡлы снайпер, Советтар Союзы Геройы Николай Ильиндың портреты янында баҫып торҙом. Ун көнлөк курста ул беҙҙе снайпер оҫталығына өйрәткәйне. Курск дуғаһында һәләк булып, Никольское ауылы янындағы туғандар ҡәберлегендә ерләнде.

Төштән һуң Ҙур театрҙа тантаналы концерт булды. Ветерандарҙан тыш, ил етәкселәре, БДБ президенттары килгәйне. Нишләптер беҙҙең дүртебеҙҙе төрлө урындарға ултырттылар. Минең урын дүртенсе рәттә ине. Минән өс кеше аша М. Швыдкой, Фрадков, Рушайло, С. Иванов, партерҙың уң яғында Рәсәйҙең буласаҡ президенты Д. Медведев, А. Кудрин, А. Жуков урынлашты. Партерҙың уң яғындағы 5-се рәтендә В. В. Путин, Ҡаҙағстан президенты Н. Назарбаев, Белоруссия президенты А. Лукашенко һ.б. урын алды.

В. В. Путин, сәхнәгә сығып, Еңеүҙең 60 йыллығы менән ҡотланы, Советтар Союзының фашистарҙы тар-мар итеүҙәге роле тураһында һөйләне. Икенсе донъя һуғышында 61 дәүләт, йәғни Ер шарының 80 проценты ҡатнашҡан. 1941 – 1943 йылдарҙа Германияға, уның эйәрсендәренә ҡаршы СССР яңғыҙы һуғышҡан. Дошман ғәскәрҙәре һәм һуғыш техникаһының өстән ике өлөшө Совет-Германия фронтында ҡыйратылған.

Кремль башлығының сығышынан һуң иң талантлы артистарҙың концерты булды. Уны СССР халыҡ артисы Василий Лановой алып барҙы. Үҙе лә һуғыш тураһында шиғырҙар, проза әҫәрҙәренән өҙөктәр уҡыны. Ял йортона ҡайтҡанда шуға иғтибар иттек: Франция илселеге эргәһенә мәрхүм президент де Голлгә һәйкәл ҡуйылғайны. Кис менән Пятницкий исемендәге хор артистарының сығышын мауығып тыңланыҡ. Күмәк йыр, яңғыҙ йырлаусылар, бейеүселәр, шаян таҡмаҡтар, халыҡ уйындары беҙҙе арбаны.

9 майҙа Ҡыҙыл майҙанға килдек. Рәсәй төбәктәренән элекке союздаш республикаларҙан килгән ветерандарҙың урыны – трибуналарҙа. Хәрби парад Ҡыҙыл майҙанға Еңеү байрағын алып сығыу менән башланды. Парадҡа етәкселек итеүсе Мәскәү хәрби округы башлығы оборона министры

С. Ивановты ҡаршы алды. Улар икеһе лә еңел машиналарҙа, сафҡа теҙелгән ғәскәрҙәр эргәһенән уҙҙы. Уларҙы юбилей менән ҡотлап, министр РФ Президенты В. В. Путинға ғәскәрҙәрҙең парадҡа әҙерлеге хаҡында белдерҙе. Президент ветерандарға, ғәскәрҙәргә, ҡунаҡтарға тантаналы телмәр менән мөрәжәғәт итте. Ғәскәрҙәр өс тапҡыр «ура!» менән яуапланы.

Йыйылма оркестр Дәүләт гимнын башҡара, 18 пушка 15 залп менән салют бирә. Парадтың тарихи өлөшө башлана. Рәсәй Дәүләт флагы, Ҡораллы Көстәр флагы, айырыуса батырлыҡ күрһәткән берләшмәләрҙең 60 байрағы сығарыла. Бөйөк Ватан һуғышы ғәскәрҙәрен һынландырыусы алты рота (пехота, бронетанк ғәскәрҙәре, артиллерия, инженер ғәскәрҙәре, Хәрби-Һауа Көстәре, Хәрби-Диңгеҙ Флоты, атлы эскадрон) үтә. Ҡыҙыл майҙан аша Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһе ветерандары уҙа (2.600 кеше, 130 автомобиль, һәр береһендә – 20 ветеран). Уҡыусы балалар беҙгә сәскәләр тапшырҙы. Хәҙерге ғәскәрҙәрҙе, хәрби академиялар, училищелар курсанттарының, илдең сиген һаҡлаусы ғәскәрҙәрҙең, граждан оборонаһы һәм ғәҙәттән тыш хәлдәр ғәскәрҙәренең уҙғанын күҙәтәбеҙ.

Ҡыҙыл майҙан өҫтөнән 9 истребитель осоп уҙҙы. Тағы өс самолет күренде. Улар, төҫлө эҙ ҡалдырып, һауала Дәүләт флагын хасил итте. Хәрби парад оркестрҙың һәм А. Александров исемендәге хор ансамбленең «Еңеү көнө» йырын башҡарыу менән тамамланды. Тантананан һуң РФ Президенты В. В. Путин Кремль Дәүләт һарайының банкет залында тантаналы ҡабул итеү ойоштορҙо.

Зал иркен. Буйынан-буйына бельэтаж һуҙылған. Эргәбеҙгә Дағстандан ике ветеран килеп ултырҙы. Йәнәш өҫтәл артында – Мәскәү муллаһы, Рәсәй мосолмандары мөфтөйө Рауил Ғәйнетдин, башҡа дин әһелдәре. Нишләптер Башҡортостандың ике мөфтөйөнөң береһе лә күренмәне. Өҫтәлгә төрлө ашамлыҡ, емеш, араҡы ҡуйылған. Беҙҙе бер иш костюм кейгән йәш кенә официант егеттәр хеҙмәтләндерә.

В. В. Путин телмәр менән сығыш яһаны. Фашизмды еңеүҙең әһәмиәтенә туҡталды. Дәүләттәр араһында дуҫлыҡ һаҡланһа, һуғыш ҡурҡынысы янамаясағына ышаныс белдереп, гитлерсыларға ҡаршы бергәләп һуғышҡан өсөн союздаштарға рәхмәт әйтте. «Ветерандарҙың көнкүреше яҡшы булһын өсөн барыһын да эшләйәсәкбеҙ, балаларыбыҙ һәм ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙең киләсәге өсөн йөрәктәребеҙ тыныс булһын», – тине.

В. В. Путин телмәрен:

– Дәүләттәребеҙгә, халыҡтарыбыҙға бойондороҡһоҙлоҡ, яҡты киләсәк килтергәндәр өсөн!

Тарихи үткәндәребеҙҙе һаҡлаған һәм киләсәгебеҙҙе бүләк иткәндәр өсөн!

Һеҙҙең өсөн, һалдаттар-еңеүселәр!

Киләсәктә планетала тыныслыҡ һәм ирек һаҡланһын өсөн! – тип тамамланы. Залдағылар, аяғүрә баҫып, бокалдарын күтәрҙе. Башҡа сығыш яһаусы, тост әйтеүсе булманы. РФ Президенты элекке Румыния короле Михай II менән Албания Республикаһы президенты Алфред Моцюға юбилей миҙалдары тапшырҙы. Нишләптер был хаҡта гәзиттәрҙә хәбәр күренмәне. Сәғәт 2-лә таралыштыҡ. Беренсе ҡатҡа төшкәс, йөҙгә-йөҙ яҙыусы, Советтар Союзы Геройы, генерал-майор В. В. Карпов менән осраштым. Бер аҙ һөйләшеп торҙоҡ һәм, бер-беребеҙгә яҡшы теләктәр әйтеп, хушлаштыҡ. Үкенескә ҡаршы, В. В. Карповтың күптән түгел гүр эйәһе булыуын ишетеү ауыр булды.

Киске сәғәт 8-ҙә, Ҡыҙыл майҙанда, ике сәғәткә һуҙылған театрлаштырылған тамаша менән юбилей тамамланасаҡ. Ҡайтып, бер аҙ ял иткәс, тағы Ҡыҙыл майҙанға юлландыҡ. Исхаҡов һәм Серавкин бик арып ҡайтҡайнылар, тамашаға бара алманылар. Минең урын РФ Премьер-министры урынбаҫары А. Жуков менән йәнәш булып сыҡты. Уның уң яғында – атаҡлы полярник, Дәүләт депутаты А. Чилингаров. Минең артымда – РФ үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Вешняков (хәҙер Латвияла Рәсәй илсеһе **– С. Й.**), уң яғымда – Дәүләт Думаһы депутаты С. Бабурин. Улар баҫып, ҡулымды ҡыҫып, байрам менән ҡотланы.

Алдыбыҙҙа – ғаиләһе менән Мәскәү мэры Ю. М. Лужков. Уның 13-14 йәштәр самаһындағы оло ҡыҙы, ҡатыны – миллиардер Батурина, кесе ҡыҙы ла килгән. Бер-ике минуттан олпат кәүҙәле, матур кейемле кеше килеп, миңә ҡулын һуҙҙы. Баҫып иҫәнләштем. Ул мине юбилей менән тәбрикләне. Йөҙө таныш кеүек тойолған был кешене ҡайҙа күргәнемде иҫемә төшөрә алмай аҙапландым. Ул Албания президенты Алфред Моцю булып сыҡты. Эргәһендәге сибәр ҡатыны тамашаны өҙлөкһөҙ камераһына төшөрөп ултырҙы.

Тамашаны СССР-ҙың халыҡ артисы, Дәүләт премияһы лауреаты Игорь Кириллов «Тыныслыҡ минуты» шиғыры менән башлап ебәрҙе. «Баш эйәйек ошо бөйөк йылдарға» йырын Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР-ҙың халыҡ артисткаһы, Ленин һәм Рәсәй Дәүләт премиялары лауреаты Людмила Зыкина башҡарҙы. Программа түбәндәге бүлектәрҙән төҙөлгәйне: «Киң минең Тыуған илем», «Күтәрел, икһеҙ-сикһеҙ, ҙур ил», «Мәскәүҙе бирмәбеҙ дошманға!», «Ленинград блокадаһы», «Сталинград, Севастополь, Курск дуғаһы», «Европаны азат итеү», «Эльбала осрашыу, һуңғы алыш», «Ваҡыт, алға», «Еңеү көнө». Һәр бер бүлек ике – дүрт концерт номерынан тора.

Эльбала осрашыу бүлегендә Франция йырсыһы Мирей Матье ике йыр башҡарҙы. Программаға ярашлы, экранда И.Сталин, Г.Жуков, Василевский һ.б. полководецтарҙың портреттары, һуғыш эпизодтары күрһәтелде. Ҡыҙыл майҙан аша танк колоннаһы, артиллерия дивизионы, «катюшалар», десантсылар, хәрби диңгеҙселәр, осоусылар, атлы эскадрон уҙҙы. Тамаша бөтә артистарҙың хоры башҡарған «Еңеү көнө» йыры менән тамамланды. Башлап Рәсәй халыҡ артисы Лев Лещенко йырланы.

Бына еңеү салюты башланды. Күк йөҙөн төрлө төҫтәге йөҙҙәрсә ут шарҙары, матур нурҙар ҡапланы. Юғарыла исемдәре әйтелгән, йәнәш ултырған билдәле шәхестәр менән хушлашып, трибунанан төштөк. Ял йортона ҡайтҡас, байтаҡ ваҡыт йоҡлай алмай уйланып, һуңғы көндәрҙәге ваҡиғаларҙы башымдан уҙғарҙым. Иртәгәһен беҙҙе бер капитан Ҡазан вокзалына килтереп, вагонға ултыртышып, оҙатып ҡалды.

Бөйөк Еңеүҙең 60 йыллыҡ юбилейы хөрмәтенә Ҡыҙыл майҙанда уҙған Еңеү Парадында ҡатнашыу ҙур тәьҫир ҡалдырҙы, мәңге онотолмаҫлыҡ хәтирәгә әйләнде.

**Сабир ЙЫҺАНШИН,**
**БР Һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары советы**
**президиумы ағзаһы, отставкалағы полковник.**

# ЕҢЕҮ КӨНӨН ҠАЙҘА, НИСЕК ҠАРШЫЛАНЫҒЫҘ?

**Сәлимйән ҒҮМӘРОВ,**
*Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы,*
*хеҙмәт ветераны*

– 1945 йылдың 9 майы. Күҙҙәремде ни өсөндөр йоҡо алмай, шулай ҙа күңелемә ниндәйҙер ҡыуаныс, шатлыҡ килер кеүек. Мин быны колхозда үткән яҙғы сәсеүгә әҙерлекте тикшереү комиссияһының һығымталары менән бәйләргә тырыштым. Сөнки Ғәббәс ағай менән мин әҙерләгән һабанды, ҡамытмисәүҙәрҙе, аттарҙы, ғөмүмән, беҙҙең әҙерлекте комиссия иң яҡшыһы тип тапты һәм башҡаларға өлгө итеп ҡуйҙы.

Әммә был көнгө ҡыуанысым бөтөнләй икенсе сәбәп менән булған…

Иртән тороп йыуындым, сәй эстем (ашарға юҡ ине), ғәҙәт буйынса, сепрәк тоҡсайымды муйынға аҫып, ялан аяҡ Сәғит ауылынан өс саҡрым самаһындағы Байыш ете йыллыҡ мәктәбенә уҡырға юлландым. Ә беҙҙең ауылда тик дүрт класлы башланғыс мәктәп. Ни өсөндөр мәктәпкә беренсе булып ауылдан мин килгәнмен. Көләс йөҙ менән ятраҡан, ихтирам иткән уҡытыусым ҡаршы алды. «Сәлимйән, – тине ул, йылмайып, – бөгөн Еңеү хөрмәтенә мәктәптә уҡыу булмай, ҡайт».

Көн йонсоу, ҡояш күренмәй… Шатлыҡлы хәбәрҙе ишетеү менән ауылға табан йүгерҙем. Өйгә лә инмәй, туп-тура колхоз идараһына ашыҡтым. Унда колхоз рәйесе, бригадирҙар, бухгалтер, тағы бер-ике кеше эш тураһында һөйләшә ине. Алдарына баҫтым да: «Һөйөнсө, бөгөн Еңеү байрамы!» – тип ҡысҡырып ебәрҙем. Улар мине ҡосаҡлап, күтәреп алдылар һәм колхоздан бер быҙау вәғәҙә иттеләр. Колхоз рәйесе шунда уҡ ике бригадирға эш ҡушты: һәр бригадаға берәр һыйыр һуйырға, һәр ун йорттоң кешеләрен бер урынға йыйып табын ҡорорға, аш бешереүселәр билдәләргә, балалар өсөн айырым ҡаҙан аҫырға. Туҡмас, һалма өсөн ондо яҙғы сәсеүгә әҙерләнгән запастан файҙаланырға...

Изге хәбәр, йәшен тиҙлегендәй, тотош ауылға таралды. Халыҡ, өйҙәрендә ултырып сыҙамай, урамға сыға. Мин бер китабымдың ситенә яҙып ҡуйҙым:

*Ауыл урамында ишетәмен*
*Бөйөк Еңеү тигән тауышты.*
*Бик күптәрҙә күрәм көләс йөҙҙө,*
*Бәғзеләрҙә – ҡайғы-һағышты.*

Төш һуңынан ололар билдәләнгән өйҙәргә байрам ашына йыйыла башланы, ә бала-саға, һауыт-һалаҡтарын тотоп, үҙҙәренекенә ашыҡты.

Ауылда тик минең генә мандолинам бар. Уны Зәбирйән ағайыма 8-се класта уҡығанда ололарҙың ҡурайсылар бәйгеһендә еңгән өсөн бүләк иткәйнеләр. Әле 17 йәше лә тулмаған ағайымды 1943 йылдың ноябрендә һуғышҡа оҙаттыҡ.

Көндөң һыуыҡ булыуына ҡарамаҫтан, ауылды сыҡҡансы ат санаһында ҡурайын уйнап барҙы, ә унын йәндәй дуҫы Зариф ағай йырланы ла йырланы. Үкенескә ҡаршы, был уның һуңғы йыры булды – һуғыштан ҡайта алманы. Миңә: «Сәлимйән, мандолинала уйнарға өйрәнеп тор, мин ҡайтҡас, ҡурайға ҡушылып бергә уйнарһың», – тигән аманатын да әйтте.

Музыканы ололар бик һағынған икән. Аш ойошторолған табындарҙан өйҙәренә мине саҡырған вәкилдәр ҙә килеп китте. Иң башта Бәхтиямал еңгәйҙең өйөнә индем. Ул – иң оло Ғәфүрйән ағайымдың ҡатыны. Ағай тураһында «хәбәрһеҙ юғалды» тигән ҡара ҡағыҙ беҙҙе ауыр ҡайғыға һалғайны инде. Уның дүрт балаһы ҡалды. Иң олоһо Ғәббәс ағайға быйыл декабрҙә 80 йәш тула. Ошо уҡ табында бер туған Нәзифә апайым ултыра. Уның ире Сәхретдин еҙнә тураһында «Һуғыш яланында батырҙарса һәләк булды» тигән ҡағыҙ алғайныҡ. 28 йәшенән генә Нәзифә апай өс бала менән тол йәшәне. Табында кемдер үҙенең ҡыуанысы менән уртаҡлаша, кемдер ҡайғы-хәсрәтен һөйләй. Араларынан берәү көтмәгәндә:

*Һуғыштарҙа бәғрем һәләк булды,*
*Башҡынайым ҡалды йәш кенә,–*

тип йырлап та алды.

Һағышлы йырҙы икенселәр күтәрҙе. Артабан минән таҡмаҡ көйҙәре уйнатып бейеүселәр ҙә табылды. Шул арала минең арттан икенсе табындан килеп еткәндәр. Ошо арала Бәхтиямал еңгәйҙән һауытҡа һалма, ит һалдырып, түшәктә ауырып ятҡан әсәйемә алып ҡайттым. Ул: «Байрам күстәнәсенән миңә лә ауыҙ итергә тура килде, Хоҙайыма шөкөр»,– тип ҡыуанып алды, арҡамдан яратып рәхмәт әйтте.

Икенсе табында ла һүҙ еңеү, юғалтыуҙар тураһында бара ине. Араларынан сибәр генә инәй яулыҡ осо менән күҙ-керпектәрен һөртөп: «Хоҙай нигә үҙ бәндәләренә шундай ауыр ҡайғы ебәрҙе, беҙҙең тырнаҡ ҡараһындай ҙа гонаһыбыҙ юҡ бит. Бына мин, аталарына иптәш булыр тип, һөлөктәй өс ул үҫтергәйнем. Уларҙы һуғышҡа оҙаттым. Рәхмәтем, Мәхмүтем, Зарифым ҡорбан булды». Был ауылыбыҙҙың ҡулға оҫта, ҙур ихтирамға лайыҡ Хисмәтуллина Сәғиҙә инәй ине.

Эйе, 60 – 70 өйлө бәләкәй генә ауылдан 40-лап кеше һуғышта баштарын һалды. Уларҙың исемдәре ауыл клубы эргәһендә торған ташҡа уйылып яҙылып ҡуйылған.

Һуғыш йылдарында төрлө ауырыуҙар, сирҙәр көсәйеп китте. Сәсәк, ҡыҙылсаларҙан балалар үлгеләне. Һис көтмәгәндә ауылды тиф ауырыуы ялмап алды. Уҡытыуҙы туҡтатып, тиф менән ауырыған кешеләрҙе шунда йыйып һалдылар. Был ауырыу беҙҙең ғаиләне лә урап үтмәне. Ололарҙы һоҡландырған, үксәһенә етеп торған сәс толомон ҡырҡып, Зөләйха апайымды ла мәктәпкә урынлаштырҙылар. Ул саҡта врач ҡайҙа… Ауырыуҙарҙы мөләйем генә йөҙлө шәфҡәт туташы дауаланы. Ҡыуаныс шунда: сир еңелде. Зөләйха апайым Башҡорт дәүләт университетын тамамлап, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып китте.

Еңеү көнө колхоздың ат аҙбарына барҙым бит әле. Беҙ, ауыл малайҙары, атһыҙ көн итеүҙе күҙ алдына ла килтермәй инек. Шуға күрә бағыу, ҡарау өсөн колхоз аттары араһынан үҙебеҙгә ат һайлап ала торғайныҡ. Ат ҡараусы: «Сәлимйән, үҙе матур, бик аҡыллы юртаҡ, ошо атты ал, исемен үҙең ҡуш», – тине. Атайым Ғәббәс ағай менән миңә бик күп әкиәт һөйләй торғайны, бигерәк тә батырҙар тураһында. «Ғәле батыр, – ти торғайны, – Дөл-дөлөнә атланып йыл үтәрҙе ай

үткән, ай үтәрҙе көн үткән, ҡылысын йәшен йәшнәгәндәй һелтәп килгәндә, бөтә дошмандары ҡасып бөтөр булған».

Мин дә был атҡа Дөл-дөл тип исем ҡуштым. Бишмәтем салғыйына урап алып барған бесәнде күрһәтеп, Дөл-дөл тип саҡырыуыма кешнәй-кешнәй юртып килер ине.

…Бер көн район үҙәгенән комиссия килеп төштө. Ул атымдың ҡабырғаһына «хәрби кавалерияға яраҡлы» тигән тамға һалып китте. Аттарҙы алып китер көн иртүк аҙбарға барҙым. Ғәҙәтем буйынса Дөл-дөлдө саҡырып бесән ашаттым, ҡойроҡ-ялдарын таҙарттым, арҡаларынан һыйпап һөйөп алдым, ҡолаҡ төптәрен, тамаҡ аҫтарын яғымлы ғына тырнай башлағайным, ул башын минең яурыныма һалды. Ҡараһам, күҙҙәренән йәш килгәндәй була, тик хайуанҡайҙың әйтергә теле юҡ. Мин аңланым, түҙмәнем, илап ебәрҙем. Еңеү көнө колхоздың ат аҙбарына барыуымдың дә сәбәбе шул булды: әллә минең Дөл-дөлөм дә һуғыштан әйләнеп ҡайтты микән, тип белергә ине. Ләкин ул юҡ ине, бәлки, ул да Тыуған илдең азатлығы өсөн яу ҡырында һәләк булғандыр…

Ҡаҫмарт бик ныҡ ташҡан. Һыуы йөҙәр метр туғайға таралып, ярға ҡағып ята. Йылғаның ике ярын тоташтырған, ике яғында урынлашҡан 10 – 15 ауыл халҡын аралаштырған эре-эре бүрәнәләрҙән һәм ҡарағай таҡталарҙан ҡағылған берҙәнбер күпер.

Еңеү көнө кисен ҙур күпер өҫтөндә уйын-көлкө, йыр-бейеү кисәһе башланып китте. Әлбиттә, иң уртала – минең урын. Мин дәртләнә-дәртләнә мандолинала таҡмаҡ көйҙәре уйнайым, йәштәр күперҙе һелкетә баҫып бейей. Бер аҙ ваҡыт үткәс, ололар ҙа күбәйә төштө, музыкаға, бейеү-йырға һыуһап килгән кешеләрҙе тыйып-туҡтатып булмай. Ҡулдарым талып, бармаҡтарым йөрөмәй башлаһа, миңә ял бирәләр, ә үҙҙәре таҡмаҡ әйтеп бейейҙәр.

*Ҡаҫмарт буйлап аъып килә*
*Мунсаның бер таҡтаһы.*
*Һөйгәнеңде күрҙем инде,*
*Аъып тора маңҡаһы.*

*Аяъыңдаъы итектең*
*Табандары сакауай.*
*Үҙең былай арыу ъына,*
*Бисәң бик бисталкауай.*

*Матур итеп үткәрәйек*
*Еңеү көнөнөң кисен.*
*Дуҫ-туъан булып йәшәйек,*
*«Ҡойон» бит беҙҙең исем.*

(Эштә уңған, һәр нәмәгә берҙәм һәм дәррәү тотонғандары, ярҙамсыл булғандары өсөн беҙҙең ауыл халҡын «ҡойон» тип йөрөтәләр.)

Йыр-бейеүҙә ҡатнашмаған йәштәр, күпер аҫтына төшөп, ажғырып аҡҡан һыу буйлап ҡағыҙҙан эшләгән караптар ебәрә, олораҡтар таҡтанан көймә яһап, уртаһына оҙон ҡолға ҡуйып, ҙур ҡағыҙға «Бөйөк Еңеү менән!» тип яҙып һыу ағышында ултырған ауылдарға сәләм оҙатты.

Уйын-көлкө оҙаҡ барҙы. Таң һыҙылғанда йырлай-йырлай өйҙәргә таралдыҡ…

**Мөкәрәмә САДИҠОВА,**
*яҙыусы, Башҡортостандың*
*атҡаҙанъан мәҙәниәт хеҙмәткәре*

– Мин инде һикһәнемә йүгергән, үҙ ғүмеремдә күпте күреп, күпте кисергән һәм ошо дәүерҙә бик күп яҡындарын мәңгелеккә оҙатҡан әҙибә. Ғүмеремдә бәхетле мәлдәр, байрам көндәре лә байтаҡ булды, тик 1945 йылдың 9 май көнө минең өсөн – иң оло, иллә-аллалап көтөп алған иң ҡәҙерле байрам.

Шул тиклем дә оҙаҡҡа һуҙылған ҡан ҡойғос һуғыштың михнәттәре тылдағы ҡарт-ҡороға, ҡатын-ҡыҙ һәм үҫмер бала-сағаға яурынына ла төшкәнлектән, алҡымыбыҙҙан һәрмәп алырға торған үлем әжәленән ҡотолоу өсөн беҙгә лә йәнтәслим көрәшергә тура килде. Хәлебеҙ көрсөккә терәлгән иң ауыр, әрнешле саҡтарыбыҙҙа әхирәттәрем Зөһрә, Сәлимә һәм мин, өсәүләшеп, Гитлер мөртәтте ҡәһәрләйбеҙ. Еңеү көнө яҡынлашҡас, зәһәрләнеп:

– Шул Гитлер тигән мәлғүнде тотоп бер бағанаға бәйләһендәр ҙә бөтә ил буйлап мәсхәрәгә күрһәтеп йөрөтһөндәр ине. Мин уның йөҙөнә төкөрөп, тиреһен энә менән ҡайыҙлар инем,– тим. Ә Зөһрә:

– Ә мин уны аяҡтарынан аҫып ҡуйыр инем,– ти.

– Һи-и, улай ғынамы,– ти Сәлимә,– мин уны күкәйенән аҫыр инем!..

Ниһайәт, беҙ шул тиклем дә өҙөлөп көткән Бөйөк Еңеү көнө килде. Тик ул минең үҙ тыуған йортомдан ҡасып, күрше ауылдағы әсәйем менән бер туған апайыма йүнәлгән мәлгә тап булды. Ауылдың беҙ йәшәгән түбән осондағы кешеләр: «Һуғыш бөткән! Еңеү!» – тип «ура» ҡысҡырып, юғары осҡа табан эркелешеп йүгергәндә, мин китап-дәфтәрҙәрем һалынған киндер тоҡсайҙы тотоп уларға ҡаршы Ғәпкәрим ауылына табан атлай инем. Ҡыуаныстан ҡанатланған ауылдаштарым, бәхеткә, минең йәшле күҙҙәремә иғтибар ҙа итмәйенсә, алға тоторолдо. Күңелем бер мәлгә икеләнеп, һыңар аяғым кирегә ҡайырылһа ла, төнө буйына йоҡламайынса уйлап ниәтләгән ҡарарымдан тайпылмайынса, юлымды дауам иттем. Бының үҙ сәбәптәре бар ине шул.

…Элгәре көн төштән һуң беҙ, өс әхирәт, бәләкәй арбаларыбыҙҙы тартып, урманға утынға барғайныҡ. Ерҙә аунап ятҡан ҡоро-һары ботаҡтарҙы йыйып, арбаларға тейәгәс, олондарынан ташып, ағып ултырған ҡайын һыуын кинәнеп һурыуға мауығып, көндөң кискә ауышҡанын һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ. Һуғыш башланғандан бирле шәкәр-шәрбәт тәменән мәхрүм йәшәгәнлектән, татлы ҡайын һыуы – Хоҙай беҙгә насип иткән зәм-зәм бит инде. Иртәгә мотлаҡ берәй һауытфәлән дә алып килеп, өйҙәге туғандарыбыҙҙы ла һыйлау ниәте менән ҡайтырға сыҡҡанда, оло юлдан көтөү килә ине инде.

Беҙҙең урамдан бәләкәй санағамы, арбағамы йөк тейәп ҡайтҡанда иң ҡыйыны – Алтынтауҙың уң ҡанаты булып һуҙылған түбәгә күтәрелеү. Тимер тәгәрмәсле булғанлыҡтан, бәләкәй арбам былай ҙа ауыр, ә инде йөк тейәгәс, ошо үрҙе яулау уғата ҡыйын. Шуға өҫтәп үҙемдең дә әхирәттәремә ҡарағанда бәләкәсерәк, сибек булыуымды иҫәпкә алғанда, юлдаштарыма мин бер йыбытҡы булам да артта ҡалам. Әхирәттәрем тәүҙә үҙ арбаларын үргә мендереп ҡуялар ҙа миңә ярҙамға төшәләр. Унан һуң инде арбаларҙы елдереп кенә түбән төшәһе лә үҙ йорттарыбыҙға инәһе генә ҡала. Утынлы арба ҡапҡанан инеүгә йортҡа ҡот ҡунғанды күреп, иркен тын алаһың.

Был юлы шулай арбамды ҡуйып, шөкөр итергә лә өлгөрмәнем, асыуынан ҡыҙарып-бүртенгән яндырай холоҡло үгәй әсәйем өйҙән сыҡты ла, бөтә йортҡа яр һалып, минең бер ҡосаҡ утын өсөн ярты көн юғалып йөрөүем өсөн әрләргә

кереште. Көнө-төнө колхоз эшендә йөрөп, бала-сағалы йорт-ҡураны ла, малтыуар мәшәҡәттәрен дә үҙ елкәһендә һөйрәүсе әсәйҙең мин йыбытҡыны эткә һалып тиргәүе тәү тапҡыр ғына түгел. Бәлки, ул шулай туҙыр ҙа туҡтар, ә мин бер илап алыр ҙа әкренләп онотор инем. Тик беҙҙең йорттағы янъялды ишетеп торған ситән аша күршебеҙ, үҙе лә биш бала әсәһе Хәҙисә апайҙың:

– Ҡуйсы, Фәрҙиә, урмандан йөк тартып ҡайтҡан балаға шулай ҡаты ябырылыу ярамай ҙа. Ул үҙенсә тырышҡан бит, – тип мине яҡлашыуы күңелемдәге әрнешеү, йәберһенеү быуаһын йырҙы ла ебәрҙе. Бәләкәй арба эргәһенә ултырҙым да киндер күлдәгемдең итәгенә йөҙөмдө ҡаплап иланым. Бына шунан һуң инде мин бығаса кескәй Рәшит менән Рифҡәт ҡустыларымды ҡараусыһыҙ ҡалдырырға баҙмай икеләнеп йөрөүемдән арынып, күптән үҙ эргәһендә йәшәргә саҡырған апайыма китергә булдым. Ул уҡыуымды ташлатмаҫҡа вәғәҙә иткәйне.

...Өфө үҙәгендәге фатирымда стенала мәшһүр рус рәссамы К. Маковскийҙың «Йәшенле ямғырҙан ҡасыусы балалар» тигән картинаһы эленеп тора. Һәр кемгә таныш был картинаны өйгә килеүселәр ҙә яратып ҡарай. Ә миңә ул ҡустыларымды яурыныма аҫып йөрөгән бала сағымды хәтерләтеүе менән ҡәҙерле. Бер тапҡыр илле йәшенән үткән Рәшит килгәс, әлеге картинала үҙенең бала сағын иҫләгәндәй итеп ҡарап торғанда, мин ҡустыма:

– Анауы апайының яурынына йәбешкән сабый һин инде ул, ҡустым. Һеҙҙе шулай яурыныма артмаҡландырып йөрөтә торғас, өҫтөмдәге киндер күлдәгемдең иң элек елкә яғы туҙып һыҙырыла торғайны,– тинем.– Тик мин ғүмерем буйына өйҙә һеҙҙе ташлап киткәнем өсөн үҙемде хыянатсы итеп һанап, әрнешеп йәшәнем. Минең ул саҡтағы ҡылығыма һеҙ нисек ҡарағанһығыҙҙыр, белмәйем, тик хәҙер булһа ла бының өсөн ғәфү итһәгеҙ икән?..

Бер килке уйланыбыраҡ торғандан һуң, Рәшит ҡустым:

– Әгәр шул саҡта китмәй ҡалһаң, яҙмышың бөтөнләй бүтәнсә булыр ине, моғайын, китеп дөрөҫ иткәнһең, апай,– тип күңелемдәге ауыр ташты алып ташлағандай итте.

Бөтәгеҙҙе лә оло байрам менән!

**Радик ХӘКИМЙӘН,**
*шағир, Башҡортостандың*
*атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре*

– Мин Башҡортостандың Ҡыйғы районы Үрге Ҡыйғы ауылында 1941 йылда донъяға килгәнмен. Әсәйем Файза Шәрифулла ҡыҙы колхозда эшләне. Атайым 29 йәшендә һөйөклө ҡатынын, 2 балаһын ҡалдырып, броне булһа ла, үҙе теләп фронтҡа китә. Көнбайыш фронтында, Калинин фронтында артиллерист булып ҡатнаша. Баш ҡалабыҙ Мәскәүҙе обороналауҙың алғы һыҙығында була. 1943 йылдың башында ҡаты алыштарҙың береһендә батырҙарса баш һала. Калинин өлкәһендә ерләнә.

Атайым фронтҡа киткәндә 5 айлыҡ сабый булғанмын. Уны бары тик фотолар аша ғына танып беләм. Тәбиғи, бала сағым ауыр йылдарға тура килде.

Әсәйем һәм беҙ аслыҡтан үлмәҫ өсөн көрәштек. Ҡышын өйҙәр һалҡын, тәҙрәләрҙе боҙ ҡаплай, утын етмәй, барын һаҡлап ҡына тотонабыҙ. Төп ризыҡ булған картуф яҙға ҡәҙәр етмәй ине. Шуға ла, ҡар иреп бөтөү менән, баҡсалағы ҡара ерҙән үткән йылда тороп ҡалған серек картуфтарҙы йыйып, кәлйемәләр яһап, ҡырҙа ҡалған башаҡтарҙы берәмләп сүпләп ҡыҙҙырып ашаныҡ, йәйҙәрен төрлө үләндәрҙән: кесерткән, балтырған, алабута, ҡаҙаяҡ, ҡаҡы, йыуа һ.б. көпшәләрҙән аш бешерә инек.

Еңеү көнө хәтергә һеңеп ҡалған. Ауылыбыҙҙа ҡаршылаған беренсе һалдаттар ҙа иҫтә. Күршебеҙ Ғирфанов Закирйән ағай май айында һуғыштан ҡайтты, күкрәгендә миҙалдар, арҡаһына һалдат тоғо аҫҡан, гимнастерка, итек кейгән. Беҙ урамда уйнап йөрөй инек. Ул ҡыҙы Регинаны һөйөп күкрәгенә ҡыҫты, аҙаҡ бер нисә ҡабат күккә сөйҙө. Һәм шул ваҡыт атайҙың янда юҡлығы йәнде әрнетте, әллә ниндәй уйҙарға һалды. Бик ҡатмарлы хис был. Шуға ла ул көндән бер ваҡытта ла китмәне, китмәҫ тә…

Һуғыш тамамланыуы оло шатлыҡ булһа ла, беҙҙең ғаиләгә әллә ни еңеллек өҫтәмәне. Атайыбыҙҙы, бәлки, ҡайтыр, тип күпме көттөк – ул мәңгелеккә «ҡайтмаҫҡа» ҡалды. Уның бер туған ағаһы Хәкимйәнов Шакирйән Хәкимйән улы ла һуғышта һәләк булды, уның 4 балаһы үҫте. Атайымдың бер туған апаһы Хилажетдинова Зәкиә Хәкимйән ҡыҙының тормош иптәше Хилажетдинов Зәйнетдин еҙнәм һуғыштан аяғы ҡаты яраланып, инвалид булып йәшәне. Яҡыныбыҙ Фәйрүзов Закирйән Фәйрүз улы ла ауыр яралар менән ҡайта. Әсәйемдең бер туған апаһы Бибикамал әбейемдең тормош иптәше Ғималетдинов Әғзәм бабай «трудармия»ла Екатеринбургта 5 йыл хеҙмәт итте, фронт өсөн ҡорал эшләүҙә ҡатнашты. Ҡатыным Валяның атаһы Зәйнетдинов Фәссәх Зәйнетдин улы ла һуғышта ғәрипләнеп ҡайтҡан, уның ағаһы Зәйнетдинов Йәмил Зәйнетдин улы Сталинградты обороналауҙа, Курск дуғаһындағы алыштарҙа ҡатнашҡан һәм шулай уҡ ҡаты яраланған. Еҙнәм Ғәбделхаҡ Ғөбәйҙуллин батыр разведчик, снайпер булған, Берлинғаса барып еткән, күкрәк тулы орден-миҙалдар тағып иҫән-имен әйләнеп ҡайтты. Һанап китһәң, бер тамырҙан 15 кеше фронтта ҡатнашҡан, шуларҙың 6-һы яу ҡырында ятып ҡалған. Хәҙер уларҙың күптәре иҫән түгел инде, ауыр тупраҡтары еңел булһын… Уйлап ҡараһаң, күпме ғүмерҙәр иртә ҡыйылған, күпме ҡайғы, күпме фажиғә килтергән был ҡәһәрле һуғыш! Ҡырҡ берҙә тыуған балалар, беҙ, ғүмерлеккә етем ҡалдыҡ,– беҙ, тип юҡҡа яҙмағанмындыр бер шиғырымда. Һуғыш йылдары балаларының да ҙур фажиғәһе ул. Ғүмер буйы етемлекте кисереп йәшәү еңел түгел!..

## *Заманаһы шундай ине…*

*Тормош беҙҙе артыҡ наҙламаны,*
*Үҫтермәне һөйөп-иркәләп;*
*Заманаһы шундай ине ул саҡ,*
*Егелдек беҙ эшкә иртәрәк.*

*Илебеҙгә ҡара ҡайғы килгәс,*
*Йырып үттек йылдар араһын;*
*Дауылдарҙа ҡалҡтыҡ беҙ, малайҙар,*
*Ямар өсөн ерҙең яраһын.*

*Яҙмыштарҙан зарланманыҡ һис тә,*
*Әрнеһә лә ҡай саҡ йөрәктәр,*
*Еңеү өсөн янып йәшәнек беҙ,–*
*Гел изгегә ине теләктәр.*

*Ауыр йылдар сыныҡтырҙы беҙҙе,*
*Бар булмышта ҡалды саткыһы.*

*Йыһанъа ла менде беҙҙең быуын,*
*Киләсәккә һипте яҡтыһын.*

*Тормош беҙҙе артыҡ наҙламаны,*
*Үҫтерәмәне һөйөп-иркәләп;*
*Заманаһы шундай ине ул саҡ,*
*Ир еткерҙе беҙҙе иртәрәк!*

**Еңеү Шакирйән улы ӘХМӘТЙӘНОВ**,
*хеҙмәт ветераны*

– Эйе, мин – Бөйөк Еңеү тиңдәше. Шуға күрә лә 9 май минең өсөн – икеләтә байрам. Быйылғыһы, әлбиттә, тағы ла күркәмерәк, тантаналыраҡ.

Бынан 65 йыл элек ишле ғаиләлә 6-сы бала булып донъяға килгәнмен. Ыҙалы һуғыштың тәүге көндәренән үк ут эсенә инеп, 1944 йылда фронттан йән һәм тән ғазаптары менән ҡайтҡан атайым, үҙенең ғәййәр яугир булыуын иҫләптерме, Еңеү байрамының мөһабәтлеген, башҡорттарҙың борондан ғәскәри халыҡ булыуын күҙ уңында тотоптормо, миңә шундай яңғырауыҡлы, тәрән мәғәнәле, ҡыҫҡа һәм ғорур исем ҡуштырған. Әлбиттә, малай саҡта үҙем дә исемемә бер аҙ ғәжәпһенә инем, дары еҫен татымаған бала-саға ла арлы-бирле ирештергеләй торғайны. Мәҫәлән: «Һинең исемең кем әле ул? Победамы?» – тип.

Урта мәктәпте тамамлағас, тыуған ауылым Амангилделә клуб мөдире вазифаһында башлап ебәрҙем хеҙмәт юлын. Байтаҡ йылдар Әбйәлил районының мәҙәниәт бүлеген етәкләргә лә, урындағы радиотапшырыуҙарҙы ла ойошторорға насип итте. Маҡтаныуҙан әйтмәйем, мин район кино селтәре директоры вазифаһын башҡарғанда Әбйәлил киносылары республикала ғына түгел, Бөтә Рәсәй күләмендә лә призлы урындарҙан ҡалманы. Шуға күрә лә һаҡландыҡта ятҡан «Социалистик ярышта еңеүсе» билдәләре, СССР Дәүләт комитеты һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре профсоюзының Үҙәк комитеты тарафынан бирелгән Маҡтау грамоталары һәм башҡа бүләктәр бик тә ҡәҙерле монаят ул миңә.

Хаҡлы ялға сығырҙан алда 10 йылға яҡын аграр сәнәғәт комплексы эшсәндәре профсоюзының район комитеты рәйесе вазифаһын да ихлас башҡарҙым. Ни өсөн? Сөнки гелән кешеләр араһында ҡайнашырға, игенселәрҙең, малсыларҙың, механизаторҙарҙың мәнфәғәтен күҙәтергә тура килде. Төрлө смотрҙар, конкурстар һәм бәйгеләр, ветерандар хоры – оноторлоҡмо ни? Ҡыҫҡаһы, районыбыҙҙың шул йылдарҙағы хеҙмәт уңыштарында минең дә өлөшөм бар, тимәксемен.

Эйе, Бөйөк Еңеү көнөндә тыуғанмын, тимәк, афәтле һуғыштарҙы күрмәй үҫкән быуын вәкиле мин. Ил-йортобоҙға, дәүләтебеҙгә тыныслыҡ яулап биргән атайҙарға, ғөмүмән, барса фронтовиктарға, тыл ҡаһармандарына бөткөһөҙ рәхмәт белдерергә, әхирәткә күскәндәренең яҡты һынын хәтерҙән юймаҫҡа бурыслыбыҙ.

**Әңгәмәләрҙе С. ФӘЙЗУЛЛИН,**
**С. ШӘРИПОВ ойоштороо.**



**Суфиян ПОВАРИСОВ**

# БЕҘ ФРОНТТАН ҠАЙТҠАНДА*

**РОМАН-ХӘТИРӘ**

**Өсөнсө бүлек**

*Әгәр һынмаһа ауырҙа ҡорос йөрәк,*
*Ил яҙмышы өсөн һәр саҡ була терәк;*
*Ҡурҡаҡ йөрәктә – меҫкен ҡуян йәне,*
*Сыр-сыу килгән мәғәнәһеҙ сәпсек тәне...*

I

"Өфө. 10 май. 2009 йыл. Хәтирәләр, хәтирәләр..." – тип теркәне "Ғаләм дәфтәре"нә профессор Пирмөхәмәтов. Алкин лагерындағы полк мәктәбендә хеҙмәт иткәндә (1942) "Көндәлек" тип атағайны уны. Һуғыш йылдарында "Фронт яҙмалары" тип йөрөтөлдө. Яуҙан һуң, мәктәп директоры булып эшләгәндә иһә – "Педагогик күҙәтеүҙәр". Унан ары "Хәтирәләр" тип нарыҡлауҙы ғәҙәткә алды. Быныһына әллә ҡасанғы (шумерҙар, скифтар, һундар, аландар, сарматтар, ҡыпсаҡтар, хатта Нух заманындағы) хәл-ваҡиғалар яҙып барыла.

Хәтере яҡшы Сәлим Шаһиәхмәт улының. Ғалим булараҡ, иллеләп телдең асылын белә (башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, уйғыр, яҡут, монгол, шор, хакас, тува, төрөк, ғағауз, караим һ.б.). Күп тел белеү уға тарихи-биографик романдар яҙғанда тормошто төрлө яҡлап, эпик киңлектә тасуирлауға ғына түгел, рухи-эстетик шәүкәтлектәрҙе илаһилаштырыуҙа ла ярҙам итә.

Һуғыш тураһында яҙылған повестарында, романдарында йөҙләгән образ-персонаждар йәки әҫәр ҡаһармандары хәрәкәт итә. Һуғыш уты һүнгәнгә 64 йыл уҙып китте бит. Романдарға йыш ҡына персонажды исем-фамилияһын үҙгәртмәйенсә индерә. Һәр береһенең йөҙө, сырайы, күҙ ҡарашы, ҡиәфәте, килбәте яҙыусының күҙ алдында. Һәр кемдең үҙ теле, үҙ телмәре, үҙ сифаты, үҙ холҡо, үҙ тәбиғәте, үҙ ҡылыҡ-фиғеле. "Ғаләм дәфтәре"нә фән һәм әҫәргә ҡараған рухиәтлектәр, ер йөҙөндә, сит илдәрҙә, үҙебеҙҙә булған хәл-әхүәлдәр, тормош-көнкүреш мәсьәләләре, күңел хазинаһындағы гәүһәрҙәр, хис-тойғолағы мәрйендәр, аң-аҡыл ынйылары мөбәрәк тәсбих төймәләрелəй теҙелә бара.

---

**Аҙағы. Башы 4-се һанда.*

Ғалим һәм яҙыусы Сәлим Шаһиәхмәт улына хәҙер 85 йәш. Ғүмер ҡояшы уның өсөн күпме балҡыр тағы? Алһыу таңдарға, көн шәфҡәтлелегенә, киске шәфәҡтәргә, зөбәржәт йондоҙҙар менән биҙәлгән зәңгәр күккә, аҡ күңелле Ағиҙел йылғаһына, моңһоу йөҙлө Димгә, шаян егет елдереүен хәтерләтеп аҡҡан Ҡариҙелгә, Урал тауҙарының ғорур балҡышына, Башҡортостандың бай, матур, гүзәл, латиф тәбиғәтенә йәнә лә күпме хозурланып ҡарап тора алыр икән әле ул? Уйҙар! Уйҙар!! Уйҙар!!! Әҙип һәм ғалим булараҡ, ана шул донъя дәүмәллеге уйҙар тулҡынына инеп китергә ярата Сәлим Шаһиәхмәт улы. Быға уны 85 йәшкә килтереп еткергән мәмләкәттең шифалы һауаһы ла, тормош быҙауҙарын ватаемерә алға ырғылыуҙары ла, халыҡ һәм йәшәйеш рухынан алынған аҡыл хосусиәте лә мәжбүр итәләр. Донъя ҡанаты Аллаһы Тәғәлә тарафынан индерелгән ҙур мөхәббәт даирәһендә елпенә. Был даирә эсендә әйбер-есемдәр араһында булған серле, йәшерен, танып-белеүе ҡыйын сағыштырыу хәрәкәт итә. Уларҙың асыл сифатын аң-аҡылға, хис-тойғоға бай әҙәми заттар ҙа һаман аңлап бөтөрә алмай. Әлбиттә, XXI быуатта донъя киңлегендә башланған компьютер заманы, бикле һандыҡтарҙың да бер ваҡыт асылырға тейешлеген аңлап, был ауыр мәсьәләләрҙең ишеген ныҡлап асып инерлек асҡыс табасаҡтар. Ә инде "иман" һүҙен иң тәүҙә әсәһе Әсмәбикә абыстайҙан ишетте Сәлим. Ул ваҡытта Сәлимгә өс йәш кенә ине. Өс йәшлек Сәлим "иман"дың "дөрөҫлөк" икәнлеген аңланы ул ваҡытта. Мулла бабай һуғыш яланында, контрһөжүмдәрҙә еңеп сыҡҡас та, алты сәғәт буйына өҫкә өҙлөкһөҙ яуып торған фашист бомбаларынан иҫән ҡалғас та, яйын табып, ошо хаҡта һөйләй торғайны. Мулла бабайҙың "иман" тигән һүҙе лә "дөрөҫлөк"кә тура килә ине.

"Иман" һүҙе, Сәлим Шаһиәхмәт улы фекеренсә, хәҙер һаман бутала бара һымаҡ. Был буталыу, Ватан төшөнсәһен аңламайынса, фашистар ҡотҡоһона бирелеп, улар яғына һыпырған башһыҙ дезертир шикеллерәктер ҙә, бәлки. Былдай буталышты һуңғы йылдарҙа тәбиғәт үҙе лә рәхимһеҙ күрһәтә башланы. Декабрь айында беҙҙең халыҡ өйөм-өйөм аҡ ҡарҙарҙы күреү ләззәтен кисерә. 2008 йылдың декабрь урталарында ялындырып ҡына төшкән ҡар бөртөктәрен дә уҫал елдәр ҡайҙалыр алып китеп юғалтты. 2009 йылдың февраль, март айҙарында ла ҡағыҙ ҡалынлығында ғына төшкән ҡар, илаҡ балалай, йәш түгергә тотондо. Май айы. Ергә йылылыҡ кәрәк. Ә ул юҡ та юҡ. Бөйөк Еңеү байрамы гөрләп үтте. 85 йәшлек Сәлим Шаһиәхмәт улын әле бында, әле тегендә осрашыуға саҡыралар. Осрашыуҙар бер көн эсендә бер нисә урында була хатта. Хәҙерге йәштәр "патриотик тәрбиә" тигәнде бик өнәп бөтөрмәй. Уның әллә ни ҡатмарлығы ла юҡ. Ябай ғына итеп әйткәндә, патриот – Ватанын һөйөүсе. Һуғыш алды йылдарында армияға китеү йәштәр өсөн ҙур бәхет һанала ине. Ҡаралыуҙың сират күперен үткәндәр түштәрен киреп, маҡтанып йөрөй торғайны. Сират күперен үтә алмағандары ғәрлектән ҡыҙарып-бүртенде.

Беҙҙең халыҡ ул йылдарҙа ниндәй генә ауырлыҡтар кисермәне: аслыҡ, яланғаслыҡ, сабата осоро, күҙ трахомы, ҡорсаңғылыҡ ғәләмәте, биҙгәк сире, тауыҡ күҙе булыуҙан ыҙа сигеү... Шулай ҙа уларҙа патриотик хис, Ватанды һөйөү, уның яҙмышы өсөн борсолоу тойғоһо көслө ине. Һалдат хеҙмәтенә атлығып тороу ҙа шуның бер хикмәтелер. Ә хәҙер нисек? Армия хеҙмәтенә бармаҫ өсөн ниндәй генә түбәнселектәр, хурлыҡтар, меҫкенлектәр һаҙына батмай йәштәр. Ә инде ата-әсә, баланы был һаҙлыҡтан ҡотҡарыу урынына, замананың алама еле тәьҫиренә бирелеп, кереһенсә, ғәзиз балаҡайын шул һаҙлыҡ батҡаҡлығына батырыу юлына баҫа. Был осраҡта ата-әсәне лә, баланы ла "алйотлоҡ ҡорбаны" тип атарға тура килә. Был алйотлоҡтоң бөтә ил даирәһенә таралыуы хурлыҡ. Аллаһы Тәғәлә һыҙып биргән юлдан Ер шары ике-өс миллиметр ғына янылышһа ла

һәләкәткә дусар булғанылай, Ватан патриоттарының патриотик аҙымы – яңылышыу – бөтә мәмләкәткә ҙур фажиғә килтереүе ихтимал.

Башҡорт дәүләт университетында этика, эстетика, педагогика, психология фәндәре уҡытыла. Алйотто алтынға биҙәп тә кеше итә алмағандай, этика-эстетика, педагогика фәндәрен уҡытыусыларҙың һүҙе, тышҡы биҙәк менән генә сикләнеп, студенттарҙың йөрәк төпкөлөнә шифа булып ята алмаймы әллә?

Шулай ҙа бөтә йәштәрҙең аҡылын ҡурҡаҡлыҡ бизмәненә һалып үлсәргә ярамайҙыр. Болон сәскәһеҙ булмағандай, Бөйөк Ватан һуғышындағы кеүек, үҙҙәре теләп армия хеҙмәтенә китеүсе батыр йөрәкле, айбарлы егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ һаман табылып тора. Ундайҙарҙы "Ватан йондоҙҙары" тип атарға ла мөмкиндер.

*Эй, дуҫҡайым, һананыңмы,*
*Күктә йондоҙ ни саҡлы?*
*Күктә йондоҙҙар ни саҡлы,*
*Беҙҙең дуҫтар шул саҡлы, –*

тип тә йырлайҙар бит. Был Ватан йондоҙҙарын ишәйтеүсе яңы йондоҙҙар күбәйәсәккә лә ышанып йәшәргә кәрәк. Шул хаҡта һөйләне Сәлим Шаһиәхмәт улы Башҡорт дәүләт университетында уҙғарылған Бөйөк Еңеү байрамы көнөндә. Ҙур зал шығырым тулы ине. Ректор, профессорҙар, доценттар, өлкән уҡытыусылар, ассистенттар, студенттар, техник хеҙмәткәрҙәр бар ине. Тантаналы йыйылышты һуғыш ветерандары рәйесе полковник Афанасьев алып барҙы. Ә юҡ, тәүҙә ректор һөйләне. Белеме буйынса ул физик-математик. Уртасанан оҙонораҡ буйлы, мөләйем йөҙлө, һөйкөмлө кеше. Физик-математик булһа ла, һүҙгә бик оҫта. Аң-аҡылына хис-тойғо ҡушып һөйләй, һәр һүҙе йөрәккә етә.

Икенсе һүҙ Сәлим Шаһиәхмәт улына бирелде. Ректорҙың ораторлыҡ сәнғәтен дауам итеү ҡыйын ине уға. Шулай ҙа 49 йыл буйы лекция уҡып сарланған телдә һүҙ төйөрө булманы. Сығыштарында ниндәй ҙә булһа бер проблема ҡуйырға ярата ветеран. Бөтә һуғыш утын күкрәге менән ярып барған яугир ни һөйләргә тейеш? Әлбиттә, патриотизм тураһында. Тик "патриотизм"ды беҙҙең заман геройҙары һаман "социализм ҡылсығы" тип атай әле. Совет власы йылдарында был ҡылсыҡты сәйнәгәндәрҙең күбеһе тамағы ярылып үлгән инде, йәнәһе. Шулай ҙа Ватанды һөйөү тойғоһо менән йөрәккә ингән "патриотизм" һүҙен урап үтә алмай ул. Һүҙҙән сәскә лә, ҡылыс та, бомба ла яһап була. Һүҙ эсендә алтын бар. Ана шул алтынды таба белергә кәрәк. Ватанға булған ҙур мөхәббәтте "патриотизм" һүҙен әйтмәйенсә лә аңлатырға мөмкин. Ленин Башҡортостанды "Икенсе Швецария" тигән, имеш. Ә бына Шаһиәхмәт улы Башҡортостанды беренсе урынға ҡуйып, Швецарияны икенсе сафҡа баҫтырҙы ла ҡуйҙы. Башҡортостандың ер аҫты, ер өҫтө байлыҡтары, гүзәллеге, матурлығы, байлығы тураһында һөйләп, уны "Донъя ожмахы" тип ололаны. Талғын ғына, сабыр ғына, ниндәйҙер эске хис-тойғоларға моңло, аһәңле, күркәм тауыш менән һөйләне. Әммә "патриот" һүҙен барыбер ҡулланмай ҡалманы. Һуңғы һүҙе студенттарға мөрәжәғәт итеү менән тамамланды: "Дорогие студенты, мы очень уважаем, любим вас. Будьте патриотами своей родины и своего народа. Тогда откроется перед вами прекрасный мир. В этом прекрасном мире большая жизнь, большое счастье, большая любовь для вас". Бөтә зал аяғөҫтө баҫты, шаулатып-гөрләтеп ҡул саптылар.

II

Был тормошта өс төрлө илаһиәткә рәхмәтле Сәлим Шаһиәхмәт улы. Беренсеһе – Алла илаһиәте. Бөтә ауырлыҡтар тулҡынындағы шаңдауға ырғытып ҡараны уны Хоҙай Тәғәлә. Шаңдауҙарҙы шартлатып өҫкә ҡалҡты Сәлим. Сыныҡты.

Барлыҡ ауыр сирҙәр батҡаҡлығында ла бәлшәймәне. Иҙрәмәне. Курск утына ырғытты уны Тәғәлә. Янманы. Днепрҙың ҡанлы һыуына батырып та ҡараны. Бер урында батырһа, икенсе ерҙән өҫкә ҡалҡты. Аллаһы Тәғәлә уны Көнбайыш Аурупа илдәрендәге һуғыш утына ла ырғытты. Янманы. Һуғыштан һуң яҙыусы һәм профессор итте уны Аллаһы Тәғәлә. Рәхмәт ғәзиз Аллаға!

Икенсе илаһиәт – кешеләр ярҙамы. Изге күңелле кешеләр рухиәтенән көс алып йәшәне ул. “Кешеләр боҙолдо”, “донъя алдауға ҡоролған”, “милләт геройы” тигән күңелһеҙ һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Быных менән дә килешергә була. Кешеләр йөрәгендәге һаҙлыҡ тәбиғәт йөрәген иманһыҙландыра бара. Аҡ менән ҡараның киҫкен көрәше осоронда йәшәйбеҙ. Мәгәр аҡлыҡ еңә килә әле. Яҡшы кешеләр һаны хәҙергә күктәге йондоҙҙар һанынсалыр, бәлки.

“Күк” тигәндән, яҡтылыҡ күктән йәки юғарынан төшә. Байрам алды көндәрендә хөкүмәт тажында ултырыусыларҙың ҡотлау хаттары ебәреүе күңел донъяһын яҡтыртып ебәрмәйме ни? Күңелде киңәйтеп, йөрәкте елкендереп ебәрерҙәй бына ниндәй матур, мәғәнәле, хис-тойғоло һүҙҙәр менән ҡотлай Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов ғали йәнәптәре.

***Хөрмәтле Сәлим Шаһиәхмәт улы!***

***Һеҙҙе күркәм байрам – Совет халҡының 1941–1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүенең 64 йыллығы айҡанлы ысын йөрәктән ҡотлайбыҙ!***

***Аяуһыҙ яуҙарҙа Һеҙ Башҡортостандың бойондороҡһоҙлоғон яҡлап алып ҡалып, Европа халыҡтарын фашист ҡоҙғондарынан азат иттегеҙ. Фронтта фиҙакәрлек күрһәтеп, Һеҙ һуғыштан һуңғы йылдарҙа ла илебеҙҙе аяҡҡа баҫтырыу һәм сәскә аттырыу өсөн күп көс һалдығыҙ. Бөгөн дә Һеҙ, хаҡлы ялда булыуға ҡарамаҫтан, илһөйәрҙәр сафында ҡала бирәһегеҙ, йәштәргә һоҡланғыс үрнәк күрһәтәһегеҙ, барлыҡ йәш быуында әхлаҡи ҡиммәттәр тәрбиәләйһегеҙ. Былар өсөн Һеҙгә ҙур рәхмәт.***

***Һеҙгә, хөрмәтле Ветеран, ихлас күңелдән ныҡлы һаулыҡ, аяҙ күк аҫтында бәхетле оҙон ғүмер теләйбеҙ! Был бөйөк байрам, Еңеү көнө – Һеҙгә яңы көс-ғәйрәт һәм матур киләсәккә ышаныс өҫтәһен!***

**Оло ихтирам менән,**
**Башҡортостан Республикаһы**
**Президенты** **М. Рәхимов.**

Юғарынан тәбиғәт яҡтылығы ла күп төшә. Ҡояш яҡтылығы. Ай яҡтылығы. Йондоҙҙар яҡтылығы. Уларҙың бөтәһе лә кешеләр күңелендәге яҡтылыҡ менән аралашып китә. Һәр үлән, сәскә, гөл яҡтылыҡҡа мохтаж булған кеүек, кеше күңеле лә даими рәүештә яҡтылыҡ өмөт итә. Кешеләрҙең бер-береһенә яҡтылыҡ нуры биреп тороуы айырыуса ҡиммәт. Быныһы – матур тормош төҙөү, эстетик йоғонто яһау, кеше, ил яҙмышын хәл итеү. Йәштәрҙе, балаларҙы тәрбиәләү өсөн кәрәк. Бына икенсе бер юғарылыҡтан килеп төшкән яҡтылыҡ:

***Уважаемый Салим Шагиахметович!***

***Примите мои наилучшие пожелания и сердечные поздравления с 64-й годовщиной Великой Победы.***

***9 Мая – эта священная дата для нашего народа праздник. Победа в мае 45-го принесла мир, свободу и независимость нашей Родины, освобождение Европы. Она дала возможность жить, спокойно трудиться и растить детей миллионам людей на Земле.***

***Тем, что день 9 Мая навсегда вписан в славную летопись Отечества,***

***мы обязаны Вам и Вашим фронтовым товарищам, великому мужеству и огромной нравственной силе всего поколения Победителей.***

***Подвиг и жизненный путь ветеранов, их великая любовь к России – всегда будут служить примером нашей молодежи.***

***Желаем Вам доброго здоровья и благополучия.***

**Президент**
**Российской Федерации Д. А. Медведев.**

Сәлим Шаһиәхмәт улы, яҙыусы булараҡ, быларҙы “яҡтылыҡ тулҡыны” тип атай. Был тулҡын, уныңса, үҙ илебеҙҙә генә түгел, бөтә ер йөҙөндә шифалы ҡанатын елпей. Ҡанаттарҙан ул кешеләр йөрәгенә күсә. Кешелеклелек, дөйөм кешелеклелек шәфәғәте булып балҡый. Сталин бер ваҡыт һуғыш йылдарында ғәрипләнгән илде аяҡҡа баҫтырыу өсөн һис юғында илле йыл кәрәк булыуы тураһында әйткәйне. Фән кешеһе булараҡ, мәсьәләнең икенсе яғын да уйлай. Ер йөҙөндәге халыҡтарҙың педагогик-психологик активлығы ла кәрәк. Бер мәлдә йүгерек уй бөтә ғаләмде байҡап ҡайтҡандай, уның ҡанатлы хис-тойғолары Ер шарындағы барлыҡ ҡитғаларҙы әйләнеп сыға. Бына уның аң-аҡылы Америка Ҡушма Штаттарындағы Берләшкән Милләттәр йортона сәйәхәт итә. Киләсәктә һуғышты бөтөнләй булдырмаҫҡа кәрәклек тураһындағы хатын ҡалдырып китә. Был хатты БМО бөтә ер йөҙөнә таратасаҡ. Шулай ҙа был уйынан кире ҡайта ул. Сөнки иманлы һүҙгә түгел, атом бомбаһына табынып йәшәгән ил төкөрәсәк ул һинең хатыңа.

Замана инсаниәте иманлы шәфҡәтлелек асылын аңлау кимәленә күтәрелә алмаған әле. Нисек кенә булмаһын, изге күңелле кешеләргә рәхмәте ҙур Сәлим Шаһиәхмәт улының.

Өсөнсө илаһиәте – хеҙмәт. “Бер бот бойҙай эсендә крәҫтиәндең бер бот тире бар”, – ти ауыл халҡы. Был ғибәрәлә крәҫтиәндең гигант хеҙмәте лә, батыр йөрәге лә, титаник күңеле лә, халыҡ, Ил, Ватан өсөн төйнәлгән эстетик идеалы ла, кешелеклелек мәнфәғәтен аң-аҡылы менән аңлау иманы ла бар. Был хаҡта француз яҙыусыһы Анатоль Франс та (1844 –1924) әйткән бит: “Труд лучшее лекарство, нравственное и эстетическое.”

Хеҙмәт “аҡ” һәм “ҡара”ға бүлеп тә ҡарала. Эстетика, Шаһиәхмәт улы уйлауынса, уларҙың икеһендә лә бар. Эстетик тойғоно бирәү “аҡ”тан, икенсе кеше “ҡара”нан таба. Ләкин быны ла аңлау дәрәжәһендә тормайбыҙ әле беҙ. Әгәр элекке крәҫтиәндең эстетикаһы бер бөртөк бойҙай эсендә икән, Рәсәй киңлектәрендә сәселмәй ятҡан, сүп баҫҡан баҫыу хужаларының эстетикаһы нимәлә икән бөгөн? Тарих та, Аллаһы Тәғәлә лә ғәфү итмәҫлек ҡара хәл, иманһыҙлыҡ бит ул.

Бына нимә ти Н. Добролюбов: “Уничтожение дармоедов и возвеличивание труда – вот постоянная тенденция истории”. Ысынлап та, “дармоед”тар хеҙмәт эстетикаһын аңламаған алйоттарҙан килеп сыға. Ауылдашы дезертир Мәхмүт – шундай хәсистәрҙең береһе. Дөрөҫ, үлем язаһы биреүгә Сәлим-судья ҡаршы булды ул саҡ... Шулай ҙа уның уй-хисе дала еле ише генә түгел ине. Хәҙер ҙә бит үлем язаһын ҡулланыу-ҡулланмау буйынса күп илдәрҙә етди бәхәс бара. Был – бер мәсьәлә. Икенсеһе, Шаһиәхмәт улы уйлауынса, тағы ла ҡурҡынысыраҡ. Сәселмәй ятҡан әлеге ерҙәрҙә, сүп менән бергә ҡатнашып, яңы “дармоед”тар ҡалҡмаҫмы?

Уйҙарҙың ағынан башлайһың, ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырғандай, ҡаралары килеп ҡушыла. Еңеү байрамы. Тантана. Сәлим Шаһиәхмәт улы, башҡа фронтовиктар шикелле, еңеү ғорурлығы кисерә. Дөрөҫ, күҙҙән ҡайнар йәштәр

килгән саҡ та була. Һуғыш уты ҡайнарлығылыр ул, бәлки. Шул ҡайнарлыҡта дезертир Мәхмүт кеүектәрҙең сағылып китеүе генә күңелһеҙ хәл. Ваҡыт-ваҡыт ағы ла, ҡараһы ла булып бөтә. Бутала-бутала, ҡараһы төпкә бата, ағы өҫкә ҡалҡа. Был юлы ла шулай булды. Дезертир Мәхмүт төпкә батты, мөхәббәте – мадъяр ҡыҙы Гизелла өҫкә ҡалҡты. Гизелла! Дунай бассейны далаларында гүзәл ҡолондай уйнап үҫкән аҡ сәсле, йәшкелт-зәңгәр күҙле, һыу ҡыҙылай сибәр Гизелла!..

... Мулла бабай һуғышсыларҙың күңелен күтәреү өсөн изгелек фәрештәһенә ҡаршы көрәшкә сыҡҡан яуызлыҡ фәрештәһе хаҡында ла фекер әйтмәйенсә ҡалмаҫ ине. Бының менән ул тәбиғәттәге, ғаләм киңлектәрендәге, кешеләр араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы һиҙҙерергә тырышты шикелле. Ҡурҡмағыҙ, ауырлыҡ артынан еңеллек килмәйенсә ҡалмай ул, йәнәһе. Бөгөн дә йәшәйештең серле рухиәте шаңдап алды. Дезертир Мәхмүтте хәрби трибуналға алып киткән машина артынан ҡарағусҡыл төтөн борхоп ҡалғайны. Был – яуызлыҡ. Берәүҙәр – “ҡотолдоҡ был ил ҡортонан” тип уйлаһа, икенселәр “донъя шаҡшаҡлыҡтан шулай таҙара” тип фекер йөрөтһә, өсөнсөләр “ит эҙләгән алйот эт ана шулай ҡоро һөйәк таба” тип тел шартлатты.

Ватан хыянатсыһын алып киткән ҡара машина күҙ алдынан юғалыу менән, икенсе яҡтан мадъяр ҡыҙы Гизелланың ҡояштан балҡып килеп сығыуы донъяларҙы яҡтыртып ебәргәндәй тойолдо. Сәлим, һалмаҡ ҡына атлап, уны ҡаршыларға китте. Башта улар ҡул ҡыҫышып, унан һуң ҡосаҡлашып күрешкәс, Ауропа менән Азия ҡушылып, гүзәл, мәртәбәле, Ер шарында иң матур яңы бер ҡитға барлыҡҡа килгәндәй булды.

Гизелла хәҙер көн дә тиерлек килеп тора. Бәғзе көндө Сәлимде алып уҡ китә. Ҡай саҡта Сәлим уны оҙатып ҡына ҡуя. Ни өсөн? Ниндәй серле мөхәббәт ул!? Һөйләтергә Рәйес ныҡышып ҡараһа ла, ҡул һелтәп кенә ҡуя Сәлим. Ә демаштар араһында ғәйбәт һүҙҙәре күп. Гвардия старшинаһы Пирмөхәмәтов Көнбайыш Аурупала бөтөнләйгә ҡала, имеш. Ул мадъяркаға һатылған. Мадъярка уға алтын һарай вәғәҙә итә, ти. Алтын һарай эсендә алтын бәхет менән йәшәйәсәк. “Алтын аҡылын алтын бәхеткә һатып яңылыша тубал баш”,– тип әрнеүселәр ҙә бар.

Сәлим менән Гизелла мөхәббәтен яҡшы белә Трапезников. Сөнки, Трапезниковтың яҡшы күңелле офицер икәнлеген аңлап, барыһын да уға түкмәй-сәсмәй һөйләп биргәйне. Капитан Корнышевҡа был хаҡта Трапезников әйткәйне. Сәлим Трапезниковҡа яҡташ булараҡ яҡын. Сәлимде Корнышев та ярата. Әле Корнышев полк тарихын даими рәүештә юғарынан ҡушыу буйынса яҙып барһа, Сәлим көндәлектәр менән мәшғүл ине. Шулай итеп, улар бер-береһен тулыландыра. Ә инде мөхәббәт мәсьәләһенә килгәндә, уны аңлатыр өсөн ҡоштар, хайуандар донъяһына инеп китергә кәрәктер. Капитан Соколов – ҡоҙғон. Старшина Сәлим – ҡара ҡарға. Ҡоҙғондоң есмәни көсө бер ни ҡәҙәр бөркөттөкөнә тартым. Хәйләкәрлек яғынан ул төлкөгә оҡшай төшә. Нисек кенә булмаһын, Соколов суҡырға ярата торған зат. Мәгәр йәшерен суҡырға, серле суҡырға, һиҙҙермәйенсә суҡырға. Ә Сәлимде ҡара ҡарғаға оҡшата Корнышев менән Трапезников. Тимәк, мадъярка Гизелла ҡоҙғон менән ҡара ҡарға араһында ҡалды. Соколовҡа хәҙер мадъярканы суҡыу бер ни тормай. Уны суҡығас, Сәлим Пирмөхәмәт (ҡыҫҡартып, уны шулай тип кенә йөрөтәләр) кикереген шиңдереү бәрәңге ашау кеүек еңел буласаҡ. Хәйер, был ауыр барьерҙы еңеләйткән дә инде Соколов. Гизелланың ауырға ҡалыуы тураһында әллә ниндәй ғәйбәт һүҙҙәр йөрөй. “Өйләнгән икән” тигән шайтанлы хәбәрҙәр ҙә ишетелә.

Ватан һуғышы донъя халҡына күп нәмәләрҙе аңларға, танып белергә ярҙам итте. Донъяны ағыулы ҡара пәрҙә менән төрөргә хыялланған фашизм ҡоҙғондарын сәнселдереүгә Совет Армияһының ғына көсө етәсәк ысынбарлыҡҡа

төшөндө. Совет Армияһын йыртҡыс тип атаған Гитлер шарлатанының шартлап ярылыуын һуғыш бөткән көндө үк һиҙҙе. Америка һәм Англияның ялған дуҫлығы фаш ителде. Совет Армияһының изге һуғыш һулышы менән көрәшеүсе ысынлығы халыҡ күңеленә генә түгел, зәңгәр күк йөҙөнә лә яҙып ҡуйылды.

Шулай уйлай капитан Корнышев. Шул уйҙар араһында бик боронғо ата-бабаларыбыҙҙың “Мөхәббәт утта ла янмай, һыуҙа ла батмай” тигән ғибәрәһе Прометей уты урынына дырылдап әйләнә башлай. Уның шулай икәнлеген үҙ ҡанындағы тоҙо менән дә тойҙо Корнышев. Бер үк ваҡытта һуғыш утындағы мөхәббәттең ғәййәр ҡайнарлығы башҡа икәнлекте лә аңланы. Һуғышҡа ул кадровый офицер булараҡ килде. Оҙон буй, бөгөлөп-һығылып торған һөлөктәй кәүҙә, үткер ҡараш. Йылмайғанда ирендәрендә уҫаллыҡ сатҡылары һиҙелеп ҡала. Полктың разведчиктар взводы командиры итеп ҡуйҙылар үҙен. Ставка ҡарамағындағы 469-сы миномент полкында ҡатын-ҡыҙҙар күп түгел ине: полктың баш табибәһе Нина Андреевна, санинструкторҙар, телефонсылар, атырға мина әҙерләп тороусылар… Шуларҙың береһенә– сибәр, аҡыллы, хис-тойғоларға бай капитан Нина Андреевнаға ғашиҡ була Корнышев.

Бәғзе ваҡытта мөхәббәт өсөн көрәш фронтта Сталин менән Гитлерҙыҡынан кәм булмағандыр. Нина Андреевна, бер яй табып, полк командиры подполковник Чернявскийҙың ҡайнар ҡуйынына һыйына. Хәҙер капитан Соколов менән старшина Пирмөхәммәт араһындағы мадъяр ҡыҙы Гизелла мөхәббәте ҡыҙыҡһындыра Корнышевты. Мөхәббәттә көслөләр еңә. Был көслөлөк өсөн һанап бөткөнөҙ ыңғай сифаттар кәрәк: сибәрлек, аҡыл, етди булыу, кешелеклелек, тәртип, һөйә белеү … Уларҙың бөтәһе лә старшинала бар шикелле. Фронтҡа кергәндә ҡуяндай ҡурҡаҡ һалдат кеүегерәк тота ине үҙен. Ә инде һуғыш бөткәндә егет арыҫланына әүерелде. Ҡыҫҡаһы, еңә белә. Ә бына мөхәббәттә бөркөт Соколов ҡара ҡоҙғон булып ҡалырға ла мөмкин әле. Мөхәббәт изге кеше күңеленә Алла тарафынан бирелә, ти бит.

III

Дезертир Мәхмүтте алып киткәс, демаштар күңеленә төшкән томан һаман күтәрелмәгәйне. Тик демаштарҙың иртәгеһе көнө ниндәй ғәләмәт менән башланырын белмәгән сиғандар шикелле йәшәүе оҡшамай Корнышевҡа. Урманда ғүмер кисергән өйөр малдың да бер етәксеһе була. Ә бит былар – кешеләр. Еңеүселәр. Көнбайыш Аурупаға азатлыҡ алып килеүселәр. Уларға хәҙер ниндәйҙер тәртип урынлаштырыу тураһында нотоҡ уҡыу ҡыйын, ә шулай ҙа кәрәк. Еп үҙенән-үҙе сыуалмай. Уны кешеләр сыуалта. Демаштарҙың да сыуалып китеүе мөмкин. Шуны һиҙгәндәй, демаш Әҡсәндең аккордеон тауышы яңғыраны. Ул уйнай-уйнай килә ине. Капитан Корнышев янына килеп еткәс: “Һағынам тыуған илемде” – Сәлим Пирмөхәмәт һүҙҙәре һәм уның көйө”,– тине лә гармунын йәнә һайратырға тотондо. Был йырҙы бөтәһе лә ятлап алғайны инде. Бер нисә мәртәбә йырланылар уны. Ә бөгөн тыуған илдәренә оҙата торған эшелондың етәксеһе Корнышев алдында ул тағы ла нығыраҡ яңғыраны.

*Киткән инек илдәр үтеп,*
*Аҡ ҡайынды билге итеп;*
*Иҫән булъас, беҙ ҡайтабыҙ,*
*Тыуъан-үҫкән ил итеп…*
*Һаъындыҡ юлдарыңды.*
*Беҙ ҡайтабыҙ фашист еңеп,*
*Ҡаршыла улдарыңды.*

Корнышев үҙе Куйбышевтан. Бер апаһы Өфөгә тормошҡа сыҡҡас, йыш була ул тау башында балҡып торған был ҡалала. Йәйҙәрен шунда үткәрә. Ағиҙел,

Дим, Ҡариҙел йылғаларында  йөҙөргә ярата. Башҡорт балалары менән дуҫлашыу уларҙың телдәренә йылы иғтибар  уята.  Әле лә бына йырҙың  аталышы ла, һүҙҙәре лә, моңо ла күңелен ҡанатландырып ебәрҙе. Ә инде Сәлим һүҙгә-һүҙ тәржемә итеп биргәс, “молодец!” тип арҡаһынан һөйөп ҡуйҙы.

– Бына был йырыңды дезертир ауылдашыңа йырлап күрһәтергә кәрәк, – тине ул.

– Йырланыҡ беҙ уны, иптәш капитан!

– Һуң?

– Үкенгәнлеге һиҙелеп тора.

– Шуның өсөн үлем хөкөмөнә ҡаршы булдыңмы?

– Уныһы ла бар… Башҡаһы ла…

– Башҡаһы ниндәй икән?

– Киләсәктә үлем хөкөмө бөтөрөләсәк.

– Ҡайҙан беләһең?

– Мулла бабай әйткәйне…

“Һағынам тыуған илемде”не йырлағас, Әҡсән “Әпипә”не һыҙҙырырға кереште. Башта бейеү майҙанына Сәлим Пирмөхәмәт һикереп төштө. Һәр ваҡыттағыса ярһый-ярһый, аяҡтары менән генә түгел, ялҡынлы йөрөгө, ҡайнар хис-тойғоһо менән һикерә-һикерә бейене. Демаштар уның аяҡ хәрәкәтендәге ритмына тура килтереп ҡул сабырға тотондо. Тап шул ваҡыт бер машина килеп туҡтаны. Машинанан 469-сы миномет полкы командиры полковник Исхаҡов килеп сыҡты. Ә бейеү дауам итте. Майҙанға әле береһе, әле икенсеһе сыға. Бейей белмәгәндәр ҙә ҡушылып китә.

Исхаҡов башта бейеү тамашаһына ҡыҙыҡһынып ҡарап торған Корнышев һәм Трапезников менән килеп күреште. Унан башҡалар менән ҡул болғап иҫәнләште. Һалдаттар ярата ине Исхаҡовты. Башта, капитан сағында, 1-се батарея командиры булды. Мәгәр ябай ине, ауыр ваҡыттарҙа ла, үс иткәндәй, шарҡылдап көлөргә ярата торғайны. Алдашыуҙы ене һөймәне. “Прямо скажу” тип маҡсат утын йоҙроғо осонда уйнатып, күкрәк киреп һөйләште. Төҫкә сибәр булмаһа ла, матур йылмая белеүе, асыҡ йөҙлөлөгө, эскерһеҙлеге, минометтан атыу эстетикаһын яҡшы үҙләштереүе һуғыш бөткәнсе уны полковник дәрәжәһенә еткереп, полк командиры итте. Һуғыштан һуң хәрби академия ишеген шаҡымаҡсы ине. Әле уға демаштарҙы тыуған илдәренә оҙатыу бурысы йөкмәтелгән. Кем тарафынан? Был хаҡта һөйләп торманы. Офицер үҙенән түбәндәгеләргә йөрәк серен һәр ваҡыт асып һалырға тейеш түгел. Тик бик күңелһеҙ хәлде әйтмәйенсә ҡалманы.

Һуғыш бөткәс, ҡарт һалдаттарҙы өйҙәренә шундуҡ оҙата башланылар. Беренсе оҙатыуҙа уҡ, Рәсәй еренә етәрәк, һалдаттар эшелоны менән икенсе бер эшелон, тамуҡтан ысҡынған зобаниҙарҙай аҡырышып килеп, бер-береһе менән һөҙөшәләр ҙә ҡуялар. Эшелондар рельстарҙан ысҡынып, селпәрәмә килә. Күптәр харап була. Һуғышта батырлыҡтар күрһәтеп, һағыныу уты менән яна-яна ҡайтҡан йөрәктәр, шулай итеп, сит-ят тупраҡта ерләнә.

Ҡан ҡойғос һуғыш уты һүнде. Фашизм тар-мар ителде. Донъя иркен тын ала. Һай, әттәгенәһе! Улай уҡ түгел икән шул.

Ҡан ҡойошло һуғыш уты ялҡыны һүнгәнгә шатланабыҙ. Ә бит көл аҫтында ялҡындың осҡоно ла ҡалыусан. Ҡырыҫ еле иҫеп, ул осҡондо йәнә ялҡынға әйләндереп ебәрә ала. Һуғыш бөткәс, Америка Японияны атом бомбаһы менән ҡойондорҙо. Англия Өсөнсө империалистик һуғыш тураһында баш вата. Ана ҡайҙарҙа йәшеренеп ҡала гүзәл гөл-баҡса эсендәге ағыулы сәскә орлоҡтары.

Беҙ был хаҡта тәрән аң-аҡыл, йөрәк хис-тойғоһо менән, фекер йөрөтөү офоҡтарыбыҙҙы киңәйтеп уйлай белмәйбеҙ әле. “Фашизмды тонсоҡторҙоҡ” тип оран һалабыҙ. Бер нәмә лә бөтөнләйгә тонсоҡмай. Әлеге зобани үләндең йәшерен

ятҡан орлоғолай, иманлы кешеләр ҡарашынан ҡасырға тырышып, ҡайҙалыр ғүмер кисереп ятмаҡта ул. Ике поездың тамуҡ уттары ялҡынын сығара-сығара сәкәшеп харап булыуы фашизмдан ҡалған мәкерлек осҡононоң яңы ҡырыҫ еле өрөүе шауҡымы ине. Тикшереү оҙаҡҡа һуҙылды. Әммә асыҡлай алманылар. Бер илдән икенсе илгә кешеләр оҙатыу эшелонға бәрәңге тейәп ебәреү генә түгел ул. Ошо хаҡта һөйләйәсәк полковник Исхаҡов.

"Суд" мәсьәләһенә туҡталасаҡ бер аҙ. Был хаҡта Корнышевҡа ла, Трапезниковҡа ла әйтте. Демаштарҙы хәрәкәтһеҙ ятҡырмаҫҡа кәрәк. Хәрәкәттә – бәрәкәт. Был эшкә гвардия старшинаһы "Герой"ҙы ла егергә кәрәк. Ә нисек? Шуны асыҡлар өсөн өс офицерға Сәлимде лә үҙ яндарына саҡырырға тура килде.

Баҡһаң, Сәлим бында шаҡтай шөғөлләнә икән. Иртәнгелекте ашағансы гимнастика эшләп алыу, көндөҙ бергәләп гәзит-журналдар уҡыу, ҡараған фильм буйынса бәхәстәр ойоштороу, шуларға оҡшаш башҡа мәшәҡәттәрҙе һанап бирҙе старшина. Артыҡҡа киткәс, ҡәнәғәт рәүештә "етте" тигәнде аңлатып, Сәлимдең арҡаһынан һөйөп ҡуйҙы Исхаҡов. Унан һуң демаштарға әйтәһе килгән йөрәк һүҙҙәре тураһында уйланды. Әлеге ике эшелондың сәкәшеүе арҡаһында барлыҡҡа килгән фажиғә тураһында күп һөйләмәне ул. "Аң булығыҙ, кәзә бәшмәгенә әүерелә күрмәгеҙ, һалдат йылғырлығы һәр аҙымда кәрәк" тигән төшөнсәләргә бер аҙ ҡатылыҡ ойотҡоһо ғына өҫтәп ҡуйҙы. Ә инде суд мәсьәләһенә оҙағыраҡ туҡталды. Дөрөҫ, донъя яралғандан бирле әйбер-есемдәрҙә ыңғай һәм кире зәррәләр ҡапма-ҡаршылығы хәрәкәт иткәндәй, суд эштәре тарихында ла шатлыҡлы һәм ҡурҡыныс ваҡиғалар яғалашыуы тураһындағы борсаҡты күберәк тә сәсте ул. Шатлыҡлыһы – судтың дөрөҫлөктө өҫкә сығара белеүе, ҡурҡынысы – бигерәк тә кеше яҙмышы хәл ителә торған хөкөмдәрҙә дөрөҫлөктөң төпкә батып ҡалыуы. Шуға бәйле рәүештә фронттың ҡайһы бер подразделениеларында ойошторолған "Офицерҙарҙың намыҫ суды" хаҡында ла демаштар бигүк белеп бөтөрмәгән фекерҙәр әйтте. "Ҡайһы бер" тигәне шуға бәйле. Әйтәйек, 469-сы миномет полкы туранан-тура Юғары Башкомандующийҙың үҙенә буйһона ине. Ҡыҫҡаһы, полк уның ҡәләм осонда эленеп торҙо. Ҡайһы ҡайнар урынға ут күп кәрәк, Сталиндың ҡәләм осо шунда барып төртөлә. Шул урынға 469-сы полктың миналары бер-бер артлы яуа ла башлай. Бының өсөн сержант Пирмөхәмәтов етәкселегендә һынау атыуы үткәрә торған комсомол-йәштәр расчеты төҙөлә. Йәштәр мәргән атыу сәнғәтен тиҙ үҙләштерә. Расчет командиры Пирмөхәмәтов "миномётсы-снайпер" тигән дан ала хатта. Ул әләктергән сәп буйынса ваҡыт-ваҡыт үҙ батареяһы ғына түгел, бөтә дивизион, ҡай саҡ полк ата хатта. Тау дәүмәллеге ауырлыҡтар тейәлә Пирмөхәмәтов яурынына. Дошмандың бер урындағы ут позицияһын тар-мар иткәс, әлеге ҡәләм осо уларҙы икенсе ергә күсерә. Көнөнә биш-алты ут позицияһы алыштырған саҡтар ҙа була. Тау өҫтөнә тау һалғанға беренсе тауҙың биле һынмағандай, бер-бер артлы тейәлеп торған ауырлыҡтар Пирмөхәмәтов расчетын ергә дыңҡыта алманы. Был расчет тәжрибәһе, полк тәртәһе эсенә генә һыймайынса, башҡа фронттарға ла таралды. Сөнки шунһыҙ мөмкин түгел ине. Ул – Ставка ҡарамағындағы полк. Юғары Башкомандующий уны Башҡортостан ерендә махсус ойоштора. Шуға күрә "Башҡорт полкы" тип атала ла ул.

Ҙур яуаплылыҡ илаһилығы ҡыҫаһына килеп әләккән былдай айбарлы полктың офицерҙары ниндәй булырға тейеш һуң? Хәрби техниканы "отлично"ға үҙләштереү генә түгел, уларҙан юғары намыҫлылыҡ та талап ителде. Шуларҙы үтәмәгән офицер "намыҫ суды" алдына килтереп баҫтырылды.

Шуға бәйле рәүештә, демаштар судына юғары баһа бирҙе полковник. Былдай осраҡта фекерҙәрен мәҡәл-әйтем менән баҫтырып ҡуйырға ярата торғайны ул. Был юлы ла шулай итте:

– Ата һаҡалы менән уйнаған бала – ата ҡарғышы, Ватан һаҡалы менән

уйнаған бала ил ҡарғышы ала, тип әйтә ҡарттар Өфө яҡтарында. Башҡорт полкынан бер дезертир сығыу күңелһеҙ хәл, әлбиттә. Ә бына һеҙҙең шуға үҙегеҙ суд яһауығыҙ халыҡ патриоты икәнлегегеҙҙе күрһәтте. Һеҙ ил намыҫы, Ватан намыҫы исеменән эш иткәнһегеҙ. Демаштар суды, демобилизацияланған һалдаттар суды... Тарихта ындай хәлдең булғаны юҡ әле. Былдай изге эшегеҙ ниндәй урында башҡарыла бит әле? 1812 йылғы Ватан һуғышында Ҡаһым түрә Парижды алырға барғанда ла, алғас ҡайтҡанда ла Австрияның ошо урынында туҡтала. Тимәк, ошо урында башҡорт халҡының тарихи батырлыҡ төгөн ҡалдыра. Тарих быға тиклем күрмәгән был ҡаты һуғыштан һуң һеҙ был төктө ҡаһарманлыҡтың яңы айбарлылығы менән биҙәнегеҙ. Тарих һеҙҙе онотмаҫ, был батырлыҡтар тураһында киләсәктә ҡалын-ҡалын романдар яҙылыр. Ә инде дезертир тураһында шуны әйтәм: "Ил ҡарғышы намыҫты ҡартайта, ғүмерҙе тарайта". Иң ҡаты яза биреү тураһындағы суд ҡағыҙын алып китеп, мин уны хәрби трибуналға тапшырасаҡмын.

Һеҙ әле һалдат погонын ташламағанһығыҙ. Һалдат ҡайҙа ла һалдат булып ҡалырға тейеш. Һеҙ шуның матур бер өлгөһөн күрһәттегеҙ. Аңлайым: һағынғанһығыҙ. Күп ҡалманы. Мин һеҙҙе Мәскәүгә хәтле оҙата барам. Ярҙамсыларым – капитан Корнышев, капитан Трапезников...

***

Фронтта ла һалдаттар һәр офицерға ҡушамат тағырға ярата торғайны. Был атамала командирҙарҙың ҡылыҡ-фиғеле, эске рухи һәләте, үҙ-үҙен тотошо, ыңғай һәм кире яҡтары иҫкә алына. Мәгәр атаманы һуғышсылар бер һүҙ менән генә бирә. Әйтәйек, Исхаҡов маңлайға бәреп, кешенең күҙенә, йөҙөнә туп-тура ҡарап әйтеүҙе ҡулай күрә. Быны уның "прямо скажу" тип һөйләшеүе лә раҫлап тора. Шуға күрә уны Прямой тип атанылар.

Корнышевтыҡы – Горячий. Ул тиҙ генә уттай ҡыҙып китеүсән. Бер ваҡыт полк командиры майор Чернявский менән яғалашып ала хатта. Был күңелһеҙ хәл 1943 йылдың 11 июлендә була. Курск дуғаһында һуғышҡанда Башҡорт полкы был көндө немецтарҙың контрһөжүменә ҡаршы атырға тейеш. Ә миномётсылар алдына беҙҙең пехота ла, артиллеристар ҙа ҡуйылмаған. Һөҙөмтәһе яман: контрһөжүмдең утлы дауылына ҡаршы миномётсылар ғына көрәшә. Утлы дауыл беренсе көндө үк миномётсыларҙың бик күп хәрби көстәрен, кешеләрен харап итә. Полк командиры, үҙен һөттән аҡ, һыуҙан пак күрһәтеп, һуңынан бөтә ғәйепте Корнышев өҫтөнә яба. Һуңынан ныҡлап тикшереп ҡараһалар, полк командиры Корнышевҡа батареяларҙы ҡайҙа урынлаштырыу бойороғо бирмәгән булып сыға. Ҡыҙыу ҡанлы Корнышев полк командирының яғаһынан ала. Шунан һуң Корнышевҡа "Горячий" тигән ҡушамат йәбештерелә. Ике офицер араһында ундай бәхәстәр һаман дауам итеп тора. Һуғыш уты Корнышевтағы "горячий"лыҡты һис тә һүндерә алмай, киреһенсә, дөрләтеп кенә ебәрә.

Шулай ҙа яман атама бирелмәне Корнышевҡа. "Намыҫлы кеше" тип тә әйтергә мөмкин уны. Ғәҙелһеҙлеккә вулкан лаваһы булып атылырға әҙер.

Дезертир Мәхмүттең ҡара һуҡмағы буйынса "Смерш"[1]та тикшеренеү барҙы. Разведка взводы командиры булараҡ, Корнышев та "Смерш" юлындағы ҡара йыландарға ут вулканының аҡ лаваһы булып атылды. Мәхмүттең дезертирлығын асыҡлауҙа күп ярҙам итте ул. Әле бына ҡыҫҡаса уның, немецтарға һатылғас, киләсәккә ожмах тормошо вәғәҙә итеүҙәренә алданып, полицай булып

[1] *"Смерш" — "Смерть фашистским шпионам"дан ҡыҫҡартып алынған. Фашист шпиондары ғына түгел, Ватанын һатып, улар тирмәненә һыу ҡойоусылар өсөн дә үлем хөкөмө сығарыусы отряд.*

эшләүе, Катюша исемле 15 йәшлек бер ҡыҙҙы дар ағасында аҫып үлтереүе, яңынан үҙ армияһына сержант булып ҡайтырлыҡ төлкө хәйләкәрлеге маташтырыуы хаҡында ентекләп һөйләне.

Был осраҡта полковник Исхаҡов фекерҙәрен дә ҡабатларға тура килде уға. Демаштарҙың дезертирға суд яһауҙы үҙҙәре ойоштороуҙарын, полковник кеүек, уларҙа патриотик хис-тойғоноң көслө булыуына бәйләп аңлатты. Һөйләгәндә ул, ваҡыт-ваҡыт артыҡ "горячий"ланып, тел культураһын да, офицер икәнлеген дә онотоп, көлдөрә торған күңелһеҙ ғибәрә әйтеп тә ҡуя. Был юлы ла шулай итте. "Ил һатҡан – һаҫы көҙән, үҙ ағыуынан үлгән, тиҙәр беҙҙең Куйбышев яҡтарында". Шуның менән ул һүҙен осланы.

Трапезниковты иһә төрлөсә атап йөрөттөләр. Һуңынан "Мягкий" тигәне өҫтөнлөк алды. "Йомшаҡ әйтеп, ҡатыға ултырта" тигәне халыҡта ла бар. "Йыуаштан йыуан сыға", – тип тә әйтәләр. Трапезниковтың "Мягкий" булыуы кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәт урынлаштырырға тырышыуҙан. Ундайҙарға "йыуаш" эшләпәһе кейҙерергә лә ашыҡмаҫҡа кәрәктер. Уның ҡатыға ултыртыуы ла, йыуанды сығара белеүе лә кешелеклелек дәрәжәһен һаҡларға тырышыуынан килә. Ҡыҫҡаһы, элемтә-разведка взводы командиры булараҡ, өҫкә дошман бомбалары борсаҡ урынына ҡойолғанда ла, снарядтар, миналар ярылып торғанда ла батареялар, дивизиондар, полктар араһында элемтә булдырыуҙы айбарлы оҫталыҡ менән ойоштора белде. "Мягкий" тигән һүҙ уны һис тә кәмһетмәй, киреһенсә, ирлек, кешелеклелек сифатын күтәрә генә.

Трапезников оҙаҡ һүҙ сәсмәне. Уға ла үҙенән алда һөйләгәндәрҙекен ҡабатларға тура килде. Шулай ҙа, иҫке фекергә яңы ямаулыҡ тигәндәй, алдағы "ораторҙар" телмәренә яңы нотоҡ ҡыҫтырмайынса ҡалманы. Демаштар судының, уның әйтеүенсә, халыҡ-ара әһәмиәте бар. Был әһәмиәт патриотик тәрбиә менән бәйле. Беҙ изге һуғыш алып барҙыҡ. Был изгелек тарих сәхифәләренә алтын хәрефтәр менән яҙылып ҡаласаҡ. Совет Армияһының ҡоростай дисциплинаһы шәүкәтлелеге ер йөҙөндәге барлыҡ ҡитғалар йөрәгенә һеңеп ҡаласаҡ. Уныңса, дезертир Мәхмүттә төлкө хәйләкәрлеге генә түгел, бүре йыртҡыслығы ла бар. Хәрби трибуналдағы асыҡ ауыҙҙарҙы ла төп башына ултыртырға мөмкин әле ул. Һаҡ булырға кәрәк.

Дезертир яҙмышы тураһында бер ғибәрә лә әйтте:

– Беҙҙең Дүртөйлө ауылы Ағиҙел йылғаһының һул яҡ ярында ултыра. Ватан намыҫын һаҡлай алмаусылар хаҡында беҙҙең яҡтарҙа ла төрлө-төрлө мәҡәлдәр, әйтемдәр йөрөй. Бына шуларҙың береһе: "Илен һатҡан – бысраҡ һаҙға батҡан".

Шулай тине лә матур ғына йылмайып ҡуйҙы Трапезников. Фронтта ла шулай ине ул. Йәй көнө булһа, гимнастеркаһы, салбары, тегендә аунап, бында тәгәрәп, туҙанға буялып, бысранып бөткән була. Ҡыш көнө уның өҫтөндәге шинеле лә шул уҡ ауыр хәл кисерә.

IV

Австрия ҡояшы әле төшкөлөк төбәгендә елпенә. Март айында инде бында йылы елдәр иҫә. Кем белә, Башҡортостанда әле март айының ҡөҙрәте булған аҡман-тоҡман бураны ҡоторалыр.

Офицерҙар китергә йыйына башлағайны, кемдер Әҡсәнгә "ым" ҡаҡты. Офицерҙарҙы музыка менән оҙатайыҡ, йәнәһе. Йыр, моң менән бәлзәмләнгән Әҡсән күңеле шундуҡ музыка донъяһына сумды. Тиҙҙән уның ҡулында аккордеон күренде, "Һағынам, дуҫтар"ҙы уйнап ебәрҙе. Кемдер йыр башланы. Уға башҡалар ҡушылды.

*Һағынам, дуҫтар, һағынам, дуҫтар,*
*Һағынам, дуҫтар, илкәйҙе.*
*Илкәй менән бергә һағынам*
*Һөйгән нәҙекәй билкәйҙе.*

Тыуған-үҫкән илде, ата-әсәне, һөйгән йәрҙе һағыныу тураһында бер нисә йыр йырланды. Шунан һуң демаштар хор менән ҡысҡырырға тотондо:

– Һағынам! Һағынам!! Һағынам!!!

Улар, шаярышып, балаларса ла ҡылана башланы:

– Домой хочу! Домой хочу!! Домой хочу!!!

Шаянлыҡ тулҡынында ысынбарлыҡ шаңдауы ла бар ине. Был өс офицер – үҙ командирҙары. Курск дуғаһында янып, Днепрҙың йылғаһында батып ҡалмаған, Украина, Молдавия, Польша, Румыния, Венгрия, Чехословакия, Германия ерҙәрен фашист үләкһәләренән ҡотҡарыу көрәшендә бергә тир-ҡан ҡойған кешеләр. “Фронт дуҫлығы” тигән бөйөк төшөнсә бар.

Шулай ҙа был тәрән төшөнсә һәр береһенең күңелендә иман шарты булып йәшәйәсәк. Улар бер-береһенең өй адрестарын алышты – хатлашып торасаҡтар.

Алда уларҙы ни көтә? Уҫал яҙмыш елдәре улар менән нисек шаярыр? Былар – егерме дүртенсе йылғылар. Егерме ике йәштең ишеген алтын асҡыс менән бикләп, егерме өстөң асҡысын яңы ҡулға алыусылар. “Алтын” һүҙе күп уйланырға мәжбүр итә. Тормоштоң үҙен “ожмах” тип хис итһәк, барлыҡ ауырлыҡтарҙы иҫкә алмайынса, асҡыстар кеше ҡулына тотторола. Тотторғандар икән, бәхет ишеген үҙең тап. Ә инде ил бәхете – именлектә.

Шулай уйлай полковник. Корнышев менән Трапезников күңелендә лә шундай фекерҙәр. Улар китергә йыйынып бөткәс: “Һөйләргә мөмкинме?”– тип ҡысҡырҙы кемдер. Был үзбәк егете Әхмәт Шәрипов ине.

Егерме дүртенсе йылғылар хәрби хеҙмәткә 1942 йылдың июль, август айҙарында алынды. Алкин лагерында саҡта, башҡорт, татар, урыҫ милләттәренән тыш, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, әзербайжан егеттәре лә бар ине. Октябрь айында уҡ тын ҡура торған һалҡын төштө. Ноябрь, декабрь айҙарында һыйыр мөгөҙөн һындырырҙай һыуыҡтар булды. Занятиелар күберәк шаран-асыҡ далала үткәрелә. Тик торһаң, аяҡ туңа. Йүгерер инең, хәл юҡ, ас ҡарын әпәй һорап ыңғыраша. Башҡортостанда тыуып-үҫкәндәр әллә ни ирешмәй, ә бына Урта Азияның көйҙөрөрҙәй эҫе ҡояш нурында үҫкән йомшаҡ тәндәр өсөн үҙе бер биҙа булды Башҡортостандың зәмһәр һыуығы. Түҙә алмағандарҙың күбеһе, аяҡтарын туңдырып, госпиталгә оҙатылды. Тик Әхмәт кенә (уны шулай тип кенә йөрөттөләр) ирешмәне. Рухи ныҡлыҡ көслө булғандыр был үзбәк егетендә.

Һуғыш ҡырында Әхмәт төрлө яҡтан асылды. Дөрөҫ, ул расчет командиры ла, төҙәүсе лә, ҡороусы ла була алманы. Мина ташыу, мина таҙартыу кеүек эштәр башҡарҙы. Уның ун йыллыҡ белеме бар икән. Мәгәр уны берәүгә лә әйтмәй. “Дүрт синыф ҡына бөтөрҙөм”,– тип алдашып тик йөрөй. Ун йыллыҡты әйтергә ғәрләнгән. Рус телен насар белгәс, башын бер ни ҡәҙәр диуаналыҡҡа һалып, башланғыс белем эйәһемен, тип кенә аңлата. Тора-бара урыҫ телен яҡшы ғына үҙләштерҙе был. Фронт гәзиттәрен килтерһәләр, иң башта ул эләктереп ала. Үҙәктән килгән гәзиттәрҙе лә йотлоғоп уҡый. Урта белеме барлығы асылғас, партия ағзаһы булып китә, хатта беренсе батареяла агитаторлыҡ эше беркетелә. Тора-бара “оҫта агитатор” тигән дан ала. Бына ошонда, демаштар араһында ла, Пирмөхәмәтов уны агитатор итеп ҡуйҙы, сөнки ҡайҙандыр гәзитен дә, китабын да таба. Демаштарҙың эстетик зауығын самалап, уҡып бирә. Тыңлайҙар уны. Яраталар. Был яратыу уның аҡылын үҫтерә, күңелен күтәрә, дуҫлыҡ тойғолары менән хушһынған зауығын байыта.

– Мин Үзбәкстандан, – тип башланы ул һүҙен, – Үзбәкстан – йылы, ежәк-емеш иле. Бындағы демаштарҙың бөтәһенә лә өй адресымды бирҙем, уларҙыҡын да алдым. Ҡайтҡас хатлашыр өсөн. Полковник Харисов, капитан Корнышев, капитан Трапезников, старшина Пирмөхәмәтов... Фронттағы ауырлыҡтар беҙҙең араны ныҡ яҡынайтты. Беҙ һеҙҙе яраттыҡ. Ҡайтҡас, бер яйы тура килгәндә, бөтәгеҙҙе лә ҡунаҡҡа саҡырасаҡмын. Килмәйенсә ҡалмаһағыҙ ине...

Унының һүҙҙәрен ҡырт бүлеп, ҡаҙаҡ егете Садул сыҡты майҙан уртаһына:

– Мин – ҡаҙаҡ егете. Ҡаҙағстан иле – ҡуйҙар иле. Миндә лә бар бөтәгеҙҙең дә адресы. Мин һеҙҙе ҡуй ите менән һыйларға саҡырасаҡмын...

Бының оҙонға һуҙыласағын аңлап, Садулдың күп һөйләйәсәген дә иҫкә алып, Сәлим уны бүлдерергә мәжбүр булды:

– Мин дә лә бөтәгеҙҙең дә адресы бар. Ләкин мин ежәк-емеш тә, ҡуй ите лә вәғәҙә итә алмайым. Садул дуҫ, фронтта саҡта кәлйемә тураһында һөйләгәйнем инде мин һиңә. Саҡырасаҡмын һеҙҙе, кәлйемә менән һыйлаясаҡмын. Бик туҡлыҡлы, тәмле ул. Иртән бер ашаһаң, көнө буйы кикереп йөрөйһөң.

Кәлйемәне белгән Башҡортостан егеттәре дәррәү көлөп, ҡул саптылар.

Шул көлөү ваҡытында Азамат пәйҙә булды майҙанда. Уны күргәс, үҫендереп ебәреү өсөн булһа кәрәк, йәнә ҡул сабып алдылар.

Ҡушаматы – Алдарбай. Бер ваҡыт Гитлерҙың төшөнә ингәнен һөйләне ул. Бына Гитлер Рәсәйҙе баҫып ала. Немкалар хәҙер, Рәсәй ерҙәренә күсеп, кәмендә ете бала табырға тейеш. Шулай итеп, донъя немецтар, немкалар ҡулына күсәсәк. Шундай уҡ ҡомһоҙлоҡ Англия, Америка ерендә лә башҡарыла. Ҡыҫҡаһы, ошо донъя – немецтар өсөн ожмах, башҡа милләттәргә – тамуҡ.

Азамат Ҡазан дәүләт педагогия университетының тарих бүлегендә уҡыған. Фронтҡа икенсе курстан китә. Сатирик, юмористик шиғырҙар ҙа яҙа. Дөрөҫ, тел тирмәне шәп тартһа ла, атыу буйынса азаматлыҡ күрһәтә алманы. Алдауын ахмаҡ та аңларлыҡ. Ғәйрәтбаев уға бәйләнергә ярата.

– Пәчему һин алдайһың, ҡыл ҡойроҡ, Гитлерҙы күргән ышту ли һинеке? – тип бәйләнә.

Ә Азамат һис ҡаушап ҡалмай.

– Бер көн генә бергә немец коньягы эстек. Ну, шәп!.. Ә закускаһы? Кәнфит, шакалад, мармалад... тағы ла әллә нәмәләр... Ниндәйҙер тәмле ит. Биш кило самаһы ашап бөтөрҙөм. Ә Гитлер үҙе ашыға-ашыға тығына башлағайны, тамағына һөйәк ултырҙы. Ауыртыуына сыҙай алмайынса, Бохара ишәге һымаҡ, аҡырырға, баҡырырға керешге. “Капут Гитлер!” тинем дә, беҙҙең мина осҡан тиҙлектә, ҡойроғомдо һыртыма һалып, остом ғына...

Шулай итеп, Азамат “Алдарбай”ға әүерелеп китте.

Ғәйрәтбаев Илеш районының Йәркәй ауылында тыуып үҫә. Бик ярлы ғаиләлә. Белеме ике йыллыҡ ҡына. Мәгәр һуғышырға ярата. Һабантуйҙы боҙоп йөрөүселәрҙе йә көрәктәй ҡулдарының йоҙроғо менән шаңлап ебәрә, йә тимерҙәй ҡаты аяғы менән тибеп осора. Ҡыҫҡаһы, тәртипте йоҙроҡ менән аңлата. Шуға күрә шәп ҡушамат һылана быға: “Һуғыш суҡмары!” Курск дуғаһындағы бер ҡул һуғышында ен кеүек ҡыланыуы демаштарҙың бөтәһенә лә мәғлүм. Яңғыҙы ун фашисты тонсоҡтора бит. Береһен әлеге тимерҙәй йоҙроғо менән шаңлап ебәрә, икенсеһенең эсенә тибеп яра, өсөнсөһөнөң йән еренә тондора, дүртенсеһенең боғаҙын сәйнәй. Ә бына хәҙер әҙәм әйтеп әҙәм ышанмаҫ: һуғыш бөткәнгә үкенеп йөрөй.

Был хаҡта демаштар унан ҡат-ҡат һөйләтә. Һөйләй Ғәйрәтбай. Тик көлә башлаһалар, асыуы килеп, шып туҡтай ҙа ҡуя. Сөнки юҡҡа-барға көлөүҙе ул культураһыҙлыҡ тип иҫәпләй. Бына әле лә шулай итте. Ул майҙанға сығып баҫыу

менән, цирктағы клоундан көлгәндәй, мәҙәктән ҡыҙыҡ эҙләгән бәғзеләр хи-ха-хайларға кереште.

Нисек кенә булмаһын, эскерһеҙ, ябай, кешелекле булғаны өсөн уны барыбер яраталар. Ул бит бер ваҡыт ҡайҙандыр суҡмарҙай йоҙроғо ҙурлыҡ ҡына Баракин гармуны табып алып килгәйне. Уйнап та ебәрә, моңона ҡушылып, йырын да һуҙа. Ул бәләкәй гармундан сыҡҡан оло моң күңелеңде ярһыта, йөрәгеңде телгеләй, әллә ниндәй хыялый уйҙар донъяһында йөҙҙөрә. "Әпипә"не, "Ҡарабай"ҙы һыҙҙырып ебәрһә, бейей белмәһәң дә, аяҡтарың ҡырҡ тартмасының юртаҡ атыныҡылай, тыпырҙарға керешә.

Ҡайҙа булды ул бәләкәй генә эсендә ҙур донъя моңо йөрөткән гармун? Бер ҡул һуғышында шул моң һауыты таш шарға әүерелә, имеш. Шул таш шар менән Ғәйрәтбай әллә нисә немецтың башын яра, ти. Әгәр һораһаң, яуап бирмәй суҡмарбай, ҡылыс танауын, шалпы ирендәрен бейетеп, йылмайып ҡына ҡуя.

Ғәйрәтбайҙың кәбәк ашап күбенгән һыйырҙай ауыр һулауын, һүҙ башлай алмайынса ғазапланыуын беләләр. Һуғыр өсөн тимерҙе әүәл утта ҡыҙҙырырға кәрәк булған кеүек, һөйләтер өсөн башта уның аңын бешекләп алыу талап итерә. Шунан һуң ғына һүҙҙәр донъяһына инеп китә. Әммә ул донъяла, теле яҡшылап асылмаған балалай, аҙашып та йөрөй. Шуны аңлаған демаштар уның телен дә, аңын да, мейеһен дә ҡыҙҙырырға тырышты:

– Һәй, Суҡмар, һуғыш бөткәнгә һаман үкенеп йөрөйһөңмө?

– Кемделер туҡмарға ҡулы ҡысытып тора уның.

– Теге дезертирҙы ла һуғып үлтермәксе ине.

– Хәҙер алкаш Геройҙы бәреп суҡындырырға йөрөй.

– Үҙен ас шайтан урынына бәргеләп ташлаһалар?..

– Ха-ха-ха-а-а…

– Хи-хи-хи-хи-и…

Ҡыҙҙырҙылар Ғәйрәтбайҙы. Ул, һәр ваҡыттағыса, телде вата-емерә, үҙен абруйлы кеше итеп күрһәтергә тырышып һөйләп китте:

– Пәчему һеҙ аңғыра һарыҡтай ҡыланаһығыҙ? Үҙегеҙ мине һөйләтергә тырышаһығыҙ, ауыҙ астыммы, ха-ха-хай ҙа ма-ха-хай… тишектән дә көлгән әҙәпһеҙ ҡыҙ һымаҡһығыҙ… Кибени... Культурнай түгелһегеҙ… Вот… шалапайҙар… Мин һуғыш теләмәйем. Вот. Быныһын кәнкритнә сәпәйем. Һуғыш әле бөтмәй торһа, минең районюдашым Илеш егете Муса Гәрәев ике генә түгел, өс мәртәбә Герой булыр ине, бәлкем… Көләһегеҙ? Ишәк баҡырғанға ил бөтәймәй. Тауыҡ ҡытҡылдағанға фашист дөмөкмәй, ҡара ҡарға ҡарҡылдағанға күктән бәхет яумай. Вәт. Понимайт нады… Яҡташым Муса йәнә бер йондоҙ алып таҡһамы?.. Һи-и-и… Башҡортостанмы? Әмирикә менән ярышҡа сығыр ине… Һаман көләһегеҙ… Минең үҙем өсөн дә һуғыш иртәрәк бөттө. Кибени… Ун немецты сәнселдергәнемде беләһегеҙ… Көстө егерме фашист менән яғалашҡанда ла күрһәтергә ине. Тура килмәне бит. Ҡапыл ғына бөттө лә ҡуйҙы һуғыш.

– Хи-хи-хи…

– Ха-ха-ха…

– Һин дә Герой булған булыр инеңме, Ғәйрәтбай?..

Уларҙың һүҙен ҡырт бүлеп, Герой алкаштың ҡалын тауышы яңғыраны. Ул "Шумел камыш"ты йырлап килә ята.

Быңа ул демаштарҙы йыра-йыра, алпан-толпан атлап, донъяла мин берәү генә, тигәндәй маһайып, полковник Исхаҡов алдына килеп баҫты. Шул мәлендә үк, аңғыра һарыҡҡа ташланған бүреләй урғып, Ғәйрәтбай килеп быуҙы уны. Әлеге суҡмарҙай йоҙроғо менән башына тондормаҡ булғанда, шунда уҡ шашҡан бүре тиҙлеге менән ырғып, Сәлим килеп тотто бының ҡулын:

– Ярамай, земляк… Үлтерәһең бит…

– Кәнишне үлтерәм. Бында тонсоҡтормаһам, вагонға ултырғанда тибеп осорам мин уны. Пәчему ундай хәсисте алып ҡайтабыҙ беҙ илгә?.. Герой, имеш… Герой икән, кеше булһын. Йөрөмәһен һаҫыған кәзә тәкәһенә оҡшап… Түбәһенә берҙе бәрһәм, ергә инеп китә бит ул, хәшәрәт…

– Ярамай, районлаш, беҙ уға демаштарҙың намыҫ судын яһайбыҙ. Әйҙә әле, ситкәрәк китәйек. Аңларһың мине.

Ғәйрәтбайҙың уттай ҡабынған ғәйрәтен һүндерергә кәрәк ине. Бының өсөн Сәлим, йәш баланы иркәләгәндәй, әлләниндәй йылы, йомшаҡ һүҙҙәр әйтәәйтә ситкә алып китте Ғәйрәтбайҙы.

Унан һуң демаштар дауылы ҡупты.

– Пирмөхәмәт дөрөҫ әйтә…

– Суд яһайбыҙ…

– Герой аҡылын бизмәнгә һалып үлсәргә кәрәк…

– Бизмәнгә һалырлыҡ аҡылы бармы ни уның?..

– Аҡылы башында түгел, ҡорһағында.

– Теге нәмәһендә, тиң…

– Ғәйрәтбайҙан таптырырға кәрәк аҡылын.

Ул арала, Ғәйрәтбайҙы ҡалдырып, Сәлим әйләнеп килде “Герой” янына. Әйләнеп тә килде, әллә ҡасанғы таныш дуҫы кеүек ҡосаҡлап, алып та китте.

Хужа Насретдин әйтмешләй, юрған да китте, ғауға ла бөттө.

Аптыраны ла ҡалды полковник Исхаҡов. Цирк майҙанындағыса килеп сыҡты был. Унда йыуаш бер хайуан тигр кеүек уҫал йыртҡысты буйһондора бит. Ниндәй сихри көс бар был Пирмөхәмәтовта?

Полковник уйланды. Уның уйҙары донъяһына демаштарҙың “суд”, “намыҫ суды” тигән хәбәре ярып инде.

V

“Герой” менән махсус һөйләште Сәлим. Һандуғас һайрашып, күгәрсен гөрләшеп, ат кешнәшеп, кеше һөйләшеп таныша. Һүҙ әҙәм балаларын дуҫлаштыра, улар араһында изге, яҡшы, мөҡәддәс мөнәсәбәттәр булдырыуға ярҙам итә. Ваҡыт-ваҡыт киреһенсә лә килеп сыға. Һүҙ кешене енләндерә, ярһыта, аҡылынан яҙҙыра.

Сәлим быларҙың бөтәһен дә белә. Ул – расчет командиры. Унан һуң взвод, батарея, дивизион, полк… командирҙары китә. Расчет командиры – иң кескенәһе. Мәгәр иң ҡаты ҡуллыһы. Һалдатты иң башта ана шул ҡаты ҡул тәрбиәләй. Ашата, эсерә, йоҡлата, уята, йүгертә, ялҡаулашһа – яҡтырып, түше менән шыуҙырта. Тупаҫ кәүҙәле бер алйотто ла энә күҙенән үтерлек итеп нескәртә. Әммә “бәләкәй” командир яҡшы һүҙҙең йән аҙығы, яман һүҙҙең баш ҡаҙығы икәнлеген дә онотмай.

Ғәйепләнеүсегә һүҙ атакаһы башларға булды Сәлим. Башта үҙе хаҡында һөйләп бирҙе. “469-сы миномет полкының беренсе расчет командиры старшина Пирмөхәмәтов” тигән һүҙҙәрҙе ишеткәс, “Герой”ҙың йөҙө ҡапыл яҡтырып китте.

– Ә-ә-ә-ә… теге 120 миллиметрлы полк минометынан иң оҫта атыусы…

– Кәрәкмәй улары. Үткән эш – һыуынған аш…

– Һеҙҙе лә Геройлыҡҡа?..

– Уныһы ла кәрәкмәй. Герой булыуға ҡарағанда, кеше булыу ауырыраҡ.

– Һеҙ аҡыллы һөйләшәһегеҙ…

– Аҡыллы булыу ҙа еңел түгел…

– Миңә төрттөрөп әйтеүегеҙҙе аңлайым.

– Аңлау ҡыйын, ғәмәлгә ашырыу ҡатмарлыраҡ.

…Улар оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙы. “Герой”ҙың араҡы менән буталған аҡылы башта ҡылдый-былдыйыраҡ ине. Ул ҡылдый-былдый аҡрынлап төҙәлә башланы. Ботлап килгән хәмер сире мыҫҡаллап сыҡты.

Һүҙҙе оҙаҡҡа һуҙыу Сәлимдең сабыр тәбиғәтле булыуында ғына түгелдер. Уға кешенең йөрәгенә инергә кәрәк. Ни генә юҡ ул йөрәктә? Кешеләрҙе яҡшыға, яманға бүлеп ҡарарға ғәҙәтләнгәнбеҙ. Ә бына “яман” тигән кешенең дә йөрәгендә ниндәйҙер аҫылташ ятҡанлығы тураһында уйлап ҡарамайбыҙ. Ғәйрәтбайҙың йөрәгендә ана, бар бит аҫылташ, уны табыу өсөн, ҡылыҡ-фиғелен иҫкә алыу, иркәрәк һүҙ атакаһы яһау кәрәк. “Герой”ҙыҡы башҡасараҡ кеүек. Кикереген шиңдермәһәң, күркәнең кешегә ташланыуы бар. Герой булып алғас, күңел кикереген юғары күтәреп йөрөргә ғәҙәтләнгән. Күр, Ғәйрәтбай, ул кикеректе хәҙер үк ҡырҡып ырғытмаҡсы. Вагонға индермәйәсәкмен, ти. Тимәк, демаштарҙың намыҫ судын яһау көн тәртибенә килеп баҫа.

“Герой” исемен сағылдырып тороусы Алтын Йондоҙ яугир күкрәгенә ниндәй ҙә булһа бер ҡаһарманлыҡ күрһәткән өсөн беркетелгән. Берәү, әйтәйек, ПТР менән бер көн эсендә фашистарҙың өс “Тигр”ын сәнселдерә. Икенсеһе 76 калибрлы пушка менән дошмандың ете “Тигр”ын яндыра. Днепрҙы кискәндә немецтар яғындағы ярға беренсе аяҡ баҫыусының да күкрәгенә Алтын Йондоҙ һыланды. Беҙҙең хәмер менән дуҫлашып киткән “Герой”ыбыҙ ҙа ана шулар ғәскәренән. Тыумышы Татарстандың Аҡтаныш районынан икән. Тормош балда, майҙа йөҙҙөрөп, иркәләп үҫтермәгән уны. Атаһы – репрессия ҡорбаны. Яҙмыш бизмәненә һалып үлсәп ҡараһаң, бәхетһеҙлек ауырлығы икеһенеке лә тигеҙ тартыр һымаҡ. Тик рухи тигеҙлек юҡ бында. Герой төшөнкөлөккә бирелеүсән икән.

Нисек кенә булмаһын, һөйләшә торғас, “Герой”ҙың уй ҡаҙанындағы хәмер парҙары аҡрынлап сығып бөттө шикелле. Хәҙер китергә, айырылышырға кәрәк ине. Сәлимдең шул хаҡта уйлап өлгөрөүе булды, демаштар, бомба ярылған тауыштар сығарып, көслө шаңдау менән көлөп ебәрҙе. Тимәк, ниндәйҙер этлек уйлап тапҡандар. Старшина, осоп китергә ярһыған йылғыр ҡоштай, ултырған еренән башта үҙе һикереп торҙо, шул уҡ тиҙлекте ҡабатлау өсөн “Герой”ға ярҙам итте, уның ҡулын ныҡ ҡыҫҡан хәлдә көлкө бомбаһы шартлаған ергә сапты. “Герой”, был ғәләмәттең ниңә кәрәк икәнлеген һис аңламайынса, Сәлим ҡыҫҡан ҡулдың ауыртыуын нык тойһа ла, уның артынан йүгерә бирҙе.

Килеп етһәләр, ни күҙҙәре менән күрһендәр: демаштар ҡатлам-ҡатлам түңәрәк яһап алған. Түңәрәк уртаһында, әкиәт-риүәйәт ҡаһарманы “Алып батыр”ға оҡшап, Ғәйрәтбай баҫып тора. Ҡатлам-ҡатлам булып түңәрәкләнгән демаштарҙы йыра-йыра, Сәлим эскә керҙе. Мәгәр “Герой”ҙы ҡулынан ысҡындырманы. “Алып батыр” янына килеп еткәс, икеһен дә ҡул ҡысышып көрешергә мәжбүр итте. Ғәйрәтбай “Герой”ҙың ҡулын нык ҡыҫты, ахыры, ауыртыуҙан йығылып китә яҙҙы теге. Демаштар, әлеге бомба ярылған тауыштар сығарып, йәнә көлөп ебәрҙе.

Сәлим уң ҡулын күтәрҙе лә:

– Слушайте мою команду и повторите мои слова, – тине.

Уҫал генералдарса команда биреп, “раз”, “два”, “три” (“раз”, “два”, “три” тип демаштар ҡабатлап торҙо) тигәс, уң ҡулы менән тегеләрҙең ҡулдарына килтереп һуҡты. Ҡулдар айырылып китте. Сәлим, икеһенең араһына инеп:

– Дружба, дружба, дружба, – тип ҡысҡырҙы. Был һүҙҙе демаштар ҙа ҡабатланы. Ул ҡабатлауҙан аяҙ көндө күк күкрәгәндәй булды.

Бәрей туйы төндә була, тиҙәр. Шыр һөйәктән ҡалған бәрейҙәр, йыйнаулашып алғас, туй яһай икән. Улар тауышынан әллә ниндәй таһырлау, шаңдау, йәмһеҙ ҡысҡырыныуҙар хасил була.

Демаштар шаңдауы ла шуға оҡшаш. Шаңдау Ғәйрәтбай бәһлеүәнлеге менән бәйле. Әйткәндәр быға:

– Ғәйрәтбай, һин ун фриц менән көрәшкәнеңә ҡәнәғәт түгел. Һуғыш бөтөп, бер юлы егермеһе менән йоҙроҡлаша алмайынса ҡалыуыңа үкенеп йөрөйһөң; беҙ – демаштар – һинең ярһыу күңелеңде баҫырға, ҡәнәғәтләндерергә булдыҡ, арабыҙҙан һинең шикелле иң ғәйрәтле егермеһен һайлап алдыҡ та көрәштерергә уйланыҡ. Әҙерлән, – тиҙәр.

Ғәйрәтбай яуап бирә:

– Һеҙ ни грамутный икәнһегеҙ... Культура етешмәй һеҙгә... томаналыҡ... боламыҡты талҡандан айыра белмәйһегеҙ... ниместәр боламыҡ бит улар... Пәчәмү боламыҡ?.. Патамушты ҡара үлән ашап үҫкән бәндәләр... ерҙәре аҙ... яман... туҡлыҡлы аштары юҡ... Буш эсәгеләрҙең... Рәсәй ереме?.. У-у-у... туҡлыҡлы аш бирә... Талҡан бешерә торған аҙыҡ... Унан һуң беҙ бит ҡыш көнө ҡарҙа яланаяҡ йөрөп сыныҡҡан. Минең ҡартатай мәрхүм әйтер ине... Парт-Артурҙа һуғышҡанда,.. тиер ине... Һуң ниңә?.. Белмәйһегеҙме ни һуң... теге Финләндиә янындағы Порт-Артур була ул...

Аранан берәү ҡысҡырып ебәрә:

– Ғәйрәтбай, Порт-Артур Финляндия янында түгел, Порт-Артур һуғышы бар, Финляндия һуғышы бар... Һин үҙең талҡан менән боламыҡты бутай башланың...

– Хи-хи-хи...

– Ха-ха-хау...

Демаштарҙың бомба ярылғандағы тауыштар сығарып көлөүе ана шул ваҡытта була. Сәлимгә шул хаҡта дуҫы Рәйес һөйләп бирҙе.

Шундай шаңдауҙарҙан һуң хәмерҙән баш тартҡан “Герой”, айҙар буйы ҡара болот араһында ыҙа сигеп, яҡты күк йөҙөнә шатланып сыҡҡан ҡояштай, демаштар араһына инеп сумды. Ләкин түшендәге йондоҙҙоң ҡапыл юҡ булыуы ғына сәйер...

VI

*Донъя ҡоролған ҙур, садә мөхәббәткә,*
*Ал фарызын, йәшә хозур, сум ләззәткә.*
*Тик онотма: уның шаңы, дауылы бар,*
*Ғазаптары тамуҡ утынан да ҡайнар.*

Гизелла тағы ла килеп етте. Ул килгәндә бәрей туйы дауам итә ине әле. Бер урында Әҡсән аккордеонда “Әпипә”не һыҙҙыра. Ҡоторған бәрейҙәр табан аҫты менән ер күкрәген тишерҙәй итеп, “Асса”, “Һаппа”ларҙы әйтә-әйтә бейей. Ныҡлап иғтибар итһәң, гүйә, аяҡтары түгел, йөрәктәре бейей. Йөҙҙәре көләс, шашҡан, ярһыу... Башҡорттоң: “Айбарлы ир-егеттәр бар сағында, баҙынмаҫ дошман еремә”, – тигән ғибәрәһе бар. Айбарлы ир-егеттәр былар. Еңеүселәр. Фронтовиктар. Совет Армияһындағы “фронтовик” тигән һүҙ хәҙер бөтә донъяға йоҙроҡ күрһәтеп кәперенә шикелле. Беҙ – айбарлы халыҡ, беҙгә баҙынып, үлем баҙында сәнселеүегеҙ бар, йәнәһе.

Бейеү туҡталғас, “Шахта” көйөн һыҙҙыра Әхсән. Унан һуң “Катюша”, “Их ты, Галя”, “Жди меня” кеүек фронт йырҙары яңғырай.

Гитлер күп милләтле СССР-ҙы йәшен тиҙлегендә аласағына ышанғайны. “Иҙелеп” йәшәгән “ваҡ” милләттәр һуғышҡа туплауҙағы аңғыра һарыҡтарҙы сыбыртҡы шартлата-шартлата ҡыуған һымаҡ ҡына ҡуҙғаласаҡ, йәнәһе. Ә бына яңылышты Гитлер. Шул кәрәк иблискә.

Демаштар тамашаһын ҡарап торорға Гизелла ла ярата. Дөрөҫ, ул килгәс, “бәрей туйы” ҡапыл туҡтап ҡалды, бөтәһенең дә күҙҙәре уға төбәлде. “Аһ”, “уһ”, “уф” кеүек ымлыҡтар менән һулыш алыусылар булды. “Ну, әй, ҡыҙ”, “ҡыҙ түгел был, фәрештә”, “бал ҡашығына һалып йоторлоҡ”, “бер үпһәм, үлһәм дә үкенмәҫ инем”, “ну и суҡымыш ҡыҙ” тип бышылдаштылар.

Бына Сәлим, ғәскәри ҡиәфәтен тағы ла нығыраҡ турайтып, үҙен ғорур тотҡан хәлдә, уға атланы. Бына улар ҡул ҡыҫышып, ҡосаҡлашып, үбешергә керешә. Мөхәббәттең иң ләззәтле мәлен боҙа күрмәйек, тигәндәй, демаштар тын алырға ла ҡурҡып тора.

Бына улар етәкләшеп китеп барҙы. Демаштар иркен тын алып ҡуйҙы. Ул тында мөхәббәт шәфәғе бар ине шикелле. Шулай ҙа Австрия ҡояшы уларға, ниңәлер, моңһоу ҡарай һымаҡ.

***

Сәлим бөгөн оҙаҡ йөрөмәне. Бер сәғәттән ул әйләнеп тә килде. Уны Рәйес ҡаршы алды.

– Һинең бәхетле мөхәббәтеңдән көнләшәләр бында, Сәлим дуҫ!

– Бәхет – ул ҙур төшөнсә, Рәйес дуҫ!

– Мин һис аңламайым был мөхәббәтеңдең ҡиблаһын.

– Һуң, һөйләнем бит инде.

– Мөхәббәтеңдең башын ғына беләм мин. Мадъярка капитандан ауырға ҡала... Был хәбәрҙе һиңә капитандың адъютанты еткерә. Шунан башҡаһын белмәйем. Һөйлә, тиһәм, тәрән уйға сумаһың…

– Йә кешеләр бүлә…

– Һинең яҙмышың борсой мине. Ниңә асыҡтан-асыҡ әйтмәйһең? Капитан менән улар Венгрияла һөйөшкәндәр. Ни эшләп ул ҡыҙ Австрияла һинең арттан йөрөй? Әкиәттәге кеүек был.

– Әкиәт инде, әкиәт…

– Һөйлә әле ныҡлап. Ярамай былай йөрөүең. Демаштар ҙа һинең яҙмышың өсөн борсола. “Пирмөхәмәтовтың үҙенә суд яһарға кәрәк”, – тиҙәр.

– Һөйләйем һуң...

Улар барактарҙан ситкәрәк китеп, бер тын урынға барып яйлашты.

...Гизелла бала көтә.

Капитан Соколовтың адъютанты әйткән был хәбәр йәшен һуҡҡандай булды. 1946 йылдың март айында... Тимәк, бер йыл элек. Бөтә донъя мөхәббәткә ҡоролған, имеш. Үҙеңә тейешлеһен, фарызын, бәхет-сәғәҙәт бирерҙәйен ал умырып. Ҡурҡма. Һөй. Һөйөл. Ләззәтлән. Хозурлыҡ донъяһына сум. Улай ғына түгел икән шул. Мөхәббәттең дауылдары, шаңдауҙары, тамуҡ утынан да ҡайнарыраҡ ғазаптары ла бар икән. Ян. Көй. Мәгәр мөхәббәт алдында меҫкенгә, алабарманға, алйотҡа әйләнмә. Мулла бабай Йософ – Зөләйха, Ләйлә – Мәжнүн, Таһир – Зөһрәләрҙең бөйөк, даһи, ҡайнар мөхәббәте тураһында һөйләгәйне. Фәлсәфәсе Ниғмәтуллин Отелло – Дездемона, Анна Каренина мөхәббәте тураһында һөйләп тә шаҡ ҡатырҙы. Хәлил – Ғәлиәбаныу мөхәббәте лә зәңгәр күк йөҙөнә яҙылып ҡалды. Бөтә донъя-ғаләм Баш атайыбыҙ Әҙәм, Баш әсәйебеҙ Һауа мөхәббәтенә ҡоролған. Был оло мөхәббәттән һәр кем үҙенсә ауыҙ итә. Сәлим өсөн бөтә донъя-ғаләм мөхәббәте кәрәкмәй. Уға шул донъя мөхәббәтенең гәүһәрҙәй бер тамсыһы ла етә. Тик ул гәүһәр кереһеҙ булһын ине. Юҡ шул. Кереһеҙ булмай.

Мәрйәм ауылдың йөҙөк ҡашы ине. Шул “йөҙөк ҡашы”на мөхәббәт атакаһы яһаусы егеттәр бер көтөү булды. Атаканы кире ҡағып торҙо Мәрйәм. Сәлим

атакаһын ҡабул итте. Тимәк, Мәрйәм "йөҙөк ҡашы" булһа, Сәлим ауылда "егеттәр солтаны" иҫәпләнгән.

1946 йылдың апрель айында, бер атыу ярышында беренселекте алғаны өсөн, Сәлимгә 48 көнлөк отпуск бирелде. Ҡайтты Сәлим ауылға. Көткән уны йөҙөк ҡашы. Афарин! Ана ҡасан ныҡлап сума Сәлим мөхәббәт диңгеҙенә.

Сәлим киткәс, 1921 йылғылар ҡайта ауылға. Әлеге йөҙөк ҡашын ныҡ эләктерә Әғлә исемлеһе. Өйләнә. Туй. Ала ла китә ситкә. Тимәк, мөхәббәт диңгеҙендә йөҙә белмәгән Сәлим. "Мөхәббәттең мең ҡылысы бар", – тигәнде бер һөйләшкәндә Мулла бабай әйткәйне булһа кәрәк. Мөхәббәттең диңгеҙе генә түгел, ҡылыстары ла бар икән шул. Атаканы мөхәббәттең мең ҡылысы түгел, береһе генә яһағандыр. Сәлим шул ҡылысҡа ла ҡаршы тора алмаған.

Икенсе мөхәббәте – телефонсы Алтынай. Һуғыш бөткән көндө һәләк булды. Үҙ ҡулы менән ерләне Сәлим. Ярата ине. Ҡәберен ҡосаҡлап иланы.

Һис көтмәгәндә ябырылған немец атакаһылай, Гизелланың мең ҡылыслы мөхәббәт һөжүме. Бер генә ҡылысы һынһа ла, ҙур силәккә төшкән бер тамсы дегет бөтә һөттө боҙғандай, мөхәббәт ялҡыны һүрелә башлай икән. Сәлимдең мөхәббәте, ысынлап та, ялҡынға әүерелгәйне. Ялҡын йөрәкте яндыра, күңелде ярһыта, хис-тойғоларҙы көйҙөрә, аң-аҡылды елкетә.

Ярай әле, ул ваҡытта Дүртөйлө районы егете капитан Трапезников, Татарстан егете өлкән лейтенант Харисов, Кузбасс егете лейтенант Мезенцев, Өфө егете полковник Исхаҡов ярҙам итте. Ярҙамдары шул: Гизелла янына барып килергә рөхсәт итеү. Ә инде ҡыҙ фатирына капитан Соколов килеп яйлашҡас, "рөхсәт"тең дә йөҙөнә ҡара дегет тама башланы. Тора-бара ул дегет күңел йылғаһы хасил итте. Шул йылғаны йыра-йыра, ҡасып-боҫоп булһа ла, һәр яйҙан май тапҡан оҫта кешеләй, Гизелла янына барғыланы Сәлим. Тик намыҫы дегетле ине барыбер. Беренсе барыуында уҡ тәҙрә аша ҡасып-боҫоп ҡарағанда, Гизелланың капитан менән ҡосаҡлашыуын, оҙаҡ-оҙаҡ үбешеүен күрҙе. Уларҙың был күңел ләззәте Сәлим өсөн йөрәк әрнеүенә әүерелде.

Көнләшеү дегете өттө Сәлим күңелен. Көнләшеү арҡаһында егет менән ҡыҙ сәстәрен сәскә бәйләй алмай ыҙа сигә. Әгәр бәйләнһә, көнләшеү ҡылысы мөхәббәттекенән үткерерәк булып сыға. Мөхәббәт ҡылысын һындырып бөтөрә лә ғаилә нигеҙен пыран-заран итә. "Ғаилә – дәүләт нигеҙе" тип һөйләшәләр. Ысынлап та, ҡылыстары һынған мөхәббәт менән яҡшы дәүләт төҙөп булмайҙыр ул. Төҙөлә икән, рухи яҡтан зәғиф булыуы мөмкин.

Көнләшеүҙе Сәлим үҙе лә яратмай. Көнләшкән егет – һыу өҫтөндәге күбек. Көнләшеү – көсһөҙ ир-егеттәр эше.

Шул хаҡта тәрән аң-аҡылы, кешелеклелек шәүкәтлелеге менән ныҡ уйлап, Сәлим Гизеллаға башҡаса мөхәббәт атакаһы яһамаҫҡа булды.

VII

Татабанъя – Көнбайыш Аурупаның бәләкәй һаналған мәмләкәте Венгриялағы ҙур, абруйлы, данлыҡлы эшселәр ҡасабаһы. Ундағы совет һалдаттары йәшәгән ятаҡ "казарма" тип аталды. Офицерҙар элеккесә һаман шулай венгрҙарҙың (мадъярҙарҙың) фатирҙарында йәшәй. Һалҡын, йылымса, эҫерәк һыулы бассейндары, арыу ғына мәҙәниәт һарайҙары, театры, урамдарҙағы тротуарҙары, уҡыу-уҡытыу йорттары, аҙыҡ-түлек, тауар магазиндары, халыҡтың культура дәрәжәһе ҡасабаны "ҡала йорто" тип атарға хоҡуҡ бирә. Ата-әсәһе ташыған ризыҡты көтөп, ауыҙ асып торған ҡош балаһылай булмаҫ өсөн, ҡасаба халҡы дәүләт тажында ултырыусы әһелдәргә ризыҡ һорап барыу яғында түгел. Һыйыр, суҫҡа, ҡаҙ, тағы ла әллә ниндәй ҡош-ҡорт аҫрай. Был яҡтан ҡарағанда, халыҡ

тормошонда крәҫтиәнгә хас сатҡылар ҙа һиҙелә. Ғөмүмән, Көнбайыш Аурупа илдәрендә юҡты бар итеп, берҙе биш итеп, биште ун итеп йәшәргә тырышыу ғәҙәте көслө. Илдәр күп. Ерҙәр аҙ. Мәмләкәттәрҙәге халыҡтар мискәгә тығыҙлап тултырған балыҡтай…

Һәр мәмләкәттең үҙ хосусиәте бар. Румынияла, әйтәйек, тау битендәге өҫтәл ҙурлыҡ урындарҙы ла табып, көрәк менән соҡоп, ваҡ-ваҡ таштарын икенсе ергә күсерә-күсерә түтәл яһайҙар ҙа шунда ниҙер сәсәләр. Икмәктең гәүһәр бөртөгө ҙурлыҡтағыһы ла нисек ҡәҙерле булһа, ер киҫәге лә оло хазина был яҡтарҙа.

“Һәр бойҙай бөртөгө эсендә крәҫтиәндең бер бот тире бар”, – тип тә әйтәләр. Шулай ҙа беҙҙең крәҫтиән ерҙе тир менән һуғарыу ысулын ныҡлап белмәй икән әле. Уның шулай икәнлеген Сәлим сағыштырыуҙар аша белә хәҙер. Беҙҙәге ыҫмалалай ҡап-ҡара ерҙәрҙә лә бойҙай ҡашыҡ буйы шикелле генә үҫә. Башағы бесәй мыйығы кеүек кенә. Сүп утағанда ул уңдырышлы ер ҙә тапалып бөтә. Польшаның ҡом-һыу, ҡыҙыл балсыҡлы ерҙәрендә шаулап үҫкән бойҙайҙарға хайран ҡалып ҡарап торҙо Сәлим. Буйҙары метр самаһы. Баштары сыбыртҡы һымаҡ. Эҫкәк менән эҙләһәң дә, бер сүп тапмаҫһың.

Татабанъя халҡы, ғәзиз балаһын һөйөп-иркәләп тәрбиәләгәндәй, ниндәйҙер мөкиббәнлек менән йөрәк мөхәббәтен биреп, йөҙөм үҫтерергә ярата. Һәр кемдең ихатаһында беҙҙәге ҡар баҙына оҡшаш махсус урындар бар. Был баҙҙарҙа йөҙөмдән әсетелгән мискә-мискә шараптар һаҡлана. Тәмлелекте улар әллә нисә йылдар буйы арттыра бара икән.

Гизелла тигән гүзәл ҡыҙ ҡала менән ауыл йәшәйешен берләштерә барған ана шул ҡасабаны матурлап үҫә. “Гүзәл” тигән һүҙҙең тамыры – күҙ (әзербайжанда, төрөктә – гүҙ). Күҙ яуыңды алырлыҡ + күҙ ал – күҙал + гүзәл. Ана ниндәй фонетик-морфологик яһалыш. Мадъяр теле төрки телдәргә ныҡ яҡын. Ҡыҫҡаһы, “Гизелла” – беҙҙәге “гүзәл” тигән һүҙ.

“Сибәр ҡыҙға ғиффәтлелекте һаҡлау – үҙе ҙур батырлыҡ”, – тигәнде ишеткәне бар Сәлимдең. Гизелланың матурлығы батырлыҡҡа әүерелә алманымы? Матур ҡыҙға мөхәббәт ҡылыстары күп һөжүм итә. Барыһына ла ҡаршы тороу ауырҙыр, бәлки. Әммә ауырлыҡтарҙан ҡурҡҡандарҙы мөхәббәт ҡылысы үҙе үк өҙгөләп ташлай бит. Шундай ҡылыс менән өҙгөләндеме Гизелла мөхәббәте? Капитан Соколов ҡылысы еңеп сыҡтымы?

Хәйер, төптән уйлаһаң, борсолорға һис ярамай. Капитан кем дә ул кем? Мадъяркалар офицерҙарҙың погондарындағы йондоҙҙарҙы һанарға ярата. Бер генә йондоҙло кесе лейтенант булһа булһын, “офицер” тигән даны бар. Ә Соколовтыҡы дүрт йондоҙ. Ә Сәлимдекендә берәү ҙә юҡ. Тимер юлындағылай теҙелеп киткән шпалдар ғына. Ҡасабаның йөҙөк ҡашы булған Гизелла ни эшләп ярат һын уны?

Туҡта! Ни өсөн баш вата һуң әле ул?.. “Гизелла Соколовтан бала көтә”. Ҡыҙҙың атаһы, әсәһе рөхсәте менән “өйләнешеү” тигән ғәләмәтен дә еренә еткереп ҡуйғандарҙыр, бәлки. Ә һин бында өлөштән мәхрүм ҡалған ала ҡарғалай һыҡранып ултыраһың. Их, һин, Сәлим, Сәлим! Мөхәббәткә дөрөҫ атака яһау һуғыш уты эсендә минометтан мәргән атыу кеүек кенә түгел икән.

Шулай уйланып, яраланған бөркөттәй өҙгөләнеп ултырғанда, ишек шаҡынылар. Сәлим ялҡау ғына “да” тигәйне, ишек асылып, унан уҡтай атылып Гизелла килеп инде.

Гизелла һары алтындай йылтырап торған сәстәрен баш түбәһендә ниндәйҙер бер серле, сихри матурлыҡ менән һырлап-һырлап, сәскәләндереп ҡуйған. Ул донъя матурлығы тажы булып күпереп тора. Сәстең дауам өлөшөн бер сатҡа

үреп, арҡаһына ташлаған. Һарғылт керпектәре араһында хәҙер һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йәшкелт-ҡара нурҙар уйнай. Ул, бәлки, Дунай һыуы төҫлө йәшкелт-зәңгәр күҙҙәрҙән төшкән күләгә сағылышылыр. Бит остарында әллә үҙ ҡанынан килгән, әллә үҙе йүгерткән алһыу ҡыҙыллыҡ. Бешкән сейәләй тулышҡан ирендәрендәге алһыулыҡ та үҙ ҡанынан килгән һирпелештер, ахыры.

Бер ҡараһаң, ул артыҡ сибәр ҙә түгел һымаҡ. Мәгәр ифрат һөйкөмлө. Эске рухи донъяһындағы матурлығы шәфҡәтлелеге тышҡы һөйкөмлөлөк нуры булып сығамы? Шул нур сибәрләйме унын тышҡы өлфәһен? Бөтә матурлыҡтар, һөйкөмлөлөктәр, ғиззәтлелектәр ожмахтағы Кәүсәр күлендә манып алған мөхәббәтле ҡыҙ итеп күрһәтәме уны? Шул матурлығы менән маҡтанырға килгәнме? Янһын, көйһөн, бөтһөн, типме? Капитан Соколов ер йөҙөндәге сибәр егеттәрҙең береһе, мин уныҡы, артымдан сүпле елдәй иҫеп йөрөмә, тиме? Мөхәббәттә пар килгәндәр генә бәхетле була, тиме?

Бүлмәлә Сәлим үҙе генә ине. Быныӊ өсөн ныҡ шатланды Гизелла. Хәҙер рәхәтләнеп, йөрәкте йөрәккә ҡуйышып, күҙҙәрҙе күҙҙәргә текәшеп һөйләшергә була. Сәлимдең ошо секунд-минуттарҙа ғына ни уйлағанын белмәй Гизелла. Улар бер-береһенә оҙаҡ ҡына ҡарашып торҙолар ҙа торҙолар. Гизелла, һәр ваҡыттағыса, башта уҡ уның ҡуйынына атылмаҡ булғайны ла, тыйылды. Сөнки ҡоласын асманы Сәлим. Элекке кеүек матур итеп йылмайманы. Уның ғәйепле күҙ ҡарашын аңлау ҡыйын ине.

– Кавалер, керек эт челкат, – тине ҡыҙ, йылмайып.

Сәлим йылмайып яуап бирҙе:

– Нем тудам мадярул, кисаччан.

Гизелланың һөйкөмлөлөк нурҙары шаянлылыҡ тәбиғәте менән дә бәйлелер, бәлки. "Керек эт челкат" ("бер үптер әле") тигәнде Сәлимгә ул өйрәткәйне. Быны әсәһе тыңлап торған. Ул ваҡытта: "Өйрәтмә ундайҙарҙы", – тип асыуланған да. Ә инде ҡасабала, ни эшләптер, Совет Армияһы һуғышсыларын "кавалер" тип атау ғәҙәткә инеп киткәйне. Әлбиттә, был атама теләһә кемгә түгел, есмәни һәм рухи яҡтан күренеклерәк булғандарына ҡарата әйтелә. Гизеллала шаянлыҡ ҡына түгел, ҡыйыулыҡ дәртлеге лә Аллаға шөкөр. Сәлимде ирендәр менән үбешергә ул үҙе өйрәтте. Әле бына, шаяра-шаяра булһа ла, үбешеү тәҡдим итеүе шул беренсе һөйөшөүҙәге ләззәтле мәлдәрҙе хәтергә алыу өсөндөр, бәлки.

Сәлимдең шаянлыҡ менән: "Нем тудам мадярул, киса-чан" ("мин мадъярса белмәйем, ҡыҙыҡай"),– тип әйтеүенең ялған икәнлеген белә Гизелла. Мадъяр теле төрки телдәргә яҡын булһа ла, һөйләшә башлаһаң, уның шаҡтай йыраҡлығы ла асыҡлана. Әйтәйек, "челкат" тигәндәге "ч" ауазы "ч" менән "с" араһындараҡ әйтелә. Гармун уйнағанда бер теленә дөрөҫ баҫмаһаң да моң-көй боҙолған кеүек, "ч" менән "с" араһындағы ауазды дөрөҫ сығара алмаһаң, мадъяр теленең моңо боҙола.

Сәлим мадъярса һөйләшергә тиҙ өйрәнде. Һүҙҙәрҙе йәһәт отоп ала. Һүҙҙәрҙән һөйләм төҙөү, һөйләмдәр менән телмәр ойоштороуҙа ла ул тиклем ауырлыҡ күрмәй. Ә бына ауаздарҙағы өн музыкаһын сығарғанда, кем әйтмешләй, ҡара тиргә бата.

Мәгәр Гизелла ул тирҙе һөртөп алырға форсат бирмәй. Һаман ҡабатлата ла ҡабатлата. Сәлим юрамал ғына ҡарышҡан булһа:

– Лушта (ялҡау), – тип көлә лә йәнә ҡабатларға ҡуша.

1939 йылда ете йыллыҡты Сәлим латин графикаһында уҡып тамамлағайны. Әле бына мадъярҙа ла латин графикаһы икән. Мадъяр телен башҡа милләттәргә ҡарағанда тиҙерәк өйрәнеү шуның бер серелер. Ете йыл эсендә ауылда төрлө

уҡытыусыларҙан һабаҡ алды. Бөтәһе лә яҡшы, аҡыллы, уңған кеүек ине. Шулай ҙа Гизелла кеүек талапсаны осраманы. Гизелла игәүләне, ҡайраны, үткерләне, сүкеш менән сүкегәндәй итте уның телен. Әгәр Гизелла кеүек уҡытыусы тура килһә, тормош ауырлығына һылтанып, уҡымайынса ҡалмаҫ ине ул. Ярай, быныһы үткән инде. Ел булып иҫкән, һыу булып аҡҡан. Бына был ҡылтымҡайҙың еле ниңә сүпләнде әле, һыуы ниңә болғанды? Шундай шөғөлдәрҙән һуң улар, бөтә донъяһын онотоп, мейеһендә аҡыл күҙәнәктәре әле етешмәгән тинтәктәр кеүек ашҡынып-ашҡынып, ярһып-ярһып шаярырға тотоналар ине. Шул бәхетле-сәғәҙәтле мәңге онотолмаҫ йәшлек иҫтәлектәрен йәнә ҡабатларға уйлап булһа кәрәк, Гизелла йәнә уйын башланы. “Кавалер! Керек эт челкат”, – тип Сәлимдең йомшаҡ сәстәренән һыйпап иркәләргә кереште. Гизелланың йәш тал сыбығылай оҙон, нәфис, ләтиф бармаҡтары уның ҡолаҡ япраҡтарын, маңлайын, күҙҙәрен, яңаҡтарын, эйәген һыйпаны.

Башта Сәлимдең асыуы килгәйне. “Нимә, мөхәббәтен teләһә кемгә һатып йөрөү юлына баҫҡанмы был шаталаҡбикә?”– тип уйланы. Ултырған ерҙән ҡапыл тороп, аҙ ғына йөрөштөрөп алды ла, геометрияның ауыр мәсьәләһен сисә алмайынса башы ҡатҡан кешеләй, туҡтап ҡалды. Ни эшләргә хәҙер? “Вон бынан!” – тип ҡысҡырырғамы? Килешерме? Культураһыҙлыҡ булмаҫмы? Рәсәй халҡын улар былай ҙа “тупаҫ” тип йөрөтәләр. Уныһы – факт. Дөрөҫлөк – факт йөрәгендә. Ҡарғаны ағартып, аҡҡошто ҡарайтып булмай. Сәлимдең ҡапылғара ҡарғаға әүерелеү серен белергә ашыҡты Гизелла.

– Һиңә ни булды, кавалер?

– Ни булғанын һин яҡшыраҡ беләһең.

– Бер нәмә лә белмәйем, кавалер! Нем тудам.

– Гизелла! Башҡаса килмә бында!

– Ни өсөн?

Һүнгән усаҡтың ҡапыл дөрләп янғанылай, кинәт ҡыҙҙы ла китте Сәлим:

– Ни өсөн икәнлекте беләһең бит, Гизелла. Уны ҡаҡҡылауҙан бер файҙа ла юҡ.

– Ә минеке барабанмы?

– Эйе. Теләһә кем ҡаға уны.

– Капитан Соколовтан шикләнәһеңме?

– Һуң, шикләнәһе ҡалғанмы?

– Тимәк, көнләшәһең?

– Көнләшеүҙән уҙған был.

– Нисек уҙған? Ни һөйләйһең?..

– Ҡосаҡлашып, үбешеп торғанығыҙҙы үҙ күҙем менән күрҙем.

– Ялған!..

– Һин уға тормошҡа сыҡҡанһың!?.

– Мин-н-н? Кем әйтте?

–Бала көтәһең икән….

– Ми-н-н?.. Бала?.. Көтәм?.. Кемдән?..

– Соколовтан.

– Кем әйтте быны?

– Соколовтың адъютанты.

– Подлец ул!..

– Гизелла! Дуҫ булып ҡалайыҡ. Көнбайыш Аурупа илдәрендә, һуғыштан ҡайтҡанда... һинең кеүек сибәр ҡыҙҙы осратырмын, тип һис тә уйламағайным.

– Етте!.. Ярһытма мине! Мин һиңә Отелло тураһында һөйләгәйнем. Отелло көнләшеүҙән мөхәббәтен – Дездемонаһын быуып үлтерә. Әллә һин дә көнсөлмө? Шулай икән, мә, мә, быу, быу, үлтер. Их, һин, көнсөл тәкә!..

Кит, тиһең. Китәм. Һин барыбер Көнсығыш Аурупала мөхәббәт бөркөтөм булып күҙ алдымда баҫып торорһоң. Яратам да мин һине!.. Хуш!..

– Гизелла! Бәғрем! Йәнем! Китмә!..

Сәлим, һеләүһендәй ырғып, ҡыҙҙың юлын бүлде:

– Гизелла! Китмә!.. Аңлашайыҡ!.. Мин һин һөйләгән Отелло түгел. Мин... көнсөл түгел. Хаҡлыҡты белгем килә. Дөрөҫлөктө белгем килә. Мин дә бит һинең хаҡлыҡ яратҡанлығыңды беләм.

...Соколов, башҡаларға ҡарағанда ҡышҡылыҡ өсөн иң шәп урынды эләктереп ҡалырға тырышҡан хәйләкәр төлкөләй, Татабанъяла “идеаль” фатир эҙләп дыңкене. Биш бүлмәнән торған йорт тапҡас, ожмахтың алтын асҡысын еңел генә, яңылыш эләктергән шайтан балаһылай, эстән генә мең кәррә шатланып, ғәзизәнә ҡыуанып, үҙен ҡомдан арҡан ишә белеүсе затҡа һанап, осоноп йөрөнө. Бер бүлмәлә – Гизелла исемле аҫыл ҡош. Икенсеһендә – ағаһы. Өсөнсөһөндә – атаһы. Дүртенсеһендә – әсәһе. Бишенсеһендә, иң зиннәтлеһендә,– ул. Байҙар былар. “Зиннәтле” тигәнендә – затлы әйбер менән йыйыштырып ҡуйған карауат. Саҡырһаң, аҡҡоштай ғына матур атлап йөрөгән гүзәл Гизелланы ҡосаҡлап алаһың. Карауатҡа һуҙып һалаһың. Ындай ләззәтлелек төрөк солтанына ла тәтемәгәндер әле...

Ҡыҙ башта ҡарышып маташырға ла мөмкин. Улар шундай халыҡ. Әйтерһең, мәңге бөгөлмәҫ ғорур имән. Бөгә башлағас, тал сыбығына ҡарағанда ла йомшағыраҡ булып, һыналар ҙа ҡуялар. “Капитан Соколов” тиҙәр уны. Ҡармаҡты ҡыҙҙарҙың ҡай еренә һалырға кәрәклекте белә.

Шулай уйланы Соколов. Ул үҙе, немец офицеры кеүек, зифа буйлы. Ҡояш – ер матурлығын ҡаплап торған өсөн болотло көндө, ҡыҙҙар ҡот ебәреп торған иҫке-моҫҡо кейемле ир-егетте яратмағанлыҡты ла белә капитан. Был хаҡта башҡа офицерҙарҙың уй шөрөбө һаман буш әле. Таушалған китель, галифе кейеп йөрөүселәр ҙә бар. Бәғзе береһенең кейеменән фронтта һеңгән дары еҫе аңҡып тора. Культура етмәй. Матурлыҡҡа төкөрөп ҡарайҙар. Уларға һаман әле Рәсәйҙең “тупой мужигы” булып йөрөү танһыҡ.

Бөркөттөң ҡарғаға иш була алмағанылай, Совет Армияһы данын ебәреп йөрөүсе ундай “шалопай”ҙарға ҡырын күҙ менән генә ҡарай Соколов. Гизелла кеүек сибәр ҡыҙ табып алғас, ыҫпайлыҡты ул йәнә арттырып ебәрҙе. Яңы кителен, галифе салбарын, йылтырап торған хром итеген, сибәр аҡ йөҙөнә йәнә нур өҫтәүсе йондоҙло фуражкаһын кейеп ебәрһә, күргәҙмәгә ҡуйырҙай ир-егет була ла ҡуя.

Кителенең эске аҡ яғаһын көн һайын алмаштырып тора, төймәләрен йылтырата. Кейенеп-яһанып алғас, көйәҙ-куштан ҡыҙҙарҙан да арттырып ебәрергә теләгәндәй, көҙгө алдында орсоҡтай бөтөрөлөп ала. Бүлмәһенән сығып киткәндә ул ҡыҙығып-оҙатып ҡалыуҙарын теләп, ишетһендәр тип, юрамал ғына тамаҡ ҡырған була. Гизелла сыға, атаһы, әсәһе, ағаһы ла сығалар. Уның ҡылтым атлап китеүе Гизеллаға оҡшамай. Капитан таҡта тротуарҙан түгел, урам уртаһынан атларға ярата. Күрһендәр, йәнәһе, был ҡасабала ыҫпай офицер барлығын.

Ҡайтып ингәндә лә шул уҡ мин-минлек ҡиәфәтен юғалтмай. Баш юғары, күкрәк кирелгән. Кешеләрҙе һынар өсөн маршал Конев шикелле тишеп ҡарап ала торған ғәҙәте бар. Әгәр ул Ставканың Юғары Башкомандующийы булһа, үҙен нисек тотор ине икән? Гел юғары башты тотоп алйыған муйын, асыуы килеп, кәкерәйеп ҡуйыр ине, бәлки. Кирелгән күкрәгенең таҡтаға әүерелеүе мөмкин. Әлбиттә, кешенең эсе лә, тышы ла күркәм булырға тейеш. Болон – сәскә, кеше кейем менән матур. Бәғзе кешенең эсендәге гүзәллеген тышҡы күренеше

күрһәтеп тора. Әммә эсендәге асылташты тышҡы ҡиәфәтендә йылтырата алмаусылар бар.

Ул фронтта ла шулай булды. 1-се дивизион комиссары Шашкин, Соколов кеүек, тышҡы яҡтан күпереп бешкән ҡоймаҡ ине. Ләкин тора-бара көйҙө был ҡоймаҡ. Күптәр ут эсендә көйһә, ул үҙ йөрәгендә дөрләп янған ут эсендә көйҙө. Бер ваҡыт, дивизия командирының ваҡытлыса юҡлығынан файҙаланып, үҙен күрһәтергә теләп, тотош дивизионды тау башындағы немецтарҙы алыу өсөн күтәрә. Тау башы, күп кешеләрҙе ҡорбан итеп, алына, әлбиттә. Шуның өсөн капитан Шашкиндың түшенә Ҡыҙыл Йондоҙ – яңы орден өҫтәлә. Һуңынан тикшереп ҡараһалар, тау башын алырға бөтөнләй кәрәк булмағанлыҡ асыҡлана. Шул асыҡланған көндө Шашкин бомба аҫтына эләгеп... харап булып ҡуя.

Уның урынына капитан Соколов тәғәйенләнә. Бәй, сағыштырып ҡараһалар, капитан Шашкин менән капитан Соколов бер-береһенә ҡойоп ҡуйған ике ҡоймаҡтай оҡшаш булып сыға.Туғандар икән. Фамилиялары ғына төрлөсә. Мәгәр ҡылыҡ-фиғел, эске тәбиғәт, кәүҙә, йөҙ оҡшашлығы уларҙың бер ҡуян бәлеше эсендә ҡайнап үҫеүҙәре тураһында һөйләй.

Соколов фронтта ла көйәҙ ҡыҙҙар һымаҡ кейенеп йөрөргә ярата. Ярай, булһын. Матурлыҡҡа ҡолға күтәрергә ярамай. “Разгильдяй” атамаһы алған һалдаттарҙың яратмауы ла яман түгел. Мәгәр эске донъяһындағы матурлыҡтың тышҡы күренешендәге күркәмлек менән ярашыуы хаҡында аңлап бөтөрмәй шикелле ул. Быны фронттағы ут эсендә лә аңлайҙар инде. Татабанъяла уның тәтәйлегенә көлөбөрәк ҡараусылар ҙа күбәйҙе. Бер үҙе байрам ҡылып йөрөй, тип аптырайҙар.

Гизелла янында ул башта күбәләктәй бөтөрөлдө. “Күбәләк гөлдәргә ҡунмай, түтәлгә ҡунмаҫ инде…” – тигән йыр ҙа бар. Тимәк, Гизелла – гөл, ул – күбәләк. Күбәләк гөлдө һөйә, иркәләй, үбә. Гөл өндәшмәй. Һөйгәнде, иркәләгәнде, наҙлағанды йәнһеҙ есемдәр ҙә ярата. Уларҙың да йәне бар. Ә ҡыҙҙағы йән – ысын йән. Һөйөлөү, иркәләнеү, наҙланыу – уның өсөн йән ләззәте. Соколов, Гизелла тирәһендә күбәләктәй бөтөрөлгәс, күбәләк ҡанаты менән гөл япраҡтарын наҙлағандай, ҡыҙҙың мамыҡтай йомшаҡ сәстәренән көрәктәй ҙур, тупаҫ ҡулдары менән һыпырғыларға тотона. Иреттем, ебеттем, сихырланым тип, хәҙер инде күбәләктәй түгел, ябалаҡтай ташланайым тип ҡыҫһа, ҡыҙ, ялт боролоп, йәшкелт-зәңгәр күҙҙәре менән уға ҡарап ғәжәпләнә. Йәшкелт-зәңгәр күҙҙәр нуры, ярһып килгән фашист танкыһын яндырған ПТР уҡтарылай, капитан йөрәгенә нәфрәт атакаһы яһай. Шулай ҙа капитан был атаканан ҡурҡмай. Ҙур мөхәббәт алдынан ҡатын-ҡыҙҙарҙың ир-егеттәрҙе албыратып, шаяртып, һынап алыу күренеше генә тип иҫәпләй. Шунан һуң күбәләктән хәйләкәр төлкөгә күсә капитан. Ҡыҙ алдында матур итеп йылмайырға тырыша, көрәктәй тупаҫ ҡулдары менән ҡыҙҙың нескә биленән эләктереп алып, туп уйнағандай, уны күккә сөйә. Бына кемдә көс, кемдә ғәйрәт, кемдә айбарлылыҡ, йәнәһе. Ҡыҙҙы ҡабат аяҡҡа баҫтырғас, тотҡан сысҡанын оҙаҡ ашамайынса уйнатҡан бесәй һымаҡ, уға ләззәтләнеп ҡарап тора әле. Сөнки әлеге йәшкелт-зәңгәр күҙ нурҙары шәфҡәтлелек атакаһы яһай.

Ни етмәй? Ни кәрәк был ҡылтымбикәгә? Шулайыраҡ уйлап борсола капитан. Төлкөгә хас булған яңынан-яңы хәйлә лә таба. Бер көн, ана, магазиндан бик матур, ҡиммәтле кофта алып ҡайтып бүләк итте. Шунан һуң мөхәббәт имәне тал сыбығына әйләнде лә ҡуйҙы. Йомшаҡ сәстәренән һыйпап, ҡосаҡлап, ике битен “әп” иткәс, йәшкелт-зәңгәр күҙҙәрҙән ниндәйҙер рәхимлелек нурҙары һирпелде. Бәғзе бер ҡыҙҙың сепрәккә алданып харап булыуын белә Соколов. Әммә сепрәк менән дә еңеп булманы был шаталаҡты. Төкөр күбәләккә, төкөр

төлкөгә, бындай осраҡта мөхәббәт майҙанына йыртҡыс бүре булып ырғырға кәрәк.

...Төн. Капитан Соколовтың йоҡоһо ҡасты. Ас бүреләй, тештәрен шаҡылдатып ҡуйҙы ул. Ҡыҙҙарҙа мөхәббәттең мең ҡылысы бар. Ирҙәрҙә күпме ҡылыс? Берәү ҙә етә. Ҡыҙҙарҙың мең ҡылысын ир-егеттең бер ҡылысы менән дә ҡырып бөтөрөп була. Тик бүреләге йыртҡыслыҡ кәрәк.

Ул әле ҡарҙай ап-аҡ йәймә өҫтөндә таралып төшөп ята. Шундай уҡ ап-аҡ күлдәк-ыштан, әйтерһең, уны донъя ҡараһынан һаҡлап тора. Ә, юҡ, улай түгел икән. Уға ҡараңғылыҡ кәрәк. Бүреләр, ана, ризыҡ эҙләп, төнгө ҡараңғылыҡта сыға сәйәхәткә. Кешеләр тәмле-татлы йоҡо донъяһына сумғанда, аҙбарға инеп, һарыҡтарҙы ҡыра. Уға ла ҡараңғылыҡ кәрәк бөгөн. Ул бөгөн – бүре. Гизелла – һарыҡ. Атаһы, әсәһе, ағаһы ҡараңғылыҡ донъяһындағы тәмле-татлы йоҡо менән иҫереп ятһындар. Был минутта әгәр Гизелла ла шул ҡараңғылыҡ ләззәтенән иҫереп ятһа, әлеге мең ҡылысты ҡырырға уның бер ҡылысы ла етәсәк... Ул өҫтөндәге бөтә тән һаҡсыларын тибеп осороп, тороп баҫты ла аҡ бүрегә әүерелде. Өҫтөндәге аҡ күлдәген, аҡ ыштанын һыйпаштырып һарыҡ ауларға китте.

Ҡараңғы. Ҡараҡтар йөрөй торған мәл. Тормош яҡшыға – яманға, аҡлыҡҡа – ҡаралыҡҡа, шәфҡәтлелеккә – шәфҡәтһеҙлеккә ҡоролған кеүек, уның ғәҙелһеҙлек – ҡараҡлыҡ яҡтары бар. Мәгәр был хаҡта уйламай Соколов. Сөнки утыҙ йәшлек капитан был юлы йыртҡыс булып барыуҙы һайланы. Үҙенсә ул быны "мөхәббәт атакаһы" тип атай. (Һы-ы, атаканы 16-17 йәшлек ҡыҙҙарға аҙ яһамаҡы ул.) Бындай йәштәгеләрҙе төрлөсә миңгерәтә торған хәсиәттәрҙе беләү.

Ишеккә ул, бүре икәнлеген онотоп, башҡалар ишетмәһен өсөн, бесәй һымаҡ йомшаҡ ҡына баҫып килде. Был илдә ишектәрҙе бикләү ғәҙәте юҡ. Күрәһең, ҡараҡтар бимазаламай торғандыр. Гизелланың да ишеге бикһеҙ ине. Ҡурҡа-ҡурҡа ғына асып ингәс, һаман шулай аяҡ остарына ғына баҫып, Гизелланың карауаты янына барҙы. Улай уҡ ҡараңғы түгел әле. Ай ҡалҡҡан.

Рәхәтләнеп йоҡлай ине ҡыҙ. Карауаты киң икән. Шуның бер яҡ ситенә ятҡан. Быныһы – капитан бәхете.

Тәүәкәлләне... Бесәйҙәй мыштым ғына барып ятһа, уның барлығын да белмәйенсә йоҡлай бирҙе ҡыҙ. Ул зат төҙәнергә-яһанырға ярата бит. Бөгөн кискә табан, нindәйҙер йомош тапҡан булып, уның янына инеп тә сыҡҡайны бит. Тәбиғи матурлығы өҫтөнә һибелгән яһалма матурлыҡ уны тағы ла һөйкөмлөрәк күрһәтә. Тәмле еҫ аңҡып тора үҙенән. Егерме йәшкә етеп килә инде. Ә үҙе һаман әле – йәшлектең йәшел баҡсаһына аяҡ баҫмаған 14-15 йәшлек ҡыҙыҡай. "Мин һинеке, иптәш капитан", – тип шашындырамы?

Алып биргән бүләктәренә рәхмәтен тән-кәүҙә уйнатып әйтәме? Бәлки, төнгөлөккә үҙе янына саҡырыу ымдары булғандыр был. Шулай булыуы хәҙер ныҡлап асыҡланды. Ул килеүгә... карауатының бер яҡ ситендә урын ҡалдырыуы ла аңлатып тора быны. Һәй, төлкөләнә белә лә һуң ҡыҙҙар.

Гизелланан, эйе, тәмле еҫ килә. Көндөҙгө биҙәнеү әйберҙәренән сибәр йөҙөнә лә, гүзәл тәненә лә һеңеп ҡалғандыр. Шулар өҫтөнә йәнә йәшлек тәме генә түгел, бала еҫе лә килгәндәй. Сәстәрен һыйпап наҙлағанда, ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлағанда иркәләнергә тырышмауы, асыҡ йөҙөнөң ваҡыт-ваҡыт ҡараңғыланып китеүе, мин тиҙ генә бөгөлә торған тал сыбығы түгел, тип ҡыҙлыҡ ғорурлығы күрһәтеү ғәләмәте генә булғандыр. Әле бына салҡан ята. Одеалын атып орған. Шәрә. Зөбәржәттәй һылыу тәне балҡый. Тигеҙ тын алышы капитандың нәфсеһен тағы ла ҡотортоп ебәрә. Ул, бәлки, йоҡламайҙыр ҙа, сукынмыш! Йоҡлаған булып, ирештереп кенә яталыр. Әгәр шулай икән... Ыһһым... Дошман амбразураһына ташланыу түгел бит әле был... Тәүәкәлләргә!..

Капитан зөбәржәт тән өҫтөнә ҡапланды. Ҡыҙ, ҡапыл уянып китеп, сәрелдек тауыш сығарып ҡысҡырып ебәрҙе. Капитан әлеге көрәктәй ҡытыршы һул ҡулы менән ҡыҙҙың ауыҙын ҡапланы. Әммә ҡыҙ ауыҙын ҡаплаған ҡулын этәреп, үткер тештәрен уның беләгенә батырҙы. Хәҙер инде ҡыҙ түгел, офицер баҡыра. Аптырағас, һул ҡулы менән ҡыҙҙың йә башына ора, йә ҡабырғаһын дөмбәҫләй…

Тауышҡа атаһы, әсәһе, ағаһы килеп еттеләр. Шәм ҡабындырылды… “Самосуд”.

Эш “суд”ҡа уҡ барып етте.

***

“Суд” демаштарҙыҡына оҡшашыраҡ булды, быны ла “намыҫ суды” тип атарға мөмкиндер. Ғәйепләнеүсе – капитан Соколов. Ғәйепләүсе – Гизелла, судья – атай кеше Шандр. Прокурор – әсәй кеше Чәмилә. Адвокат – Гизелланың ағаһы Кадри.

Улар, иртәнгелекте ашағандан һуң, иң иркенерәк иҫәпләнгән Шандр бүлмәһенә йыйылды. Был мәлгә тиклем, йод һөртөп, Чәмилә ханым капитандың Гизелла тешләп яралаған ҡулын аҡ марля менән бәйләп ҡуйғайны инде.

Хужа Шандр – илле биш йәшлек ир. Элекке бай, затлы нәҫелдән. Был затлылыҡ хәҙер Шандрҙың клуб тотоуы, биш бүлмәле фатирҙа тороуы менән аңлатыла. Йомшаҡ тәбиғәтле кешегә оҡшай. Шулай ҙа оҙон ғына буйы, киң күкрәге, бит остары һипкеллерәк булыу, асыҡ йөҙө мөләйем дә күрһәтә үҙен.

Шандрға баһаны ҡара сибәрҙәр сафына баҫтырып та бирергә мөмкиндер. Һүҙгә һаранытраҡ. Ә бына Чәмилә ханым – Шандрҙың киреһе. Һүҙгә бик йомарт. Тәтелдәп тора.

Кадри буй яғынан да, төҫ-йөҙ буйынса ла атаһына тартым.

Шандр, “суд” башланғансы, был серле ҡараңғы төндә булған хәлде Гизелланан һораштырып алды. Гизелла, мәғлүм инде, алдаша белмәй. Әсәһенә лә, ағаһына ла үҙен һөттәй аҡ, һыуҙай пак итеп күрһәтте.

Суд ҡарары шулай буласаҡ: капитан Соколов был йорттан китергә тейеш.

Шандр һорауҙарҙы еңел генә, йомшаҡ тауыш, шулай ҙа ныҡ талапсанлыҡ күрһәтеп бирҙе. Ул талапсанлыҡ егәрлеген Чәмилә арттырып ебәрә. Кадри иһә атаһының, әсәһенең һүҙҙәрен, һорауҙарын ым ҡағыу менән раҫлап ултыра.

Капитан башта үҙен тыныс тоторға тырышты. Ни генә тимә, Совет Армияһы рухында тәрбиәләнгән, һуғыш уты эсендә тәртип өсөн көрәшкән айбарлы офицер. Уның шулай икәнлеген күкрәгендәге ордендары, миҙалдары раҫлай. Бөгөн дә ыҫпай кейенеп алғайны ул.

Күберәк судья һөйләне. Йомшаҡ ҡына итеп:

– Һеҙ хәҙер үк был йорттан китергә тейешһегеҙ, иптәш капитан, – тип теүәлләне ул һүҙен.

Капитан, ҡорт саҡҡан кешеләй, үҙен-үҙе өҙгөләп ташлау сигенә етеп, урынынан һикереп торҙо. Алһыу йөҙө бына хәҙер шырпы һыҙһаң ҡабынып китер дәрәжәлә уттай яна. Шул утты һүндереү ниәте менән булһа кәрәк, иркен тын алып ҡуйҙы ул. Һүҙ атакаһын шунан ғына башланы:

– Мине сығарып ебәрергә һеҙҙең хаҡығыҙ юҡ. Был йорт хәҙер һеҙҙеке түгел – беҙҙеке. Беҙ – еңеүселәр. Һеҙ – еңелеүселәр. Һуғыш бөттө. Әммә беҙ үҙ илебеҙгә – Рәсәйгә ҡайтып китергә ашыҡмайбыҙ. Сөнки беҙгә Германия, Польша, Чехословакия, Румыния, Венгрия илдәрендә яңыса йәшәү – советса йәшәү тәртибе урынлаштырырға кәрәк. Беҙҙең халыҡ биш бүлмәле фатирҙа йәшәмәй. Хәҙер һеҙ ҙә шулай торорға тейешһегеҙ. Бер бүлмәгә тулығыҙ. Ҡалған дүртеһе – беҙҙеке.

Уның оҙонға һуҙыласаҡ һүҙ ебен Шандр-судья бүлде:

– Туҡтағыҙ әле … кем… капитан әфәнде… был законды кем сығарған?
Түҙемһеҙлеге боғаҙын быуған Чәмилә-прокурор һорау осҡононан ут дөрләтте:
– Ысталин шулай ҡушамы?
“Адвокат” Кадриҙың да һорауы үҙенсәлекле булды:
– Тимәк, һеҙ бында беҙҙе талау өсөн йәшәйһегеҙ?
Капитан уттай ҡыҙҙы ла китте:
– Һеҙҙең миңә бындай һорау бирергә хаҡығыҙ юҡ. Мин хәҙер һеҙҙе судҡа бирәм.
– Ни өсөн беҙҙе судҡа бирәһегеҙ?
– Ғәйебебеҙҙең төбө-тамыры булырға тейеш бит?
– Әллә һеҙҙең суд формаль күренеш кенәме?
Яуап:
– Мин – Совет Армияһы офицеры. Һуғыш утынан яраланмайынса сыҡтым. Ә бына һеҙҙең Гизелла... яраланы.
Йәнә утлы һорауҙар яуҙы:
– Ә ниңә төндә уның янына индегеҙ?
– Ниңә уны көсләйһегеҙ?
– Совет Армияһы үҙ офицерҙарын шуға өйрәтәме?
– Етте! Совет Армияһына тел тейҙермәгеҙ! Репрессия йылдарында мин Советтар Союзындағы утыҙҙан артыҡ халыҡ дошманын НКВД-ға тоттороп биргән кеше. Ә инде ҡыҙығыҙ мәсьәләһендә килгәндә шуны әйтәм: янына ул мине үҙе саҡырҙы. Ҡыҙығыҙ боҙоҡ. Һалдат казармаһына йөрөй. Пирмөхәмәтов тигән бер сержант аламаһының муйынына аҫылына...
Түҙемлеге ҡулдарындағы ун бармаҡ остарына ғына түгел, аяҡтарындағы ун бармаҡ остарына тиклем килеп еткән Гизелла, тып-тып баҫып, капитандың алдына килеп баҫты. Ул хатта ҡалтыранып тора ине. Ниҙер әйтергә теләне. Теле тибрәнде. Һүҙе табылманы. Бөтә көсөнә ҡоласын йәйеп, капитандың битенә берҙе сәпәне лә йүгереп сыҡты ла китте.

## VIII

Һуғыш бөткәнгә бер йыл яҡынлашып килә. Өлкәнерәктәр һаман өйгә ҡайтарып ебәрелә. Был бәхет Ставка ҡарамағындағы миномет полкының беренсе батареяһындағы гвардия старшинаһы Гулайға ла йылмайҙы. Башта Башҡортостандағы Алкин лагерында хеҙмәт иткәндә лә, Таутөмәндә лә, фронтта ла бөтә хәрби уставтарҙың, әйткәндәй, энәһенән ебенә тиклем ныҡ белеп эш итеүсе украин ине ул. Ҡайтып етеү менән хат яҙҙы. Колхоз рәйесе итеп ҡуйғандар икән. Әлбиттә, йылдар ауыр. Шулай ҙа фронтовик рәйес һынатмаҫ.
Гулай ҡайтып киткәс, уның урынына гвардия старшинаһы Сәлим Пирмөхәмәтте ҡуйҙылар. Дөрөҫөн әйткәндә, Сәлим үҙе теләмәгәйне, был вазифа әллә нисек фәтүәһеҙ тойолдо. Өҫтән ҡарағанда, бер мәшәҡәте лә юҡ кеүек. Ашат һалдатты, кейендер, ял иттерә бел, теләһә ниндәй ыбыр-сыбырҙар донъяһына танауыңды тығып, аҙашҡан мосафирҙай, ваҡ-төйәктәр араһында үҙ ҡәҙереңде үҙең белмәйенсә йөрөмә. Һуғышта “минометсы-снайпер” булһаң, хәҙер инде “старшина-снайпер” була бел. Ысынлап та, бында ла “снайпер”лыҡ һәләте бик кәрәк икән шул. Энә һорап та, еп һорап та, төймә һорап та килеүселәр бар. Ә һин – тап. Снайпер шикелле тура ата бел.
Мең төрлө ығы-зығы, ваҡ-төйәк эш, көндәлек көйһөҙлөктәрҙән арынғас, фронт көндәлектәрен ҡараштырырға ултыра.
Бөгөн дә шулай булды. Иртәнгелекте ашап алғас, батарея хәрби шөғөлгә китеп барҙы. Казармала ул бер үҙе генә. Әлеге лә баяғы, Трапезников менән уның

етәкселегендә йүнәтелгән казармала. Бер мөйөштә, старшина өсөн тип, бәләкәй генә бүлмә рәтләп алғайнылар. Гулай киткәс, унда Сәлим килеп урынлашты. Бер карауат, бер ултырғыс. Бәләкәй генә өҫтәл.

...Гизелла килеп ингәйне, өҫтәл өҫтөндәге ҡағыҙҙарын аҙ ғына йыйыштырып, аяғөҫтө баҫты. Башҡа ваҡытта осрашҡанда йүгереп килеп Сәлим ҡосағына бесәй балаһы урынына йомола торғайны Гизелла. Тик бөгөнгө торошо аңлайышһыҙ ине Сәлимдең. “Ниңә килдең?”, “Ни кәрәк минән һиңә?”, “Ҙур мөхәббәтемде Соколов менән шаярып бысраттыңмы?” тигән һымағыраҡ ҡарай. Ҡоласын асырға әллә ҡурҡа, әллә шикләнә, әллә ярамай…

Ысынлап та, ни эшләргә лә белмәй Сәлим. “Гизелла бала көтә” тигән һүҙҙәр уның ҡолаҡ төбөндә бомба ярылғандай шаңдағайны. Бәй, баҡһаң, элеккегә ҡарағанда ла нәҙегәйеп ҡалған, ҡылдай нескә бил. Нур сәсеп торған һөйкөмлө йәшкелт-зәңгәр күҙҙәр. Болотһоҙ көндәй асыҡ йөҙ. Сейә ирендәр.

Әлбиттә, Сәлимдең һөйәһе, һөйөләһе килә. Был теләк Гизеллала артығыраҡтыр ҙа әле. Тик… бер-берейһенә элеккесә мөхәббәт ялҡыны менән ташланыу өсөн ике арала үткән ҡара бесәй юлына зиһен-төпһөн дарыуы һибергә кәрәк. Шуны аңлаған зирәк күңелле Гизелла һүҙ башланы:

– Сәлим!.. Һин ниңә асыулы?.. Ниңә һин минең янға килмәйһең?

Сәлим асыҡтан-асыҡ һөйләп бирергә булды. Ҡасып-боҫоп ҡарағанда Гизелланың капитан менән үбешеүе, ҡосаҡлашыуын иҫкә алынды. Адъютанты Хромовтың “ауырға ҡалыу” мәсьәләһен әйтеүен дә урап үтмәне.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Гизелла ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Шунан ул үткән төндө Соколов менән булған “спектакль” тураһында бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе. Капитан менән бер ҡасан да ҡосаҡлашмауын, үбешмәүен бәйән ҡылды.

– Ҡурҡҡанға ҡуш күренә, әллә ниҙәр пәйҙә була көнләшкәндең күҙендә. Тимәк, һин – көнсөл?

– Барҙыр инде. Мөхәббәт иҫертә, тиҙәр.

– Мин дә һинең мөхәббәтең менән тилеләнеп йөрөйөм.

Ғашиҡтар бер-берейһенең ҡосағына ташланды.

...Оло мөхәббәт ваҡ-төйәк һөйләшеүҙәргә мохтаж түгел. “Ваҡ-төйәк” тигәненә һалҡын ғына ҡул ҡыҫышыу, ҡырағайҙарса шашып ҡосаҡлашыу, ахмаҡтарса “яратам” тип тел тирмәнен уйнатыу инәлер.

Был хаҡта беләме беҙҙең был ике мөхәббәт әһеле? Хәйер, мөхәббәттең нәзари (теоретик), ғәмәли (практик) яғы юҡ та инде. Мөхәббәт мәктәптә лә, юғары уҡыу йорттарында ла айырым фән булараҡ уҡытылмай. Мәгәр аҡыллы мәктәп уҡытыусыһы мөхәббәт, дуҫлыҡ хаҡында, яйы тура килгән һайын, һүҙ шәрбәтен уҡыусы йөрәгенә һеңдерә бара. Юғары синыфтарҙа ул айырыуса кәрәк. Вуздарҙа этика, эстетика тураһында һөйләгәндә, философтар мөхәббәт мәсьәләһен урап китә алмай.

Туҡта! Ниңә әле беҙ мөхәббәт тураһында һүҙ йөрөткәндә, мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында аҙашып йөрөйбөҙ? Бөтә донъя үҙе бер ҙур мөхәббәткә ҡоролған да баһа. Мөхәббәттең беренсе орлоғо – Атабыҙ Әҙәмдә, Әсәбеҙ Һауала. Шул орлоҡтарҙан киткән миллион-миллиардтар йәшәй бөгөн. Халыҡ ғүмер буйы мөхәббәт менән һөйөшөүҙең эске гармонияһын аңларға тырышҡан. Уны аңлау өсөн меңләгән халыҡ йырҙарын иҫкә алырға кәрәктер. Ана бит:

*Ебәк кулдәктәр килешмәй –*
*Кейә белмәгәндәргә;*
*Зифа буйың әрәм итмә,*
*Һөйә белмәгәндәргә, –*

ти халыҡ.

Йөҙө сибәр Соколовтың, тик ҡулы ҡытыршы. Әгәр эске донъяһы серек булһа, был ҡытыршылыҡ Соколовтың йөҙөнә лә сығырға мөмкин. Кешенең йөҙө – эске донъяһын сағылдырып тороусы көҙгө ул.

Һөйә белә Гизелла. Оҙон, йомшаҡ, латиф бармаҡтары менән сәсеңде һыпырыуы тышҡы һөйөүгә инәлер, бәлки. Мәгәр ул бармаҡтар осонан йөрәге төпкөлөнән үк килгән мөхәббәт ялҡыны тамғандай. Был ялҡын Сәлимдең маңлайын, яңаҡтарын, эйәген, ҡолаҡ остарын ҡыҙҙыра. Бармаҡтары осонан донъялағы иң татлы бал-шәрбәт тамып тора һымаҡ. Шундай уҡ наҙ шәрбәтен Сәлим Гизелланың алтын сәстәренә, йөҙөнә, күҙенә тамыҙа. Оһ, ул күҙҙәр! Гизелланыҡы йәшкелт-зәңгәр. Шул һөйкөмлө күҙҙәрҙән сыҡҡан сихырлы нурҙар ҙа тышҡы күренеш кенә түгел, йөрәктән, эсәк-бауырҙарҙан, үпкәләрҙән килгән мөхәббәт нурҙары улар.

Был балҡыштан һуң, һикереп тороп, мадъярсалап әйтте Сәлим:

– Кисаччан![2] Дере белем читални!

Улар оҙаҡ ҡына үбешкәс, үҙҙәрен мөхәббәт диңгеҙендә йөҙгән иң бәхетлеләр тип уйлап, ҡулға-ҡул тотошоп сығып китте. Тышҡы ишек төбөндә торған дневальный, был бәхетлелектең семтеме генә булһа ла миңә лә тейһә ине тип, оҙон теле менән иренен ялай-ялай, оҙатып ҡалды уларҙы. Парлашып барыу өсөн тротуар тар. Ғашиҡтар урам уртаһынан атлай. Бер аҙ китеп, икенсе урамға боролғанда, ҡаршыларына сержант Юлдашбай килеп сыҡты.

Фронтта уны кемдер “Юҡташбай” тип атаны. Курск дуғаһында һуғышҡанда исеме есеменә тура килә кеүек ине. Халыҡтың: “Юлға сыҡһаң, юлдашың үҙеңдән яҡшы булһын”, – тигәнен иҫкә алһаҡ, был исем хәтәр ғорур яңғырай ине. Сөнки фронтта бер-береңә ысын юлдаш була белеү – утлы юлдар үтеү, үлемгә етәкләшеп барыу, кешелеклелекте Ватан төшөнсәһе менән бәйләү мотлаҡ.

Юлдашбайҙы башта өсөнсө батареяла расчет командиры итеп ҡуйҙылар. Атыу сәнғәтен үҙләштерә алманы. Бәләкәй генә командир булһа ла, күкрәген генералдыҡылай киреп, маһайып йөрөргә яратты. Алабута аш булмаҫ, ҡарға моңдаш булмаҫ, ишәк юлдаш булмаҫ, тигәндәй, фронт юлында ышаныслы була алманы ул. Алаптай ауыҙын киреп асып, тамағыма һөйәк ултырҙы, алығыҙ, тигәндәй, бер ҙә юҡҡа баҡыра-баҡыра эш итте. Һәр мәҙәктән ҡыҙыҡ эҙләп йөрөгән шаян һалдаттар, әллә ниндәй утлы һүҙҙәр менән асыуын ҡабартып, юрамал ирештерәләр быны.

Тора-бара Юлдашбай расчет командиры булыуҙан азат ителде. Төҙәүсе, ҡороусы вазифалары ла уның һол белмәгән ҡулдарына, килбәтһеҙ кәүҙәһенә көләп ҡараны. Мина ташыу кеүек “ҡара” эште башҡарғанда ул ҡара тиргә бата. Тимәк, физик хеҙмәттең әрәсәһен белмәй. Ындай командир нисек итеп һалдатты энә күҙенән үтерлек итеп тәрбиәләһен? Ялҡаулыҡ шәрәмәте уның ҡанына биҙгәк серәкәйе булып һеңгән. “Юлдашбай”, шулай итеп, “Юҡташбай”ға әүерелә. Тимәк, “юҡ” кеше, “юҡҡа” бай кеше. “Шәрәмәтбай” тип әйтеүселәр ҙә бар. Һуғышсының бер-береһенә талабы ифрат ҙур. Ут эсендә ул батырлыҡ-ҡаһарманлыҡ ҡына түгел, кешелеклелек буйынса ла имтихан тота. Был имтиханда “икеле” ала башланы “Юҡташбай”.

Шәрәмәт кеше – шәрә кеше. Аҡылы шәрә уның. Ул, әлбиттә, шәрә ерен ҡаплау өсөн төрлө хикмәттәр эҙләй башлай. Йә ялағайға, йә хәйләкәргә әйләнә. Нисек кенә уйлама, алабарман ала ҡарға булып ҡала. Алйот аҡылһыҙға әүерелә.

[2]*Кисаччан —кис (ҡыҙ), ач, чан — иркәләп, яратып әйтеү ҡушымсалары; дере белем читални — бер күңел асып киләйек әле.*

Юҡташбайҙа быларҙың бөтәһе лә бар. Фронтта ул Соколовтың көсөгөнә әүерелеп китте. Адъютантты “көсөк” тип йөрөтәләр. Сөнки ул ниндәйҙер бер офицерҙың үксәһен ялап йөрөй. Соколов 1-се батареяны күрә алмай торғайны. Унда Алтынай, Мәҙинә тигән ике телефонсы бар. Соколов икеһенә лә ҡармаҡ һалып ҡараны. Береһен дә эләктерә алмағас, Соколов 1-се батарея командиры Исхаҡов тураһында ҡара ғәйбәт таратырға тотондо. Исхаҡовтың ҡармағы, йәнәһе, был сибәркәйҙәрҙе ҙур гонаһ өсөн эләктереп алған.

Соколов Юҡташбайҙы ошаҡсы итте. Исхаҡовтың әлеге ҡыҙҙар менән шәмшәкәр уйнағанын күҙәтергә ҡуша. Күҙәтә Юҡташбай. Алла урынына күреп йөрөгән капитанына килеп юкты бар итеп тәтелдәй. Башҡа “кәмселектәр” тураһында ла ғәйбәт сәсә. Сәлимгә “ Гизелланың Соколовтан бала көтөүе” тураһында әйтеүе – шул ғәйбәт бәләһе.

Шәрәмәтлекте алдашыу менән ямарға тырышыу хөсөтлөгөнөң серек тамыры бар Юҡташбайҙа. Атаһы ваҡ-төйәк сауҙа итеү менән шөғөлләнә. Берҙән-бер улын “өф-өф” итеп үҫтерә. Аҡса йәлләмәй. Еңел тормош әүерелдерә уны алйотлоҡҡа.

… Осрашҡас, асылып торған шалопай ауыҙын бик берәгәйле һүҙ менән яптырырға булғайны ла Гизелла, быны һиҙеп алған Сәлим, “кәрәкмәй” тигәнде аңлатып, уның ҡулын ҡыҫты.

Быларҙы күреү менән ҡойолоп төштө Юҡташбай. Ҡалтыранып ҡуйҙы хатта. Туҡта! Ҡара шаҙра йөҙө ҡытыршылана башлаған түгелме быныҡ? Ҡыҙыҡ. Соколовтың ҡара ҡытыршылығы ҡулына сыҡҡан. Быныҡы – йөҙөнә. Былар алдында ул балҡып торорға тырышты. Тик ул балҡыштың ялғанлығын ахмаҡ та аңларлыҡ ине.

Сәлим менән Гизелла, ҡулдарын ҡайнар ҡыҫышып, ары китеп барҙы. Юҡташбай “аһ”, “уһ” килеп, төкөрөнөп тороп ҡалды.

## Дүртенсе бүлек

*Ватан менән намыҫ илаһиаты бар,*
*Мөхәббәттә ике аҡҡоштай улар пар.*
*Ғаләм киңлегендә балҡый ҙур мөхәббәт.*
*И кеше! Шул балҡышҡа өҫтә шәфәғәт.*

I

“Илде һөйөү – йөрәктә, сит мөхәббәт – тирәктә”, – тине бер һөйләшкәндә Гизелланың атаһы Шандр әфәнде. Был ғибәрәнең барлыҡ милләттәр өсөн уртаҡ булыуы бар. Шулай ҙа, ҡояшты ла бөтә яҡлап уртаҡ итеп булмағандай, ҡанатлы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен бөтә ерҙә лә бер самалы ҡулланыу мөмкин түгелдер. Әйтәйек, ҡояш бер урында уттай ҡыҙҙырһа ла, икенсе төбәктә йылыһы ул ҡәҙәре түгел. Тирәк бер илдә тәбиғәт матурлап балҡыһа, икенсеһендә төбө-тамыры менән юҡ. Булһа ла, бәғзе ҡәүем өсөн ул сит мөхәббәткә әүерелергә мөмкин. Быға миҫал итеп боронғо һунгер ырыуҙары яҙмышы тураһында һөйләй Шандр. Һунгерҙар шаҡтай йыраҡ замандарҙа Урал буйҙарында, хәҙерге Башҡортостанда йәшәгән. Мәгәр, ниңәлер, тирәк улар өсөн ят ағас булып иҫәпләнгән. Ҡәүем-ырыу, был ерҙәрҙе ташлап, Көнбайыш Аурупа илдәренә китә. Дунай буйҙарына ғашиҡ булалар. Славян халыҡтары уларҙы “венгр” тип атай. “Мадъяр” тигән икенсе исем дә тағыла быларға. Мад – яңылыҡ, яр (ир, халыҡ). Йәки яңыса йәшәүҙе өмөт итеүсе халыҡ.

Беҙҙә ете быуын ата-бабаңды белергә ҡушалар. Мадъярҙарҙа ла шулай икән. Башҡортостанда ҡалған етенсе быуаттағы ата-бабалары тураһында һөйләргә ярата Шандр. Улар әле уғыр-фин ҡәүемдәре ғаиләһе ҡанында йәшәй. Уртаҡ

ҡан – ер аҫтында. Хәҙерге мадъяр ғалимдары ул яҡтарға һаман әле экспедиция ойоштороп тора. Илеш районы аша ашҡына-ашҡына Ағиҙелгә ҡушылырға аҡҡан Һөн йылғаһының уң яҡ ярында, әйтәйек, ҡаҙып ҡарағас, мадъяр һөйәктәре табыла. Һөн йылғаһына атаманы (Сөн) боронғо һундар бирә, эйе “с”, “һ” өн-ауаздарының сиратлашыуы хан заманынан бирле килә.

Төрки телдә һөйләшеүсе һундар беҙҙең эраға саҡлы уҡ әле көньяҡ-көнсығыш чиндар (ҡытайҙар) менән сиктәш йәшәй. Чиндар ҙа, һундар ҙа – көслө ҡәбилә. Уҫал үгеҙҙәй, һәр ваҡыт һөҙөшөп ғүмер итәләр. Һөҙөшөү ваҡыт-ваҡыт йөҙ йылға һуҙыла. Ләкин һуғыш туҡталмай. Шулай ҙа – һуғыш утының һүнәсәгенә ышаныс бөткәс, ике яҡтағы дәһшәтлеккә амин тотоп, башҡаса ҡан ҡоймаҫҡа ант ителәә. Хәҙер инде ике арала дуҫлыҡ хис-тойғолары тантана итә. Саҡырышыу, ҡунаҡ итешеү, күңел асыу. Бәй, баҡһаң, хис-тойғолар яҡынлығы күптән килә икән дә баһа. Һундар менән чиндарҙың моңо, көйө бер-береһенә яҡын икән. Мәгәр был яҡынлыҡҡа чиндар барыбер ҡылыс менән киҙәнә. Чиндар, шымсылыҡ итеп, күп ҡәбилә-ырыу булып йәшәгән һундарҙы үҙ-ара ыҙғыштырыу хәйләһенә ирешә.

Ә бына утта ла янмай, һыуҙа ла батмай торған мөхәббәт йәшәй бирә. Йәштәр алдатмаҫҡа тырыша. Йәшерен һөйөшөүҙәр башлана. Бер үк ваҡытта быны тыя торған ҡанун барлыҡҡа килә. Тик ныҡ ҡабынған мөхәббәт утын һүндереп булмай. Ҡытай егете Чин Ча Хо һун ҡыҙы Һандуғасҡа ғашиҡ була. Улар ләззәтле һөйөшөү ваҡытында тотола. Хөкөм ҡаты: икеһен бергә бәйләп, утта яндыралар.

Мәгәр мөхәббәт янмай. Уның ялҡыны зәңгәр күккә һеңеп ҡала. Мөхәббәттең утта янмауы тураһындағы риүәйәт шул замандарҙа уҡ барлыҡҡа килә.

Атаһы һөйләгәндең бөтәһен дә йөрәге менән тыңлай Гизелла. Мадъярҙарҙың нисек барлыҡҡа килеүе, тарих уларҙы ниңә күсеп йөрөргә мәжбүр итеүе айырыуса ҡыҙыҡһындыра ҡыҙҙы. Бындайҙарҙы тыңларға Сәлим дә ныҡ ярата. Һуңғы ваҡытта Гизелла янына килеүен айырыуса йышайтты. Был йортҡа мөхәббәт кенә түгел, Гизелланың атаһы, әсәһе, ағаһы уны яратыуы, яҡын күреүе, яҡты йөҙ менән ҡабул итеүе лә әйҙәп тора.

Утта яндырылған егет менән ҡыҙ тураһында һөйләүе сәйерерәк тойолдо, әлбиттә. Ә инде “мөхәббәт” тигәне – бәхәслерәк төшөнсә. Уны хәл итеү өсөн айыҡ аң-аҡыл да,төҙөк хис-тойғо ла кәрәк. Сәлим уйлауынса, утта яндырылған мөхәббәт тураһында ул нығыраҡ борсолорға тейеш. Бындай борсолоу саҡҡыһы Гизелла йөрәген дә яндырып ебәрҙе. Тора-бара ул ялҡынға әүерелде. Һаҡ булығыҙ, ике ил мөхәббәтен ҡушыу фажиғәгә алып бара, тип уйлайҙыр, бәлки, атаһы.

“Уйың булһа ла уйлама, уй һарғайтыр йөҙөңдө”, – тиҙәр. Мәгәр йөҙ һарғайтыр саҡтары үткәйне инде уларҙың. Мөхәббәт, барлыҡ ҡаршылыҡтарға йоҙроҡ күрһәтеп, үҙ илаһилығы менән йәшәй бирә, ҡанатлана бирә.

Һуғышта, самолет ҡанатына ут ҡапһа, уны үткәрмәҫ өсөн, осоусы юғары тиҙлектәге пилотаж фигуралар яһай. Шунан самолет ҡанатындағы ут ел ҡанатына күсә. Ут эскә үтмәгәс, осоусы иҫән ҡала. Мөхәббәт ҡанатына ут ҡапһа ла, йөрәгеңде яндырып харап итмәһен өсөн, шундай киҫкен хәрәкәттәр эшләргә кәрәктер ул.

Гизелла был хаҡта уйлап әрнемәне түгел. Төндә күргән төшө ул уйҙарҙы ҡатмарландырып ебәрҙе.

... Таң. Гизелла һаман йоҡлап китә алмай. Керпек осона килеп ҡунған йоҡо нуры утҡа әүерелә. Шул ут ойотто уның йоҡо нурын. Сулпан таңды уятып мәшәҡәтләнгәндә талды ла тәрән йоҡоға.

…Боронғо заман. Ҡырағай далалар. Ҡырағай ҡиәфәтле кешеләр ҡулдары шаҡарып бәйләнгән егет менән ҡыҙҙы дөрләп янған ут эсенә килтереп баҫтыра. Яна егет менән ҡыҙ. Тик бер һүҙ ҙә әйтмәйҙәр. Хатта иламайҙар ҙа. Йәлләтергә теләмәйҙәрме? Беҙ яратышабыҙ, һөйөшәбеҙ, мөхәббәт – иң бөйөк хистойғо ул, ҡурҡыуға, түбәнһенеүгә, меҫкенләнеүгә мохтаж түгел, тиҙәрме?

Ут ҡапыл егет менән ҡыҙҙы күккә сөйҙө. Ҡайҙа осто улар? Ожмахҡамы? Ғәрше көрсигәме? Ете ҡат күк аръяғынамы? Гонаһһыҙ донъяғамы?

Сулпан таңды күптән уятҡайны инде. Гизелланың таң йоҡоһо оҙаҡҡа барманы. Ҡысҡырып уянып китте лә, ике ҡулы менән башын тотоп, аңҡы-тиңке торҙо. Унан һуң аяғы менән ишеккә типте: һаташыу унық аҡылын еңеләйткәйне шикелле. Уның ҡысҡырып ебәргән тауышына атаһы йүгереп килде.

– Ҡыҙым! Гизеллам! Һиңә ни булды?

– Бер ни ҙә булманы, атай.

– Ҡотоң осҡан бит…

– Һаташҡанмын…

– Күренеп тора…

– Бынан һуң яндырыуҙарҙы һөйләмә, атай!

– Ярай, ҡыҙым, һөйләмәм.

– Беҙҙең дә мөхәббәтебеҙ шулай бит. Икебеҙ – ике ил балаһы…

– Тыныслан, ҡыҙым!

...Башҡорт халҡының кешелеклелек, изгелек, әҙәплелек тураһында сығарылған мәҡәл-әйтемдәре күп: “Яҡшылыҡ ерҙә ятмаҫ”, “Яҡшылыҡтың әжере – яҡшылыҡ”, “Яҡшылыҡ – донъя ҡуласаһы”, Яҡшылыҡтың ҡәҙерен белмәгәндәргә ул ҡаты хөкөм иҫкәртә: “Кешегә баҙ ҡаҙыһаң,тәрәнерәк ҡаҙы, үҙең дә һыйырлыҡ булһын”, “Елгә ҡаршы төкөрмә, битеңә сәсрәр”.

Ундайҙар мадъяр халҡында ла күп икән. Сәлимдең һуғыш уты эсендә лә, һәр форсаттан файҙаланып, көндәлек яҙғанлығы беҙгә мәғлүм инде. Хәҙер ут эсендә дары еҫе еҫкәп түгел, саф һауа һулап йәшәйбеҙ. Шөкөр! Яҙ, Сәлим! Яҙа Сәлим. Ни өсөн? Быны ул үҙе лә аңлап бөтөрмәй әле. Киләсәктә улар нигеҙендә повестар, романдар яҙасағы тураһында уйлап та ҡарамай. Шандр, ана, Урал буйҙарында йәшәгән башҡорттар тормошо тураһында әллә ниндәй ҡыҙыҡ ваҡиғалар һөйләй. Ваҡиғаларҙы мәҡәл-әйтем менән ослап ҡуйырға ярата: “Бер яманлыҡ эшләһәң, ул һиңә йөҙ ямаулыҡ булып ҡайта”, – тине бер көн. “Ямаулыҡ” – боронғо башҡорттарҙан килгән һүҙ. Яман кешегә Хоҙай ямаулыҡтан артыҡты бирмәй, йәнәһе. Ямандың ғүмере иҫке кейем ямап үтә, имеш.

Был ғибәрәне Шандр капитан Соколов яҙмышына бәйләп әйтте. Тышҡы яғы балҡып торған офицер булғаны өсөн бер бүлмәһен биргәйне уға Шандр. Ә бына эсе серек булып сыҡты капитандың. Гизелла менән шәм-шәкәрле уйнау ниәте барып сыҡмағас, был ғаилә алдында ғәфү үтенергә тейеш ине бит. Ә ул ни эшләне? Гизелланы, һалдаттар казармаһында уйнаш итеп йөрөүсе ҡыҙ, тип ялғанланы.

Капитандың үҙ илендә утыҙлап “халыҡ дошманы”н ултыртыуы тураһындағы лығырҙығын да яратманы. Шандр Рәсәй, Америка, Англия, Франция кеүек ҙур илдәрҙең эске сәйәсәте хаҡында ла ғәйәт мауығып һөйләй. Ә бына СССР-ҙағы 1937 йыл репрессияһын әсенеп телгә ала. Был фажиғәне шул осорҙа халыҡтың ялғанға ышаныуы, кеше яҙмышы тураһында аҙ уйланыуы, бының һаман әле томаналыҡ шәрәмәте икәнлеге асыҡлай. Матур ғына, әҙәпле генә, кешеләрсә генә фатирҙы бушатыуын үтенгәс, ул, һарыҡҡа ырғылырға торған йыртҡыс бүреләй, һаман әле күҙҙәрен йәмһеҙ итеп, ашарҙай итеп, шайтандың фәрештәне тураҡларға торғаны һымаҡ ҡарай.

Ожмахта шайтанды тотоп булмаған шикелле, бүлмәлә Соколовты йәшәтеп булмаҫ инде... Гизелла полковник Исхаҡовты эҙләп китте. Барып тапҡас, түкмәй-сәсмәй бөтә булған хәлде һөйләне лә бирҙе.

469-сы гвардия полкы командиры полковник Исхаҡов капитан Соколовты ҙур ғына йортҡа урынлашҡан штабҡа саҡыртты.

Капитан һәр ваҡыттағыса ыҫпай кейенгәйне. Кешенең тышҡы күренеше лә сибәр булырға тейеш, йәнәһе. Был сибәрлекте туп-тура төшкән бомбаның харап итеүе генә ҡыҙғаныс. Туғаны Шашкин дивизион комиссары ине. Уны Соколов алыштырҙы. Мәгәр яңы кейеменә һуғыш утынан таралған дары еҫен һеңдермәҫкә тырышты. Исхаҡов, киреһенсә, кейемгә иғтибар бирмәне. Бәғзе ваҡыт, йәйге эҫе көндәрҙә, шабыр тиргә бата. Туҙан ҡунған, дары еҫе һеңгән гимнастерка ҡайышланып ҡата. Бысраҡта аунаған саҡтар ҙа була. Һуғыш был. Фронт. Мәгәр атыу сәнғәте бысраманы ла, ҡатманы ла, ҡарайманы ла. Батарея менән оҫта командирлыҡ итте. Погонында йондоҙҙар арта барып, һуңынан ҙурайып, полковник дәрәжәһенә етте, полк менән етәкселек итеү юғарылығына үрләне.

Бөтә кешегә лә улай булырға тимәгән, әлбиттә. Полктың разведчиктар взводы командиры Корнышев, беренсе дивизиондың элемтәселәр взводы командиры Трапезников, беренсе батареялағы взвод командирҙары Мезенцев, Харисов һәм башҡалар, йондоҙҙарын арттырһалар ҙа, хәрби дәрәжә яғынан күҙгә күренеп үҫеп китә алманылар. Ләкин уларҙың кешелеклелек дәрәжәһен һуғыш кәметмәне, киреһенсә, арттырып ҡына ебәрҙе. Улар шәхес булараҡ та һаман әле, бына ошо Татабанъяла йәшәгәндә лә, кешелеклелек баҫҡысының юғары баҫмаларында. Шундай юғары намыҫ менән ҡайтып китәсәктәр ҙә. Бындай кешелеклелек сифаты Соколовта юҡ. Аң етмәй уға. Рәсәйҙең репрессия зәхмәте менән ауырыуын бөтә донъя белә. Уның дөрөҫ түгеллеген аңлайҙар. Быны аңламай Соколов. Аңлаһа, утыҙлап кешене "халыҡ дошманы" итеүе менән маҡтанып йөрөмәҫ ине. Бының менән ул үҙенең түбән ҡарашлы икәнлеген фашлай.

Әле лә бына һүҙҙе "халыҡ дошмандары"н ултыртыуы менән башлағайны, ҡыҙҙы ла китте Исхаҡов:

– Ҡуй, Соколов, алып ташла башыңдан был бысраҡ уйҙарыңды, халыҡҡа бәрәү ҙә дошман түгел. Беҙ һинең менән Башҡортостандан. Һинең ағайың Шашкин да "Егерме халыҡ дошманын ултырттым,"– тип маҡтанып йөрөй торғайны. Шашкин минең бер туған ағайым Сәйетбатталды ла ултыртты. Ни эшләп халыҡ дошманы булһын, ти, Сәйетбаттал. Илен, халҡын, Совет хөкүмәтен , Коммунистар партияһын ҙурлап, ғәҙел хеҙмәт итеп, фәҡәт яҡты хис-тойғолар менән йәшәй торғайны ул. "Кешегә баҙ ҡаҙыһаң, тәрәнерәк ҡаҙы, үҙең дә һыйырлыҡ булһын" тиҙәр. Ағайың менән һин ултыртҡандар аҡланыр бер ваҡыт. Иманым камил быға. Ә бына үҙ баҙыңа һин үҙең ҡолаясаҡһың. Тарихта ҡара эҙ ҡалдырып китәсәкһең. Ҡара эҙ…

Бөркөт – бөркөтлөгөн, һайыҫҡан – һайыҫҡанлығын, былбыл былбыллығын онотмаҫҡа тырыша. Соколов үҙен һаман бөркөткә һанап һөйләшергә маташа.

– Беҙ ҡара эҙ ҡалдырыусылар түгел, иптәш полковник, киреһенсә, илде батырыусыларҙы юҡ итеү өсөн көрәшәбеҙ. Шунһыҙ бөтә донъяны өлгө итеп күрһәтерлек социализм төҙөп булмаясаҡ…

Полковник уның һүҙен бүлде:

– Йә, етте!.. Һайыҫҡан дөрөҫлөктө аңлап таҡылдай ул. Ә беҙ, кешеләр, дөрөҫлөккә баҙ ҡаҙыйбыҙ. Бына нимә, капитан, Шандр әфәнделәрҙән хәҙер үк китәһең. Был уларҙың ҡыҙы теләге…

– Гизелла боҙоҡ ҡыҙ ул…

– Булмаç. Алдайһың.
– Даими рәүештә казармаға барып йөрөй.
– Тимәк, һинеңсә, беҙҙең һалдаттар ҙа боҙоҡ булып сыға?
– Кәҙә кәбеҫтәгә теймәйенсә ҡалмай.
– Бына нимә, капитан, һин – фронтовик. Совет Армияһы офицеры. Һуғыш бөттө. Һуңғы сиктә Көнбайыш Европа илдәрендә әле беҙ телгә алған "ҡара эҙ" ҡалдырып китмәйек. Һ-м… боҙоҡ ҡыҙ, имеш. Кемдең боҙоҡ, кемдең төҙөк икәнлеген тикшереү – минең намыҫта. Һиңә китергә мөмкин.
Капитан әле мәсьәләнең асылын аңламаны. "Үҙемдең кем икәнлегемде күрһәтермен әле һеҙгә" тигән болғансыҡ уйҙар әйләнә ине уның башында. Полковник һуңғы һүҙҙәрен бик берәгәйле әйтте:
– Капитан!.. Минең фронтта офицерҙарҙың намыҫ суды рәйесе булып эшләгәнемде беләһең. Офицер намыҫы әле лә йәшәй. Беҙ һинең менән – кадровиктар. Әгәр офицер намыҫына тап төшөрһәң, бел: дүрт йондоҙло погондарыңды умырып алып ырғытып, улар урынына һалдат погондары беркетәсәкмен.

II

Шандр фатирға ҡояштай балҡып торған Соколов кеүек офицер инеүгә бик шат ине башта. Мадъярҙар бөтә донъя халҡы өсөн аралашыу, фекер алышыу ҡоралы булып китерҙәй урыҫ теленә бик мөкиббән. Шандр ғаиләһе ныҡ шатланды. Соколов, әйтерһең – ысынлап та, бер ҙур ҡояш. Был ҡояштан бөтә бүлмәләргә нур бөркөлдө. Нурҙар урыҫ телен ныҡлап өйрәнергә ҡуша. Бөтәһен дә Рәсәй тураһында һорашырлыҡ тел бар хәҙер. Шандр ғаиләһен Рәсәй тормошо айырыуса ҡыҙыҡһындыра. Беренсенән, Рәсәй ерендә уларҙың бик боронғо ата-бабаларының рухы йәшәй. Икенсенән, бөтә донъяла аңлашыу өсөн уртаҡ тел буласаҡ урыҫ телен ныҡлап өйрәнәсәктәр. Өсөнсөнән, Шандрҙың Яҡбаш исемле ике туған ағаһы, яраланып, рус армияһына әсирлеккә төшә. Башта уны санчаста, унан һуң госпиталдә дауалайҙар. Һәр урында кешелекле мөнәсәбәт күреп шатлана Яҡбаш. Һауыҡҡас, уны Башҡортостанға ебәрәләр. Өфөлә ул Черниковск ҡалаһын төҙөүҙә ҡатнаша. Бында башҡа мадъярҙар ҙа була. Улар бик тырышып, ихлас күңелдән эшләйҙәр. Кейем-һалым да бирелә. Ашау-эсеү яғы ла һәйбәт кенә. Бараҡтарҙа – һәр кемгә бер карауат. Тик мадъярҙарҙы эшкә, мунсаға, башҡа урындарға мылтыҡ менән йөрөтөү оҡшамай. Әйтәләр былар бер яйын тура килтереп:
– Һеҙ әсирҙәрҙе ҡунаҡтай ҡабул иттегеҙ, хөрмәтегеҙ бик ҙур, беҙ ҡасмаясаҡбыҙ, мөмкин булһа, иректә йөрөйөк, – тиҙәр.
Яҡшылыҡтың әжере – яҡшылыҡ, тигәндәй, ышаналар мадъярҙарға. Әсирлектән бик күп Рәсәй әжере алып ҡайта Яҡбаш. Ошо әжер Соколов йөрәгендә лә ҙур һәм күп ине шикелле. Ләкин ямғыр теләп ярылған ерҙәрҙе ҡоро елдәр иҫеп тағы ла нығыраҡ рәнйеткәндәй булды был. Соколовтың "халыҡ дошмандары" тураһында даими лығырҙауы Шандр ғаиләһе ағзалары күңеленә аҡрынлап ҡара нур һала башланы. Ә инде Гизелланан көткән ләззәтенең теш яраһы менән тамамланыуы уның ирлек намыҫы йомшаҡ икәнлеген күрһәтте.
Икенсе фатирға күсенде Соколов.
...Мөхәббәт осҡондары ялҡынлана барҙы. Был ялҡынды Шандр йортонда булған күңел күтәренкелеге лә дөрләтә. Сәлим хәҙер йыш килергә тырыша. Гизелла – Сәлим өсөн мөғәллимә. Уны һаман яҡшыраҡ һөйләргә өйрәтә. Шиғырҙар ятлата хатта. Гизелла урыҫ телен ныҡлап өйрәнеү менән шөғөлләнә. Шандр әйтеүенсә, донъяла барлығы өс меңдән артыҡ тел бар, улар әллә ниндәй төркөмгә бүленә икән. Шуларҙы береһе "төрки телдәр" тип атала. Улар үҙҙәре

егерменән артыҡ икән (башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, уйғыр, хакас, тува, шор…). Сәлимдең исеме, атаһының исеме (Шаһиәхмәт), фамилияһы (Пирмөхәмәтов) уның урыҫ түгеллеген ҡысҡырып тора. Шандр – тел ғалимы. Был ғалимлыҡ сифаты башҡаларҙың да күңел күгенә күсмәйенсә ҡалмаған. “Сәлим” һүҙенең “саф күңелле” тигәнде аңлатыуы тураһында Гизелла аңлатып биргәйне инде. Шаһи – иң яҡшы, иң бөйөк, иң саф. Әхмәт – иң маҡтаулы, иң яҡшы. Көнбайыш Аурупа илдәрендә “Мөхәммәт” исемен белмәгән зыялы кеше юҡтыр. Уның мәғәнәһен башҡа һүҙҙәр ҡушып та көсәйтәләр: Бикмөхәммәт, Мөхәммәтғәли, Мөхәммәтнур, Мөхәммәтйән. “Пирмөхәммәт” тигәндәге “Пир” Мөхәммәттең донъя нуры булыуын аңлата. Йәғни, Ислам дине – саф дин. Ул киләсәктә киңәйергә тейеш. Алдынғы, ҙур, культуралы, ижтиһадлы илдәрҙә аңлыларҙың Ислам диненә аҡрынлап күсә башлауы ла шуны раҫлап тора.

Мәсьәләнең ҡабырғаһына шул яҡтан ҡағылғанда, Сәлимдең мосолман икәнлеге асыҡлана ла ҡуя. Башҡортостандан икәнлеген белгәс, Шандр ғаиләһенең Сәлимгә булған яғымлылыҡ мөхәббәте һаман арта бара. Һөйләшкәндә, фекер алышҡанда мадъяр (венгр) теленең төрки телдәргә яҡынлығы асыҡлана. Төркиҙәрҙә – “яратам”, мадъярҙарҙа – “саратам”.

Гизелла мадъярҙарҙыҡын да, төркиҙәрҙекен дә, урыҫтыҡын да әйтергә ярата: “яратам”, “саратам”, “люблю”. Шул уҡ һүҙҙәрҙе Сәлим дә ҡабатлай. Унан һуң, һүҙ ләззәтен дә, күңел күбәләген дә, хис-тойғолар дауылын да ҡушып, үбешергә керешәләр.

Шандр күп яңылыҡтар һөйләй. Венгрияның баш ҡалаһы Буда-Пеш университетында төрки телдәрен өйрәнә торған кафедра асырға булғандар бер ваҡыт. Һуғыш уты был изгелеккә лә ялҡын ебәрә. Шөкөр, һуғыш уты һүнде. Университетта төрки телдәр кафедраһы эшен дауам итәсәк. Шандр шунда барырға өмөтләнә. Шунда улы Кадриҙы ла, ҡыҙы Гизелланы ла аласаҡ. Киләсәктә төрки телдәрен өйрәнеү кафедраһы Америкала ла, Англияла ла, Францияла ла, Финляндияла ла асыласаҡ икән. Мадъяр телен өйрәнеүгә бөтә аң-аҡылы, хис-тойғоһо, йөрәк ярһыуы, күңел шаңдауы менән керешкән Сәлимде лә ғаилә ағзалары арбаһына ултыртмаҡсы Шандр.

Ә мөхәббәт дауам итә. Уның орлоҡтары икеһенең дә йөрәгенә Алла рухы менән һалынған. Был орлоҡтар яңынан-яңы тамырҙар ебәрә. Тамырҙар шыта, үҫә, тармаҡлана, япраҡ яра. Ул япраҡты ошо ғаилә мөхите лә балҡыта. Кадри аккордеонда уйнай. Сәлим менән Гизелла тансаның төрлө төрҙәрен өйрәнә. Уларҙы танго ҡыҙыҡһындырмай. “Йоҡо тансаһы” тип тә йөрөтәләр уны. Музыка моңо бик аҡрын, талғын, ауыр ағыла. Бер-береһен ҡосаҡлап хәрәкәт иткән ялҡау кеше, ысынлап та, кем әйтмешләй, әүен баҙарына китергә мөмкин.

Сәлим осоп-осоп, ярһый-ярһый, шашып-шашып, аяҡтары менән генә түгел, бөтә йөрәге, күңеле менән бейергә ярата. “Вальс” тигән танса шуға оҡшашыраҡ. Ике кеше шашып-шашып өйрөләһең. Үтә тиҙ ҙә мөмкин. Аяҡтарың иҙәнгә тейәр-теймәҫ хәрәкәт итә. Әйләнә торғас, осоп китке килә башлай хатта.

Бына ошо тансаны даими өйрәнә Гизелла менән Сәлим. Өй эсендә улай күккә осоп китер дәрәжәлә хәрәкәт итә-итә бейеү мөмкин түгел. Уларҙың клубы бар бит әле. Яҡында ғына. Өсәүләп шунда китәләр. Кадри гармун уйнай, тегеләр ашҡынып-ашҡынып бейейҙәр.

Тальянда уйнарға һуғышҡа киткәнсе лә бер ни ҡәҙәр өйрәнгәйне Сәлим. Германияның бер ҡалаһында ун көн һуғышмайынса торорға тура килде. Беҙҙекеләр ҙә атмай, тегеләр ҙә. Һуғышта ана шундай хәлдәр ҙә була.

Бер ҡалала, немецтар ҡасып киткәнлектән, магазиндарҙа төрлө-төрлө әйберҙәр ҙә ҡалғайны. Пианинола уйнап ҡараһа Сәлим, телдәре тальяндыҡы

кеүек икән дә. Аккордеондыҡы ла шулай булып сыҡты. Сәлимдең бармаҡтары аккордеон телдәрендә яҡшы ғына хәрәкәт итә башланы. Шулай итеп, Сәлим уйнағанда Гизелла вальсҡа әйләнеп ала.

Шандр менән Чәмилә лә был сәнғәттән ҡалышмаҫҡа тырыша.

***

Йәнә бер байрам була икән Венгрияла. Мадъярҙар дәртле, дарманлы халыҡ булып сыҡты. Күңел асырға яраталар. Башҡортостанда: “Йырлап асыла күңел, йырлап асылмаған күңел мәңге асыласаҡ түгел”, – тип йырлайҙар, ана. Ябыҡ күңел – баҙҙағы гөл ул. Сәскә атмай. Зәғиф була. Сәлим йыр ярата. Фронтта саҡта, һуғыш уты тынған арала, Николо-Березовка егете, төҙәүсе (һуңынан разведчик булып китте) Таһир Зәйнуллин менән, бер яйлы урын табып, ҡысҡырып йырлап ята торғайнылар. Ул ваҡытта “Шахта” йыры модала ине. “Йүгереп барам, йүгереп ҡайтам шахта юлдарынан мин”, – тип оло, үҙеңде һуғышсы итеп түгел, эшсе синыфы кешеһе итеп күҙ алдына килтерәһең. Йыр-моң күңелде ярһыта, йөрәкте тулҡынландыра, үҙеңде ут эсендә тип түгел, ниндәйҙер бер нәмә менән сикләнмәгән илаһи донъяла тип хис итәһең. Һинең өсөн үткән ауыр тормош ишектәре лә ябыҡ, өҫтөңә фриц бомбаһы ла яумай, бына әле генә йырлап ятҡан иптәшең дә үлмәй, алда уйланылмаған, көтмәгән, изгелекле бәхеттәр генә бар. Әллә ҡайҙарға, алыҫ-йыраҡтарға, мина осоп етмәҫ ерҙәргә алып китә һине йыр.

Бейеү сәнғәтенең дә йөрәк емеше, күңел хазинаһы, аяҡтар моңо икәнлеген күптәр аңлап бөтөрмәй. Һуңғы ваҡытта Сәлим Гизелла менән яңы бейеүҙәр өйрәнде. Вальс тансаһын Гизелла менән оҫта башҡара алыуына ышана. Ул инде хәҙер теге ваҡытта танса майҙанында Гизелланың аяғына баҫып, кеше көлдөргән ауыл ҡарғаһы түгел. Был байрамда ул Гизелла менән мадистар клубында ла вальстың сәнғәтлелек юғарылығын күрһәтәсәк.

Мадистарҙың ниндәйерәк йәштәр төркөмөнән икәнлеген теге ваҡытта аңлап бөтөрмәгәйне Сәлим. Бөтә донъяға ҡурҡыныс һалған Бөйөк Ватан һуғышы уты һүнде. Мәмләкәттәр яңыса йәшәү ысулы эҙләй. Мәмләкәттең үҙ эсендә лә төрлө сәйәси төркөмдәр бар. Венгриялағы мадистар – шуларҙың береһе. Улар дөрөҫлөк өсөн көрәшә. Әлбиттә, халыҡ, ил, Ватан мәнфәғәте өсөн көрәшәсәк. Йәштәрҙең бындай ойошмалар төҙөүе элек-электән килә. Батша Рәсәйе заманында Мәскәү, Петербург, Ҡазан, Киев студенттары ла ойоштора батшаға ҡаршы ойошма. Бөйөк Ватан һуғышындағы “Йәш гвардия”сылар ойошмаһы эше бөтә донъяға мәғлүм булды. Венгрия йәштәренең нимә яулағаны билдәле, әлбиттә. Халыҡҡа бәхетле, азат, матур тормош кәрәк. Ә ниңә был оло бәхетте баштан-аяҡ ҡара кейемгә уралып теләйҙәр? Ҡара кейем – ҡара ҡайғы символымы? Сәлим ҡара кейемдәрҙең башлыҡтарын эҙләп тапты. Рөхсәт итһә, байрам көндө Гизелла менән парлап бейейәсәген әйтте.

Баҡһаң, Гизелланы улар яҡшы белә икән. Уны ошо ойошмаға ағза итеп алмаҡсы булғандар, ләкин Гизелла ризалашмаған.

– Мин хәҙер ирекле ҡош, яҙмышымды теләһә ниндәй ойошма келәтенә бикләп йәшәткем килмәй, – тигән.

Ә инде клубтарына килеп, парлашып бейеп китеүҙәренә ҡаршы килмәне етәкселәре Аттилла. Үҙҙәре менән музыка ҡоралы алып килергә лә рөхсәт итте.

...Был фекерҙе Гизеллаға әйтте Сәлим. Гизелла уны ағаһына еткерҙе. Бына байрам көнө. Киләләр. Уларҙы Аттилла яҡшы йөҙ менән ҡаршы ала. Ҡара кейемлеләрҙе тансанан туҡтатып, быларҙың килеү маҡсаттарын әйтә. Әйтеү алҡыштар

менән тамамлана. Был алҡыш Аттилланың матур сығыш яһауы, әлеге өсәүҙең байрам менән ҡотларға килеүен йөрәк бүләге итеп белеүенә лә бәйлелер.

Ҡара кейемлеләр стена буйлап һуҙылған урындарға яйлашып алғас, сәхнә алдындараҡ торған бер ултырғысҡа Кадри барып яйлашты. Ул аккордеонда уйнап ебәреү менән, Сәлим һәм Гизелла вальсҡа әйләнергә кереште. Оҙаҡ ҡына әйләнделәр. Әйләнеүҙәренә күҙ ҙә эйәреп етешмәй хатта, әйтерһең, был тансаның ҡайҙалыр мәктәбе бар һәм бейеү сәнғәтенә шунда өйрәнеп килгән былар.

Бына бер ваҡыт аккордеон тынып ҡалды. Бейеүселәр әйләнеүҙән туҡтаны. Ҡара кейемлеләр шаулатып ҡул сапты. Аттилла Сәлимдең ҡулын ҡыҫты. Был Аттилланың ҡара кейемлеләр исеменән ҡайнар ҡотлауы ине. Гөрһөлдәтеп ҡул сапҡанда өс мәртәбә урыҫса ҡысҡырҙылар: “Дружба! Дружба!! Дружба!!!”

Был алҡыштарҙан нык ләззәтләнгән “ҡунаҡтар” сығып китмәксе булғайны ла, Аттилла вальсҡа бейеүҙе ҡабатлауҙарын үтенде. Ҡара кейемлеләр вальсҡа бейемәй түгел. Ләкин быларҙыҡына етмәй. Уларға эйәреп бейеһәләр, былар ҙа ныҡлап өйрәнер ине.

Ҡара кейемлеләр тәүҙә ҡарап ҡына торҙо. Унан һуң аҡрынлап үҙҙәре лә хәрәкәтләнә башланы. Һәр пар быларға күҙ һалып ала. Улар хәрәкәтенең бөтә нескәлектәрен тиҙерәк эләктереп алырға тырышалар. Танса тамамланғас, уларға йәнә урыҫ рәхмәте һүҙҙәре яуҙы: “Спасибо! Спасибо!! Спасибо!!!”

Шуның менән китергә кәрәк тә ине шикелле. Шулай ҙа Аттилла һаман уларҙың юлын бүлә. Теге ваҡытта Сәлимдең коммунистар клубында шашып-шашып бейегәнлеге бөтә Татабанъя халҡына мәғлүм булды. Ошо хаҡта һөйләп, Сәлимдең бейеп тә күрһәтеүен үтенде Аттилла.

Сәлим ризалашты. Дөрөҫөн генә әйткәндә, бер аҙ ҡурҡыбыраҡ та уйланды. Көнбайыш Аурупа илдәрендә башҡорттарҙың “Әпипә” һәм “Ҡарабай” данын ҡалдырыу шәп булыр ине, әлбиттә. Төк яҡшы ат аунаған ерҙә генә ҡала. Насар атта төк булмай. Әҙәм балаһы өсөн кешелеклек төгө ҡалдырыу лазымдыр. Бейеү сәнғәте буйынса ла ил данын тоторға мөмкиндер әле. Сәлим “Ҡарабай”ҙы уйнарға ҡушты Кадриға. Ул уйнап ебәреү менән, ҡулдарын башҡорт һунарсыһының уҡ йәйәһеләй киң йәйеп, кәүҙәһен бөгөлдөрә-һығылдыра, аяҡтарын тыпырҙатып бейеп китте ул. Аяҡтары иҙәнгә әллә тейә, әллә юҡ, осоп китергә талпынған ҡоштай, бейей бирә. Уның аяҡ һәм музыка ритмына ҡушылып, ҡара кейемлеләр ҡул сабырға тотондо. Тимәк, бейеү сәнғәтем йөрәктәрен ҡуҙғатҡан, тип уйланы Сәлим. Был уй уны тағы ла етдирәк ҡыланырға ҡушты.

Ҡара кейемлеләргә ҡушылып Гизелла ла ҡул саба. Сәлимдең уны ла бейеткеһе килә башланы. Өйҙә икәүҙән-икәү генә өйрәнделәр ҙә баһа. Ниңә кеше алдында күрһәтмәҫкә? Сәлим бейергә саҡырғас, башта ризалашманы ҡыҙ. Сәлим Көнбайыш Аурупа халҡына өлгө итеп күрһәтерлек дәрәжәлә бейей. Быға Гизелла өйрәнә генә әле. Икәү бейегәндә ниҙер етмәһә, берәү ҙә ғәйеп итмәй. Ә бында ғәйепләүсе күҙҙәр күп булырға мөмкин. Ҡушылып бейеп китеп, Сәлимде ауыр хәлдә ҡалдырырға ярамай.

Ҡат-ҡат саҡырҙы Гизелланы бейергә Сәлим. Ҡыҙ ялындырыуын дауам итте. Мәгәр Гизелла шуныһын яҡшы белә: Сәлим – бик үҙ һүҙле, ныҡыш, айбарлы егет. Уйлағанын еренә еткерергә ярата. Барыбер бейергә саҡырмайынса ҡалмаясаҡ. Ҡат-ҡат баҫҡас, Сәлимдең теләген һыуытмаҫҡа булды ҡыҙ. Башта Гизелла илке-һалҡы ғына ҡыланды. Әммә тора-бара уның да аяҡтары, ҡулдары, бөтә кәүҙәһе Сәлимдекенә оҡшатыңҡыраҡ хәрәкәт итергә тотондо. Был хәрәкәт уларҙың мөхәббәтенә лә буйһона һымаҡ. Сәлимдә бейеү ташҡыны ғына түгел, мөхәббәт ташҡыны ла бар ине. Ҡайнар уттай мөхәббәт! Был ҡайнарлыҡ донъяһына бөтә таланты менән инеп китте Гизелла.

Бейеү туҡтағас, ҡыҙҙар Гизелланы уратып алып үпте, егеттәр Сәлимдең ҡулын ҡыҫты.

Ана шундай тантана ялҡыны оҙатып ҡалды Сәлим менән Гизелланы.

Аттилла, оҙатып ҡалыу өсөн, улар менән тышҡа сыҡты. Аттилла Сәлимдең ҡулын ҡыҫып:

– Тағы ла килегеҙ!

Сәлим тулҡынланып яуап бирҙе:

– Быңдай дәртле йәштәр янына килмәү мөмкин түгел!

Ошондай уҡ данды улар коммунистар клубында ла, башҡа урындарҙа ла ҡалдырҙы. Төнгө байрам, теге ваҡыттағыса, таң атҡансы барҙы. Мадъяр һүҙенең дә тамыры – мад. Ябай ғына итеп әйткәндә, яңылыҡ эҙләүселәр. Һәр милләттең үҙ хосусиәте, үҙ эске донъяһы, үҙ рухиәте. Бер-береңде белеп йәшәү һауа менән һыу дәрәжәһендә кәрәктер ул…

III

Гизелланың күпте белгеһе килә.

Рәсәй тураһында һорашырға айырыуса ярата. Көндәрҙән бер көндө уның үҙ тормошо тураһында белеште Гизелла. Сәлим ауылының тәбиғәтен ярата ине. "Күккүҙ" тип атала ул. Ауыл уртаһынан, таҫмалай һуҙылып, Матҡай йылғаһы аға. Төньяҡтан уға Йәмәк, Нәжәде, Теләүбирҙе, көньяҡтан Оло Гүрҙе, Кесе Гүрҙе йылғалары ҡоя. Шулар менән ишәйгән Матҡай Һөн йылғаһына барып ҡушыла. Һөн уларҙы Ағиҙелгә алып китә. Ағиҙел бер ваҡыт Волга (Иҙел) ҡуйынына барып һыйына, Волга – Хазар (Каспий) диңгеҙенә.

Тәбиғәттең бик бай, матур, гүзәл ерендә ултыра Күккүҙ. Төньяғында Ослотау бар. Ул аҡ ҡайындар менән уратып алынған. Йәй көнө, кем әйтмешләй, күҙ асып йомған арала бер биҙрә ер еләге йыйып алырға мөмкин. Мөхәббәт тауы тип тә йөрөтәләр уны. Йәштәр киске уйынға шунда йыйыла. Көнсығышта шуға оҡшашыраҡ Кәсәй тауы бар. Унда ла зифа буйлы аҡ ҡайындар үҫә. Ҡайынлыҡта – еләклек. Төньяҡ-көнбайыштағы Түңәрәк күлдә аҡҡоштар, ҡыр ҡаҙҙары, ҡыр өйрәктәре йөҙә.

Былар хаҡында тулҡынланып, хис-тойғоларға бирелеп, тасуири һөйләй Сәлим. "Һеҙҙең илдә быңдай гүзәл тәбиғәтте күргәнем юҡ" тигәнде әйтмәһә лә, ҡыҙға шул төшөнсәне аңлатырға тырыша. Һөйләгәндә "их", "их" тигән ымлыҡтар әйткеләй Гизелла. Хужалыҡтарының ниндәйерәк булыуы, атаһы, әсәһе, туғандары тураһында ла һораша ҡыҙ.

…Атаһы мулла була. Әлеге Матҡай йылғаһы буйында ике ҡатлы йорт һала. Емеш-еләк баҡсаһы ла яһай. Алма, сейә, ҡарағат шытымдары үҫтерә. Былары кеше өсөн. Башҡалар ҙа еләк-емеш баҡсаһы яһаһын. Бөтә ауыл матурлыҡ, муллыҡ, гүзәллек эсендә балҡып ултырһын.

Гизелла уның һүҙен бүлде:

– Ә хәҙер нисек?

Был һорау Сәлимде ауыр хәлдә ҡалдырҙы. Хәҙер уның Күккүҙ ауылында бесәй генә булһа ла бәйләп ҡуйырлыҡ үҙ ҡаҙығы юҡ. Армияға ла кеше өйөнән генә китте. Шул хаҡта һөйләп бирергәме? Был матурлыҡтан бик тиҙ генә йәмһеҙлеккә күсеү булмаҫмы? Ана, нисек ҡыҙыҡһынып тыңлай Гизелла. Йөҙө яҡтыра. Был яҡтылыҡҡа ҡапыл ғына ҡара һөрөм ебәреү килешеп бөтмәҫ. Хәҙергә алдашырға кәрәк. Гизелла алдағанды яратмай. Әйҙә, был алдашыу шаярыуҙың бер төрө булһын. Һуңынан, яйын тура килтереп, ысынын әйтер. Шунан көлөшөп аласаҡтар. Гизелла үҙе лә шаяртырға ярата ла баһа. Ауыр хәлде шаянлыҡ менән күмеүҙең ни ғәйебе бар?

– Хәҙер шулай: ике ҡатлы йорт, иллеләп һыйыр, йөҙләп һарыҡ, егермеләп ат аҫрайбыҙ, – тип алдашты Сәлим.

– У-һу-һу-у… – тип шатланды Гизелла.

Был хаҡта атаһына, әсәһенә, ағаһына әйтә Гизелла. Бөтәһе лә шатлана быға. Гизелла тураһында төрлө ғәйбәттәр йөрөнө. Һалдат казармаһына барыуын ғәйепләп һөйләнеләр. Шандр ҡыҙын белә: теләһә кемдең муйынына аҫылына торғандарҙан түгел. Кемдәр генә һорамай Гизелланың ҡулын, кемдәр генә кәләшлеккә алырға теләмәй уны. Ата кеше булараҡ, ғәҙәттә, башта уға киләләр.

– Белмәйем, ул бер кемде лә яратмай, үҙе менән һөйләшеп ҡарағыҙ, – ти ата кеше.

Кем уйлаған, сит ил балаһына мөхәббәт тотор, тип. Аңлай мөхәббәттең нимә икәнлеген. Аңламаһа, һағыҙаҡ шикелле сат йәбешмәҫ ине. Был "Пирмөхәмәт" тигәне лә шәп егет булып сыҡты бит әле. Ә заты ниндәй?! Бай нәҫелдән. Әйткәндәй, тамыры ниндәй – олоно шундай. Ныҡ. Ҡаты олон ебәрә аҫыл ботаҡтарҙы. Аҫыл ботаҡтар яра донъя йәмләй торған япраҡтарҙы. Бөтә Татабанъя үҙ итте бит Пирмөхәммәтте. Беҙҙең ғаиләгә ҡояш нуры булып килеп инде. Әйтерһең, ошо йортта тыуған, беҙҙең менән бергә үҫкән. Ҡыҙыбыҙға мөхәббәте оло булһа, беҙгә хөрмәте ҙур. Сибәр, аҡыллы, уңған, әҙәпле, тырыш, талантлы. Хоҙай унан бер генә ыңғай сифатты ла йәлләмәгән. Уның менән бер һөйләшеп ултырыу – үҙе бер ғүмер!..

Шулай уйлай ата кеше. Тик бында өйләнешеү мәсьәләһе хәл ителмәй. Егет бында ҡаламы? Әллә ҡыҙҙы үҙе менән алып китәме?

Гизелла төпсөнөүҙе дауам итте:

– Шул тиклем аттарҙы, һыйырҙарҙы, һарыҡтарҙы кем ҡарай хәҙер?

– Улар башҡа кешеләр ҡулында, Гизелла.

– Нисек инде улай?

– Шулай ҙа була икән шул.

– Һин нимәлер йәшерәһең, Сәлим?

– Ул йәшерерлек түгел инде хәҙер. Бөтәһе лә асыҡланған.

– Нисек инде асыҡланған?

– Ул йәшерә торған нәмә түгел.

– Томанлы һөйләйһең. Миңә байлығығыҙ кәрәкмәй. Тормошоңдо, йәшәйешеңде генә белгем килә.

Был хаҡта полкта беләләр. Геройлыҡҡа тәҡдим итергә булғас, полк комиссары майор Писанный бөтә донъя хәле тураһында һорашты. Һүҙ һаранлығы күрһәтмәне Пирмөхәммәтов. Бөтәһен дә һөйләне лә бирҙе. Беҙҙе тоҡта һаҡлай алмайһың. Тишә лә сыға бер ваҡыт. Мулла малайы, кулак балаһы икәнлеген дә әйтте. Советтар Союзы Геройы тигәнде шуға бирмәнеләр шикелле. Мәгәр быға борсолманы Сәлим. "Намыҫың Герой булһын", – тип уйланы.

Сәлимдең ҡылсыҡлы биографияһы һәр кемгә билдәле хәҙер. Был хаҡта Гизеллаға әллә ҡасан һөйләп биргеһе килгәйне инде уның. Ләкин, нисектер, форсат сыҡмай ҙа ҡуя. Бер яйы сыҡҡас, Гизелланың һөйләтергә теләге ҙур булыуҙы ла иҫкә алып, бөтәһен дә сурытты Сәлим.

…Ул яҡты донъяға 1924 йылдың 29 августа килә. Бик ижтиһадлы, хеҙмәт һөйөүе менән тирә-яҡта дан тоҡкан, кешелекле атаһы 1925 йылда – Сәлимгә бер йәш тулыр-тулмаҫтан – мәңгелеккә китеп бара. Әлеге ике ҡатлы йорт, еләкемеш баҡсаһы, күп төрлө малдар, әсә, алты бала ҡала. Балаларҙың иң ҙурыһы – 12 йәштә. Арала дүрт ҡыҙ.

Репрессияның ҡара һөрөмлө йылдары башланғас, муллалар, мәзиндәр, урта хәллеләрҙең ҡайһы берҙәре Себергә оҙатыла. Сәлимдәр ғаиләһендә эшсе ҡулы булмағанлыҡтан, уларҙы башта бер ҡайҙа ла ебәрә алмайҙар, әммә ауыл уртаһында балҡып ултырған мөһабәт йорттоң икенсе ҡатына ауыл Советы килеп урынлаша. Әсә менән алты бала беренсе ҡатҡа ҡыуып төшөрөлә.

Беренсе ҡатты атай кеше йәшәү өсөн эшләтмәгән. Ул – таштан. Көҙөн еүеш, ҡышын ифрат һалҡын. Был ҡат табаҡ-һауыт, тормош кәрәк-яраҡтары, артыҡ-мортоҡ әйберҙәр ҡуйыу өсөн тәғәйенләнгән. Мәгәр түшәмдәге япма тараҡандар, һары бесәй менән һуғышып йәшәгән баҙҙағы ҡомаҡтар өсөн ожмах бында… Ә кеше өсөн – тамуҡ. Ҡыҙҙар үпкә сире менән ауырый башлай. Ошо ғазап ояһында һуңғы һулышты алырға мөмкин дә булыр ине, бәлки. Тора-бара унан да ҡыуып сығарҙылар. Алты бала һәм әсә урамда ҡалды. Ас. Яланғас. Ауырыуҙар…

Шулай ҙа ауылда бар икән миһырбанлы кешеләр. Өс йорт аша йәшәгән Хәтмулла ағай килде лә:

– Әйҙә, абыстай, үҙебеҙгә, 1921 йылғы аслыҡта мулла абзый мине үлемдән һаҡлап алып ҡалғайны, "яҡшылыҡтың әжере – яҡшылыҡ", – тип бөтәһен дә үҙ ҡанаты аҫтына һыйҙырырға вәғәҙә биреп, алды ла китте быларҙы.

– И, Хәтмулла, үҙеңдең дә өйөң тауыҡ кетәге һымаҡ ҡына бит, – тип ҡарай әсәһе.

Унан һуң киң күңелле кешеләр уларҙы сиратлап индерәләр фатирға. Шунан бер ташландыҡ өйҙө рәтләп тора башлайҙар. Бәлиғ булғас, баш бала Себергә ебәрелә. Әсә кеше бик йонсой. Дүртенсе синыфты тамамлағас, уҡыуын ташлап, Сәлим сабата үрергә тотона. Күп тә, ныҡ та, матур итеп тә үрә. Тирә-яҡта "Сәлим сабатаһы" тигән һүҙ йөрөй. Йәй көндәрендә ҡояш ҡалҡҡан ваҡытта тороп ултыра, ҡояш байығанда туҡтай эштән. Әсә, хәйер һорашып йөрөгәндә, хәлһеҙләнеп, кеше ишек төбөндә йығылып үлә. "Хоҡуҡһыҙҙар" тип, быларға картуф ултыртырға ла, хатта бер кәзә аҫрарға ла рөхсәт ителмәй. Ә йәшәргә кәрәк. Дүрт ҡыҙ бер-бер артлы аслыҡтан шешенеп гүргә китә. Мәгәр Сәлим уҡый ҙа, сабатаһын да яһай. Аслы-туҡлы йәшәй. Шулай ҙа тамамлай ете йыллыҡты. 1942 йылдың 20 августында үҙе теләп фронтҡа китә. Кеше йортонан.

Шул хаҡта һөйләп бирә Сәлим яратҡан мадъяркаһына.

Гизелла ғәжиз булып ҡала. Ни эшләргә, ни тип әйтергә лә белмәйенсә тора. Шунан ул Сәлимде һөйөргә тотона. Сәстәренән һыйпай. Бит остарынан үбә. Йөрәгендә күпме наҙ булһа, шуларҙың бөтәһен дә бирергә тырыша. Был ваҡытта Сәлим, гүйә, ата-әсә тарафынан ҡыйырһытылған бала, ни эшләргә лә белмәйенсә тик тора. Шулай иркәләй-наҙлай торғас, ҡысҡырып иланы ла ебәрҙе Гизелла. Сәлим өсөн бик ауыр минуттар ине был.

– Гизелла, кәрәкмәй, тыныслан… Үҙеңде ҡулға ал!..

Сәлим уның мамыҡтай сәстәренән, йәшле күҙҙәренән, яңаҡтарынан үбергә тотондо. Уның да күҙҙәренән йәш атылып сыҡты. Мөхәббәт йәштәре ине былар.

– Күпте һөйләп, мин дөрөҫ эшләмәнем шикелле.

– Дөрөҫ эшләнең, Сәлим! Яратҡан кешенән бер нәмәне лә йәшерергә ярамай. Мин һине ныҡ яратам, Сәлим!

– Мин дә һине ныҡ яратам, Гизелла!

– Мин бик бәхетле. Һине осратыуым менән бәхетле. Мөхәббәтең бәхетле итте мине!

– Тик минең тормош ҡорорлоҡ бер нәмәм дә юҡ, Гизелла!

– Бар! Һиндә бөтәһе лә бар, Сәлим. Тормош ҡорор өсөн иң әүәл мөхәббәт кәрәк. Ҡалғаны үҙенән-үҙе табыла.

– Һин гел аҡыллы һүҙҙәр әйтәһең, Гизелла.

– Кәрәкле һүҙҙәрҙе мөхәббәт әйттерә. Һин бала саҡтарҙа уҡ ауырлыҡтарҙы еңә белгәнһең. Ә һуғышта?.. Герой!.. Һинең кеүек кешеләр йәшәй белә.

– Йәшәү – көрәш, тиҙәр бит…

…Рәсәйҙәге репрессия тайфуны хаҡында белә ине Шандр. Фашизмды еңгән Рәсәй халҡының был тайфунды ла тонсоҡторорона ышанып йөрөнө. Шулай ҙа капитан Соколовтың әллә күпме “халыҡ дошмандары”н НКВД-ға тапшырыуы тураһында маҡтаныуҙары күңеленә шик һала. Соколов кеүектәр һаман күп булһа, ас шайтандар тағы ла кимерәсәк әле СССР тупрағын. Шулай уйлаһа ла, һауаһы даими алышынып торған тотанаҡһыҙ көн кеүек, күңел ҡаҙанында төрлө-төрлө башҡа фекерҙәр ҡайнаша башлай. Соколов кеүек алабармандар үҙҙәре ҡаҙыған баҙға үҙҙәре төшөп суҡынмаҫ, тип кем уйлаған. Ундай кешеләрҙе Хоҙай ора. Соколов оролоп бара ла баһа инде. Ярай, уларҙан сығып китте. Ирҙәр тарафынан шаҡтай тотонолған бер яңғыҙ ҡатынға барып ояланы. Эсергә тотонған буш шөрөп. Бер көн канауҙа аунап ятҡанын күргәндәр. Тимәк, тышы сәскә, эсе мәшкә булып сыға был офицерҙың. Үҙ ерендәге боҙоҡлоҡто ниңә сит илгә алып килә ул? Шулмы уның Ватан намыҫын һаҡлауы?

Был хаҡта ул бөтә ғаиләһенә һөйләне. Ата фекерен айырыуса ныҡ тыңланы Гизелла. Ҡыҙының Сәлим менән булған мөхәббәтен репрессия баҙына төшөрөп ебәреүенән ҡурҡҡайны ул. Теге ваҡытта чин егете менән һун ҡыҙы мөхәббәтенең утта яндырылыуы тураһында һөйләгәйне бит атаһы. Хәйер, ҡырағай халыҡтар заманында булған ул. Хәҙер башҡа осор. Мөхәббәтте кәртәләп ҡуйырға берәүҙең дә намыҫы етмәҫ.

***

Көслө шаңдау бөтә Татабанъя ҡасабаһын һиҫкәндерҙе. Минометтан аталар ине. Тағы ла һуғыш башланамы әллә? Тонсоғоп бөтмәгән, йәшеренеп ятҡан берәй фашизм төркөмө баш ҡүтәрәме? “Еңдек”, “фашизм капут”, “үлде”, “бөттө” тип маҡтандылар. Еңерһең һиңә. Фашизм бит ул. Ҙур утты һүндерһәң, ҡайҙалыр осҡоно ҡала. Осҡон дөрләп китһә, йәнә утҡа әүерелә. Кем әйтер, фашизм утының осҡоно берәй ерҙә йәшеренеп ҡалмаған, тип?

Төрлө фараздар булып алды ҡасабала. Эйе, һуғыш уты һүнде. Донъя иркен тын ала. Бөгөн туйғансы ашаһаң, иртәгеһе өсөн дә ҡайғыраһың бит. Әле төрлө илдәрҙә беҙҙең армия хеҙмәт итә. Һуғыш бөттө – мылтыҡты ырғыттым түгел бит. Хәрби өйрәнеүҙәр һаман туҡталмай. Беҙҙекеләр әле минометтан ата. Полк миномёты – 360 кг. Һәр мина 16 кг. Ул көпшәнән сығып осҡанда көслө шаңдау барлыҡҡа килә.

Был атыуҙың бер сере бар. Хәрби училище тамамлаған йәш офицерҙар үҙҙәренең атыу оҫталығын күрһәтә. Угломер, прицелдың күпме һандан торғанлығын әйтә.

Хәҙер полктан иң яҡшы төҙәүселәрҙе сүпләргә кәрәк. Уларҙың күбеһе фронтта мәңгелеккә күсте. Бәғзеләре, ҡаты яраланып, өйөнә оҙатылды. Сәлим дә башта төҙәүсе ине. 1-се расчет командиры үлгәс, урынына уны ҡуйҙылар. Әммә һынау атыуы үткәрә торған расчет булғас, күберәк үҙенә атырға тура килде. Хәҙер бына, сүпләй башлағас, полкта яҡшы төҙәүселәр ҙә бармаҡ менән генә һанарлыҡ икән. Ике ҡулбашына старшина погоны урынына һалдат погоны беркетеп, тоттолар ҙа атырға ебәрҙеләр быны.

Оҫта атыуҙың классик өлгөһөн күрһәтә Пирмөхәмәтов. Ул бит һуғышта, элемтә өҙөлгәс, НП-нан команда булмаһа ла, үҙ фантазияһы, үҙ күҙ күреме менән атҡан яугир. Ваҡыт-ваҡыт батарея командиры, дивизион командиры вазифаһын башҡарған кеше. Ә инде йәш лейтенанттарға оҫта атыу сәнғәте сере күрһәткәне өсөн, кисен полкты теҙеп, Сәлимгә 48 көн отпуск бирә полк командиры Исхаҡов.

Тыуған ауылында булып, май урталарында әйләнеп килә ул гарнизонға.

Тын алырға ла ирек бирмәйенсә, уға штабҡа йүгерергә ҡушалар. Фронтта күп ҡаһарманлыҡтар күрһәткән Юғары Башкомандующий Ставкаһының 469-сы Башҡорт полкы бынан күсерелә икән. Яңы урынға изге ниәт менән һуңғы машина оҙатыла. Бер минутҡа һуңлаһа, Сәлим тороп ҡала ине. Уны ҡуҙғалырға торған машина кузовына күтәреп ырғыттылар. “Гоп” итеп барып төштө кузов уртаһына – машина китеп тә барҙы. Ҡайҙа бара? Ниндәй елдәр тарта уларҙың яҙмышын? Яңы ерҙә лә яңы “раз-два”лар, ”һайт-два”лар башланырмы?

IV

1946 йыл. Май уртаһы. Яңы урын: Венгрияның Сомбатель ҡалаһындағы механикалаштырылған полк. Сәлим Пирмөхәмәтов – рота старшинаһы. Ҡала ситендә ике метрҙан да бейегерәк таш ҡойма менән уратып алынған гарнизон. Тимер ҡапҡа. Унда һәр ваҡыт һаҡсы тора.

Былар хаҡында Рәйескә бәйнә-бәйнә Сәлим һөйләп биргәйне инде. Яңы дуҫын хәҙер улар ҡыҙыҡһындырмай. Гизелла менән булған ҡайнар мөхәббәте борсой уны. Мөхәббәт, гүйә, ҡырт өҙөлгән ҡыл һымаҡ өҙөлдө лә ҡуйҙы. Хәрби кеше уны эйәртеп йөрөй алмай шул... Йөрәгендә генә һаҡлай.

Гизелла менән һаубуллашмай китеүе ныҡ ҡыҙғаныс. Яңы урында ул шәп старшина булды. Был яҡтан күңеле тыныс. Яурынына тейәлгән йөктө дала дөйәһеләй күтәрә белде. Артыҡ ауыр булһа, дөйәнең дә ыңғыраша торған ғәҙәте бар. Ә Сәлим ыңғырашмай. Быныһы тормоштоң артыҡ хәтәр игәүләү, сарлау, хатта туҡмап ташлау ғәләмәтелер. Ун йәштән башлап үҙенде-үҙең ҡарап үҫтер әле! Бының өсөн сиған атылай ныҡ, сырыш, айбарлы булырға кәрәк бит. Ярай, ауырлыҡты еңә белеү һуғышта ла, тыныс тормошта ла кәрәк икәнлекте аңланы инде. Алда тыныс тормоштоң тәрән-тәрән соҡор-саҡырҙары, сәнскеле тимер ҡоймалары, таш ҡаялары, бейек-бейек тауҙары күп буласаҡ әле. Ана, ҡасан кәрәк ир-егет солтанлығы. Йәшәүҙең бөтә йәме шуларҙы айбарлы ир-егеттәрсә үтә белеүҙәлер. Яңғыҙ һандуғас яҙ килтермәй, тигәндәй, мөхәббәтһеҙ йәшәһәң, тормошоңдоң яҙы ла, йәйе лә, көҙө лә ҡараңғы булалыр ул.

Бына ни өсөн ҡапыл өҙөлгән ҡылдай булып ҡалған мөхәббәт борсой уны. Гизелланы күрмәй китеү тилертә. Ҡылдай өҙөлгән мөхәббәтте ялғап булырмы берәй ваҡыт? Ләкин ниндәйҙер бөйөк, серле көн тарафынан бирелгән мөхәббәтте ҡапыл өҙөлгән ҡыл менән һис тә сағыштырырға ярамай икән. Ҡыл ғына түгел ул, тимер сылбыр, юҡ, тутыҡмаҫ алтын сылбырҙыр.

Шул юрауҙарҙы, фараздарҙы, хыял итеүҙәрҙе раҫлағандай, көндәрҙән бер көндө Гизелла балҡып килеп инә уның бүлмәһенә (“каптерка” тиҙәр уны). Сәлим, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмайынса, оҙаҡ ҡына уға ҡарап торҙо. Гизелла бик ныҡ биҙәнгән. Ул, әлбиттә, былай ҙа, тәбиғи һәләтендә лә, биҙәнмәһә лә матур. Шулай ҙа ваҡыт-ваҡыт сәғәттәр буйы биҙәнеп, яһанып ултыра торған ғәҙәте бар. Кем өсөн был матурлыҡ? Егерме йәшенә саҡлы ул матурлыҡ донъяһында ләззәтләнергә теләүселәр күп булған бит. Матурлыҡ ҡапҡаһын береһенә лә асмаған

ҡыҙ әлегә. Әллә былай ғына ирештереп йөрөймө Сәлимде? “Ләззәтлән тышҡы матурлығым менән, һиңә шул да еткән”, – тип уйлаймы?

Сәлим, ярһыу хис-тойғоларында таралып төшмәҫкә тырышып, ҡыҙҙың ике ҡулынан аймап алды. Бөтә мөхәббәт ҡайнарлығы, гүйә, бармаҡтар осонан, ус төбөнән үк башлана. Егет бармаҡ остары менән, уҡаһын ҡойорға ҡурҡҡандай, ипләп кенә ҡыҙҙың сәс бөртөктәрен, бит остарын һыпырыштырҙы. Шундай уҡ наҙҙы Гизелла үҙе лә ҡабатланы. Сәлимдең дә сәстәре йомшаҡ, ынйылай йылҡылдап, зәңгәр күҙ нурҙары өлтөрәп, ике бит остары бешкән алмалай ҡыҙарып тора.

– Нисек таптың?

– Мөхәббәт таптыра ул.

– Ә шулай ҙа…

– Һин бер ваҡыт һалҡын Ҡотоп тураһында һөйләгәйнең. Әгәр шунда ҡасһаң минән, барыбер артыңдан барып табырмын. Эҫе Үзбәкстан тураһында һөйләгәйнең, шунда ла табырмын. Әгәр һине Дунай төбөндә тиһәләр, сумып, унда ла эҙләп табырмын. Һағынам мин һине, Сәлим! Һинһеҙ йәшәүҙе күҙ алдыма ла килтерә алмайым.

– Рәхмәт, Гизелла! Мин дә өҙөлөп һағынам. Төштәремдә күрәм. Мин дә һинһеҙ йәшәүҙе күҙ алдыма килтерә алмайым. – Ул да артабан шаяртыбыраҡ һөйләүгә күсте: – Әгәр һине йондоҙҙарҙа тиһәләр, йондоҙҙарҙан эҙләп табырмын. Әгәр Айҙа тиһәләр, Айға күтәрелермен. Әгәр ете диңгеҙ аръяғында тиһәләр, унан да табырмын.

Һүҙ менән һыйланышҡас, эҙләп табыуҙың реаль юлы тураһында һөйләп бирҙе Гизелла. Эште үҙҙәрендәге ҡасабанан башлай. Унда ҡайһы бер частарҙың ебәрелмәй ҡалған хәрбиҙәре бар икән әле. Шуларҙан һорашып, минометсыларҙың Сомбатель ҡалаһына китеүҙәрен белә. Сомбателдә атаһының танышы бар икән. Шандр тәүҙә адресын бирергә икеләнеп торған. Киткән, өҙөлгән, бөткән, йәнәһе. Армия хеҙмәтендә бит ул. Ҡайҙа ебәрмәҫтәр тағы... Дала елен ҡыуып тотоп булмағандай, хәрби хеҙмәттәге һалдат артынан эҙләнеп йөрөүҙең дә кәрәге юҡ. Шулай ҙа, ҡыҙы бик ялынып һорағас, атай кеше бирә адресты. Килеп етә Гизелла Сомбателгә. Таба атаһының йән дуҫын. Унан һуң мөхәббәтен эҙләп китә. Әлеге тимер ҡапҡаға килеп етһә, һаҡсы уны яҡын да ебәрмәй. Ҡыуһа ла китмәй Гизелла. Бер ваҡыт Сәлимгә булған һөйөүен һөйләргә керешә. Сәлимдең фамилияһын әйтһә – беләләр икән. Казармала ғына түгел, ҡалала ла танылған. Шул инде: йүнлегә – йүнле юл, йүнһеҙгә – йүнһеҙ юл. Үткәрә лә ебәрә ҡыҙҙы һаҡсы. Тик офицерҙар күҙенә салынмаҫҡа ҡуша.

Осрашыу дауам итте. Яйын табып, Сомбатель ҡалаһында икәү генә йөрөп ҡайтҡан саҡтары була. Атаһына, әсәһенә, ағаһына Сәлим күп-күп сәләмдәр әйтеп ебәрә. Бер аҙҙан тағы ла әйләнеп килә. Сумкаһында тәмле-тәмле күстәнәстәр булыр.

Көндәр аҡҡан һыуҙай үтеп тора. Бына тағы ла килә Гизелла. Сумка тулы тәмтом, әсәһе ебәргән күстәнәстәр. 1947 йылдың март урталары ине был. Тик мөхәббәте менән осрашырға насип булманы. 1924 йылғыларға – демобилизация. Уларҙы Венгрия еренән Австрияға оҙатҡандар. Шунан СССР-ға тыуған яҡтарына ҡайтып китәсәктәр икән.

## V

...Рәйес менән Сәлимдең әңгәмәһе шаҡтай оҙаҡҡа һуҙылды. Демаштар әңгәмәне боҙмаһын тип, улар алыҫыраҡ, тыныс урынға барып ултырғайны. Ултырып та, һуҙылып ятып та фекер алыштылар. Ә демаштар әле шарҡылдап

көлә, әле йырлап ебәрә, әле йыйылышып тәмәке борҡота. Ни генә булмаһын, улар яғынан иҫкән йыуаш, йомшаҡ ел Сәлим менән Рәйестең дә эс серҙәрен тыңларға килә. Фекерҙәр эҙлекле түгел. Ике балыҡсы – балыҡ, ике уҡытыусы осраштымы – уҡыусы, ике нефтсе осрашһа, нефть тураһында гәпләшә. Ике фронтовик осрашһа, күңелдәр сәйәхәте һуғыш уты эсенә башкөллө сума.

Һуғыш һаман төшкә инеп йонсота. Пехота, “ура!” ҡысҡырып, атакаға күтәрелә, артиллерист ярһып-ярһып килгән танкылар теҙмәһенә ата, разведчик дошман тылында “тел” эҙләп йөрөй. Һуғыш ғазабы һаман телдән төшмәй. Рәйес, ҡат-ҡат һөйләтеп, Сәлимдең ни өсөн “миномётсы-снайпер” даны алыуы менән ҡыҙыҡһына. Сәлим, билдәле, әҙәпле яугир булараҡ, был хаҡта борсаҡ сәсергә яратмай. Бер нисә һүҙ менән генә аңлата ла ҡуя. Маҡтаныуҙы йәне һөймәй. Ә бына Рәйестең шапырына торған ғәҙәте бар. Бер нәмәне телгә алһа, энәһенән ебенә тиклем төпсөнә. Һүҙгә һаран ике дуҫҡа ла, һүҙгә йомарт ике дуҫҡа ла ҡыйындыр ул. Был яҡтан ҡарағанда, Сәлим менән Рәйес дуҫлығына Алла үҙе амин тотҡан.

Был юлы Рәйес, ҡайтҡас икеһенең дә ниндәй эшкә ҡул тығасаҡтары билдәле түгеллекте иҫкә алып, һуғыш утынан ҡапыл ғына айырылып, тыныс тормош утына барып төштө. Киләсәк тураһында уйланғанда, ҡапыл әйтте лә һалды:

– Былай итәбеҙ, Сәлим дуҫ: алабыҙ икебеҙгә иң артта һөйрәлгән ике йолҡош колхозды. Алдыҡмы? Алдыҡ. Ярышабыҙ. Бер йылда иң алдынғыға сығарабыҙ. Батамы?

– Батмай, Рәйес.

– Ниңә?

– Колхоз башлығы булыу өсөн беҙҙең заманда пулеметтай тәтелдәп торған тел түгел, танкылай ҡаты йоҙроҡ кәрәк. Улар... һиндә – бар, миндә – юҡ.

– Һиндә аҡыл күп, Сәлим. Кәңәшләшеп эшләрбеҙ. Бер-беребеҙгә ярҙам итешә-итешә. Кешегә пулемет утылай атылып торған һүҙ ҙә, танкылай йоҙроҡ та кәрәкмәй. Икмәк кәрәк! Беҙ, фронтовик булараҡ, ниҙер күрһәтергә тейештербеҙ бит, ҡайтҡас... Ә?!.

– Уныһы дөрөҫ. Ләкин, Мулла бабай әйтмешләй, киләсәк яҙмыш маңлайға яҙылған...

– Тотаһың да “Мулла бабай әйтмешләй” тиһең. Ниндәй “мулла” һуң ул? Һеҙҙең полкта, тәртип булһын өсөн, махсус мулла тотмағандарҙыр бит?

– Юҡ, Рәйес! Социалистик йәмғиәттә уның булыуы мөмкин түгел. “Коммунист” һүҙе менән “мулла” һүҙе бер-береһенә ҡан дошмандар.

– Шулай булғас, ниндәй мулла һуң ул?

– Беҙҙең Мулла...

– Тфү!.. – Рәйес төкөрөп ҡуйҙы. – Хәҙер полкта мулла тотмайҙар. “Аҡыллы” тиһәм һине... Батша Рәсәйендә генә булған ул. Мосолман полктарында...

– Былай ул, Рәйес дуҫ!

Сәлим “мулла”ның ҡыҫҡаса ғына тарихын һөйләп бирергә мәжбүр булды.

...Ҡыҫҡа ғына буйлы ҡарт һалдат була ул. Ябыҡ. Кем әйтмешләй, сәүкә күтәреп китерлек. Был тормоштоң күп михнәтен, ҡара яғын, ҡайғыһын күргән кеше. Репрессия йылдарында ул да Себергә оҙатыла. Йәмәғәте, дүрт балаһы ҡала Өфөлә. Тайга һаҙлыҡтарында биҙгәк серәкәйенән оҙаҡ йылдар тәнен талатҡас, Өфө төрмәһенә ҡайтарып ябалар. Һуғыш башлана. 1942 йылдың декабрь айында 469-сы миномет полкы төҙөлә. Фронтта ул Ставкаға ғына буйһонорға тейеш. Икенсе төрлө әйтһәк, Сталиндың үҙенә. Шундай полкты Башҡортостанда төҙөүҙең бер сере лә бар икән. Һуғыш башланыу менән Башҡортостан фронтҡа ярҙам итеүселәрҙең иң күренеклеһе була. Уларҙы һанап сығыу ҙа ҡыйын.

Башҡортостанға күп кенә завод, фабрикалар эвакуацияланып килә. Улар менән бергә кешеләр ҙә ағыла. Башҡортостан халҡы киң күңеллелек, йомартлыҡ, асыҡ йөҙлөлөк күрһәтә. Фронтҡа матди ярҙамы ла ныҡ була халыҡтың. Фронттағы биш танкының береһе Башҡортостан нефть эшкәртеү заводтарында яһалған бензин менән йөрөй. Башҡортостанда йәнә уҡсылар, кавалеристар дивизиялары ойошторола. Ул ваҡытта уҡ әйтелеүенсә, Ставка өсөн махсус полкты Башҡортостанда төҙөү был республикаға ышаныс ҙур булыуға бәйләнгән.

1943 йылдың ғинуары ла башлана. Иглин районындағы Таутөмән, Покровка ауылдарында ойошоп килгән полкка кеше һаман етмәй. Был полк сафына ла тотҡондарҙы килтереп баҫтыралар. Төрмәнән "Мулла бабай" атамаһы алған сәүкә күтәреп китерҙәй ҡартты ла...

Тотҡондарҙы фронтҡа һайлағанда, Мулла бабайҙы өйөнө ҡайтарып ебәрергә тырышалар: йәшен йәшәгән, ашын ашаған... Шулай ҙа ризалашмай ҡартлас. Бер улы фронтта – Советтар Союзы Геройы, икенсеһе – полковник, полк командиры, өсөнсөһө Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итә. Дүртенсеһе – артиллерист. Ә ул – атай кеше – "халыҡ дошманы". Ярай ҙа балаларына халыҡ дошманы булмауын ун йыл һөргөн икмәген нахаҡҡа ашауын ышандыра алһа… Һуғыш уты мәңгелек түгел. Бер ваҡыт һүнер ул. Тик күмере ҡаласаҡ барыбер. Һиңә шул күмерҙең бер бөртөгө булып йәшәргәме? Юҡ инде.

Тыңлайҙар, тыңлайҙар ҙа ҡартласты, үтенесе буйынса ебәрәләр фронтҡа.

Әлеге лә баяғы, шул 469-сы миномет полкына эләгә ул. Расчет командиры, төҙәүсе булыр самаһы юҡ. Сәлим Пирмөхәмәтов етәкселек иткән расчетта ҡороусы (заряжающий), мина таҙартыусы, мина ташыусы кеүек төрлө эштәр үтәй. Мәгәр терегөмөштәй етеҙ була. Һәр эште күңел биреп, ихлас мөкиббәнлек, ҙур дәрт менән башҡара. Йәштәргә төрлө яҡлап өлгө күрһәтә.

Һөргөндә академик, профессор, яҙыусы, тағы ла әллә ниндәй һөнәр эйәләре менән аралашып, фекер алышып йәшәү арҡаһында мәғлүмәтле кешегә әүерелә. Ул бит әле Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәһендә Сәйфи Ҡудаш, Шәйехзада Бабич, Хәсән Туфандар менән бергә уҡыған зат. Алабарман кеше булманы. Полкта "бабай" тигән атаманы йәш яғынан иң өлкән кеше булған өсөн бирҙеләр. Яратып, яҡын күреп. Фронтта гел атып ҡына тормайһың. Һуғыш уты тынған арала төрлө-төрлө мәүзүғ йәки темалар буйынса гәпләшеү башлана. Бабай динде лә яҡшы белә. Гонаһлы, гонаһһыҙ донъя, был донъя, теге донъя, ғәрше-көрси, ете ҡат күктәге һәр пәйғәмбәр йәне йәшәүе, ғаләмдең мөхәббәт тотоуы, аң-аҡыл үҫешенең сағыштырыуҙарға ҡоролоуы, танып-белеү рәхиәте… – тағы ла әллә нәмәләр тураһында һөйләй. Аҡыллы булыу ысулдарын өйрәтә. Мәгәр бер генә минут та тик тормай. Кемгәлер ярҙам кәрәк икән, иң башта ул йүгерә. Кешелектең барлыҡ ыңғай сифаттарын туплағандыр ул үҙендә. Шуларҙы уйлап, "бабай" һүҙен "мулла" атамаһы менән нағышлап ҡуйыла.

Ул ғына ла түгел, Мулла бабайҙа күрәҙәлек һәләте лә бар икән. Кешенең үткән тормошо, киләсәк йәшәйеше хаҡында ла әйтеп бирә ала. Сәлимдең киләсәктә яҙыусы, ғалим буласағы тураһында әйтеүе ысынбарлыҡҡа тура килерме, юҡмы – өҙөп кенә әйтеп булмай.

Бабай тура әйтеүсән. Тура әйткән – туғанына ла ярамай. Ә ул бер туғанын ғына түгел, кәрәк икән, үҙе йәшәгән бөтә мөхитте, системаны, партияны ла тәнҡит итә. Үҙ-ара һөйләшкәндә бер ваҡыт "Совет власы бөтәсәк", "Коммунистар партияһы бөтәсәк" тигән фекерҙәр әйтте. Ғәжәпләнеүҙән күптәрҙең күҙҙәре аҡайҙы, сырайҙары емерелде, ҡоттары осто.

– Мулла бабай, кем әйтте һиңә был хаҡта?

– Аллаһы Тәғәлә үҙе әйтте.

– Нисек инде улай?

– Совет власы алдауға ҡоролған. Ялған власть оҙаҡ йәшәмәй. Бындай алдауҙарға ер йөрәге лә түҙеп тормаҫ, шартлар бер ваҡыт.

– Ә коммунистар партияһы?

– Ялған власть ярыҡ ялғаш булһа, уның партияһы – йыртыҡ бишмәт.

Был һүҙҙәрҙе бер ялағай полк комиссарына еткерә. Мулла шул көндө үк ҡулға алына. Хәрби трибунал уны штрафной батальонға ебәрә. Унда бик һирәк кешеләр иҫән ҡала. Бабай – шундай һирәктең береһе. Әйләнеп ҡайта полкка. Шул уҡ фекерҙәрҙе әйтергә һис ҡурҡмай. Ҡара машина уны тағы ла алып китә. Хәрби трибунал был юлы иң ҡаты яза бирә уға. Шундай хәбәр килә полкка. Ысынмы, түгелме? Тәғәйен генә әйтеп булмай. Мәгәр һуғышсылар күңелендә Мулла ысын кеше образы ҡалдырып китте.

…Быларҙы Рәйес ихлас күңелдән тыңланы. Шулай ҙа уны иң ҡыҙыҡһындырғаны Гизелла яҙмышы ине. Рәйес шул хаҡта һораны:

– Ярай, Сәлим дуҫ, Мулла бабай тураһында аңланым. Шәп кеше булған. Мин ундайҙарҙы яратам. Ә бына ҡыҙың?.. Мадъяркаң?.. Ги… Ги…

– Гизелла.

– Эйе, Гизелла. Ул бит Венгрияла ҡалғайны. Ә ни эшләп бында – Австрия ерендә йөрөй һуң әле ул? Һин уны үҙең менән алып ҡайтмаҡсы булаһыңмы әллә?

– Эш былай тора, Рәйес дуҫ...

Сәлим һөйләп бирергә мәжбүр булды.

VI

Австрия – Венгрия элек бер мәмләкәт булып иҫәпләнә. Нисек ҡауышҡандар? Уны һөйләп тә, яҙып та аңлатыу бик ҡыйын. Бында, әйткәндәй, әлеге лә баяғы, бөтә донъяның бер ҙур мөхәббәткә, сағыштырыуға ҡоролоу сере барҙыр. Кәңәшләшеү, мәслихәтләшеү, яратышыу ҡулдарын ҡыҫыштыра, ҡосаҡлаштыра, дуҫлаштыра, берләштерә. Бына бер мәл ике араға танып-белеү әсәһе сағыштырыу килеп инә. Төрлө сифаттарҙы, йәшәү рәүешен, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе сағыштырып ҡараһалар, быларҙың киләсәктә бергә көн күрә алмаясаҡтары асыҡлана. Ундай дәүләт-мәмләкәттәр йәки ырыу-кәүемдәр тарихта күп: чиндар менән һундар, монголдар менән татарҙарҙың килешмәүе, болгарҙарҙың (балҡар) Кавказды ташлап китеүе – шундайҙарға миҫал. Мөхәббәттең мең ҡылы булһа, сағыштырыуҙың уларҙы киҫә торған мең ҡылысы барҙыр. Австрия менән Венгрияла ла мөхәббәт һәм сағыштырыуҙың ошо рухиәте йәшәй. 1918 йылдың көҙөндә уларҙың бергәлеген сағыштырыу ҡылысы өҙә. Хәҙер инде икеһе ике ил булып иҫәпләнә башлай.

Туғанлыҡ рухының уты һүнмәгән. Яна ул әле, яна, яна!.. Хәҙерге ваҡытта Венгрияла йәшәгән Шандрҙар нәҫеленең орлоҡтары Австрияла ла бар. Гизелла, полктың Венгриянан Австрияға күскәнлеген белгәс, Сәлимде эҙләп Вена ҡалаһына килеп етә. Унда атаһы Шандрҙың яҡын һәм йыраҡ туғандары, дуҫ-иштәре, ҡәрҙәш-ырыуҙаштары йәшәй икән. Бик ныҡ үтенеп һорағас, атаһы Шандр бер нисә адрес бирә. Ҡылдан нескә, ҡылыстан үткер күперҙәрҙе үтергә өйрәнгән Гизелла таба уларҙы. Унан һуң мөхәббәте Сәлимде эҙләп китә. Осрашҡас, уларҙың бер-береһенә ниндәй тәрән хис-тойғо, бөйөк аң-аҡыл менән ҡарашып тороуҙарын яҙып аңлатыу бик ҡыйын.

Австрия ҡояшы ныҡ ҡына ҡыҙҙыра хәҙер. Төшкөлөктө ашағас, демаштар

яңғыҙ ҙа, икешәр, өсәр ҙә, төркөм-төркөм дә булып рәхәтләнеп йөрөй. Хәҙер инде улар йәйге кейемдә. Гимнастерканан. Түштәрендә ордендар, миҙалдар балҡый. Берәүҙеке күберәк, икенсенеке аҙыраҡ, өсөнсөнөкө тағы ла кәмерәк – төрлөһө бар. Йөҙҙәре, ҡыҙ алырға барған егеттәрҙекеләй, шат һәм ғорур. Бөтә аҙымдарында, кәүҙә тотоштарында һаман шул “Беҙ – еңеүселәр!” тигән ҡиәфәт.

Бына горизонтта бер ҡыҙ күренде. Ул аҡрын ғына килә. Өҫтөндә – аҡ күлдәк. Ҡулында – кескәй генә сумка. Демаштарға туп-тура килә. Дөрөҫ, мине күрмәйҙәрме, тигәндәй, уңға-һулға ҡарап та ала. Демаштарҙан береһе:

– Беҙҙең Гизелла лаһа! – тип ҡысҡырҙы.

Татабанъя ҡасабаһында торғанда ла, Сомбатель ҡалаһында ла Гизелланың Сәлим янына килеп йөрөгәнлеген күптәр белә. Әлеге “беҙҙең Гизелла!” тип әйтеү ҡыҙға ҡарата булған йылы мөнәсәбәт, изге тойғо, яҡын күреү мәғәнәһе ине.

Сәлим Гизелланы өҙөлөп һағынғайны. Төштәрендә күрә. Бер генә минутҡа ла иҫенән сығара алмай. Матур кәүҙәһе, сибәр йөҙө, әҙәпле генә йылмайыуы һәр ваҡыт күҙ алдында. “Беҙҙең Гизелла бит был!” тигән тауыш уны һиҫкәндереп кенә ебәрмәне – ҡыҙҙың кешеләр тарафынан да яратылыуы, үҙ ителеүе, ихласлашыуы тураһында уйланырға мәжбүр итте. Ул арала демаштар телгә килде:

– Атлап килеүен күр: аҡҡошмо ни!

– Бәй, шуның өсөн ата аҡҡошон эҙләп киләлер.

– Пирмөхәмәтов, ҡаршыла!

– Осоп китеүе бар.

Сәлим ҡыҙға табан атлап китте. Демаштарҙың тел сарлауы дауам итте:

– Давай, туй яһайбыҙ! Демаштарҙың суды ғына түгел, туйы ла ҡалһын Көнбайыш Аурупала.

– Пирмөхәмәт бында ҡаламы ни һуң ул?

– Бында ҡалһа, дезертир булып сыға бит.

– Берәр йәшерен ғәләмәте барҙыр әле.

– Ә үҙе, судья булып, кешене судить итте.

– Башы эшләй бит уның.

– Ҡолағы ғына ҡамасаулай.

Кешеләр тел борсағы сәсә башлаһа, ул борсаҡтар араһында терегөмөштәй һәйбәте лә, йәнселгәне лә, серегәне лә була. Рәйестең ҡалын тауышы шуны уйлап яңғыраны:

– Прек – ра – ти – ть... Разговоры!..

***

Ошонда хәтле булған хәлдәрҙе Сәлим түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе. Әлбиттә, түгелгәне лә, сәселгәне лә булғандыр. Гизелланың атаһы Шандрҙан алған мәғлүмәттәре, уға саҡлы булғандары ла бик күп. Бөтәһе лә бер күңел һандығына һалынған булһа ла, ул һандыҡты асып, фекерҙәреңде башҡаларға эҙмә-эҙлекле биреп бөтөрөп булмай. Хәйер, Рәйесте уларҙың һәммәһе лә ҡыҙыҡһындырмай. Венгрия менән Австрия икеһе ике мәмләкәт хәҙер. Бер мәмләкәттән икенсе мәмләкәткә үтеү өсөн, ай-һай-һай, Дунай йылғаһын йөҙөп сығыу ғына түгел, тау емерерҙәй көс кәрәк.

Был хаҡта Гизелла, әллә ниндәй ауырлыҡтар күргәнлеген аҙ ғына ла һиҙҙермәҫкә тырышып, еңел генә һөйләне лә бирҙе Сәлимгә. Ул мөхәббәтен эҙләп йөрөй. Был – изге эш. Шуға күрә уға Алла үҙе ярҙам итә. Киләсәктә лә шулай буласаҡ.

Шул хаҡта һөйләп бирҙе Гизелла Сәлимгә. Быларҙың бөтәһен дә Сәлим яңы

дуҫы Рәйескә еткерҙе. Теге ваҡытта, Рәйес Сәлимде эҙләп төн йоҡламағанда, Гизелла менән уның бер туғандарында ҡуныуын әйтте.

– Тимәк, ныҡ яратышаһығыҙ?

– Ныҡ, Рәйес дуҫ!

– Улайһа, давай былай итәбеҙ. Тотабыҙ ҙа урлайбыҙ. Вагонда йәшерә-йәшерә алып ҡайтабыҙ…

– Ә ҡайтҡас?

– Беләм. Тороp урының юҡ. Ә бына беҙҙең ауылда шығырлап торған шыршынан һалынған өс бүлмәле бер яңы йорт бар. Ағайым Фәриттеке ине ул. Бына-бына өйләнергә торғанда, һуғыш сыҡты. Ағайым үҙе теләп фронтҡа китте. Уҡытыусы ине. Ләкин әйләнеп ҡайта алманы. Ленинград блокадаһында һарап булды.

Сәлим Рәйестең ҡулын ҡыҫты:

– Рәхмәт, Рәйес! Шундай яҡшы күңелле яңы дуҫ табыуыма бик шатмын. Уйлайым әле…

VII

Гвардия старшинаһы Пирмөхәмәтов Сәлимде ҡапыл ғына ултырттылар ҙа ҡуйҙылар. Һис көтмәгәндә килеп сыҡты был күңелһеҙ хәл. Әле кисә генә демаштар күңеле тулған айҙай балҡып торҙо. Быға сәбәп – Гизелланың килеүе. Уның Сәлим менән парлап бейеүен Венгрияла саҡта уҡ беләләр ине. Гизелла күренеү менән, Сәлим уны ҡаршы алырға ашыҡты, Әҡсән гармунына йүгерҙе. Улар килеп еткәс, Әҡсән “Әпипә” көйөн һайратып ебәрҙе. Шунда уҡ майҙан барлыҡҡа килде. Гизелла менән Сәлим осоп-осоп бейергә кереште. Унан һуң төрлө уйындар булып, йырлап та алдылар.

Гизелла оҙаҡ торманы. Сәлим уны оҙата китте. Бер аҙҙан әйләнеп тә килде. Ниңә бик тиҙ? Уныһы үҙҙәренә генә мәғлүмдер. Әйләнеп килгәс, уны Рәйес ҡаршы алды. Сәлим ике яҡлап бәхетле хәҙер. “Ысын дуҫ табыу – бәхетте алағайым ҡабыу” әйтеме йөрөй халыҡта.

...Карабанов Өфө төрмәһендә Мулла бабай менән бергә ултырған. Фронтта Карабанов башта Сәлим расчетында була. Тел тирмәненең шәп тартыуына, ҡаты-ҡаты баҫып йөрөүенә, йоҙроҡ уйната белеүенә ҡарап, Сәлим уны төҙәүсе итеп ҡуйғайны. Унда угломер, прицелды тиҙ генә дөрөҫ ҡуя белеү оҫталығы ғына түгел, етди тота белеү ҙә кәрәк. Карабановта ундай һәләт юҡ. Ашыға, ваҡыт-ваҡыт ен һуҡкан кешеләй ҡылана. Ә бит минаны осорор өсөн көпшәгә һалғанда яңылыш ҡына булһа ла һулыш алырға ярамай.

Ҡыҙыу ҡанлы Карабановты разведчик итеп ҡуялар. Ана шунда асыла уның һуғышсылыҡ таланты. Бер ҡараңғы төндә пар ат егелгән немец бричкаһы алып ҡайтып бирә Пирмөхәмәтовҡа. Телефонсы ҡыҙ Алтынай әсирлеккә эләккәс, Карабановҡа бара Сәлим:

– Ҡотҡарабыҙмы Алтынайҙы?

– Мин разведчик инде. Унда немец тылына һине ебәрмәйәсәктәр бит.

– Мин полк командиры менән һөйләштем. Ул риза.

– Алтынай мөхәббәтеңме?

– Беҙ дуҫтар ғына…

– Мөхәббәт шунан башлана инде ул: дуҫлыҡ – осҡоно, мөхәббәт – ялҡыны.

Алып ҡайталар Алтынайҙы дошман тылынан. Мең бәлә менән. Ҡыҙғаныс, Алтынай һуғыш бөткән көндө үлә. Сәлим үҙе ерләй уны.

Былардан башҡа ла күп изгелектәр эшләй Карабанов был расчетҡа. Хәҙер уларҙың киләсәк яҙмыштары уртаҡлашты. Карабанов Өфөгә ҡайта. Мәгәр

унда бер кеме лә юҡ. Баш төртөр урын ҡайҙан табыр? Нисек тамаҡ туйҙырыр? Сәлимдең дә яҙмышы шуға тартым. Дөрөҫ, әгәр Гизелланы бынан алып китһә, Рәйес уларға яй әҙерләне. Ләкин "Үҙ яйың – үҙ ояң, кеше яйына ҡул һуҙырға оял", тиҙәр бит.

Хәйер, киләсәккә һуҡыр күҙ менән ҡараусылар тормошто томанлы итеп күрә. Атаһы, ана, ижтиһадлы булған бит, бер ҙә юҡтан ике ҡатлы йорт һалған. Кеше өсөн булһа ла… Улы атаһынан мең тапҡыр арттырып ебәрергә тейеш, тиҙәр бит.

Шулай уйланы ла Сәлим, тегеләрҙе үҙ сумаҙаны янына алып китте. Тиҙ генә асып, бер костюмды Карабановҡа алып бирҙе:

– Дуҫлыҡ иҫтәлеге итеп ҡабул ит!

Икенсеһен Рәйескә тотторҙо:

– Һиңә лә шулай уҡ бүләк!

Тегеләр, ни эшләргә белмәйенсә, аптырашып торҙо. Бының шулай булырын һиҙенгәйне Сәлим. Быға тиклем костюмдың береһен Карабановҡа тәҡдим иткәйне инде. Мәгәр алманы Карабанов. Ул бит ваҡ кеше түгел, эрерәк заттан. Төрмәлә, ана, тотҡондарҙың тотҡаһы булған. Сепрәк ҡоло булыу ғәрлек ул беҙҙең өсөн, тип уйлағандыр, бәлки. Бик ҡоро холоҡло ул Карабанов. Асыуы килһә, тимер ишекте йоҙроҡ менән вата ала. Шуны уйлап, һүҙ тәртәһен икенсе яҡҡа борорға булды Сәлим. Был әйберҙәр Венгрияла саҡта гонорар аҡсаһына алынған. Ҡайҙандыр килгән харам әйберҙәр түгел. Башҡалар, ана, һалдат тоҡсайы менән генә йөрөй. Ә Сәлимдә – ике сумаҙан. Кеше араһында, нисектер, ҡыйын бит былай.

Шул хаҡта әйтергә уйланы Сәлим. Әммә тыйылды. Белә уның характерын. Бер урынһыҙ һүҙ бына хәҙер үк күркә урынына ҡабартырға мөмкин уны. Йомшарыуҙы ла яратмай ул. Ҡаты ғына итеп әйтте лә ҡуйҙы:

– Дуҫ бүләген алмау – ай-һай…

"Дуҫ" һүҙе иретте Карабановтың боҙҙай ҡатҡан йөрәген.

Икенсе костюм Рәйес ҡулына күсте.

***

Ҡара машина тап шул ваҡытта килеп туҡтаны. "НКВД машинаһы", "Смерш машинаһы" тигән атамалары ла бар уның. Беренсеһе тыныс тормошта әйтелә. Әҙәм башын ашай торған машина ул. Икенсеһе фронтта ҡулланылды. "Смерть фашистским шпионам" тигән һүҙ теҙмәһенән ҡыҫҡартылған. 469-сы полктан Мулла бабайҙы хәрби трибуналға өс тапҡыр алып китте ул. Әйләнә лә ҡайта, әйләнә лә ҡайта Мулла бабай. Бер ваҡыт штрафнойға ебәрелә. Дошман менән ҡаты алышта башҡалар үлеп бөткәс, бер үҙе генә ҡала. Иҫ киткес батырлыҡ күрһәтә. Шунан һуң, "гонаһ"тан азат итеп, уны үҙ полкына ебәрәләр. "Совет власы бөтәсәк", "Коммунистар партияһы бөтәсәк", "Улар дөрөҫ юл менән бармай", "Яңылыш атлаған илдең аяғын Алла һуғып һындыра" кеүек ҡурҡыныс юрауҙар әйткән өсөн уны йәнә алып китә ҡара машина. Һуңғы китеүҙән полкка әйләнеп ҡайта алмай Мулла бабай. "Атҡандар" тигән һүҙ генә йөрөй. Ысынмы, түгелме – быныһы бер Алланың үҙенә генә мәғлүм. Атҡанда ла ҡиблаһын ҡыйыҡлатмағандыр. Үҙ иманына тоғролоҡло кеше ул.

Был ҡара машина ошо уҡ урындан дезертир Мәхмүтте алып китте. Уның яҙмышы нисектер – хәҙергә билдәһеҙ. Хәйер, бысраҡ күңеллелек кешене һуңғы минутына ҡәҙәр алйот арбаһында йәшәтә. Эҙләгәнен тапҡандыр.

Шөкәтһеҙ машина хәҙер Сәлим Пирмөхәмәтов артынан килгән. Саҡырып алдылар ҙа, ике сумаҙаны менән бергә төрткөләй-төрткөләй ҡара машина

эсенә индереп, алдылар ҙа киттеләр. Нимә был? Төшмө? Өнмө? Ни ғәйебе бар Пирмөхәмәтовтың? “Смерш”тар әллә яңылышамы?

Күктә ҡапыл ҡараҒусҡыл болот киҫәктәре өйөрөлөштө. Австрияның йыуаш ҡояшы шулар артына йәшеренде. Демаштар күңеленә ҡарағусҡыл уйҙар йәбеште...

Ваҡ-төйәк уйҙар ҙурҙарына тоташа. Сәлим – бер шәхес. Шәхес булыу орлоғо уның йөрәк-бәҙәненә сәңгелдәктә саҡта уҡ һалынған. Бер йәштә атанан ҡала. Ун бер йәштә, дүртенсене тамамлағас, кулак балаһы исемен алып, мәктәптән ҡыуыла. Үҙ тамағын үҙе туйҙырыу, үҙ өҫ башын үҙе бөтәйтеү өсөн көн-төн сабата үрә. Атаһы һалған өйҙән ҡыуып сығарғас, алты туғаны менән кеше өҫтөндә, ауылдың ташландыҡ йорттарында йәшәй. Ун алты йәшкә еткәс, Себерҙә тимер юлға шпал һала. Һуғыш сыҡҡас, фронтҡа китә. Бөтә фронтҡа күрһәтерлек минометсы була.

Быны шулай икәнлеген аңлы демаштар белә хәҙер. Ләкин тел сарларға яратҡан аңһыҙҙары ла, сысҡанды дөйө итеп күрһәтергә тырышҡан алабармандары ла, алтын баҙынан сүп эҙләүсе алйоттары ла бар. Пирмөхәмәт, йәнәһе – һатлыҡ йән. Мадъярка – шпионка. Ғәйбәт бер йәйелһә, ҡырҙағы сүп үләне менән бер. Утап ырғытып бөтөрөп тә булмай. Мәгәр бында сүп үләнен тапап йөрөүселәр ҙә юҡ түгел. Шундайҙарҙың береһе – Рәйес. Сәлимде ул яҡшы белә хәҙер. Бер-береһенең йөрәк төпкөлөнә изге күңел асҡысы менән керешкәндәр. Тыңлап йөрөй-йөрөй ҙә тел ҡылысы менән киҙәнә ғәйбәтселәргә:

– Сәйнәмәгеҙ. Кеше һағыҙ түгел бит. Пирмөхәмәт кеүек булығыҙ әле…

Өфө төрмәһендә Карабанов һатлыҡ йәндәрҙең (унда ла була икән) башын “параша”ға тығып ала торған булған. Бында ул һүҙҙән беҙ яһаусыларҙың танауы аҫтында тимер йоҙроғон уйнатып ала:

– Пирмөхәмәтовҡа бысраҡ ата торған булһаңмы… иҙәм. Алтын кеше ул…

Тыңлап тора-тора ла, райондашы Ғәйрәтбаев та Сәлимде яҡлашырға тотона:

– Алйот алһыҙ, яман ямаулыҡһыҙ йәшәр, ти торғайны атай мәрхүм. Һүҙегеҙҙең алы ла, ялы ла юҡ. Вәт дурактар. Панимайт нады Пир… Пир… Пирмөхәмәт кеүектәрҙе…

Бәхәс ҡыҙа барҙы. Ул Гизелла күренгәс кенә һүнде. Ҡыҙ, донъяла йәшәткәне өсөн Аллаға мең рәхмәт әйтә-әйтә ҡыуанған фәрештәләй, аҡрын ғына шат атлап килә. Демаштарҙың күҙе уның тиҙерәк яҡынайыуын түҙемһеҙләнеп көттө. Беләме мөхәббәте менән булған хәлде? Әгәр белмәгән булһа? Был ҡара ҡайғыны ишеткәс, ни эшләр икән? Бөгөлөп төшөрмө? Ҡысҡырып илап ебәрерме? Йөрәге ҡапыл ғына тибеүҙән туҡтамаҫмы?

Бына ул килеп етте. Мөхәббәте ҡаршы алмағанға аптырап тора. Ниңә? Ни өсөн? Ҡайҙа уның Сәлиме?

Ваҡытты елем урынына һуҙыу бик ҡыйын ине. Мәсьәләне Рәйес аңлатып бирҙе. НКВД машинаһы алып китеүен әйтте. Гизелла аптырап ҡалды. Әммә бер аҙҙан ныҡлыҡ ғорурлығын юғалтмаҫҡа тырышып, яй ғына атлап китеп барҙы.

VIII

Сәбәпһеҙ һәнәк тә һынмай, тигәндәй, демаштарҙы иленә оҙатыуҙың һуҙылыуында әллә күпме тотҡарлыҡтар бар. Юлда ике поезд ҡапма-ҡаршы килеп сәкәште. Кем ғәйепле? Фашизм ҡалдыҡтары аҫтыртын эш итәме? Башҡа йүнһеҙлектәр бармы? Аяғөҫтө йоҡлап йөрөгән алабармандар хикмәтеме? Һуғыш

утында янмаған күпме демаштар тыуған илдәренә ярһып ҡайтышлай харап булды. Бер ауыҙың бешһә, һалҡын ашты ла өрөп ҡабаһың. Әлеге "крушение"нан һуң артыҡ һаҡ ҡылана башланылар. Шулай кәрәктер ҙә. Ата-бабалар ете уйлағандан һуң ғына бер киҫергә ҡушҡандар, ана. Ете генә түгел, бәғзе ваҡыт бер ҡырҡыр өсөн мең ҡат уйларға тура килә. "Сабыр төбө – һары алтын", – тиҙәр бит. Йософ пәйғәмбәр ҙә сабыр итергә ҡушҡан. Пырҙымһыҙ уйлы ҡайһы бер демаш хәҙер тағы ла оҙаҡ торасаҡты Сәлим яҙмышына бәйләп аңлатырға кереште. Ул тиҙ генә хәл ителәә торған түгел, ятасаҡбыҙ әле күккә төкөрөп, йәнәһе.

Сәлимде ҡара машина әллә ҡайҙа йыраҡҡа алып китмәне – Вена ҡалаһындағы комендатураға алып барып тапшырҙы. Унда "Советтар" өсөн айырым бүлмәләр бар икән. Ғәйепләнеүсе шунда тикшерелә. Башта Сәлим сумаҙанындағы әйберҙәр ентекләп ҡаралды. Һәр бер әйберҙе яҙып баралар. Һорау артынан һорау. Ҡайҙан алған был кейемдәрҙе? Урланғанмы әллә? Башҡаларҙа юҡ, ни эшләп унда ғына бар?

Сәлим бер нәмә лә йәшермәй. Алдашмай. Венгрияла саҡта гонорар аҡсаһына магазиндан һатып алыуын әйтте. Баҫылған мәҡәләһен күрһәткәс кенә ышандылар. Ауылда уны берәүҙең дә көтөп тормауын йәшермәне. Ҡайтҡас, әйберҙәрҙе ике туған, өс туғандарына, ҡәрҙәш-ырыуҙарына таратасаҡ.

– Мине сепрәк ҡыҙыҡһындырмай, быларҙы мадъярҙарҙың пенгоһынан (аҡсаһынан) ҡотолоу өсөн генә алдым, – тине ул. Рәйес Байымов, Николай Карабановҡа берәр костюмын биреүен дә әйтте. Быларға тикшереү өсөн бер осҡон ғына табылһын. Уны дәррәү ялҡынға әйләндерәләр ҙә ебәрәләр. Тоттолар ҙа әлеге ҡара машинала Рәйес менән Карабановты алдылар ҙа килделәр.

Баш, тиң һин, ул тикшереүселәрҙә. Костюмдар бирелгән икән, уның ни хикмәте бар? Сәлим Пирмөхәмәтовтың ил алдындағы намыҫын шуның менән асыҡламаҡсы булдылармы? Сәлимдән костюм алыуҙарын әйткәс, тикшереүсе капитан ҡыҙыҡ ҡына һүҙҙәр ысҡындырҙы:

– Һеҙ ҙә буялмаҡсы булаһығыҙмы был бысраҡ менән?

– Костюмдарҙың бысрағы юҡ, иптәш капитан, улар өр-яңы.

Капитан, ултырған еренән ҡапыл һикереп тороп, ниңәлер сығып китте. Ул арала Карабанов тәтелдәп алды:

– Беҙ һинең менән, Сәлим дуҫ, әсирлеккә эләккән Алтынайҙы немецтың ауыҙынан тартып алып ҡайттыҡ. Төнөн килеп, һине лә урлаясаҡбыҙ, ҡайғырма.

Уның һүҙен раҫламаны Сәлим:

– Кәрәкмәй, Николай, үҙемде-үҙем аҡларлыҡ көс табырмын. Бында ауылдашым дезертир Мәхмүттең ҡулы уйнай кеүек. Гел уны телгә алалар. Миңә яла яғып киткән, буғай…

Ул, ысынлап та, шулай ине. Демаштар араһынан алып киткәс, Мәхмүтте лә тәүҙә ошонда тоталар. Һорау алына. Ҡыйыш атып та тура тейҙерергә маташҡан алйоттай, Мәхмүт яуаптарҙы ла гел алдашып бирә. Тота ла ауылдашы Сәлим өҫтөнә бысраҡ яғырға керешә. Ул, йәнәһе, һуғыш ваҡытында һалдат тоҡсайында немецтарҙың үҙҙәре яғына саҡырып яҙған листовкаларын йөрөткән. Дошман яғына ҡасырға булған ниәте. Яйы ғына тура килмәгән. Ҡурҡаҡ бит ул. Кулак балаһынан ни көтәһең инде, тегеһе-быныһы… Һалдат тоҡсайында шул листовкаларҙың берәйһе һаман ятаһыр әле. Тикшереп ҡарағыҙ, тип ебәрә Мәхмүт, үҙен әллә кемгә һанап.

Тикшереп ҡараһалар, Сәлимдең яҙмалары араһынан уға Юғары Башкомандующий Генералиссимус Сталин тарафынан бирелгән 21 Рәхмәт килеп сыға:

НКО – СССР
ЗА НАШУ СОВЕТСКУЮ РОДИНУ!
469 отдельный минометный полк
*24 октября 1945 г.*

СПРАВКА

*РГК Выдана сержанту* ***Пирмухаметову***
***Салиму Шагиахметовичу***
*№240 в том, что ему приказами*
*Верховного Главнокомандующего Генералиссимуса тов. СТАЛИНА*
*от 24.07.43. года, как участнику ликвидации*
*летнего наступления немцев на Белгородском направлении*
*от 5.08.43 года за освобождение города Белгород*
*от 28.08.43 года за освобождение города Харьков*
*от 28.09.43 года за освобождение города Полтава*
*от 29.09.43 года за освобождение города Кременчуг*
*от 8.12.43 года за освобождение города Александрия*
*от 9.12.43 года за освобождение города Знаменка*
*от 8.01.44 года за освобождение города Кировоград*
*от 17.03.44 года за освобождение города Ново-Украинка*
*от 18.08.44 года за форсирование реки Висла и освобождение города Сандомир*
*от 23.08.44 года за освобождение города Дембица*
*от 13.01.44 года за прорыв обороны противника западнее гор. Сандомир*
*от 17.01.45 года за овладение городом Ченстохов и форсирование р.Варта*
*от 21.01.45 года за прорыв обороны немцев на границе Германии, переход границу и овладение городом Кранцбург*
*от 23.01.45 года за овладение городом Немслау и выход на р. Одер*
*от 24.01.45 года за овладение городами Оппельи, Равич и Трохенберг*
*от 6.02.45 года зафорсирование р. Одер и овладение гг. Олау, Бриг и др.*
*от 23.03.45 года за прорыв обороны противника южнее города Оппельи*
*и овладение городом Неиштадт*
*от 27.03.45 года за овладение городом Штреллен, Рыбник*
*от 8.05.45 года за овладение городом Дрезден*
*от 9.05.45 года за освобождение столицы Чехословакии города Праги*
За отличные боевые действия объявлены благодарности
*Командир 469 минометного КРЕМЕНЧУГСКОГО КРАСНОЗНАМЕНОГО ОРДЕНОВ БОГДАНА ХМЕЛЬНИЦКОГО И АЛЕКСАНДРА НЕВСКОГО ПОЛКА*
ГВАРДИИ МАЙОР /ДЕНИСОВ/.

Тап шул ваҡыт 469-сы полктың элекке командиры полковник Исхаҡов ярһып килеп инә. Тикшереүсе менән улар ҡосаҡлаша яҙып күрешә. Тимәк, таныштар. Бер үк ваҡытта Сәлимде лә һөйә полковник:

– Сәлим Пирмөхәмәтов мәргән ата, уның арҡаһында полк командиры Абдулла Исхаҡов маҡтала.

– Киреһенсә лә була торғайны, иптәш полковник. Полк командиры отлично

фарман бирә. Шул сәбәпле расчет командиры Пирмөхәмәтов яҡшы ата.

Шулай: яҡшылыҡтың әжере – яҡшылыҡ, ти торғайны атай мәрхүм.

Шунан һуң һүҙ тәртәһе Сәлим ҡарамағына боролдо. Пирмөхәмәтовтың фронтта минометтан иң оҫта атыусы булғанлығын тикшереүсе капитан да белеп, яҡташы өсөн (ул Баҡалы районынан булып сыҡты) ғорурланып йөрөгән икән. Был ғорурлыҡ хисенә аң-аҡыл тойғоһо ла өҫтәп ебәрҙе полковник:

– Нисә мәртәбә хәрби училищеға ебәрмәксе булдыҡ, ә ул ҡарышты. Майор, полковник, генерал… әллә кем булыр ине.

Сәлим көләмһебөрәк һөйләште:

– Мулла бабай рөхсәт итмәне. "Һинән йә яҙыусы, йә фән ғалимы сығасаҡ", – тине.

– Дөрөҫ әйткән. Мин дә раҫлайым быны.

– Белемем ете йыллыҡ ҡына бит, иптәш полковник.

– Уҡырһың. Мина менән серәкәй күҙенә тейҙерерлек дәрәжәлә тура аттыңмы? Аттың. Фәнгә лә шулай "атырһың".

***

Сәлим тураһындағы һүҙ уның файҙаһына әйтелеп бөтөлөп торғанда, атылып тигәндәй Гизелла килеп инде. Ниндәй генә ауыр шарттар булмаһын, ул ҡаушап ҡалмай, ҡурҡмай, үҙен ҡыйыу, батыр йөрәкле, ҡаһарман тота белә торғайны. Был юлы ул күркәм сифаттар кәмегән шикелле. Йыш-йыш тын ала. Ярһый. Өҙгөләнә. Дөрөҫ, ул быларҙы һиҙҙермәҫкә, йәшерергә, үҙе менән бер ниндәй ҡурҡыныс хәл дә булмаған итеп күрһәтергә тырыша. Әлбиттә, кешенең йөҙө – эсендәге бөтә мәнфәғәтен күрһәтә торған көҙгө. Был көҙгө, кеше нисек кенә грамын да һиҙҙермәҫкә тырышмаһын, эстәгене барыбер аса ла һала. Шәп көҙгө!

Гизелланың көҙгөһө әле дөрөҫ күрһәтә икән, уның эске кисерештәрен Сәлим аңлай. Полковник та һиҙенәлер. Тикшереүсе капитан өсөн ул – аңлайышһыҙ көҙгө.

Зирәк күңелле Гизелланың йәшкелт-зәңгәр күҙҙәре төрлө ҡараштарҙы тиҙ аңланы. Ҡараштар уның өсөн бер "чепуха" хәҙергә. Ул, айбарлы һалдаттай, тыптып баҫып барып Сәлимде ҡосаҡлап алды:

– Уның бер ғәйебе лә юҡ.

Сәлим менән Гизелла араһындағы мөхәббәт романы ла тикшереүсе капитанға мәғлүм. Был хаҡта махсус һөйләшәһе бар. Шулай уйланы ла, һүҙҙәрҙең, фекерҙәрҙең шаҡтай тәрән, мәғәнәле, файҙалы буласағын аңлап, тикшереүсе йәштәрҙе етәкләп алып сығып китте. Күршелә буш бүлмә бар икән. Шунда алып инде лә, "һөйләшә тороғоҙ" тип, үҙе сығып китте. Полковник менән махсус фекерләшер өсөн.

Исхаҡов – Өфө егете. Һуғышты өлкән лейтенант булараҡ башлап, полковник дәрәжәһенә етеп тамамланы. Бындай хәрби "һикереш" теләһә кемгә тәтемәй. Ул башта 469-сы миномет полкының 1-се батарея командиры булды. Батарея 1942 йылдың аҙаҡтарында – 1943 йылдың баштарында Иглин районы Таутөмән һәм Покровка ауылдарында ла, Мәскәү янында резервта торғанда ла хәрби әҙерлектәр үткәндә үк атыу буйынса ла, тәртип яғынан да гел беренселекте ала торғайны. Һуғышҡа ингәс, Курск дуғаһында уҡ батарея атыу оҫталығын күрһәтте. Кешелеклелек, офицер намыҫын тота белеү, сафлыҡ кеүек сифаттар ҙа Исхаҡовты биҙәй торғайны. Быйыл көҙ хәрби академияға уҡырға китәсәк. Әле бына Рәсәйгә оҙатыласаҡ демаштарҙың күбеһе уның полкынан. Уларҙың яҙмышы ла борсой үҙен. Сәлим Пирмөхәмәтовтың ултыртып ҡуйылыуы тураһында ишеткәс, янғын һүндерергә сапҡандай, килгән тиҙерәк.

Тегеләрҙе айырым бүлмәлә ҡалдырып ингәс, Исхаҡовтың беренсе һорауы шул булды:

– Сәлим Пирмөхәмәтовты ни эшләтмәксе булаһығыҙ?

– Иленә ҡайтып китһен.

– Теге дезертир ауылдашы бысратып йөрөйҙөр уны.

– Ул дезертир бик алама кеше. Ташты Пирмөхәмәтов баҡсаһына күп атасаҡ.

– Аттырмабыҙ…

– Шулай тиһең дә ул.

– Әле ни һөйләгән һуң?

– Пирмөхәмәтов ҡайтмаясаҡ, дезертирлыҡ ҡыласаҡ, имеш. Яҙып биргән. Бына…

Ҡағыҙҙы уҡып сыҡҡас, йыҡылып китә яҙҙы Исхаҡов. Донъяла ниндәй бысраҡ һүҙ бар, бөтәһен дә тултырған: “кулак балаһы”, “һоро ҡорт”, “ил тараҡаны”…

Полковник һорап ҡуйҙы:

– Ә ниңә оҙатмайһығыҙ һуң әле уларҙы?

– Йыйып ебәрәбеҙ. Башта – Рәсәй… унан һуң, бәлки, Себергә…

– Тимәк, миңә Пирмөхәмәтов хаҡында борсолмаҫҡа мөмкин?

– Тынысланығыҙ, иптәш полковник!

IX

Гизелла өс көн буйы Сәлим яҙмышы өсөн янып йөрөнө. Ҡайҙа алып киткәндәр? Кем? Ни өсөн? Ул, әлбиттә, һәр ваҡыттағыса тыныс булырға, сабырлыҡ дилбегәһен бушатмаҫҡа тырышты. Шулай ҙа эстә дөрләп янған утты һис тә һүндереп булмай. Тегендә барып бәрелә, бында килеп һуғыла. Таныштары менән бергә төрмәләрҙең ишектәрен шаҡып йөрөнө. Эҙләй, ләкин таба алмай. Бер аҡыллы баш комендатураға мөрәжәғәт итеп ҡарарға ҡушты. Килһә – шунда.

Икеһе бер бүлмәлә ҡалғас, шул хаҡта һөйләп бирҙе Гизелла. Ҡыҙҙың шул ҡәҙәр ныҡ яратыуын тағы ла ныҡлап аңланы Сәлим. Мөхәббәт өсөн дауыллы диңгеҙҙәрҙе кисер был, тип уйланы. Быны үҙенә әйтте хатта.

– Их, Гизелла, һин минең бәхетем!

– Һин дә минең бәхетем, Сәлим! – тине ҡыҙ.

– Мин һине бәхетле итә алмам кеүек, Гизелла!

– Ҡал һин, Сәлим! Бында ҡал! Атайым бөтәһен дә уйланы. Ул беҙҙе бәхетле итмәйенсә ҡалмаҫ.

– Минең үҙ илем бар, Гизелла!

– Минеке юҡмы ни һуң, Сәлим?

– Алып китәм мин һине.

– Мин Ватанымды ташлай алмайым.

– Ә мин Ватаныма ҡайтмайынса булдыра алмайым.

– Тимәк, мөхәббәт бөтәһенә ҡарағанда ла ваҡ мәсьәлә булып сыға, Сәлим?

– Минеңсә, ул барыһынан да өҫтөн, Гизелла!

Сәлим уның ҡулдарынан алды. Ҡосаҡлап, ҡуйынына ҡыҫты.

Гизелла уның сәстәренән һыйпарға кереште. Йомшаҡ бармаҡтары наҙы биргән бер ләззәте генә лә мәңге онотторлоҡ түгел. Был наҙ күңелде иркәләй, йөрәкте иретә, бөтә кәүҙә-йәнде сихырлай. Аһ, Гизелла!..

– Сәлим!..

– Гизеллам!..

Коридорҙа аяҡ тауыштары ишетелде. Еңел һөйәген тулҡынландырып, тикшереүсе капитан килеп инде:

– Киттек!..

Ҡара машина йәнә килеп туҡтағас, демаштар тағы ла хафаланып ҡуйҙы. Уны “ҡара ҡоҙғон” тип тә йөрөтә башланылар. Демаштар, һәр ваҡыттағыса, тел сарлап алды:

– Кем кәрәк инде был “ҡара ҡоҙғон”ға тағы ла?

– Ҡарыны асһа, ҡоҙғон сәпсек сүпләргә тотона.

– Сәпсек урынына ла күрмәй башланылар беҙҙе.

Машинанан гвардия полковнигы Исхаҡов, гвардия старшинаһы Пирмөхәмәтов сыҡҡас, оҙаҡ ваҡыт болот аҫтында йәшеренеп йөҙгән ҡояшты күреп шатланғандай, демаштар хатта ҡул сабып алды.

Старшинаның ике сумаҙанын алып ҡалдылар. Уға һалдат тоҡсайы ғына рөхсәт ителде. Гизелланы фатирына илтеп ҡуйғас, машина ошонда ашыҡты. Полковниктың ҡулында бер әйбер ҙә юҡ ине. Әммә әйтәһе һүҙҙәре бар ине.

– Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ эшләү – һәр кем эше, яманлыҡҡа яҡшылыҡ эшләү – ир-егет эше, – тип башланы ул һүҙен. – Беҙҙең полкта хеҙмәт иткәндәрҙең бөтәһенә лә мәғлүм: дезертир Мәхмүткә яҡшылыҡ эшләгәйне ауылдашы Пирмөхәмәтов. Ләкин аңламаны теге кәбәк баш. Саян һуңғы сиктә үҙен сағып үлтерә. Ә был хәшәрәт ғүмеренең ҡурҡыныс көндәрен кеше сағып яҡтыртмаҡ була. “Старшина Пирмөхәмәтов сумаҙанында немецтарҙың листовкаларын йөрөтә” тигән яҙыу ҡалдырған. Комендатурала сумаҙанын асып ҡараһалар, унда Юғары Башкомандующий Генералиссимус Сталиндың гвардия старшинаһы Пирмөхәмәтовҡа бирелгән 21 Благодарносы килеп сыға. Был тиклем күп Благодарность Сталин тарафынан берәүгә лә бирелмәгән. Уны бер ҙә юҡҡа Советтар Союзы Геройы исеменә тәҡдим итмәгәйнек. Бирелмәүендә лә ниндәй хата барлығын хәҙер яҡшы беләбеҙ. Башкомандующий тарафынан бирелгән 21 Благодарность – 21 орден ул! Бөтәһен иҫәпләһәк, өс Геройлыҡ был. Бир әле шул ҡағыҙыңды, старшина!

Пирмөхәмәтов тоҡсайынан справканы алып биргәс, Исхаҡов уны яйлап ҡына, ашыҡмайынса, һәр һүҙен алтын бөртөгөләй ҡиммәтле итеп әйтә-әйтә уҡып сыҡты:

– Благодарность Белград, Харьков, Полтава, Кременчуг, Александрия, Знаменка, Кировоград, Ново-Украинка, Сандомир, Дембица, Кранцбург, Немелау, Оппельи, Рабич, Трохенберг, Олау, Бриг, Неиштадт, Штреллен, Рыбник, Дрезден, Прага ҡалаларын алғандағы батырлыҡтары, Висла, Варта, Одер йылғаларын кискәндәге ҡаһарманлыҡтары, Сандомир ҡалаһының көнбайышындағы, Германия еренә ингәндәге, Оппельин ҡалаһының көньяғындағы немец обороналарын емергәндә күрһәткән батырлыҡтары өсөн бирелә… – Быларҙы уҡып сыҡҡас, аҙ ғына күкрәк тыны алып, һүҙен дауам итте полковник. – Беҙ фашизмды еңдек. Һеҙ “фронтовик” тигән данлы, күркәм исем йөрөтәһегеҙ хәҙер. Тик “фронтовик” һүҙенә тап төшөрөргә ярамай. “Фронтовик” хәҙер, яраларҙан үҙ тәне һыҙлаһа ла, һуғыш уты көйҙөргән ил яраларын төҙәтергә тейеш. Еңеллек эҙләмәгеҙ! Яңы тормош төҙөү, уны бөтә донъяға өлгө итеп күрһәтеү кеүек ауыр мәшәҡәттәр фронтовиктар яурынында буласаҡ. Илебеҙҙәге “фронтовик” һүҙе бөтә донъя өсөн ҡурҡыныс символы булып та яңғыраясаҡ. “Фронтовик” һүҙенең эске мәғәнәһендә батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ, айбарлылыҡ, сафлыҡ төшөнсәләре лә бар. “Хәрби тәртиптән ҡотолдоҡ” тип, туғарылырға ярамай. Киреһенсә, ауырлыҡҡа яңыса егелеү тураһында уйланырға кәрәк. “Запад”, “запад”, “көнбайыш”, “көнбайыш” тип ҡыҙыҡтыҡ. Күрҙегеҙ бит: бармаҡ менән төртөрлөк тә буш урындары юҡ. Ә беҙҙәге ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтары ҡалай? Ә!?

Бәхетле илдә йәшәрбеҙ беҙ. Осһоҙ-ҡырыйһыҙ ҡырҙар, яландар, болондар, урмандар, диңгеҙҙәр, күлдәр, йылғалар… Ҡәҙерен белергә кәрәк!

Полковник аң-аҡыл ғына түгел, хис-тойғо менән дә һөйләргә тырышты. Һуңғы һүҙҙәрен дә шулайыраҡ тамамланы:

– Һуғыш уты беҙҙе көйҙөрөп кенә ҡалманы, сыныҡтырҙы ла, дуҫлаштырҙы ла, туғанлаштырҙы ла. Һеҙҙән айырылыу ҡыйын да, һағышлы ла, моңһоу ҙа. Поезд начальнигы – капитан Корнышев, ярҙамсыһы – капитан Трапезников, һеҙҙең менән бергә Мәскәүгә ҡәҙәр мин дә барам. Хәрби академияға һуғылаһым бар. Тимәк, “фронтовик” булыуым дауам итә. Хәйерле юлға бергә сығайыҡ!

Демаштар: “Ура!”, “Ура!” – тип һөрәнләне.

X

Армия тормошон ҡайһы берәүҙәр ныҡ ярата. Һуғышҡа саҡлы бер ауылдан ҡаралырға егерме егет барһа, һалдат хеҙмәте өсөн биш-алтыһы ғына яраҡлы була торғайны. Ике йыл хеҙмәт иткән егет белеме, донъяға ҡарашы, фекер йөрөтөүе буйынса бөтөнләй яҡшы яҡҡа үҙгәреп ҡайта. Ул билдәле бер тәртипкә лә күнегә. Сөнки ул сарлана, игәүләнә, шымара, энә күҙенән үтерҙәй булып ыҫпайлана.

Армияға китер ваҡытын Сәлим түҙемһеҙләнеп көттө. Беренсенән, ана шул энә күҙенән үтерҙәй булып йыйнаҡланыу оҡшай. Икенсенән, офицер булыу күҙен ҡыҙыҡтыра ине. Бөхтә кейенеп, тып-тып баҫып, кәүҙәне суйын бағанаһылай төҙ тотоп йөрөүҙәренә ҡарап һоҡлана торғайны. Шулай ҙа, әллә нисә тапҡыр хәрби училищеға ебәрергә теләһәләр ҙә, барыбер ризалашманы. Һуғыш, тыныс тормоштағылай, минуттар менән иҫәпләшмәй. Мәгәр тимер тәртип ут эсендәгеләр өсөн айырыуса кәрәк. Быға түҙә алмағандар ҡасыу һымаҡ шәрәмәтлелек һайлап батты мыҫҡыл һаҙлығына. Немецтарҙың ожмах вәғәҙә итеүҙәренә ышанып, улар яғына шылыусы Мәхмүт кеүек дезертирҙар ҙа булды. Былар аҙсылыҡ, әлбиттә. Ҡурҡаҡтар, һатлыҡ йәндәр. Үҙ мәнфәғәте өсөн йәшәүсе ҡыл ҡойроҡтар.

Армия хеҙмәтендә һалдатҡа иртәгә ни булырын әйтеп тормайҙар. Ваҡыт-ваҡыт фронтта ла шулай булды. Бер мәртәбә күсенеүҙең ауырлығы һалдаттың эсбауырын өҙә. Көнөнә бишәр тапҡыр күсенгән саҡтар була торғайны. Ут позицияһын биш тапҡыр алыштырырға кәрәк. Һалдаттың һалам өҙөрлөк тә хәле ҡалмай. Мәгәр ыңғырашырға ярамай. Оят, түбәнселек, хөсөтлөк була.

Шулай ҙа Совет Армияһы фашизмды хәрби техника менән генә түгел, ныҡлыҡ, сыҙамлылыҡ, Ватанды һөйөү рухы менән дә еңде.

Полковник Исхаҡов быларҙың бөтәһен дә яҡшы белә. Әле бына фронтовиктың киләсәктәге тыныс тормошо тураһында ул ана шул фронт ныҡлығын иҫкә алып һөйләне. Уның телмәре буйынса фекер йөрөтһәк, Тыуған илгә ҡайтып китеү минуттары морон төбөндә икән хәҙер. Мәгәр уға был хаҡта әйтергә ярамай. Сөнки хәрби хеҙмәттәге тәртипте һаҡлау һаман мотлаҡ әле. Көрәшсе бер мәлдә тейешле хәрәкәтен яһамай еңелгәндәй, бер һаҡһыҙлыҡ демаштарҙың тәртибен аҡһатып ебәрергә мөмкин. Был яҡтар йөҙөм шарабына бай. Дөрөҫ, Австрия ул байлыҡҡа һаран. Венгрияла улай түгел. Австрияла йәшәгән мадъярҙар ҙа йомарт быға. Һаталар. Демаштарҙың төрлөһө бар. “Ҡайтыу” һүҙе уларҙың нәфсеһенә шайтан орлоғо тамыҙыуы ихтимал. Рәсәй халҡы эсә инде ул. Уларҙың был алама ғәҙәтен бөтә Көнбайыш Аурупа илдәре белә. Беҙҙе ҡапсыҡта һаҡлап булмай.

Шуларҙы уйлап, ҡайтыу минуттарын әйтмәйенсә торорға булды полковник.

Был минуттарҙы белеү Сәлим өсөн бигерәк тә кәрәк ине. Кисен уның янына Гизелла килде. Уның йөрәге лә айырылышыу минуттарының яҡынлығын һиҙә

икән. Үҙе шулай тине. Был һиҙенеү Сәлим йөрәген дә ярһыта. Мәгәр ярһыған йөрәктәрҙе сабырлыҡ йоҙағы менән бикләп торорға кәрәклек хаҡында ла уйланалар.

Гизелла уны үҙ фатирына саҡырҙы. Һуңғы көн, һуңғы сәғәт, һуңғы минут, һуңғы секундтарҙы бергә үткәреү ине теләге. Был теләк Сәлим йөрәгенә лә тынҡыслап тултырылған. Тик уны ғәмәлгә ашырыу мөмкинлеге юҡ. Ҡайтып китеү өсөн йыйынырға биш минут ваҡыт бирерҙәр, бәлки. Һалдат был ғәҙәткә күптән күнеккән. Биш минутта ул кейенә лә, тоҡсайын алып, мина осҡан тиҙлектә тышҡа тожорола. Ҡайтыу өсөн бирелгән командала ла шул тиҙлек булырға мөмкин. Демаштар сафҡа баҫа. Команда бирелә: “равняйсь!”, “смирно!”, “направо!”, “шагом марш!” Киттеләр ҙә барҙылар. Ә һин юҡ. Ҡалдың…

Ә бит ундай команда төн уртаһында ла бирелеүе ихтимал. Һин инде хәҙер армия ҡабалаһында булмаһаң да, унның ҡаты ҡағиҙәһен бөтөнләй үк боҙоп-емереп ташларға тейеш түгелһең. Ярамай…

Былар хаҡында һөйләү ҡыйын ине Сәлимгә. Гизеллаға тыңлау ҙа ауыр. Ә ни эшләйһең инде. Айырылышыу бар. Ҡауышыу бар. Тормош ҡанундары шулай. Уларҙы ҡартайғас та белеп бөтөрөп булмай. Былар йәш әле: Гизеллаға – 20, Сәлимгә – 22 ярым. Икеһе лә сибәр. Аҡыллы. Хисле. Тойғоларға бай. Кәрәк икән, сабыр була беләләр. Әҙәпле. Һөйкөмлө. Ауырлыҡ уларҙы ҡурҡытмай. Мөхәббәтте ҙурларға, һөйөшөргә, үбешергә яраталар. Теләктәре – идеаль ғаилә ҡороу. Бәхетле йәшәү…

Гизелланы бер ни ҡәҙәр оҙата барҙы Сәлим. Бер урында туҡтап ҡалдылар ҙа, ҡулдарын ҡыҫышып, ҡосаҡлашып үбешергә тотондолар.

Был уларҙың һуңғы үбешеүе ине. Һүҙҙәргә урын юҡ хәҙер. Уларҙы күпме һүҙһаң да, файҙаһы – һуҡыр бер тин. Һүҙҙәр тел осона килеп, ҡапыл юғала. Бында хәҙер хис-тойғо өҫтөнлөк ала. Аң-аҡыл, тәртипле һалдаттай, һаҡта тора. Был ваҡытта демаштарға команда булмаҫмы, йәнәһе.

Был аҡыл, ҡырт боролоп, Гизеллаға китергә ҡушты. Тыңланы ҡыҙ…

Сәлим дә аҡылына ҡарышманы. Һуңғы мәртәбә эҫенеп үбеп, йүгереп китеп барҙы.

Һиҙенеү һандуғастарҙа, күгәрсендәрҙә, ҡарлуғастарҙа, хайуандарҙа, хатта йыртҡыстарҙа ла була. Бәғзе демаш кистән үк йыйына башланы. Ә инде сафҡа теҙелергә команда иконсе көндө иртәнге аштан һуң булды. Теҙҙеләр ҙә алдылар ҙа киттеләр. Бөтәһе лә йәйге кейемдә. Шинелдәр скатка яһап (төрөп), ҡамыт шикелле, ҡыйыҡлатып муйынға кейелгән. Арҡала – юл тоҡсайы. Унның эсендә – һәр кемдең үҙ кәрәк-ярағы.

Вокзал алыҫ түгел. Барып еткәс, төрлө вагондарға таралыштылар. Уларҙы капитан Корнышев менән капитан Трапезников урынлаштырып йөрөй. Полковник Исхаҡов та шунда. Сәлим менән Рәйес, Карабанов, Әҡсән бер вагонға тура килделәр. Урынлашыу менән Сәлим тышҡа сыҡты. Белә Рәйес: ул мадъяркаһын көтә. Ул арала донъя яңғыратып поезд ҡысҡыртып ебәрҙе. Китергә сигнал ине был. Ә Гизелла юҡ та юҡ. Бәй… ана… йүгерә… йәнә сигнал… Сәлим ике ут араһында ҡалды. Инеп китергәме, көтөргәме? Күп уйланырға ваҡыт юҡ ине хәҙер. Тамбурға һикереп менде Сәлим. Улар бәхетенәме – поезд, алйыған алаша шикелле, бик аҡрын ҡуҙғала. Гизелла иһә яп-яҡын ҡалып:

– Сәлим! Беҙҙе Хоҙай барыбер осраштырасаҡ! – тип ҡысҡырҙы.



**Талха**
**ҒИНИӘТУЛЛИН**

# БЫҪҠАҠ ЯМҒЫР

**хикәйә**

Армияға алынғанда ул, мин тыуған ауылды бүтән күрә алмам инде, мәңгелеккә хушлашыуым ошолор, тип уйланы. Һуғышҡа ла китмәне – унынһы бынан дүрт йыл элек бөткәйне, төрмәгә лә ултыртманылар – унан да һәммәһе әйләнеп ҡайтмай, ә күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүенең төп сәбәбе һуғыштан да, төрмәнән дә яман: Сания уны яратманы.

Бынан әллә өс йыл, әллә дүрт йыл элек уларҙың 2-се бригадаһы Яйыҡ аръяғындағы туғайҙа бесән йыя ине. Бесәнде күтәремләп кәбәнгә ир-аттан Ғабдулла, Мәхмүт һала, Ғабдулла ағайҙың ҡатыны Сәкинә башта ҡабул итеп, ипләп һалып тора. Сәмиғ бакуйҙан йыйылған бесәнде һөйрәткегә тейәй ҙә кәбән төбөнә килтереп ауҙара.

Сәмиғҡа ул йәйҙә ун бише тулғайны. Һуғыш йылдарында үгәй әсәйе менән (үҙ әсәһен иҫләмәй, ул бәләкәй саҡта уҡ үлгән, атаһы һуғышта хәбәрһеҙ юғалды) аслыҡтан саҡ тере ҡалды, шулай ҙа йыбытҡы түгел, һуңғы йылда ҡапыл буйға тартылды һәм егет ҡорона инеп, тулы хоҡуҡлы эшсе рәүешендә колхоз эштәрендә ҡатнашып йөрөй. Һөйрәтке артынан Ғабдулла ағайҙың ҡыҙы Сания тырмай. Ул Сәмиғтан бер йәшкә генә бәләкәй. Ошо йәйгә тиклем Сәмиғ уға иғтибар ҙа итмәне, йөрөймө шунда, йөрөй, бар ҡыҙҙар ише бер ҡыҙ инде. Әсәһе һымаҡ һары башлы.

Эшләгәндә улар бөтөнләй һөйләшмәй тиерлек. Сания уға, исмаһам, бер тапҡыр күтәрелеп ҡараһасы! Әллә оялды, әллә атаһынан тартынды, белмәҫһең. Бәләкәйерәк саҡта, мәктәп йылдарында, былдай ҡыҙҙар, ғәҙәттә, малайҙар менән шаяра, көлә, уларҙы мыҫҡыл да итергә тырыша, йөҙ-күҙҙәренә лә оялмай тура

---

*Талха Ғиниәтуллин (Анатолий Генатулин) — 1925 йылдың 20 апрелендә Учалы районының Ураҙ ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. Өфөлә, Мәскәүҙә байтаҡ китаптары сыҡты. С. Т. Аксаков исемендәге Бөтә Рәсәй әҙәби премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

*Күптәнге авторыбыҙҙы 85 йәше менән ихлас ҡотлайбыҙ. Һаулыҡ, ижад ялҡынын һүрелтмәүен теләйбеҙ һәм юбилейы айҡанлы уҡыусыларыбыҙ иғтибарына уның бер хикәйәһен тәҡдим итәбеҙ.*

ҡарай, үҙҙәрен дә һаҡлай-ҡурсалай ала, телсән, ә үҫә килә тартына, хатта ҡырағайлана йәки эреләнә башлай.

Иртәнән бирле аяуһыҙ ҡыҙҙыра. Томра. Төш етеүгә бейек күк йөҙөн томан һымаҡ һоро нәмә ҡаплай башланы, унан ҡайҙандыр бәләкәй генә болот киҫәге пәйҙә булды ла ҡаса-боҫа ҡояшҡа табан йөҙҙө. Оҙаҡламай уны ҡаплап та алды, бер өлөшө ҙурайып, ҡабара барып, ҡара ямғыр болотона әүерелде. Шунан ялағай ялтлап, күк күкрәне, әйтерһең дә, әлеге болот ямалған ерҙәренән шатырҙап йыртылып китте һәм урман аръяғында ямғыр яуғаны күренде – уның шаулауы һә тигәнсе туғайға ла килеп етте. Сәмиғ, йәнә берәй күбә тейәп кәбән төбөнә алып барып өлгөрөрмөн, тип уйлағайны ла, тейәп бөтөп арҡанды ла тартҡайны, әммә ҡуҙғалырға ла өлгөрмәне, баш осонда ғына күк күкрәне лә шаулап ямғыр ҡоя башланы. Сәмиғ тейәгән йөгө эсенә соҡоп инеп ултырҙы. Сания ла берәй ергә йәшенгәндер. Күкте тәртипһеҙ телгеләп ялағай уйнай, дөбөр-шатыр күк күкрәй. Берсә баш осонда, берсә саҡ ҡына ситтәрәк. Сәмиғ йәшендән ҡурҡмай, дөрөҫөрәге, күк күкрәүе ҡурҡыныс түгеллеген, ә йәшен ҡурҡыныс икәнен яҡшы белә. Йәшен – һауа һелкенеүе генә. Ялт итеп ҡалды, һин иҫән, тимәк, теймәне, үтеп китте. Әгәр һине йәшен уты ата икән, уның атыу тауышын ишетмәй ҙә ҡаласаҡһың, аңлап та өлгөрә алмаясаҡһың, бәреп йығасаҡ…

Эргәлә генә ялтлап үтте, тауышы ла ҡолаҡ төбөндә генә яңғыраны. Шул мәл көтмәгәндә уның өңөнә Сания килеп сумды ла, ҡото алынып: «Ой, ой, бисмилла, бисмилла, ҡурҡам!» – тип һөйләнде. Тағы ялағай ялтланы, мылтыҡтан атҡан ише атып ебәрҙе. Яҡында ғына, хатта көкөрт еҫе сыҡты, күк, әйтерһең дә, улар сумған өйөмгә тоҫҡап атты. Сания йәнә сыйылданы, Сәмиғҡа нығыраҡ һыйынды. «Ҡурҡма,– тине Сәмиғ эре генә. – Әгәр йәшен атмаһа, күк күкрәүе ҡурҡыныс түгел. Һауа ғына шартлай». Ҡыҙ уны аңламаны, ахыры, һәр дөбөрҙәгән һайын Аллаһы Тәғәләне ярҙамға саҡырҙы, Сәмиғҡа нығыраҡ һырыҡты. Егет уны уң ҡулы менән ҡосаҡланы, лыс һыу ситса күлдәге аша тәненең йылылығын тойҙо, яҡында ғына һипкелле йөҙөн күрҙе, ямғыр сылатҡан һары сәстәренән аңҡыған үлән-ялан еҫтәрен һуланы һәм, ҡатын-ҡыҙ тәне яҡынлығының ләззәтен беренсегә тойоп, ямғырҙың мәңге тынмай яуыуын теләне. Бесәнде һыулап, ямғыр үтеп киткәс, күк күкрәүе туҡтағас, ҡыҙ ҡапыл торҙо ла өңдән сыҡты һәм, яңынан ҡырағайға, ятҡа әйләнеп, ҡоя башлаған кәбәнгә табан йүгерҙе… Сәмиғ ул көндәге йәшенде, ялағайҙы, бесән өйөмө араһында бергә ултырған ҡыҙҙы, уның тәне йылыһын, сәстәренең иҫерткес еҫен һис онота алманы һәм ошо ваҡиғанан ике йыл ваҡыт үткәс, Сания тамам үҫеп етеп, аҡ йөҙлө, оҙон толомло сибәр ҡыҙға әүерелгәс, уны яратҡанын аңланы. Элек, мөхәббәтһеҙ йәшәгән саҡта, уның йөрәге нисектер буш, тыныс һәм һалҡын ине, хәҙер тәмлетатлы мөхәббәт тулҡыны уның күкрәген тултырҙы, йөрәген яндырҙы. Ул гел генә ҡыҙ тураһында уйлап йөрөй башланы, минут һайын уны күргеһе килеп торҙо. Кистәрен клуб янында гармун уның тураһында ғына уйнаны, гармунсы «Гәлиәбаныу»ҙы йырланы, ә Сәмиғҡа «Саниябаныу» тип ишетелде. Ул атаһының һуғыш алдынан ғына алған пинжәген, итеген кейҙе (һуғышҡа атаһы таушалған сарыҡ кейеп китте), хәҙер улары Сәмиғҡа тап-таман ине, һәм кис етеү менән клубҡа ашыҡты. Санияны күргәс тә ҡыҙҙан күҙен алманы, янды-көйҙө, зарыҡты, башҡа егеттәрҙән көнләште. Һәм ҡыҙға үҙеңдең яратыуыңды һүҙҙәр менән аңлатыуҙы, ҡайҙалыр аулаҡта йәки ҡараңғы мөйөштә икәүләп кенә ултырыуҙы, хатта ҡосаҡлау мөмкинлеген башына ла килтермәне. Ул йылдарҙа бит егеттәр менән ҡыҙҙар асыҡтан-асыҡ осрашмай торғайны, клубтағы тансанан йәки кинонан һуң оҙата барышманылар, өй алдындағы эскәмйәлә төн

уртаһына тиклем шыбырҙашып ултырманылар, ә урам буйлап етәкләшеп йәки ҡултыҡлашып үтеү хаҡында уйлау – Аллам һаҡлаһын… Шулай ҙа, ғашиҡтар төнөн ҡайҙалыр осраша, тип тә һөйләйҙәр. Ауылдың көндөҙгө, барыһына ла күренеп торған өҫкө тормошо, тыйнаҡ, әҙәпле һәм гонаһһыҙ. Кешеләр баҫыуяланда эшләй, кистәрен сәй эсә, өй алдындағы эскәмйәгә сығып һөйләшеп ултыра, бисә-сәсә үҙ хәбәрен һүтә, ир-ат иген, уңыш, бесән, һауа торошо хаҡында һөйләшә, кәңәшләшә, күҙ бәйләнгәс һәр ҡайһыһы өйөнә ҡайта, йоҡларға ята, һәм һәр йортта төнгө серле тормош башлана. Өйләнмәгән егет баҡсалар артынан яңғыҙ йәшәгән ҡатын өйөнә килә, артҡы ҡапҡанан керә лә һаҡ ҡына тәҙрәгә сиртә йәки бикләнмәгән солан ишегенән сыҫҡан етеҙлеге менән инеп юғала. Өйләнгән ир кистән пожаркаға кәрт һуғырға китә лә ҡайтышлай тол ҡатын йортона борола. Төн уртаһында ауыл ситенә сыҡһаң, тыҡрыҡҡа боролған албаҫтыны йәки шайтанды түгел, ә ҡосаҡлашып йәки етәкләшеп йөрөгән парҙарҙы осратаһың. Ә Сәмиғ клубтан әхирәттәре менән ҡайтырға сыҡҡан Санияны күҙ ҡараштары менән генә оҙата ла буш һәм ҡараңғы урамдар буйлап яңғыҙ ҡаңғырып йөрөй. Ғабдулла ағайҙың өйө тапҡырына килеп, ҡараңғы тәҙрәләргә оҙаҡ ҡына ҡарап тора – ошо тәҙрәләр артында ул, моғайын да, йоҡлайҙыр. Йоҡоға китер алдынан уның хаҡында әҙ генә булһа ла уйланымы икән? Ә иртәнсәк уны, йоҡоһо бөтмәгән Сәмиғты, үгәй әсәһе әрләп-ҡарғап уятасаҡ: «Төнө буйы ҡайҙалыр темеҫкенеп йөрөйһөң дә, үләкһә, хәҙер бер нәмә лә белмәй йоҡлайһың!..»

Шулай ҙа бер көн егет Санияға мөхәббәт хаты тапшырырға йөрьәт итте. Һүҙҙәрен ялҡынлы мөхәббәт шиғырҙары, мөхәббәт хаттары өлгөләре яҙылған, йәштәр араһында ҡулдан-ҡулға йөрөгән дөйөм дәфтәрҙән күсереп яҙҙы. Хатты Санияға Сәмиғтың ике туған апаһы тапшырҙы. Күпме көтһә лә, яуап булманы. Шулай ҙа әлеге хаттан һуң Сания уға икенсе төрлөрәк ҡарағандай тойолдо – ҡара күҙҙәре менән ата ла оҙон керпектәрен аҫҡа төшөрә һала.

Ысын ғазап Муллаҡаев Фуат армиянан ҡайтҡас башланды. Оҙон кәүҙәле был егет гимнастерка кейеп йөрөй, билдә – яҫы командир ҡайышы, ҡулда – сәғәт. Ауылдың аҫыл егете инде, күп ҡыҙҙар хыялланған кейәү. Муллаҡаевтар – көслө нәҫел, күбеһе төрлө кимәлдәге түрә-ҡара. Фуаттың атаһы Муллаҡаев Шайкамал – 2-се бригада бригадиры, ағаһы ауыл Советында ултыра, йәнә бер ағаһы районда ниндәйҙер начальник. Фуатты ҡайтыу менән тигәндәй колхоздың комсоргы итеп тәғәйенләнеләр. Ул ҡара буҫтауҙан галифе тектереп кейҙе. Ауылдың иң шәп кейәүе ул булмай, кем булһын сибәркәйҙәр өсөн? (Хәйер, ҡайһы берәүҙәр Санияны ғәҙәти ҡыҙ тип иҫәпләне.) Ә Фуат клубта Санияны тансаға саҡырғас (ә ул, Сәмиғ, дегәнәк япрағы, үҙе саҡырырға ойялды), көнләшеүенән шартлай яҙҙы. Клубтан сыҡҡас, улар кеше алдында ғына икеһе ике яҡҡа китә, унан ҡайһылыр мөйөштә осраша, тип уйланы. Йәшерен осрашыуҙарҙың ниндәй генә картинаһүрәттәрен күҙ алдына килтермәй Сәмиғтың көнсөл хыялы! Нишләргә белмәй урамдарҙы ҡыҙыра, тыҡрыҡтарҙың, ҡапҡа төптәренең ҡараңғы мөйөштәрен байҡай, көтөү йөрөгән ерҙәрҙе, колхоз амбарҙары арттарын ҡарай, унан йылға буйына төшә, әммә тегеләрҙе бер ерҙә лә таба алмай. Ә уның уларҙы тап иткеһе, тотҡоһо килә, үҙенең йөрәгенә һуңғы үлемесле яра-йәрәхәт алып, үкереп илағыһы, унан үлгеһе килә. Ә иртәгәһенә Сания уға йәнә нисектер икенсе төрлө, серлерәк ҡараған төҫлө тойола…

Көҙ етте, көҙ менән армияға китер ваҡыт етте. Хеҙмәткә китәһе егеттәр үҙҙәренең ҡыҙҙары менән иҫке зыяраттағы ҡарт ҡайындар аҫтында осрашты.

Ҡыҙҙар егеттәргә сигелгән кисет йәки ҡулъяулыҡ бүләк итә, уларҙы көтөргә вәғәҙә бирә. Сәмиғ Санияны ҡайынлыҡҡа саҡырып хат ебәрҙе. Иртәгә китәм тигән көндөң кисенә килде лә ҡыҙҙы көтә башланы. Әтәстәр өсөнсөгә ҡысҡырғансы көттө лә ҡуйҙы. Килмәне! Иртәгәһенә иртәнсәк колхоздың йөк машинаһы кузовына менеп баҫты, күренмәне – Сәмиғты атаһы һуғышҡа киткәс үгәй әсәһенән тыуған һеңлекәше генә оҙатып ҡалды.

Поезд уны, әйткәндәй, үҙ ғүмерендә тәүгә ултыра ине поезға, Мәскәүҙең үҙенә үк килтереп төшөрҙө. Хеҙмәткә стройбатҡа эләкте. Белеме – ауыл мәктәбенең дүрт кенә синыфы, русса белмәй, Башҡортостандан бер яҡташы булмаһа, бөтөнләй юғалыр ҙа ине. Тәүге мәлдәрҙә шул аңлатып, кәрәк ерҙә уның өсөн яуап биреп йөрөнө. Йәш кеше бит, яйлап өйрәнде яңы тормош-көнкүрешкә, ауыл егетенә ни, эше лә әллә ни ауыр тойолманы, иптәштәре менән дә уртаҡ тел тапты. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ҡарт һалдаттар йәш һалдаттарҙы бигүк ҡыйырһытмай ине, «дедовщина» тигән нәмә булманы. Йөҙ-ҡиәфәте азиатса, исеме русса булмаһа ла, әллә ни бәйләнмәнеләр Сәмиғҡа.

Отрадный тигән йәш ҡалала төҙөнөләр өйҙәрҙе. Кирбес һалырға, панелдәр беркетергә, бейеклеккә менергә-төшөргә өйрәнде һәм яйлап үгәй әсәйҙән туҡтауһыҙ әрләнгән-йәберләнгән ауыл малайынан һалдат-төҙөүсегә, эш кешеһенә әүерелә барҙы. Таш-кирбес эшенә ныҡлап төшөндө, үҙенең аңы барып етә, төшөнә алмаҫлыҡ төрлө кешеләр тормошо, ҡабатланмаҫ яҙмыштар менән тулы ошо таш араһындағы ҡатмарлы, үҙгәреүсән, ҡаршылыҡлы Мәскәү тормошона ла өйрәнде. Хәйер, ул ошо аңлайышһыҙ тормош-көнкүрештең тышҡы яғын, өҫтөн генә күрә, ишетә ине, кистәрен уттары ымһындырғыс янған бихисап йорттар эсендә ниндәй тормош барғанын, ниндәй йырҙар йырланғанын, бәхетенән иҫереп унда кемдәр бейей йәки оло ҡайғынан стенаға менер хәлгә етә – былар бөтәһе лә уның өсөн аңлай алмаҫлыҡ оло сер булып ҡалды.

Ауылды һағынманы, әммә Санияны онотманы, уны гел генә уйланы, йыш ҡына төштәрендә күрҙе. Ҡыҙ тураһында уйлаған саҡта күкрәгендә барлыҡҡа килгән тәмле-татлы тойғо төйөрө уны бер ҡасан да ебәрмәне. Бер нисә тапҡыр хат яҙырға ултырып ҡараны, әммә башланы ла йыртып ырғытты. Сөнки яуап булмаясағын белә ине, ә хатын Сания әхирәттәренә күрһәтәсәк, улар уны уҡығас Сәмиғтан хахылдашып көләсәк.

Әммә көндәр, аҙналар, айҙар үткән һайын Сәмиғ – рус иптәштәре атағанса, Саша – ҡайғыға һирәгерәк һабыша, элекке тойғолары ҡайнарлығы һүрелә һәм күңеленә яйлап-яйлап яңы теләктәр, ылығыуҙар, яңы тормош ауаздары инә бара ине. Тирә-яғында икенсе көй-моңдар яңғырай, икенсе ҡатын-ҡыҙҙар ҡарашы менән осраша, бит-йөҙөнә бүтән елдәр ҡағыла, йөрәгенә башҡа тормош саҡырыуҙары инә – былар барыһы ла уны ымһындыра, шул уҡ ваҡытта ҡурҡыта ла. Урал аръяғында йәшәүсе ҡыҙҙың төҫ-башы онотолмай, тик ваҡыт үткән һайын, сикһеҙ далалағы һоро томанға уранған һымаҡ, нисектер тоноҡланғандан-тоноҡлана бара.

Бер йылдан ул русса һупаларға апаруҡ өйрәнеп алды. Шулай ҙа был ят һәм бай телдең бөтә мөмкинлектәренең бер бәләкәй генә өлөшөн үҙләштергәнен яҡшы аңлай ине. Иптәштәре менән һөйләшә-аралаша ала, хәҙергә шул еткән, йәшәй-йәшәй ныҡлап өйрәнер әле. Отпускыға ҡайтманы, ә демобилизацияланырға ваҡыт еткәс... ауылға ҡайтҡыһы килмәгәнен аңланы. Унда уны кем көтә? Үгәй әсә? Ә Сания күптән кейәүҙәлер, итәк тулы бала аҫрайҙыр. Ике йыл эсендә ул күпмелер дәрәжәлә Мәскәүгә, ҙур ҡаланың иҫерткес һәм илерткес һауаһына

күнекте, уның ҙур мөмкинлектәрен күрҙе. Етмәһә, «дембель» һалдаттар араһынан төҙөлөшкә эшселәр йыя башланылар, ваҡытлыса прописка, дөйөм ятаҡтан карауат вәғәҙә иттеләр. Оҙаҡ уйлап торманы Сәмиғ – ауылға ҡайтҡыһы килмәгәс, бүтән варианты ла юҡ – өгөтләгәстәре китте-барҙы вербовкаланып.

Зеленоград… Төҙөлөштә төрлө өлкәнән, төрлө ауылдарҙан Сәмиғ һымаҡ вербовкаланып килгән әллә күпме ҡыҙҙар эшләй. Ул саҡта лимит, лимитчик тигән һүҙ юҡ ине әле. Һуғыш йылдарында, унан һуңғы йылдарҙа ҡыҙҙарҙы Мәскәү тирәһендә торф ятҡылыҡтарын үҙләштереүҙә файҙаландылар һәм уларҙы торфушкалар тип атайҙар ине. Һуңынан төҙөлөшкә штукатур, маляр булып килгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың барыһына ла торфушкалар тигән уртаҡ ҡушамат таҡтылар.

Сәмиғ эшендә әлеге торфушкалар менән бик аралашманы, уларҙы бытовкала – иртәнсәк кейем алыштырғанда, көндөҙөн ҡапҡылағандарында, ял иткәндәрендә, домино һуҡҡандарында ғына күрҙе. Бытовкала ҙур титан ултыра, уға һыу тултырыу, ҡайнатыу, тәртиптә тотоп, йыйыштырыу менән дорфа, һүгенергә, тартырға, эсергә әүәҫ Клава исемле йәмһеҙ ҡатын шөғөлләнә, ҡыҫҡаһы, хужабикә. Күптән бергә эшләгән ерҙә ҡабул ителгәнсә, бында ла уларҙың бер-береһенә мөнәсәбәттәре ябай, ихлас, егеттәр, шаярған булып, теге йәки был ҡыҙҙың осаһын, түшен тотоп алырға ла күп һорамаҫ, ундай осраҡта тегеһе, әсе һүгенеп, ҡулына һуҡҡан йәки этәргән була, шунан бер-береһен шаярталар, алдайҙар, төрлө кәмит уйлап сығаралар. Сәмиғ улар араһында ала ҡарға рәүешендә йөрөй. Телсән ҡыҙҙар ййы килгән һайын унан көлә, шаярта, хатта мыҫҡыл итә – йәнәһе, ул үтә тыйнаҡ, ир түгел, ахыры, әллә ыштаныңды һалдырып тикшереп ҡарайыҡмы? Ир булһаң, Клаваға өйләндерәбеҙ, тип көлә маляр Валя. Был һүҙҙәргә Сәмиғ оялышынан ҡыҙарына-бүртенә, яуап ҡайтара алмай хәбәрҙәренә, мин үтә оялсан шул, хатта ҡыҙҙар көлә, тип уйлай, бөтөрөнөп уйлай.

Бер ваҡыт эш курткаһы кеҫәһенән записка тапты. Уҡыны. Бер ҡыҙ үҙенең уны «яратыуын» белдергәйне: «Ҡараҡайым минең һинең ҡара күҙҙәреңдең бер ҡарашынан йөрәгем туҡтай»,– тигән. Записка авторы уға эштән һуң иҙелмә узелы артындағы эскәмйәлә осрашыу тәғәйенләгән. «Кил һәм үҙеңдең киң күкрәгеңә мине ҡыҫ. Минең шунда ирегем килә». «Клава» тигән ҡултамғаһы ла бар.

Ауыҙынан гел араҡы, тәмәке еҫе аңҡып торған дорфа, нәҙек сираҡлы Клава әллә ысынлап уға ғашиҡ булғанмы? Ун йәштәр самаһы оло ла бит әле Сәмиғтан. Рус түгел, дүрт класс белемле ябай эшсе, ауыл тиреҫенән сыҡҡан дегәнәк япрағы Клаванан башҡа кемгә генә оҡшай алһын инде? Әҙерәк йөҙө-башы булған, күҙ-ҡаш уйната белгән һәр ҡыҙ майор тураһында хыяллана, хатта яҡшы эш хаҡы алған түрә-ҡараға ла өмөт итә. Шуға ла иҙелмә узелы артындағы эскәмйәгә барырға уның уйында ла юҡ.

Куртка кеҫәһендә шул уҡ ҡул менән яҙылған икенсе записканы тапҡас, уның кәйефе ҡырылды. Клава янына килеп, уға ҡағыҙҙы тотторҙо ла, мөмкин тиклем йомшағыраҡ, хатта йылмайып, быны һин яҙҙыңмы, тип һораны.

– Һин нәмә, о… ел?! – тип яуапланы ҡатын ҡағыҙға ҡараған килеш.– Ир кәрәк булһа, мин һинән арыуыраҡты ла таба алам!

– Улайһа, кем яҙған һуң?

– Мин ҡайҙан беләйем? Бәлки, Надькалыр. Улар Валька менән шулай фиглимигли уйнарға бик әүәҫ.

Надька? Валя менән билдәле, бында бер ниндәй ҙә сер юҡ, ул мөмкинлек сыҡкан һайын Сәмиғты шаяртырға, төрткөләргә ярата, ә бына Надька мут ҡына

йылмая ла серле ҡараш һирпә. Башҡа егеттәр кеүек кистәрен ҡатын-ҡыҙ дөйөм ятағына йөрөмәгәс, Сәмиғ уны эштән тыш бер ҡасан да күргәне юҡ, ә эштә ул маляр, буяу һыланып ҡатып бөткән ыштанда, шундай уҡ әрпеш курткала йөрөй. Шулай ҙа ул Сәмиғҡа оҡшай ине. Сания һымаҡ һары сәсле, киң яңаҡлы булғаны өсөндөр, бәлки.

Ғашиҡ һүҙҙәре яҙылған өсөнсө хатты уның эш курткаһының арҡаһына булавка менән беркетеп киттеләр. Нисек эләктергәндәрен ул күрмәне лә, һиҙмәне лә. Кейемен алыштырып кейеп, эш урынына килгәс, эргәһендә эшләүсе утыҙҙар тирәһендәге өйләнгән Миша Лунин шәйләп, ҡағыҙҙы йолҡоп алды, уҡығас, көлөп Сәмиғҡа һондо.

– Во бля, һиңә бит Клавка ышҡыла.

– Клавка түгел ул, Надька.

– Ә бында Клавка тип яҙылған.

– Һорашып белдем инде: Надька. Тик ниңә шулай шаярҡанын ғына аңлай алмайым.

– Һин нимә, бисәләрҙе белмәйһеңме ни? Тимәк, оҡшатып йөрөй.

– Ҡуйсәле.

– Минең кәңәш: осрашыуға саҡыр, киноға алып бар.

Сәмиғ Лунindың кәңәшен ысынға алманы, шундуҡ онотто. Ә Лунин онотмаған, дүшәмбе көн эшкә килеү менән:

– Йә, осрашыуға саҡырҙыңмы?– тип һораны.

– Юҡ.

– Ну һин, ауыл дегәнәге, тешләр, тип ҡурҡаһыңмы ни?

– Килмәй ул.

– Ҡайҙан беләһең? Бәлки, килер. Килмәһә – нимә юғалтаһың?

Һәм бына Сәмиғ, был эштең килеп сыҡмаҫын аңлай-белә тороп, үҙенең оялсанлығын көскә еңеп, Надька янына барҙы ла тоноҡ тауыш менән:

– Надя, мин һине бөгөн кис киноға саҡырам, сәғәт һигеҙҙә кинотеатр алдында көтәм. Киләһеңме?– тине.

– Белмәйем,– тине ҡыҙ, йәшел күҙҙәре менән атып. – Бәлки, килермен дә.

Кисен, ял көндәрендә генә кейә торған салбарын, вельвет курткаһын кейеп, Сәмиғ кинотеатрға килде, ике билет һатып алды. Ҡыҙҙы көтә башланы. Ғүмерендә икенсе тапҡыр көтә ине ҡыҙ кешене. Тегеләй-былай йөрөп алған була, сәғәтенә күҙ һала – «Победа» маркалы ул сәғәтте яңы ғына алғайны. Ун минут ҡына ҡала сеанс башланыуға, биш минут, ә Надька юҡ та юҡ. Килмәҫкә булды, ахыры, тип ҡурҡып та бөттө. Беренсе ҡыңғырау алдынан ғына күренде. Яңы күлдәк кейгән, ирендәрен буяған, сәстәрен бөҙрәләткән, үҙе оялсан-ҡәнәғәт йылмая. Йылмайыуы ла бытовкалағы ише мыҫҡыллы түгел, нисектер, һөймәлекле, тыныс, етди. Өҫтөнән буяу ҡатып бөткән бысраҡ эш кейемен һалғас, ифрат матур икән дә, әйтерһең дә, асылған сәскә! Һәм Сәмиғ ошонда, кинотеатр алдында, аҡылы менән түгел, ә тулҡынланған йөрәге менән ҡабаланмай ғына атлап килгән ошо рус ҡыҙы йөҙөндә ихлас көлөп-йылмайып үҙенең яҙмышы килгәнен тойҙо. Ошо көндән алып тормошоноң бөтә ҡыуаныс-шатлыҡтары, ҡайғы-хәсрәттәре әлеге рус ҡыҙы менән бәйле буласаҡ.

Кинозалға инеп ултырғас, экрандағы бер-бер артлы алышынған кадрҙарҙа бер нәмә лә аңламаны, эргәһендәге ҡыҙ тәненең йылылығын, ултырғысҡа ҡаҙаҡлап ҡуйғандай ҡуҙғалырға, хәрәкәтләнергә ҡурҡып, ҡыҙҙың уның бар булмышын ток һымаҡ ниндәйҙер көслө нәмә менән уратып-сырмап алған кеүек тойҙо.

Мөнәсәбәттәре етди дауам итеп алып киткәс, ул куртка кесәһендә йөрөткән хаттарҙы күрһәтте.

– Быларҙы һин яҙҙыңмы?

– Валя яҙҙы.

– Нимә тип яҙҙы?

– Бәй, уның үҙенән һора. Мин ҡайҙан беләйем?

– Ә Клава, һин яҙған, тине.

– Клава әйтер...

– Һин яҙмағас, теге ваҡыт ниңә киноға килдең?

– Егет кеше саҡырғас, ниңә бармаҫҡа? Миңә Миша Сопов бәйләнә башланы. Эсеп килә лә һәрмәнә башлай. Шуға ла унан ҡотолорға кәрәк ине.

Унан ярлы, әммә шаулы дөйөм ятаҡ туйы булды. Надяның әхирәттәре, уларҙы запискаһы менән осраштырған-табыштырған Валя, ҡатыны менән Миша Лунин, бригаданан тағы бер нисә кеше килде. Араҡы күп ине, туҡтауһыҙ «горько» ҡысҡырҙылар, йырланылар, иҙәнде тишерҙәй булып бейенеләр, һәм бүлмәнең сепрәк менән айырылған бер мөйөшөндәге ояттһыҙ рәүештә шығырҙаған карауатта ғаилә тормошо башланды. Шул тормош ҡырҡ йыл дауам итте лә ҡуйҙы.

Ҡырҡ йыл: сәғәттәр, көндәр, аҙналар, айҙар, йылдар... Уйлап ҡараһаң, ҡырҡ йыл ҡырҡ көндәй генә үтте лә китте. Будильник тауышына уянып, һикереп тора ла ҡабалан-ҡарһалан ҡырына, ауыҙын бешерә-бешерә эҫе сәй эсә, сумкаһына булка менән колбаса тығып эшенә йүгерә. Йәш сағында эшенә ниндәйҙер шатлыҡ тойғоларына өмөт итеп бара торғайны. Хәйер, бөтә тормошо нимәгәлер өмөтләнеп, нимәнелер көтөп үтте. Иң ҙур көткәне – фатир. Алдылар – бәхетле инеләр. Ял көндәрен көтөү, эш хаҡы көтөү, сираттағы байрамды көтөү. Вованың тыуғанын көтөү. Тыуҙы, үҫте – мәктәпкә әҙерләргә, оҙатырға кәрәк, йәйге каникулда – пионерлагерға. Унан тулҡынланыуҙар китте: улдары сығарылыш имтихандарын тапшырғанда, унан төҙөлөш техникумына ингәндә. Өйләнеүе, ейәнсәрҙәренең тыуыуы – йәнә мәшәҡәттәр, тулҡынланыуҙар, йәнә беренсе класс, йәнә имтихандар. Балаға кәрәк әйберҙәр һатып алыу буйынса бөтмәҫ мәшәҡәттәр, диван, шкаф, телевизор, унан төҫлө телевизор, баҡса, иҫке генә «Жигули» алыу... Тормоштары нисек үткәнен һәм пенсия йәшенә килеп еткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалдылар...

Сәмиғ менән Надежда Ивановнаның тормоштары арыу булды. Һәйбәт ҡатын булып сыҡты Надежда Ивановна. Ул Сәмиғты ғүмер буйы Саша тип йөрөттө, ә кешеләргә «минең татарин» тип һөйләне. «Минең татарин шулай ти», «минең татарин сирләп китте әле». Мин бит татар түгел, мин бит башҡорт, тип әйтеп ҡарай Сәмиғ, ҡатыны, мин башҡорттарҙың ниндәй милләт икәнен белмәйем, беҙҙең Пенза янында татарҙар ҙа мордвалар йәшәй, ә башҡорттар юҡ ине, тип яуаплай. Шунан һуң аңлат һин уға үҙеңдең кемлегеңде, башҡортто күрмәгәс, уныңса ундай милләт юҡ.

Надя матур йырлай ине. Бигерәк тә дөйөм ятаҡта йәшәгән йылдарында. Үҙ телен яртылаш онотоп, Сәмиғ ярты быуатҡа яҡын уның телендә һөйләште, уның халҡының йырҙарын йырланы, суҡыныуын күрҙе, хатта бер нисә тапҡыр Пасхаға сиркәүгә лә барҙы. Әлбиттә, ул унда күңеле менән ауылдан сыҡҡан башҡорт булып ҡалды, суҡынманы, үҙенекен уйланы, үҙенең Аллаһына табынды.

Егерме йыл самаһы элек, нисектер, һеңлеһенә хат яҙғайны. Осраҡлы ғына яҙҙы, яуап алырына өмөтө юҡ ине. Әммә һеңлеһенән яуап килде. Күптән

тормошта, балалары инде ҙурайып бөткән, әсәһе, йәғни Сәмиғтың үгәй әсәһе, үткән йыл үлгән икән. Күпмелер ваҡыттан һуң уға ауылдашы, алыҫ ҡына туған тейешле кеше килеп керҙе – Мәскәүгә ниндәйҙер курстарға ебәргәндәр – Сәмиғ унан ҡайһы бер ауыл яңылыҡтарын белде. Колхоз комсоргы Муллаҡаев Фуат оло түрә, райкомдың икенсе секретары булып киткән, шул үлгән, фәлән иҫән әле… Ә бына бала саҡ мөхәббәте Сания тураһында һорарға ҡыйыулығы етмәне, үҙе уйлағанса, Муллаҡаев Фуаттың ҡатынылыр, район үҙәгендә йәшәйҙер, бер нисә бала тапҡандыр. Ҡай саҡ Сания төшөнә лә инеп ҡуя, йәш, матур булып инә, төшөндә Сәмиғ уны һаман ярата, һағына.

Һәм бына, һуңғы йылдарын ремонтсылар бригадаһында эшләп (фатирҙар ремонтланылар, паркет йәйҙеләр, обойҙар йәбештерҙеләр), Сәмиғ пенсияға сыҡты. Әсе-тәмле үткән тормошонан ҡапыл айнығандай, хаҡлы ялға сыҡҡас, үҙен ҡарт бабай, олатай итеп тойҙо ла ҡуйҙы, эргәһендә – арҡырыға ныҡ ҡына йәйелгән, өйрәк һымаҡ ике яҡҡа янтайып атлаусы, ҙур йөҙлө, киң яңаҡлы ҡарт әбей – Надькаһы, Надяһы, Надежда Ивановна.

Хаҡлы ялға сыҡҡас та Надежда Ивановна ҡапыл биреште, йыш ауырыны, ҡан баҫымы күтәрелде, башы әйләнде, аяҡтарындағы тамырҙары бүртеп ҡарайҙы. Йөрәге йыш борсой башлағас, больницаға ятырға мәжбүр булды. Тромб, тине врачтар. Ауыр күтәрмәҫкә, шәп йөрөмәҫкә, тулҡынланмаҫҡа, арымаҫҡа. Сираттағы йөрәк өйәнәгенән һуң ул былай тине: «Саша, минең менән берәй төрлө хәл булһа, һәйбәт ҡатын осратһаң, өйлән, – шунан байтаҡ өндәшмәй ятты ла өҫтәне: – Минһеҙ нисек кенә йәшәрһең икән, басурман?»

Ауыр күтәрмәһен, арымаһын тип, Сәмиғ уға тәгәрмәсле сумка һатып алып бирҙе, әммә Надежда Ивановна магазинға элеккесә ҡул сумкаһы менән йөрөүен дауам итте. Ниңә улайтаһың, тигәс, ниңә, мин әбейме ни арба һөйрәп йөрөргә, тип яуапланы. Картуф, кәбеҫтә һымаҡ ауыр нәмәләр артынан баҙарға Сәмиғ үҙе бара, йә икәүләп баралар. Пенсияһын алған көн ул, магазиндар буйлап йөрөп, ун килограмға яҡын әйбер алған да бөтөн Зеленоград буйлап йәйәү атлаған. Өсөнсө ҡатҡа күтәрелгән, ишекте асҡас, иҫен юғалтып, тупһаға йығылған…

Атаһының һуғышта хәбәрһеҙ юғалыуын (әсәһенең үлемен ул хәтерләмәй), хәҙер инде ярайһы уҡ онотола төшкән бала саҡ ауырлыҡтарын иҫәпләмәгәндә, Сәмиғтың тормошонда уны һеңгеҙәтә һуғырлыҡ оло ҡайғылар булманы ла. Надежда Ивановнаның вафаты уны тап шул йәштә килтереп бәрҙе: онотор өсөн ваҡыты ла, ҡалған ғүмерҙе ошо ҡайғыны күтәреп йәшәр өсөн көсө лә ҡалмағайны. Ҡатынын ерләгәндән һуң ул шаңҡып ҡалды, бөгөлдө, кемде юғалтҡанын аңланы һәм уның үлемендә үҙен генә ғәйепләне. Эйе, һаҡлай алманы. Ә бит ул ғүмер буйы уның өсөн, ғаилә өсөн тырышты. Ауыр эштә эшләне, ашарға бешерҙе, керен йыуҙы, ауыр сумкалар күтәреп магазиндан магазинға сапты, малай табып үҫтерҙе, бер нисә тапҡыр абортҡа барҙы, ейәндәрен ҡараны, уның ҡыҙын баҡты. Бына кемде юғалтты ул!

Тәүге аҙналарҙа төндәрен бөтөнләй йоҡлай алманы. Бер нисә минутҡа онотола ла тертләп уяна. Улар Надежда Ивановна менән бәләкәй генә бер бүлмәлә йәшәне, ҙурын балаларына биргәйнеләр. Хәҙер яңғыҙы ҡалғас, ҡапыл киңәйеп киткән тахтала бер үҙе ятҡанда, ҡай саҡ кухняла Надяның ауыр аҙымдарын ишетте. Йәки ғәҙәте буйынса уның күкрәген эҙләне, бер көн радионан Надяның яратҡан йырын ишетте лә, йырсы тап уның тауышы менән йырлай төҫлө тойолдо. Шкафты асып, уның кейемдәрен, күлдәктәрен, тунын күрҙе. Һатып

алғайны ла, ләкин оҙаҡ кейеп йөрөй алманы. «Кей шуны, байбисә кеүек йөрө урамда», – тип күпме әйтте. «Магазинға тун кейеп бара алмайым бит инде,– тип яуаплай ине ундай саҡтарҙа ҡатыны.– Кеше араһына сыҡҡанда берәй кейермен әле». Шул магазинға йөрөүҙән башҡа ҡайҙа барһын инде? Театрға ғүмерҙә аяҡ баҫманылар. Ҡунаҡҡамы? Надяның да, Сәмиғтың да Мәскәүҙә бер ниндәй туған-тыумасаһы йәшәмәй. Йылына бер ҡоҙаларына баралар. Бөтә йөрөүҙәре шул.

Шкафты аса ла, тунына бит-йөҙөн терәп, зарығып илай Сәмиғ…

Тынысланыу бик әкренләп килде. Тормош Надяһыҙ ҙа барған һымаҡ ине, әгәр уны тормош тип атап булһа инде, ул дөм-яңғыҙ түгел, ейәнсәре, унын ҡыҙы янында. Әммә уларҙың үҙҙәренең тормошо, етмәһә, ҡышы ла бик оҙон, йәйен ир-ат менән өй алдында гәпләшеп ултырырға, домино, кәрт һуғырға булыр ине, исмаһам. Эс бошорғос! Тора-бара күңелендә, уйҙарында, хәтерендә ниндәйҙер үҙгәрештәр барлыҡҡа килде. Ҡайҙандыр алыҫтан, тәрәндән яртылаш онотолған тыуған тауыштар, көйҙәр, һөйләшеүҙәр ишетелгән кеүек тойолдо, йыш ҡына ауылы, ауылды ураҡҡан тауҙар, урмандар, туғайлыҡтар, яландар, йылға күҙ алдына килде. Телевизорҙан элек тә һирәк-мирәк башҡорт, татар концерттарын күрһәтәләр һәм бындай саҡтарҙа Сәмиғ ҡыуана, шатлана ине. «Надя, һиңә беҙҙең йырҙар оҡшаймы?» – тип һорай торғайны бындай саҡтарҙа Сәмиғ. «Матур йырҙыр ҙа, тик беҙҙеңсә түгел, олоған һымаҡ яңғырай. Миңә күберәк һинд йырҙары оҡшай», – тип яуаплар ине ҡатыны. Һәм бына ул үлгәндән һуң бер көн радионан башҡорт йырҙарын ишеткәйне, тамағына эҫе төйөр тығылды ла күҙҙәренән йәштәр аҡты китте.

Унан башына сәйер уйҙар килә башланы. Әйтәйек, үҙемдең тормошто йәшәмәнем шикелле, икенсе яҙмышта көн иттем, ахыры, тигән фекер. Үҙенең халҡы араһында йәшәмәне, ят һүҙҙәр менән уйланы, уның телен, тыуған яҡтарының йыр-моңон белмәгән-аңламаған ҡатын менән йоҡланы. Улында ла, ейәнсәрендә лә башҡорт рухы, башҡорт теле, башҡорт һағышы юҡ.

Йоҡоһоҙлоҡтан йонсоп, ул уйы менән ауылдағы йәшлегенә, Санияға булған мөхәббәтенә әйләнеп ҡайта һәм хыялында тормошон өр-яңынан башлап ҡарай. Армияға китер алдынан Сания кисен зыяраттағы ҡарт ҡайын янына килә һәм иртәгәһенә иртәнсәк Сәмиғты оҙатып ҡала. Хеҙмәтен тултырған Сәмиғ, һалдат кейемендә ауылға ҡайтып, Санияға өйләнә. Ҡасандыр булған ваҡиғаларҙы иҫенә төшөргән һымаҡ, хыялында ғына күҙ алдына килтергән тормошоноң һәр детален дә иҫләй Сәмиғ. Туйҙан һуң беренсе төндәре, һары сәстәренең иҫерткес еҫе, мунсала беренсе йыуыныуҙары. Оялсан бәхет. Тик ошоларҙы уйлаған һәм күҙ алдына килтергән саҡта ҡараңғылыҡтан Надяның хәсрәтле, шул уҡ ваҡытта аңлаған, ғәфү иткән ҡараштары текәлеп баҡҡан кеүек.

Ниһайәт, оҙон ҡышты саҡ үткәргәс, ул тыуған ауылына ҡайтып, һеңлеһен күреп килергә ниәтләне. Поезда ярым онотолған башҡорт һүҙҙәре менән уйлағанын һиҙҙе, һеңлемә, йәшлектәге иптәш-дуҫтарға шулай-былай тип әйтәсәкмен, хәҙер инде улар ҙа ҡарт әбей, ҡарт бабайҙарҙыр инде, уларға үҙемдең Мәскәү тормошо хаҡында һөйләрмен, тип хыялланды.

Ауылға етер саҡта бала сағынан таныш ерҙәрҙе күреүгә ныҡ тулҡынланды. Ауылда уны нимә көтә? Нисек ҡаршыларҙар? Ә осрашҡас, һеңлеһен ҡапыл танымай ҙа торҙо. Үгәй әсәһенең һалҡын, уҫал йәмһеҙ йөҙө төҫмөрләнде. Бер ниндәй ҙә осрашыу шатлығы булманы. Сәмиғ күстәнәстәрен сығарғас ҡына – кәшмир яулыҡ, кейәүенә күлдәк, башҡалар – йөҙө йомшарғандай булды. «Бәлки,

ҡайтмаҫҡа кәрәк булғандыр»,– тип уйланы Сәмиғ. Һеңлеһе иҫке, ҡаҡашып бөткән зәңгәр спорт салбарында, бигүк таҙа түгел кизе халатта, калошта йөрөп ята. Сәй эскәндә бәләкәй улының ҡалала милиционер булып эшләүен, олоһоноң колхоз һыйырҙарын көтөүен белде. Эштән илле йәштәр тирәһендәге кейәүе ҡайтты. Механизатор икән, йөҙө тәрән сырыштар менән йырмасланған – йәшенән иртә ҡартайғаны күренеп тора. Кем килгәнен белгәс, шатланған һымаҡ яһалма ҡиәфәт күрһәтте, өҫтөндәге майлы, бысраҡ кейемен дә һалмай өҫтәл артына килеп ултырҙы. Араҡы сығарҙылар, кейәүе тулы бер стаканды ауыҙына ҡаплағайны, ҡапыл ғына күҙҙәре аларып, йөҙөнә ҡуйы ҡыҙыллыҡ, асыу яғылды. Сәмиғтың, был һуғыша башламаһа ярар ине, тип ҡото осто.

– Беҙ бында һеҙҙе, мәскәүҙәрҙе, ашатыр өсөн бушҡа тир түгәбеҙ,– тине ул асыулы итеп.

Итектәрен соланда сисеп, өйгә йәш ир килеп инде. Иҫерек йөҙө шешмәкләнгән, күгәргән.

– Тағы йығылдыңмы? – тип ярһыны һеңлеһе. – Тағы шулай эскән көйө ултырһаң, ул һине үлтерә бит. – Сәмиғ янына баш ҡағып өҫтәне. – Мәскәүҙән килгән бабайың.

Ир Сәмиғтың ҡулын ҡыҫты ла өҫтәл артына ултырҙы һәм, тамшанып, шешәләге араҡыға ҡараны.

– Фәрит! – тине ҡәтғи генә кейәүе, әйтерһең дә, улына һуғырға уйлай. – Атҡа эскән көйө менмә! Аяҡтарыңды өҙәңгенән сығарып та өлгөрә алмаҫһың, һөйрәп алып китәсәк. Имгәнерһең. Йә икенсе ат һора.

– Арыҡ ҡорсаңғыларҙы менгем килмәй,– тип мөңгөрҙәне Фәрит. Өҫтәл артынан ҡапыл ҡалҡынды ла өйҙән сығып китте – әйтеүҙәрен оҡшатманы.

Ауыл ныҡ үҙгәргәйне. Төҙөкләнгән, матурланған. Элекке клуб урынында аҙыҡ-түлек магазины ултыра, мәҙәниәт йорто тип аталған клубты үрге ауылға һалғандар. Өй ҡыйыҡтарында антенналар һерәйешеп тора, төнөн клуб, ауыл Советы йорто алдында ут яна. Урамдарға асфальт йәйелгән, еңел машиналар, мотоциклдар йөрөй. Ауылдың тирә-яғы ла элекке ише түгел, йылға икенсе юл һалып аҡҡан һәм, урыны-урыны менән ярҙы ашап, картуф баҡсаларына уҡ килеп еткән. Тауҙар элекке, әммә битләүҙәрендәге ҡалын ағастар аяуһыҙ ҡырҡылған, һырттар ялтас булып ята. Яратышҡан егеттәр, ҡыҙҙар осрашҡан теге ҡарт ҡайындың үҙе түгел, хәҙер төпһәһе лә юҡ, тирә-яғындағы эре-эре таштар ҙа күренмәй – өй нигеҙен ҡороуға ташып алғандарҙыр.

Шулай итеп, Сәмиғ үҙенең тыуған ауылында йәшәй башланы. Йәшәүгә яңынан өйрәнде, телгә өйрәнде, ә ул, баҡһаң, бөтөнләй үк онотолмаған да икән, шулай ҙа үҫешмәгән, үҙгәрмәгән дә, ун һигеҙ йәштәге егет кимәлендә ҡалған. Ҡай мәл уға һүҙ запасы етмәне, ундай саҡтарҙа ул руссаға күсте. Хәйер, ауылдаштары, уның тиңдәштәре лә, йәшерәктәр ҙә башҡорт телендә унан яҡшыраҡ һөйләшә, тип әйтеп булмай ине. Телдәре ярлы, өҙөк-йыртыҡ һөйләмдәр менән аралаша ине ауылдаштары. Сәмиғ ололарҙың ниндәй матур, бай тел менән һөйләшкәнен хәтерләй бит, ана, өләсәһе лә йырлаған, һамаҡлаған ише һөйләшә торғайны. Әйтемдәр, образлы сағыштырыуҙар, мәҡәлдәр ҡойолоп ҡына тора ине теленән. Эйе, тамам онотҡан халыҡ үҙ телен. Артабан да шул темпта барһа, бөтөнләй онотмаҫтар тимә.

Шулай ҙа, ауыл юҡҡа сыға, эскелеккә бирелгән, тип тә булмай. Бөтөнләй эсмәгән, аҡыл менән эскәндәр ҙә бар, ләкин күҙгә күберәк ана шул эскәндәр эләгә.

Бигерәк тә ҡарттар, һуғыш ветерандары пенсия алған саҡта ауыл ҡырмыҫҡа ояһы ише мыжғып китә. Эшселәр, эшселәр генә түгел, колхоздағылар ҙа хеҙмәт хаҡы алғансы тип – ә уныһы бер йә ике айға һуңлап түләнә – уларҙан үтескә алып тора ла кинәнеп эсеп ала. Сәмиғ йылға буйына төшкәйне, унда йәш кенә ирҙәр ултыра. Эргәләрендә буш шешәләр тәгәрәшеп ята, ғөмүмән, яр буйлап йөрөһәң, улар аҙым һайын; малайҙар шуларҙы ташҡа бәреп вата ла һыуға ташлай, һуңынан һыу кергәндә үҙҙәре үк аяҡтарын ҡырҡа.

Ҡай саҡ урам буйлап ярһыу айғырҙа күҙенә аҡ-ҡара күренмәй Фәрит сабып үтә. Тәҙрә аша уны күреп ҡалған һеңлеһе, Сәмиғтың үгәй әсәһен хәтерләтеп, улын әрләп ҡысҡыра, һөрәнләй, йоҙроҡ төйә. Уныһы икенсе урамда йәшәй, һылыу ҡатынды ҡаланан алып ҡайтҡан, ике балалары бар, ә һәр осраған иргә көнләй икән. Бер көн килене килеп ҡәйнәһенә зарланып торҙо.

– Бөгөн төнгө өстә көтөүенән ҡайтҡан да ярһып-ҡабаланып ишек дөбөрҙәтә. Керҙе лә карауат аҫтын ҡарай, шкафты тикшерә. Әйт, хахалыңды ҡайҙа йәшерҙең, ти.

– Дүрәк, ай, дүрәк,– тип аптырай һеңлеһе.

Ике аҙна йәшәгәс, Сәмиғ тынысһыҙлана башланы – һеңлеһенең йөҙөндә, ҡараштарында, ҡыланыш-хәрәкәтендә яңы һыҙат – хафаланыу барлыҡҡа килде. Ире йөҙөн ҡарайтып йә көндәр буйы өндәшмәй йөрөй, йә Сәмиғтан оялмай юҡбар өсөн иң алама һүҙҙәр менән ҡатынын әрләргә тотона. Сәмиғ аңланы: тотҡарланды, ҡунаҡтың ҡунаҡлығы – өс көн, оҙаҡҡа килдеме икән ни, ҡасан ҡайтыр, тол ҡалғас, йәшәргә ҡалырға ниәтләнәме әллә, улайһа, елкәгә ултыра икән, тип уйлайҙар, ә һорарға ҡыйынһыналар.

Ә Сәмиғтың киткеһе килмәй ине. Сөнки йәйләп ауыл тормошона күнекте, онотола төшкән элекке яҡынлығын тойҙо, тирә-яҡтағы тау, яландарҙың, урмандың матурлығын күрҙе, уларҙың йыр-моңон ишетте. Уны нимә көтә Мәскәүҙә? Зеленоградта? Надежда Ивановнаның еҫ-тәме осоп бөткән бәләкәй генә бүлмәме? Шкафтағы ҡаракүл тунмы? Ә ейәнсәренә бәләкәй саҡта ғына олатай кәрәк ине, үҫкәс, уның мохтажлығы бөттө.

Тыуған ауылында ул йәшлек мөхәббәте хаҡында уйламай йөрөй алманы. Хәҙер ҡарт әбейҙер инде, өләсәйҙер. Ҡыҙыҡ өсөн генә булһа ла бер күр ине. Һеңлеһенән һорарға ҡыймағанлыҡтан, Сәмиғ, ауыл өҫтөнә сыҡһа, юлында осраған олораҡ ҡатындарҙың йөҙөнә күҙ һалды, ләкин яҡын йөҙҙө тап итә алманы, тап итһә лә, таныманы, ахыры.

Бына бер көн промтауар магазинына инде. Алыр нәмәһе юҡ, күреү, нимә һатҡандарын белеү генә теләге. Прилавка янында ҡатын-ҡыҙ өйөлөшкән: һорайҙар, ҡарайҙар, һайлайҙар, алалар. Шунда береһе боролоп артҡа ҡарап ҡуйҙы бит. Сәмиғҡа йөҙө таныш һымаҡ тойолдо. Улай тиһәң, ауылдағы күп йөҙҙәр таныш һымаҡ ул, әммә кемдеке икәнен теүәл генә белмәйһең. Сәмиғ таныманы, ә юраны, күңеле менән тойҙо уның Сания икәнен, хатта йөрәге лә йәш саҡтағыса һикереп киткәндәй итте. Кәүҙәгә бәләкәй, ҡураныс ҡына ҡарсыҡ, йөҙө алһыу, ундайҙарға йәш саҡта ҡан менән һөт ҡатыш тиҙәр, йомро эйәк, ауыҙ эсенә кереп торған дымлы ирендәр, уймаҡ танау. Тештәре юҡ. Күҙҙәре ҡара. Ошо ҡара күҙҙәре аҡһыл-ҡыҙыл йөҙөндә, нисектер, ҡурҡыу-өркөү ҡатыш ҡараған һымаҡ. Сыбар яулығы ситтәренән күренеп торған сәстәре шулай уҡ ағармаған әле. Бәлки, ул түгелдер? Ҡарсыҡ урамға сыҡҡайны, Сәмиғ уның артынан ыңғайланы.

– Сания, һинме был? Мине таныйһыңмы?

– Мин һине шундуҡ таныным,– тип яуапланы ҡарсыҡ һәүетемсә генә. Үҙе ҡарашын ситкә алды, ауыҙын усы менән ҡапланы. – Был айҙың пенсияһын оҙаҡлаттылар, һабын алырға тип килгәйнем дә. Теге магазинға барайым әле, шәкәр килтергәндәр тиме...

Сания боролдо ла китеп тә барҙы. Шунда Сәмиғ уның кейеменә иғтибар итте. Һары-ҡыҙыл-йәшел күлдәк өҫтөнән ҡуйы зәңгәр төҫтәге джемпер кейеп алған. Бындай кейемдә Надежда Ивановна йәшелсә-емеш магазинына барыуҙан да оялыр ине. Ә ауылда бата, хатта урам кейеме иҫәпләнә. Ауыл ҡатын-ҡыҙҙары магазинға йыйынһа, ҡунаҡҡа барған һымаҡ кейенә. Күрәһең, арыу йәки яңы кейемде кешеләргә күрһәтеп ҡайтыуҙың берҙән-бер урыны (ҡунаҡҡа һирәк йөрөйҙәр, күпселектә ҡыш көнө генә) – әлеге магазин.

Күреүен-күрҙе, хәҙер ныҡлап һөйләшеү өсөн нисек тә осрашырға кәрәк. Шул хаҡта уйланып тик йөрөнө Сәмиғ магазиндағы тәүге танышыуҙан һуң. Үҫмер йөрәге зарығып типкән ҡыҙ менән бөгөнгө ҡарсыҡ араһында ҡырҡ йыл ғүмер ята. Әҙ ғүмер түгел. Шул йылдар арауығына уның Мәскәү тормошо һәм Санияның ауыл тормошо һыйған. Тормоштамы, тормошта булһа, ире кем – хәҙер, бәлки, үлгәндер ҙә – ул һорарға ҡыйынһынды. Ҡартайһа ла, тамам бөткән әбей түгел әле, алтмышы саҡ үткән.Төшкән тештәре урынына протез тештәр ҡуйҙырып ебәргәндә, олоғая башлаған урта йәштәр тирәһендәге ҡатынға әйләнәсәк. Ғәжәп, осрашҡанда Сәмиғ йәш сағындағы ише ниндәйҙер тулҡынланыу ҙа кисерҙе түгелме һуң? Эйе, кисерҙе. Тимәк, йөрәгенең тәрән бер төпкөлөндә һаман нимәләр һаҡланған.

Бер көн шулай, аҙыҡ-түлек магазины янынан үтеп барғанда, ҡаланан килеүсе рейс автобусының туҡталыуын күрҙе. Ҙур-ҙур сумкалар тотоп өс ҡатын төштө. Икәүһе аҫҡы урамға атланы, береһе – ул Сания ине – үрге ауыл йүнәлешенә боролдо. Сәмиғ уның артынан эйәрҙе, иҫәнләште лә йәнәшәһенән бара башланы. Мәскәү ғәҙәте буйынса ауыр сумкаһын алайым тип ниәтләгәйне лә, Сания бирмәне.

– Ҡалаға барҙым. Үткән йыл ҡомалаҡ йыя алмағайным, ямғырҙарҙан һуң һыу ташып китте лә, аръяҡҡа сығып булманы,– ул, теге көн өҙөлгән һөйләшеүҙәрен дауам иткән кеүек, хәбәрен һүтеп алды ла китте. – Шуға дража алдым, туҡмас, биш шешә араҡы. Өс аҙна инде ауылға араҡы килтермәйҙәр.

Араҡы тураһында һүҙ сыҡҡас, ҡарты, балалары, ейәндәре тураһында белеү теләге гел иҫендә генә торғас, һорауы уңайһыҙ булһа ла, форсаттан файҙаланып, һорап ҡалырға булды Сәмиғ.

– Ирең эсәме әллә?

– Ир юҡ минең. Күршеләрем эсә. Магазинда булмаһа, йүгерәләр ҙә миңә керәләр.

– Ә һин бирмә.

– Нисек бирмәйһең? Күрше хаҡы – тәңре хаҡы. Йомошоң төшһә, шуларға бармай, кемгә бараһың?

Сания Сәмиғтың йәнәш барыуын килештермәне, ахыры, үҙен бик ҡәтғи тотто, туҡтауһыҙ тирә-яғына ҡаранды, тороп ҡал, нишләп минең менән киләһең ул, тип әйтеп тора ине бар ҡыланышы. Ауылда ят ир менән бергә атлау элек-электән насар ҡылыҡ иҫәпләнгән. Ғаилә, ғәҙәттә, былай йөрөй: ире алдан бара, ә ҡатыны биш-алты аҙым арттан өҫтөрәлә. Йәштәр урам тулы кеше алдында үбешкән, ҡыҙҙар эстәрен, яланғас боттарын күрһәтеп йөрөгән ҡалала тормошон үткәргән Сәмиғ былдағы тәртиптәргә ҡаршы сыға, ауыл күҙлегенән

ҡарағанда, ысынлап та, үҙен әҙәпһеҙ тота ине. Ә Сәмиғтың Санияның нисек йәшәгәнен, ни өсөн кейәүгә сыҡмай ҡалғанын тиҙерәк белгеһе килә.

– Ирең үлдеме ни?

– Мин иргә сыҡманым.

– Нисек… сыҡманың? Һин ауылда иң сибәр ҡыҙ инең дәһә.

– Әллә инде, – тип көлдө Сания, буш ҡулы менән ауыҙын ҡаплап. – Һуғыштан һуң егеттәр юҡ ине, ҡайтҡаны ла ситкә олағып бөттө. Һорап килгәндәрен әсәйем оҡшатманы: йә ҡарт, йә алкаш, йә сирле тине лә кире һуғып торҙо.

– Шулай бер үҙең йәшәнеңме ғүмер буйы?

– Әсәйем үлгәндән бирле яңғыҙ инде.

Бүтән бер һүҙ әйтмәй барҙы-барҙы ла, ҡапыл ситкә ҡайырылып, ҙур ғына өйҙөң ҡапҡаһынан инеп тә китте.

Ул кейәүҙә булмаған, яңғыҙы ғына йәшәй, Сәмиғ та тол ҡалды, шулай уҡ бер үҙе… Һәм ҡапыл башына уй бәрҙе: йәшлегендә яратҡан, Аллаһы Тәғәлә йәки яҙмыш менән тәғәйенләнгән, әммә үҙенең иҫәрлеге, тыңҡышлығы арҡаһында юғалтҡан ҡатын менән ҡартайған көнөндә булһа ла йәшәргә мөмкинлек бар түгелме һуң? Әгәр шуны файҙаланып ҡарағанда? Риза булһа, Сәмиғ ауылда ла төпләнә ала бит. Дөрөҫөн әйткәндә, Мәскәүҙә уны ҡолас йәйеп көтөп торған кеше юҡ, киреһенсә, ҡәнәғәт ҡаласаҡтар – бүлмә бушай. Етмәһә, шунда үлеп ҡуйһа, балалары күмеү мәшәҡәттәре менән йонсоясаҡ. Ә бында ҡәбер – буш, бер ниндәй сығымдар түгелмәй. «Барайым да ҡулымды һәм йөрәгемде тәҡдим итәйем. Һин, Надя, әгәр яҡшы ҡатын осратһаң, өйлән, тип әйткәйнең бит. Бына мин Санияны осраттым, әгәр ризалашһа, алам да ҡуям. Иҫеңдәме, мин һиңә уның хаҡында һөйләгәйнем…» Бындай уйҙарҙан Сәмиғ хатта йоҡоһонан яҙҙы.

Бер нисә көн Сәмиғ осрашыу эҙләне. Урамда йөрөнө, магазин янында уралды. Сания, ниңәлер, күренмәне, әйтерһең дә, унан йәшенде, шунан, түҙмәй, ни булһа ла булыр тип, өйөнә барырға ҡарар итте. Ҡапҡаһын ҡағыуға үҙе килеп сыҡты.

– Һаумы, Сания! Һиңә мөмкинме?

– Күрше йәнә араҡы һорап килгәндер, тип торам. Берәй эшең бармы әллә?

– Эшем юҡ… Ярамаһа, китәм.

– Ярамай, тип әйтмәнем дә. Килгәс, кер инде.

Ботинкаларын күтәрмәлә үк ҡалдырып, ул соланға инде, ҡараңғы коридорҙан үтеп, мейесле, бәләкәй генә бүлмәгә килеп керҙе. Сания йәнә бер ишекте асты, Сәмиғ уның артынан эйәрҙе. Был бүлмә лә бәләкәй ине, урамға сыҡҡан бер тәҙрәһе лә бар. Мөйөштә барабан кеүек йомро мейес, тәҙрәнең тупһаһы тиңе бейеклегендә диван ултыра. Ике бүлмә лә ифрат таҙа, зауыҡ менән йыйыштырылған, һауаһы һалҡынса һәм әле генә елләткән кеүек саф. Тағы бер бүлмә бар, Сәмиғ тыштан дүрт тәҙрәһен күргәнсә, уныһы ҙур булырға тейеш. Ул бүлмәнең ике яҡлы ишегенә ҙур булмаған йоҙаҡ эленгән. Бер кешегә өй бигерәк ҙур, күрәһең. Санияның атаһы уны оло ғаиләгә тоҫмаллап төҙөгән.

Үҙенең иҫкәртмәй-нитмәй ҡапыл килеп инеүенә Санияның аптырауын, килеүенең сәбәбен белергә тырышып, ҡаты уйға тарыуын Сәмиғ һиҙеп торҙо.

– Электр сәйнүге янып ҡуйҙы,– тип һөйләнде Сания, күрше бүлмәлә газ тоҡандыра-тоҡандыра.– Һыйыр тотмайым, һөттө күршеләрҙән алам.

– Сания, миңә сәй кәрәкмәй, әле генә эсеп сыҡтым,– тине лә Сәмиғ диванға ултырҙы. – Һөйләшәйек әле, бер етди әңгәмә бар.

Сания бүлмәгә инде, ултырғысҡа сүгәләне, ҡарашы һағайыулы, өркәк.

– Йә, нисек йәшәйһең, Сания?

– Күреп тораһың, ошолай инде.

– Яңғыҙыңа ауырҙыр бит?

– Өйрәнелгән…

– Ә мин бер ҙә өйрәнә алмайым. Үткән йыл ҡатыным үлде. Мәрйә ине, бик яҡшы ҡатын булды. Нимә уйланым мин: беҙ бер-беребеҙҙе йәштән беләбеҙ, һин яңғыҙ, мин яңғыҙ, ҡушылайыҡмы әллә?

Оҙаҡ өндәшмәй ултырҙы Сания.

– Ярар һуң… Ауылда йәшәргә ҡалһаң. Закон буйынса булһа…

– Бөтәһе лә закон буйынса. Никах, яҙылышыу. Ауылда ҡалам, – тине Сәмиғ ҡабалана-ҡабалана. Үҙе Санияның шулай тиҙ ризалашыуына аптыраны, – ҡатындың үлеме тураһында справка ғына юҡ янымда. Һуңынан барып алып ҡайтырмын.

– Мин ҡағыҙ тураһында әйтмәйем. Йола, ғөрөф-ғәҙәт буйынса, тим.

– Ул турала һүҙ ҙә юҡ. Бөтәһе лә йола буйынса буласаҡ.

Никахты, ауылда хәҙрәт булмағанлыҡтан, дини йолаларҙы үтәгән Юламан мулланың улы Мәхмүт ағай уҡыны. «Кейәү егете» булғас, Сәмиғ яңы костюм кейҙе, галстук таҡты, Сания ла өр-яңынан кейенде. Кейәүе менән һеңлеһе, күршеләр, тағы ниндәйҙер әбейҙәр йыйылды никахҡа. Һуңынан итле һурпа һемерҙеләр, варенье менән сәй эстеләр – бөтәһе лә боронғоса, йола, ғөрөф-ғәҙәт ҡушҡанса уҙҙы.

Шулай итеп, Сәмиғ икенсегә өйләнеп ҡуйҙы. Егет сағынан ятаҡан, хыялланған, йөрәге теләгән затҡа өйләнде. Һеңлеһенән иң кәрәкле кейем-һалымы һалынған сумаҙанын, электр ҡырынғысын, теш таҙартыу щеткаһын алып килде, һәм ул – өйҙә.

Кисен Сания уға урынды тәҙрә янында торған диванға һалды, үҙе мейес ултырған бәләкәй бүлмәләге тимер карауатҡа ятты.

– Сания, нишләп айырым һалаһың?– тип аптырап һораны Сәмиғ. – Никах уҡығас, беҙ ир менән ҡатын түгелме ни?

– Мин бер ҡасан да ир менән йоҡлағаным юҡ,– тип яуапланы Сания. – Һиңә өйрәнергә кәрәк әле тәүҙә миңә.

Төнө буйы өйрәнде. Ниндәйҙер ҡатын менән ятатышабыҙ, имеш, тип таң алдынан ҡаны ҡыҙып уянып китте Сәмиғ. Ул эсмәне, ҡанын тәмәке менән ағыуламаны, ваҡытында эшләп, ваҡытында ял итте, шунлыҡтан ирлек ҡеүәтен ошо йәшенә тиклем һаҡлай алды. Йөрәгендәге тромбыһы ҡуҙғалып ҡуйыр, тип һуңғы йылдарҙа Надежда Ивановнаға ла ҡағылманы. Яратҡан кешеһе эргәһенә ятҡас ни, теләге тоҡанды ла китте шул. Дивандан тороп, Санияның одеялы аҫтына сумды. Сания тертләп уянды ла «ой» тип ҡысҡырып ебәрҙе, Сәмиғ, дәрт-ҡеүәте ташып, уға йылы һүҙҙәр әйтте һәм тәжрибәле ҡулдары менән уның тәненә ҡағыла, һыйпай, иркәләй башланы. Сания ҡаршылашманы, устары менән йөҙөн генә ҡапланы…

Иртәгәһенә Сәмиғ үҙен ҡәнәғәт, ғорур йәш кеше итеп тойҙо. Әтеүсә, булдырҙы бит! Ҡатыны өй-йорт мәшәҡәттәре менән йөрөй, ихатаға сығып тауыҡтарына ашарға һибә, улар менән һөйләшеп тә ала. Янып торған ҡара күҙҙәре Сәмиғтың күҙҙәре менән осрашһа, оялып, ситкә тайшана һала, ә ул, ирәйеп, һаман уның күндәм тәнен, төнгө ҡыланыштарын уйлап ята. Йөрөүендә ниндәйҙер ғәм, ихласлыҡ бар, сибәрлеген дә һис ташламаған, тик бына яңы тештәр генә ҡуйҙырып алғанда…

– Һин һаман да сибәрһең әле, Сания.

– Тапҡанһың сибәрҙе. Тешһеҙ әбей, тиң.

– Мәскәүгә барырбыҙ ҙа пластмасса тештәр ҡуйҙырырбыҙ, модалы эшләпә алып бирермен. Һиңә ирҙәр ашарҙай булып артыңдан ҡарап ҡаласаҡ әле.

– Юҡты һөйләмә.

Мунсаға барҙылар. Надежда Ивановна менән Сәмиғ бер ҡасан да бергә йыуынманы. Ваннала арҡаһын ышҡыуҙы иҫәпләмәгәндә... Баҡсаларында мунса ултыртырға хыялланғайнылар ҙа, өлгөрмәнеләр. Шуға ла ҡатын менән ауыл мунсаһында йыуыныу Сәмиғ өсөн үҙе бер яңылыҡ ине…

Хәҙер улар диванда бергә йоҡлай. Тәне бөтөнләй ҙә таушалмаған, йәш, ирҙәр тарафынан иҙелмәгән, аборттар һәм бала табыуҙар менән йонсомаған. Утты һүндергәс, ҡараңғыла, йомоҡ күҙҙәре менән Сәмиғ хыялында, йәш Санияны ҡосаҡлайым, тип уйлап ята. Йәнә лә бер сәйер тойғо: ул, әйтерһең дә, Сания менән бергәләп Надяға хыянат итә, әйтерһең дә, ул тере һәм, белеп ҡалһа, көнләшәсәк. Бөгөнгө Санияның йәштәрсә ҡайнарлығы булмаһа ла, яҡынлыҡтың уға ҡыҙыҡ һәм ләззәт биреүен, рәхәтлек кисереүен күрмәй-һиҙмәү мөмкин түгел. Тик бына еҫ-тәменә генә өйрәнеп китә алманы Сәмиғ, тән-еҫтәре уға ят ине барыбер ҙә.

Шулай итеп, яңы тормош ағышы китте. Йәйге оҙон көндәрҙе ҡыҫҡа төндәр алыштырҙы, бала саҡтағы ише иртән иртүк әтәстәр ҡысҡырышты, көтөүсенең сыбыртҡыһы шартланы, һыйырҙар мөңрәне. Йылға аръяғында кәкүк саҡырҙы, һандуғас һайраны, һаҙлыҡтарҙан торна тауыштары ишетелде. Эргәһендә көнө буйы, ишетелер-ишетелмәҫ кенә һөйләшеп, ипле ҡатын йөрөй. Мул итеп ашарына бешерә («Һин ир кеше, һиңә күп итеп ашарға кәрәк»), бар ризыҡ та ауылса, башҡортса, быларҙан Сәмиғ ярайһы алыҫайған, әммә кинәнеп, яратып ашай. Оҙаҡламай колхозда ҡымыҙ бешә башланылар, Сания кәнистер менән ҡымыҙ ташый. Өҫтәлгә шешә ултырта – аппетит өсөн Сәмиғ аш алдынан йөҙ грамм эсеп ебәрә. Был бит баллы ай, тип уйлай ул, Надя менән быңдай ай булмағайны. Ваҡыттары ла юҡ ине, байрам итер өсөн аҡсалары ла, әлеге ише мул ризыҡтары ла, йоҡо бөткәнсе йоҡлау ҙа. Нисектер ябай, ҡәҙимге генә башланып киткәйне шул тормоштары. Ә бында бөтәһе лә бар һәм һәр ҡайһыһы мул. Тик Санияның ҡара күҙҙәрендә ҡәнәғәтлек һәм тыныслыҡ күрмәне Сәмиғ. Ҡараштары осрашһа, Сәмиғ уның күҙҙәрендә һағайыу һәм шикләнеү саткыларын шәйләй – бөтәһе лә ысын микән, тигән уй бар һымаҡ Сания ҡарашында.

Күпмелер ваҡыт шулай яңы тормош менән йәшәп, яңы йортҡа, яңы көнкүрешкә үҙһенеп, Сәмиғ яйлап ниндәйҙер уңайһыҙлыҡтар тоя башланы. Мәҫәлән, диван тәҙрә төбөндә генә ултыра, ә бер стена буйы буш, унда бер нәмә лә юҡ. Тәҙрә тупһаһында тиерлек йоҡлап булмай ҙа инде. Диванды ана шул буш стена буйына күсереп ултыртҡанда йәтеш буласаҡ. Сәмиғ был турала ҡатынына әйтте.

– Унда ярамай. Насар урын,– тип яуапланы ул.

– Нишләп насар? Стена буйында ниндәй насарлыҡ булһын? Әйҙә, күсереп ултырайыҡ.

– Юҡ.

Шым ғына тауышта Сәмиғ тиҫкәрелек тойҙо. Йәки бына йоҙаҡҡа бикләнгән ҙур бүлмә. Бер көн Сәмиғ бәләкәй баҡсаға сығып, тәҙрәләрҙе тыштан ҡараны, әммә бер нәмә лә күрә алманы – бар тәҙрәләр ҙә эстән ҡорғандар менән томаланғайны.

– Сания, ҙур бүлмәң нишләп йоҙаҡҡа бикле тора ул?

– Унда һыуыҡ, ҡышын яҡмайым, бер үҙемә бында ла етә.

– Хәҙер һин яңғыҙ түгел бит. Әйҙә, асайыҡ, яғайыҡ та шунда йәшәйек.

– Юҡ,– яуапта йәнә ҡәтғилек саҡтыһы яңғыраны.

Диван тураһында ла, бикле торған бүлмә тураһында ла Сәмиғ башҡаса һүҙ ҡуҙғатманы. Тағы һораһа, шундай уҡ яуап аласағын аңлағайны. Баҡһаң, Санияны ул бөтөнләй белмәй икән. Тәүҙә ул ябай ғына күренде, күндәм генә ҡатын булыр, бер һүҙгә лә ҡаршы төшмәҫ, тип уйлағайны. Хәҙер уның бигүк ябай түгеллегенә төшөндө, тымыҡ күлдә шайтан үрсей… Унан килеп, был уның йорто, ғүмер буйы ошонда йәшәгән, диванды ҡайҙа ултыртырға, стена буйының ниңә насар икәнен ул Сәмиғҡа ҡарағанда яҡшыраҡ белә. Ергә һеңешә башлаған ауыл йорто балсыҡ, таш рухы менән тулған, ер аҫтынан һалҡын тын алыш килә, унда ҡарт ағастың шығырҙауы ишетелә, төнгө күләгәләр һелкенә, ҡараңғы мөйөштәрҙә өй эйәһе йәшеренгән, төндәрен сарҙаҡта әллә ел уйнай, әллә шайтан һыҙғыра, стена артында, иҙән аҫтында кемдер, нимәлер тәрән итеп тын алған кеүек уфылдай, Санияның ата-әсәһе үлгән был бикле ҙур бүлмәлә яңғыҙ кешегә төнөн кемдеңдер аяҡ тауыштары ишетелгәндәй. Ауыл кешеһендә бала сағынан уҡ өләсәйҙәр һөйләгән, өләсәйҙәр ҡурҡытҡан төрлө ышаныуҙар, ҡурҡыуҙар йәшәй…

Торараҡ баллы ай бөттө, яңы тормош яйлап ғәҙәттәгегә, бер төрлөгә әйләнеп бара, сөнки мул ашау, көндөҙгө йоҡо, аҙнаһына ике тапҡыр мунсала йыуыныу, енси яҡынлыҡтан ләззәт алыу, уныһы ла хәҙер әллә ни ҡыуаныс тыуҙырмай һәм яйлап кәмей төштө, көнкүреш ике ҡарт кешенең мәғәнәһеҙ көн үткәреүенә әйләнде, тигән сәйер тойғо килде. Һәм Сәмиғтың күңеленә борсолоу, хатта һағайыу кереп ояланы. Пенсионерға эшләү мотлаҡ түгел, һәр хәлдә, эшләмәҫкә лә мөмкин, әммә ир кешегә бисә елкәһендә йәшәү барыбер ҙә төҫ түгел (кире юлға тип һаҡлаған аҡсаһын ул әлегәсә тотонмай һаҡлай). Сания ауыл кешеһе өсөн арыу ғына пенсия ала. Ғүмер буйы һыйыр һауған, миҙалдары, Маҡтау ҡағыҙҙары бар. Йыйған аҡсаһын ойоҡҡа йәшергәндер. Сәмиғты хатта был да борсомай, уны байрам кәйефе, байрам өҫтәле, Санияның уға байрамса мөнәсәбәте борсой. Ауыр эшкә күнеккән ҡулдары тәненең артыҡ ағзаһы кеүек һәленеп кенә йөрөй. Ауыҙына ҡалаҡ килтереү ҙә бисә күкрәген һәрмәү – бар шөғөлө шул. Мәскәүҙә пенсияға сыҡҡандағы эшһеҙлек ул ҡәҙәре лә һиҙелерлек түгел ине. Магазинға бараһың, һөт артынан сиратта тораһың, баҙарға йөрөйһөң йәки, көн һәйбәт булһа, үҙең һымаҡтар менән йорт алдындағы эскәмйәлә домино, кәрт һуғаһың. Көнө лә үтә, һөҙөмтәлә нимәлер эшләгән дә һымаҡһың.

Уйлана торғас, эш тапты. Картуфты күмергә кәрәк. Әммә ҡатыны:

– Кәрәкмәй, мин үҙем,– тине.

– Ә мин ни өсөн?

– Һин ял ит. Картуф – бисәләр эше.

Иртәнсәк Сәмиғ баҡсаға сыҡһа, унан да иртәрәк торған Сания һуңғы бураҙнаны күмеп йөрөй ине инде.

Иртәгәһенә тәүге автобус менән Сания ҡалаға – магазинға юлланды. Сәмиғ һуң ғына тороп йыуынды ла, газ плитәһен тоҡандырып, сәйнүк ҡуйыу өсөн шырпы эҙләй башланы. Ҡашығаяҡ ҡуйыр өсөн тупаҫ ҡына төрәкәләнгән кәштә мөйөшөндә ниндәйҙер аҫҡыс күҙенә салынды бит. Ҡапыл ғына башына уй килде: был теге ҙур бүлмә йоҙағының аҫҡысы түгелме икән? Яраһа, асырмын да унда нимә йәшергәнен күрермен, тип уйланы. Аҫҡыс яраны. Сәмиғ асты ла эскә инде.

Йәшәлмәгән һәм йылдар буйы яғылмаған бүлмә һалҡын, ер еүешлеге аңҡый. Тәҙрәләгә ҡорғандар, ҡалын булғанлыҡтан, яҡты үткәрмәй – ярым ҡараңғы. Сәмиғ, яланғас стеналарҙы, буш бүлмәне күрермен, тип уйлағайны, әммә бүлмә тулы йыһазды күргәс, ғәжәп итте. Йәшел төҫкә буялған барабан имше йомро мейес, һул стенала зиннәтле балаҫ, никель артлы киң тимер карауат, уға ҡалын-ҡалын мендәрҙәр өйөлгән, мендәрҙәр өҫтөнә ап-аҡ бәйләнгән селтәрҙәр ябылған, шундай уҡ селтәрле простыня иҙәнгә тейә яҙып, карауатты ҡаплап тора. Бер ниндәй бөкләнгән, тартылған йәки етмәгән ер юҡ карауат өҫтөндә, барыһы ла бөхтә. Кемдеңдер ҙурайтылған фоторәсеме быяла аҫтына һәм рамға алынып, мендәр өйөмөнә терәтеп ҡуйылған. Яҡыныраҡ килеп ҡарағайны, йәш Санияны таныны. Йәш сағында ниндәй матур булған! Санияның нәҡ ошо сағын ярата ине бит Сәмиғ, төштәренә тап ошо ҡиәфәттә инә торғайны. Бүлмә уртаһында түңәрәк өҫтәл ултыра, ул алтын төҫөндәге суҡлы ашъяулыҡ менән ябылған. Өс тәҙрәле стена буйында – ваҡ мендәрҙәр өйөлгән балалар карауаты. Карауатта – зәңгәр күҙле, толомдарын зәңгәр таҫмалар менән бәйләнгән, шулай уҡ зәңгәр төҫтәге күлдәк кейҙерелгән ҙур ҡурсаҡ. Сәмиғ уны ҡулына алды, саҡ ҡына эйгәйне, күҙҙәре ябылды ла ҡуйҙы.

Санияның ире лә, балалары ла булмағас, ни хәжәтемә икән был карауат, был ҡурсаҡ? Шул ҡурсаҡ менән йоҡлап йөрөгәнме әллә ошо карауатта? Улай тиһәң, ҡурсаҡ өр-яңы, һис сыйылған, тырналған ере юҡ. Карауат та өр-яңы, никеле ҡупмаған, зәңгәр буяуының да аҡтарылған эҙе күренмәй, әйтерһең дә, кисә генә магазиндан килтереп ултыртҡандар. Сәмиғ ҡаршы стена буйына ҡуйылған сервантҡа иғтибар итте, ул да яңы ғына алынған, һәр хәлдә етмешенсе йылдарҙан да әүәл түгел. Сервант сәй сервиздары, фужерҙар, рюмкалар, хрусталь вазалар менән лыҡа тулы. Көҙгөлө шифоньерҙың дә эсе тулы кейем-һалым, Сәмиғ уныһын асып торманы, бәлки, бикле лә булғандыр. Бисә-сәсә һаранлығы менән алғандыр ҙа, унан, ниңәлер, бикләп ҡуйған, ә бөтә ғүмерен бәләкәй генә бүлмәлә йәшәп үткәргән…

Сәмиғ бүлмәнән сыҡты, бикләне, аҫҡысын ятҡан урынына һалды… Быға саса нисек йәшәгән, артабан да шулай йәшәүен дауам итте, гүйә, ҙур бүлмәгә бер ҡасан да инмәгән, Санияның әйбер-мөлкәтен күрмәгән.

Бесән ваҡыты етте. Сәмиғ һеңлеһенә килде – ярҙам кәрәкмәйме? Кәрәк. Нисә йыл ҡулына салғы тотҡаны булмаһа ла, бесән сабыуҙы онотмаған икән. Йыйыу, күбәләүгә Сания ла булышты. Ҡаланан милиционер булып эшләгән бәләкәй малайҙары ҡайтты. Көтөүсе улдары Фәрит ике көн кәбән һалышты. Береһе лә эсмәне, барыһы ла тырышып эшләне – үҙеңдең хужалығыңа булғас, араҡы онотолоп торҙо. Кейәүенең йөҙө лә яҡтыра төштө, тәүге көндәрҙәге һөмһөрө бөттө, тупаҫ йөҙө әллә тирҙән, әллә көндөҙгө эҫенән йомшарҙы, йәйелде – бесән әҙерләү уңышынан ҡәнәғәтлек кисерҙе. Июль эҫеһе, бесән еҫе, ҡарт ҡайын аҫтында ашау, усаҡ төтөнө, үлән сәйе – Сәмиғ өсөн барыһы ла яңы тормош башланғандағы ише яңы, хикмәтле, мөғжизәле ине.

Бесәндән һуң Сәмиғ йәнә бер эш тапты. Йорттоң иң аҫҡы ниргәләре серегәнен күптән күргәйне инде. Нигеҙен таштан һалғандар, балсыҡ менән генә һылағандар, әммә балсыҡты ел, ямғыр ашап, ҡойоп бөткән, һөҙөмтәлә таштар урыны-урыны менән ҡубып төшкән, нигеҙҙе цемент менән нығытыу кәрәк. Шуға ла ҡыш өйҙә һыуыҡ. Кейәүенә барып кәңәшләшеп килде: колхоз складынан цемент һатып алып була икән. Идараға килде. Хәҙерге председатель – Сабир ҡарттың улы, әлбиттә, уны белмәй-танымай, цемент үҙебеҙҙең колхозсыларға ғына һатыла, ә

һин, ағай кеше, колхозда эшләмәгәнһең, тип тора. «Сания эшләгән бит, мин уның ире»,– тип яуапланы Сәмиғ. «Сания үҙе килһен»,– тине председатель. Кәйефе ҡырылып сыҡты идаранан. Яңы тормошонда был уның тәүге күңелһеҙ хәле ине. Сания үҙе барҙы идараға, дүрт тоҡ яҙҙырып ҡайтты. Колхоз шоферы уларҙы бер шешә араҡыға килтереп ташланы. Шул уҡ егет ҡырсын килтереп ҡапҡа ауыҙына ауҙарҙы. Опалубканы иҫке таҡталарҙан Сәмиғ үҙе ҡаҡты, иҙелмәне лә үҙе иҙҙе – ни тиһәң дә төҙөүсе – һәм Санияға былай тине:

– Ярҙамға кейәү менән Фәритте саҡырайыҡмы?

– Кәрәкмәй. Бөтә араҡыны эсеп бөтәсәктәр, ә беҙгә ҡышҡылыҡҡа утын әҙерләйһе бар. Үҙебеҙ ҙә булдырырбыҙ.

Өс көн эсендә икәүләп иҙелмәне биҙрәләр менән ташып нигеҙҙе ҡойҙолар.

– Хәҙер ҙур бүлмәне лә аса алаһың,– тине Сәмиғ. – Нигеҙ нығынғас, һыуыҡ булмаясаҡ.

Сания өндәшмәне. Эш бөткәс, Сәмиғ һеңлеһенә китте – алып торған көрәктәрҙе илтергә кәрәк ине – һәм балаларына зарланып ярһыған һеңлеһе янында байтаҡ ваҡыт тоткарланды. Баҡһаң, бәләкәйе, ҡалалағы милиционер, үҙенән оло, етмәһә, балалы бисә менән сыуала, олоһо, көтөүсе, ҡатынын туҡмаған, уныһы балаларын алған да ҡалаға, әсәһенә, ҡайтып киткән. Вәт тормош. Уйлана-уйлана һеңлеһенән ҡайтҡас, Сәмиғ ҙур бүлмәнең ике ишеге лә асыҡ торғанын шәйләне. Унда нимә барлығын белһә лә, йәнә инеп күҙ һалырға булды һәм ундағы үҙгәрешкә аптырап китте, хатта ышанмай торҙо: тәҙрәләрҙәге ҡалын ҡорғандар асылған, карауат та, зәңгәр күҙле ҡурсаҡ та, Саниның портреты ла юҡ. Бәләкәй бүлмәлә ултырған көршәктәге гөлдәр бындағы тәҙрә төбөнә күскән. Бүлмә үҙе ҙурайып, иркенәйеп киткән һымаҡ, яҡтылыҡ күп, йәм бар. Шулай ҙа һауа һалҡынса һәм дымһыу ине әле.

Һиҙелмәй генә йәй ҙә үтеп бара. Еләклектәр бушаны, игендәр һарғайҙы, ауылдың тирә-яғындағы туғай-яландар кәбәндәр менән сыбарланды. Август аҙаҡтарында ауыл өҫтөнә аҡһыл томан төшә башланы, һаҙлыҡтарҙағы торналар ҡаңғылдашты. Ҙурайып, ауырайып барған ҡаҙ бәпкәләре, ҡаңғылдашып, көсһөҙ ҡанаттарын елпене – ауылды оса, йүгерә-атлай сығалар ҙа шап итеп йылғаға барып төшәләр.

Ауыл тормошона тамам күнекте инде Сәмиғ. Сания ла уға өйрәнде, ирле ҡатын яҙмышына буйһонدو. Яратҡан да һымаҡ, йәшлегендә яратмаған һәм ярата ла алмаған кешене бөгөн килеп яратты. Ҡай саҡ Сәмиғ үҙенең күкрәгендә уның иркә ҡулын тойоп уянып китә һәм, бәй, был бит шул уҡ Сания, йәшлегендә йөрәген өткән, зарыҡтырған ҡыҙ, тип уйлай башлай, тормошо ҡапыл шулай боролош алғанына аптырап ята. Ә көндөҙҙәре уның йүгерек ҡара күҙҙәре үҙенән, Сәмиғтан, һорай кеүек: «Былар бөтәһе лә ысынмы, әллә төшмө?» Ысын икәненә Сәмиғ хәҙер шикләнмәй, икеләнмәй, тик бына Мәскәүгә барып, прописканан төшөргә лә пенсияһын бында күсерергә кәрәк. «Картуфты ҡаҙып алырбыҙ ҙа, барып килермен инде»,– тип хәл итте ул. Ә барыбер ҙә һағындырған, Мәскәүҙе, хатта Зеленоградты ла түгел, балаларын һағынған. Йәй бер хат яҙып һалғайны, яуап та килде. Ейәнсәре яҙған: «Олатай, беҙ һинең сит ҡатын менән ауылда йәшәүеңде теләмәйбеҙ»,– тигән. Элегерәк, Мәскәүгә икәүләп барырбыҙ, тип уйлай ине, хәҙер икеләнде. Санияны улының күҙҙәре менән күрҙе: ауылса кейенгән, меҫкен, бәләкәй генә бер ҡарсыҡ, бер һүҙ урыҫса белмәй. Әсәйҙән, өләсәйҙән һуң уны бөтөнләй ҡабул итмәйәсәк балалары.

Бәләкәй бүлмәлә ултырған иҫке телевизорҙы Сәмиғ йәй буйы бер тапҡыр ҙа

ҡараманы. Сания ла уны үтә һирәк тоҡандыра, унда ла Өфөнән башҡортса концерт йәки спектакль биргәндә генә. Телевизорҙы ҙур бүлмәгә күсерҙеләр, һәм бер көн уны ҡабыҙғайны, Сәмиғ үҙенә таныш, үҙе йөрөгән Мәскәү урамдарын күрҙе лә үҙенең ошо ҙур таш ҡаланы һағынғанын аңланы. Һағынмаҫлыҡ та түгел шул, байтаҡ ғүмере шунда үткән бит.

Картуфты ҡаҙып алдылар, киптереп, баҙға төшөрҙөләр. Бер нисә көндән күкте ауыр болоттар ҡапланы, быҫҡаҡ ямғырҙар яуырға тотондо. Ауыл һүнде, күңелһеҙгә әйләнде. Фәрит, аттан йығылып төшөп, больницаға эләкте. Мейеһе һелкенгән, тинеләр. Түбәнге ауылда иҫерек егеттәр, һуғышып, бер тиҫтерҙәрен үлтергәндәр. Шул уҡ урамда эскесе ҡатын аҫылынды.

Бер көн Сәмиғ ҡапҡа тышында тора ине, янына күршеһе Вәзих килде. Тракторсы. Ул Сәмиғ ҡайтҡаны бирле ҡапҡаһы төбөндә үҙенең иҫке тракторы эсендә ҡаҙына, гел генә майға ҡатҡан курткала, иҫке фуражкала йөрөй, кисенә лаяҡыл була. Ҡайһы арала, кем менән эсеп өлгөрә – аңламаҫһың. Сания уны яратмай, алкаш, олоғайған әсәһен ҡыйырһыта, ти. Элек араҡыға ҡайһы бер эш-йомоштарын үтәгән дә икән, Сәмиғ килгәс, һоранып кермәҫ булған.

– Ауылдағы асфальтты һин йөрөр өсөн йәйгән тип уйлайһыңмы?– тип һөйләнә башланы Вәзих, иҫәнләшеп тә тормай, аяҡ аҫтына бармағы менән төртә-күрһәтә, – һин колхоз эшенән ҡастың, Мәскәүеңдә мәрйәң менән йәшәнең, пенсияға сыҡҡайның, бында әҙергә-мәҙергә килдең дә төштөң. Иҫәр бисә таптың, елкәһенә ултырҙың. Һин, москвич, давай, табаныңды ялтырат ауылдан.

Сәмиғ уны йылмайып тыңланы, яуапҡа бер һүҙ ҙә әйтмәй, ихатаһына кереп китте. Иҫереккә нимә тиһең инде, ә кәйефен ҡырҙы барыбер ҙә. Айныҡтың – уйында, иҫеректең – телендә, тиҙәр. Һәм Сәмиғҡа бөтә ауыл булмаһа ла, күптәр Вәзих кеүек уйлай һымаҡ тойола башланы, форсаты сыҡҡанда башҡалар ҙа уның кеүек йөҙөн йыртырға әҙерҙәр һәм урам буйлап үткәнендә ҡаршыһына осраған кешеләрҙең ҡараштарында ошондай уҡ уй бар, тип уйланы, шул сәбәптән көҙгө ауыл уға тағы ла күңелһеҙерәк, ҡырыҫыраҡ күренде.

Нисектер, бер кис йоҡларға ятҡас, Сәмиғ үҙен күптән борсоған һорауын бирҙе.

– Сания, мин армиянан һуң ауылға ҡайтҡан булһам, һин миңә кейәүгә сығыр инеңме?

– Сығыр инем, һин миңә оҡшай инең дәһә,– тип яуапланы ҡатын ябай һәм ғәҙәти генә итеп, шунан, бер аҙ өндәшмәй ятты ла өҫтәп ҡуйҙы: – Ә һин хат та яҙманың, икенсене алдың…

Сәмиғ өндәшмәне, ҡатынының һүҙҙәренең мәғәнәһенә төшөнөргә тырышты, шулай ҙа уның был тәүбәгә килеүен бөгөнгө Санияның ялағайланыуы һәм хәйләһе тип хисапланы.

– Оҡшағас, минең хатҡа ниңә яуап яҙманың һуң?

– Оялдым. Хатты берәйһенә күрһәтерһең, тип уйланым. Атайым белһә, тип тә… Минекеләр ҡаты ине бит.

– Хушлашырға ла килмәнең ҡайын янына…

– Ҡурҡтым. Төнөн һорамай-нитмәй нисек барам инде? Һораған хәлдә лә, әсәйем сығармаҫ ине.

Сәмиғ йәнә өндәшмәне.

– Һин Муллаҡаев Фуатҡа сығырһың, тип уйлағайным.

– Фуатҡа? Атайым бер ҡасан да ризалыҡ бирмәҫ ине. Бер-береһе менән дошманлашып йөрөнөләр бит.

– Нимәгә дошманлаштылар?

– Бәй, белмәйһеңме ни? Фуаттың ағаһы Муллаҡаев Хан беҙҙең Ғәлимйән ағайҙы төрмәгә ултыртты бит. Хан ауыл Советы председателе ине.

– Ни өсөн ултыртты?

– Ағайымдың тауышы көр, гел генә тәртипһеҙлектәрҙе әрләне. Бесән йыйырға китеп барғандар. Арба тулы бисә-сәсә. Яртылыҡ юлда арба ватыла. Ағайым әрләшә башлай: «Муллаҡаевтарҙың хужалығы шулай инде ул, рәтле бер нәмәләре лә юҡ, хужалыҡ бер ҡулда ғына булһа, арба былай ҡыйралмаҫ ине». Шунда өҫтәй: «Хет Сталинды егеп кит!» Кемдер еткерә. Ағайымды ауыл Советына саҡырталар. Туҡмайҙар. Хан менән Борханов Рамаҙан туҡмай. Шунан районға оҙаталар. Ағайым ебәргән ерҙәренән ҡайтманы.

Күпмелер ваҡыт өндәшмәй яттылар.

– Мин һине егерме йыл көттөм,– тип ҡуйҙы шунан Сания ҡапыл ғына.

Ҡатынының тәүбәгә килеүе Сәмиғты әллә ни тулҡынландырманы, арыған рухында бер нәмә лә баш түбән әйләнмәне. Оҙаҡ йоҡлай алмай ятҡанда ғына, әгәр белгән булһам, армиянан һуң ауылға ҡайтыр инем, тип уйланы. Юҡ, хатта бер йыл хеҙмәт иткәс тә отпускыға ҡайтыр ине. Клубта осрашыу, ҡарт ҡайын аҫтында осрашыуҙар. Унан демобилизацияланыу, туй, бергә йәшәү… Нисек булыр ине икән тормоштары? Үҙе нисек булыр ине икән? Ә Сания, уға бер нисә бала тапҡан Сания? Хыял томандары араһынан уға ыбыр-сыбыр малайҙарҙың, ҡыҙҙарҙың ҡара күҙҙәре ҡараны, әммә уларҙың береһе лә был яҡты донъяға тыуманы, ә Сания – бына, эргәһендә ята. Мин уның тураһында нимә беләм? Ул балалар тыуған хәлдә Наденька, Надежда Ивановна булмаҫ ине. Вовкаһы, ейәнсәре булмаҫ ине. Уларҙың донъяла юҡлығын күҙ алдына ла килтерерлек түгел…

…Иртәнсәк ул үҙенең Мәскәүгә барырға, пенсияһын бында күсерергә теләүен әйтте, балаларын һағыныуын да белдерҙе. Сания өндәшмәне, һәр хәлдә, ҡаршы һүҙ әйтмәне, тимәк, риза.

Йәнә ике көндән юлға йыйынды. Сания уны автобусҡа тиклем оҙата сыҡты. Быҫҡаҡ ямғыр һибәләй. Көҙгө ямғыр… Тау битендәге һарғая башлаған урман, буш баҫыуҙар, күшеккән өйҙәр, аяҡ аҫтындағы бысраҡ, көҙ, төпкөл ауыл. Уйҙары менән Сәмиғ үҙенең Зеленоградында йөрөй, русса уйлай, ейәнсәренә ниҙәр һөйләргә тейешлеге хаҡында баш вата. Сания өндәшмәй генә эргәһендә баҫып тора, ҡараштары, һәр ваҡыттағыса, ситте байҡай. Автобус ҡуҙғалырға булғас, Сәмиғ: «Йә ярай, һау бул!» – тип эскә инеп ултырҙы ла тәҙрә аша ҡарағайны, иҫке генә плащҡа төрөнгән, башына сыбар яулыҡ ябынған, бөршәйгән бәләкәй генә кәүҙәне күрҙе. Ҡара күҙҙәренең ҡарашы Сәмиғҡа яҡлаусыһыҙ ҡалған, йәлләткес нимәнелер хәтеренә төшөрҙө. Автобус ҡуҙғалып киткәс кенә, ул әлеге мәхлүкте иҫләне: магазинға ингәндә хужабикәләр эттәрен берәй ағасҡа йәки бағанаға бәйләп керә. Ә эт, меҫкен, көтөп ҡала, ҡараштарында өмөтлө-һағышлы һорау сағыла: «И… хужабикәм, һин кире сығырһыңмы, мине бында ҡалдырып китмәҫһеңме?»

**Руссанан Әмир ӘМИНЕВ тәржемәһе.**

**Радик**
**ӘХМӘТОВ**

# ЛЕНИНГРАД ӘБЕЙЕ

ХИКӘЙӘ-ХӘТИРӘ

Институтта студенттарға ятаҡ етешмәй ине. Ғәҙәттә, фатирға индерергә теләүсе ҡарт-ҡоро үҙҙәренең адрестарын вахтерға ҡалдыра. Мин дә үҙебеҙҙең вахтершанан бер нисә адрес алдым. Бер яңғыҙ ҡарсыҡ “буйҙаҡ ир-егетте фатирға индерә» икән, тоттом да шунда киттем. Йортон тиҙ таптым. Ашыҡмай ғына ишегенә туҡылдатам. Туҡ-туҡ, туҡ-туҡ... Әйтерһең, тумыртҡа. Кире борололорға булғайным, һул яҡтағы ишек асылды.

– Һеҙ фатир мәсьәләһе буйынсамы? – тип һораны йәш ҡатын. – Әбей өйҙә ул. Күптән түгел ҡайҙандыр ҡайтты. Ятып торғандыр. Нығыраҡ шаҡып ҡарағыҙ. – Шунан, башын сайҡай биреп: – Ай-һай, егет, был ҡарсыҡта тора алырһығыҙ микән, әллә нисегерәк ул. Үтә сәйер… Ишектәге йоҙаҡтарға күҙ һал әле!

Минең кеүек кешегә “күҙле бүкән” тип әйткәндәрҙер инде: ышанмай, тәүҙә күҙемде аса биреп ҡараным, аҙаҡ ҡулым менән дә һәрмәштереп сыҡтым. Бер, ике, өс, дүрт... ете. Ғәжәп! Килгәс-килгәс, әбейҙе күреп, һөйләшеп китергә кәрәк. Нығыраҡ шаҡыным. Әһә! Эстән тауыш килә.

– Кем бар унда?

– Мин, әбей, мин.

– Ишетәм. Һин кем? Ҡайҙан килдең?

– Студент мин. Фатирға индерәһегеҙ икән.

– Ҡайһы институттан һуң һин? Кем менән килдең?

– Сельхоздан мин, сель-хоз-дан.

– Ярай, төшөндөм. Өйләнмәгәнһеңме?

– Юҡ, юҡ, – тип ҡысҡырам.

– Паспортың барҙыр?

Тиҙ генә түш кеҫәмде ҡапшайым – шәхесемде иҫбатлаусы документ үҙем менән.

– Эйе. Дөйөм ятаҡта пропискаға ингәнмен, – тип тә өҫтәйем.

---

*Радик Әхмәтов — Күгәрсен районынан, әле Кушнаренко ауыл хужалығы техникумында укыта. Башкорт дәүләт аграр университетын һәм Мәскәү ветеринария академияһын тамамлай. Хеҙмәт ветераны, "Рәсәй Федерацияһының мәгариф алдынғыһы" знагы менән бүләкләнгән.*



Һорау алыу бөттө. Бына әбейем бер-бер артлы йоҙаҡтарын асырға тотондо. Ишек уйымында сал сәсле, шәфҡәтле һәм кешелекле тойолған бәләкәсерәк буйлы теремек әбейҙе күргәс, йәнгә йылы ингәндәй булды. Хужабикә мине эскә саҡырманы, башта өҫ-башыма иғтибар менән, шунан берсә үҙемә, берсә паспортымдағы фотоға ҡараны.

Белһәгеҙ икән тупһанан аша атлағанда ниндәй хистәр кисергәнде?! Фатиры ике бүлмәле. Ҡапылда күҙгә ҡиммәтле ҡаралты, затлы әйберҙәр салынмаены. Таҙалыҡ, бөхтәлек. Өҫтөмдө һалыу менән әбейем кухняға сыҡты, аҙаҡ, ҡара-ҡаршы ултырып, тәмләп сәй эстек, ә һуңынан оло бүлмәлә оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Иртәгәһенә – тағы.

...Ул Ленинград ҡалаһында тыуып үҫә, блокада башланғас, әҙәм ышанмаҫлыҡ ҡайғы һәм ҡыйынлыҡтар кисерә.

Берҙән-бер улы хәрби училищеға уҡырға китә, танк командиры була, бер нисә тапҡыр яралана. Ире, музей хеҙмәткәре, һуғыштың тәүге көнөнән үк ополченецтар сафына баҫҡас, ҡатын ҡалала ҡыҙы менән генә тороп ҡала.

1942 йылдың февраль айында ополченец фронттан бер көнгә генә ҡайтып китә. Ғаиләһенә бер нисә шаҡмаҡ шәкәр, биш ҡаҙаҡ май, өс кило самаһы һоло ярмаһы, бер нисә балыҡ консерваһы һәм онталып бөткән ҡара сохариҙар алып ҡайта.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был аҙыҡты уларға ашарға яҙмай. Иртәгәһенә аҙыҡ-түлектәрен икмәк карточкалары менән бергә йорттарынан урлап сығалар. Был аяныс хәлдән ҡатын хатта иҫтән яҙа. Уны моргҡа алып китәләр, күҙен асҡас, больницаға оҙаталар. Бер аҙ һауығып өйөнә ҡайтһа, ун ике йәшлек ҡыҙы – аслыҡтан вафат.

Август айында иренә “похоронка” ала. Нервыһы ныҡ ҡаҡшай яңғыҙ ҡатындың. Тиҙҙән Уралға эвакуациялана. Өфөлә эшкә урынлашҡас, ятаҡтан урын бирәләр. Һуғыш бөткәндә генә яңы ҡайғы: ҡырҡ бишенсе йылдың май айында улы Прага ҡалаһы эргәһендә танк эсендә янып һәләк була. Үлгәндән һуң Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана. Әбекәй уны улының иң ҡәҙерле иҫтәлеге итеп һаҡлай.

Әбейҙең ни өсөн олоғайған көнөндә сит кешеләргә, күршеләренә сәйер булып күренеүе миңә аңлашыла ине инде, шуға, был фартирҙа өйҙәш йәшәргә мөмкин, тигән фекергә килдем.

Шулай, төпкө бүлмәлә ҡуна ҡалам, ваҡ-төйәк әйберҙәремде, китап-маҙарҙы әҙләп ташыйым.

***

Мөйөштә йәшниктәр өйөлгән. Иң өҫтәгеһенең ҡапҡасын асып ҡараһам... сохари! Тығыҙлап тултырылған. Тимәк, бөтәһендә лә. Ә нимәгә? Аслыҡ заманы түгел бит. Ә-ә, аңлашылды.

Ленинград... Блокада... Аслыҡ... Запас... Шул уҡ бүлмәлә – өҫтәл. Ҙур быяла аҫтында – ниндәйҙер ҡағыҙ. Ҡалын хәрефле яҙыуҙы уҡыйым. Күҙ алдарым ҡараңғыланып китте, сәстәрем үрә торғандай булды.

*Бур!!!*

*Әгәр ҙә һин минең йортома инә торъан булһаң, тәүҙә ошо ҡаъыҙҙы уҡы! Аҙ ъына намыҫың бар икән, сыъып кит. Минең әйберҙәремә, аҙыҡ-түлегемә ҡаъылһаң, блокадала аслыҡтан үлгән ҡыҙымдың, танк эсендә янъан улымдың, Ленинград фронтында үлеп ҡалъан иремдең изге иҫтәлектәре һиңә иң ҡаты яза булып, уҡ һымаҡ йөрәгеңә ҡаҙалһын.*

*Бур!*

*Яҡшылыҡ менән әйтәм, аңла етем ҡарсыҡтың нәфрәтен...*

Яҙыуҙың ҡалған өлөшөн уҡый алманым: әбейем килеп инде. Уҡып торғанымды күрҙе, әлбиттә, тик ләм-мим өндәшмәне. Һуң булһа ла, үҙемдең ҙур хата эшләгәнемде төшөндөм. Ниңә һорауһыҙ индем бында? Ни эшләргә инде? Исмаһам, хужабикәм, улым, борсолма, өҫтәлдәге яҙыу былай ғына яҙылған, күңел өсөн генә, ниндәй ҡараҡ инһен, ти, бында минең нимәм бар, тиһәсе. Әммә әбейҙең блокада ваҡытында аҙыҡ-түлеген урлатып, төҙәлмәҫлек күңел яраһы алыуы ғына шикләндермәй ине хәҙер. Быуындарым ҡалтыраны. Бер әбейгә, бер ишеккә ҡарайым.

– Ғәфү итегеҙ. Ятаҡҡа ҡайтайым әле.

– Һау бул, улым.

Егеттәргә һөйләп биргәс, бер аҙ тынысланғандай булдым, был ваҡиға онотола төштө. Дөрөҫ, күпмелер ваҡыт теге әбей төшөмә инеп яфаланы. «Һин – бур. Һин минең нәмәләремде урларға килгәнһең», – ти ҙә йоҙаҡтарын шылт-шылт килтереп бикләргә тотона йәки теге яҙыуҙы һона. Мә, уҡы, ти, ә мин сәбәләнәм, ҡасырға ынтылам һәм иҙәнгә ауып төшәм.

Институтта уҡыған осорҙа сәйер инәйҙе ҡабат барып күргем килһә лә, нисектер, тыйылдым. Хатта ки иҫкә алмаҫҡа, онотоҡа тырыштым. Районға эшкә киткәс, һирәкләп булһа ла, шул осрашыу күҙ алдыма баҫҡыланы. Берәй юл төшкәндә Ленинград әбейенең хәлен белешке килде, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, донъя мәшәҡәттәре арҡаһында теләгем бойомға ашманы.

Йылдар үтә торҙо. Инде вуз тамамлауға ун йыл тулды. Ошо тантана айҡанлы элекке группалаштарыбыҙ институтта осрашыу кисәһе ойоштороҙо.

...Икенсе ҡатҡа күтәрелеп, таныш ишек ҡаршыһына баҫтым, йөрәгем дөп-дөп тибә. Йоҙағы берәү генә. Тимәк... Шулай ҙа звонокка баҫтым – элек юҡ ине. Ишекте бер ир асты. Баш ҡағып иҫәнләштем.

– Бындағы... хозяйка ҡайҙа икән?

– Юҡ инде ул, гүрҙә... дүрт йыл булыр.

Һаубуллашып урамға сыҡтым. Баҫҡыстан төшөп барғанда, әлеге ир: “Әбейҙең кеме һеҙ?” – тип ҡысҡырып һораны. Өндәшмәнем.

Ленинград... Блокада... Сәйер ҡарсыҡ... Эх һин, һуғыш!



**Кәбир**
**АҠБАШ**

# ҺУҒЫШ ҠАТЫНДАРЫ

**ПОЭМА**

*Йәнә килдем, әсәй, ҡәбереңә,*
*Таңғы ысыҡ тама гөлдәрҙән.*
*Тупрағыңа күҙ йәштәре булып*
*Хәбәр яуа иҫкән елдәрҙән.*

*Ул хәбәрҙәр беҙҙе алып ҡайта*
*Үткән ғәрәсәтле йылдарға.*
*Ниндәй генә дауыл-ел ҡупһа ла,*
*Ил ҡанатлы ине һин барҙа.*

*Һинең һалҡын ҡәбер ташың һөйләй*
*Һуғыш барған ауыр дәүерҙе.*
*Яу ҡырынан килгән «ҡара ҡағыҙ»*
*Телеп үткән һинең бәғерҙе.*

*Баш һалдылар батыр ир-яугирҙар,*
*Йышайҙылар ҡанлы үлемдәр.*
*Ямғыр булып күҙ йәштәре яуҙы,*
*Зар иланы йәп-йәш килендәр.*

*Әсәй иламаны. Ҡиреһенсә,*
*Тешен ҡыҫып алға ынтылды.*

---

*Кәбир Аҡбаш (Кәбир Мөхәмәтшәрип улы Аҡбашев, 1932) Ғафури районының Яңы Зәйет ауылында тыуған. Билдәле драматург, шағир. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Стәрлетамаҡ төбәк яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе.*

*Халыҡ беҙҙең яҡта булыр, тине,*
*Еңмәй ташламабыҙ был юлды.*

*Хәтереңдәме, әсәй, һин ул саҡта*
*Бер етәксе инең ауылда?*
*Ана шул мал ҡоролоҡтар килеп,*
*Үлән көйҙө эҫе дауылда?*

*Ҡарыш буйлы иген һабаҡтары*
*Ҡатып ҡалды, йәнде әрнетеп.*
*Бар тәбиғәт һыуға һыуһаны ла*
*Ер сарсаны шифа-дым көтөп.*

*Хатта һауа гөлт ҡабыныр кеүек,*
*Сыңлап торҙо ҡоро рәшәләр.*
*Тәбиғәттең ҡырыҫлығын күреп*
*Һағайҙылар бөтә әсәләр.*

*Яҙға табан иһә аҙыҡ наҡыҫ,*
*Ат, һыйырҙар астар ҡурала.*
*Ә яҙына баҫыу, сәсеү көтә,*
*Елдәр олой буп-буш бурала.*

*Йыйылышта аҡһаҡ Абдал баҫып,*
*Ғәйепләне, әсәй, үҙеңде:*
*— Ҡоролоҡҡа һин ғәйепле,— тиеп, —*
*Яуап тот! — тип йыртты йөҙөңдө.*

*— Үҙем булһам ауыл башы, — тине, —*
*Төшмәҫ ине хатта күләгә.*
*Теге ваҡыт мине һайлаһағыҙ,*
*Ҡалмаҫ инек ошо бәләгә.*

*Йыйылышта ҡаты тауыш ҡупты,*
*Ҡемдер тағы һиңә йәбеште:*
*— Бөтә малдар ас торалар, — тиеп*
*Һиңә япты бөтә был эште.*

*Тәүәккәлләп тороп баҫтың да һин,*
*Таш ихтыяр ине йөҙөңдә:*
*— Ауылдаштар, табам, — тинең, —*
*Ныҡ торормон биргән һүҙемдә.*

*Булған һалам һыйырҙарға ҡала,*
*Ә аттарҙы тауға ҡыуабыҙ!*
*— Был фажиғә! — тине Абдал, сәсәп,—*
*Аттарҙы ла асҡа быуабыҙ?*

*Ә һин, әсәй, ныҡлы дауам иттең:*
*— Үҙ өҫтөмә алам был эште,*
*Йылалыҡта аттар иҫән ҡалыр, —*
*Тигәс кенә, халыҡ килеште.*

*Шул урманда лесник йорто бар бит,*
*Йәшәү, тороу яғын ҡарарбыҙ.*
*Ә аттарға сыбыҡ, ылыҫтарҙан*
*Ышыҡ ҡуралары ҡорорбоҙ.*

*Йыла ҡайырыһы менән һыйлап,*
*Яҙға саҡлы аттар һаҡланыр.*
*Сәсеүҙе лә гөрләп үткәрербеҙ,*
*Бөтә кеше быға һоҡланыр.*

*— Ә һыйырҙар нишләр? — тине Абдал. —*
*Нисек йән аҫырар фермала?*
*Һыйыр ҡоро һалам ашамай бит,*
*Үлемдәрҙән башҡа ни ҡала?*

*— Һыйыр һөтөн, һауып әсеткәс тә,*
*Һаламына бутап бирергә.*
*Һаукәшкәйҙәр уны ашар, — тинең, —*
*Мал хәстәрен шулай күрергә.*

*Абдал йәнә төкөрөк сәсеп сыҡты:*
*— Белмәй һөйләй һүҙҙең самаһын!*
*Моғайын, һин — халыҡ дошманылыр,*
*Ҙур еңеүгә аяҡ салаһың!*

*Әммә халыҡ уны тыңламаны,*
*Еңел һулап кеше таралды.*
*Һин дә, әсәй, шат йылмайҙың, сөнки*
*Һинең һүҙҙән өмөт яралды.*

*Тик юғалтыу көтмәгәндә булды:*
*Ҡаза йөрөй, яуыз, һуғылып.*

*Тауҙы аша сыҡҡан саҡта бер ат*
*Һәләк булды тайып йығылып.*

*Абдал тағы ялыу яҙып бирҙе,*
*Төшөрәм, тип, закон юлына.*
*Шунан улар алып китте һине,*
*Быҙау һалып, төндә, ҡулыңа.*

*Беләм, тегендә лә ныҡлы булдың,*
*Бирешмәнең яуыз ҡысыуға.*
*Ә аттарың яҙын кешнәп ҡайтты*
*Сәсең өҫтәренә баҫыуға.*

*Аттар ҡайтҡас, һине сығарҙылар,*
*Ауыл алды һине һоратып.*
*Халыҡ һине тағы һайлап ҡуйҙы,*
*Оло хөрмәт менән яратып.*

***

*Ауыр юлдар аша еңеү килде,*
*Өмөт ҡояшҡайы батманы.*
*Иҫән ҡалған ирҙәр яуҙан ҡайтты,*
*Тик атайым ғына ҡайтманы.*

*Әсәкәйем, бөтә ир-ат өсөн,*
*Атай өсөн дә һин егелдең.*
*Биш балаңды ҡарап үҫтергәндә*
*Бик йыш ҡына йәшкә түгелдең.*

*Һиндәйҙәр күп булды илебеҙҙә,*
*Һеҙҙең намыҫ — иҫән ауылдар.*
*Сабыйҙарҙы йылы ҡурсалағас,*
*Урап үтте яуыз дауылдар.*

*Һыйыр егеп һабан һөрҙөгөҙ һеҙ,*
*Тимерлектә тимер бөктөгөҙ.*
*Боҙло йылғаларҙа һал ағыҙып,*
*Үлем ташҡындарын үттегеҙ.*

***

*Ҡалаларҙа ла дан ҡатын-ҡыҙҙар*
*Ирҙәр йөгөн алды иңенә.*
*Бөтә көс-көсәтен бирҙе улар,*
*Еңеү хаҡына, тип иленә.*

*Улар булды оҫта токарҙар ҙа,*
*Мартендарҙа тороп яндылар.*
*Ә таңына ғаиләгә ҡайтып,*
*Балаларға әсә булдылар.*

*Ҡала ҡатындары шпал һалып,*
*Рельс һуҙҙы тимер юлдарға.*
*Әммә һис тә бәлә һалманылар,*
*Ҡан бәрһә лә нескә ҡулдарға.*

*Шахталарға төшөп күмер сапты,*
*Онноторлоҡ түгел ғүмергә!*
*Ҡышҡы ер өҫтөнә бирә һалды*
*Йән йылыһын ҡушып күмергә.*

*Һөйөүгә лә тоғро ҡалды улар,*
*Юғалтыуҙар әрнеү һалһа ла.*
*Ҡорал эшләү цехын ташламаны,*
*Йоҡоһоҙҙан быуын талһа ла.*

*Еңеүҙәргә табан юл башланды*
*Тол ҡатындар биргән ҡоралдан.*
*Ҡатын-ҡыҙҙар ярҙам итә ҡалһа,*
*Ғүмер баҡый дошман ҡыйралған.*

*Хатта тышта һалҡын сағында ла*
*Өсәр норма биреп торҙолар.*
*Ә бәғзеләр, билен биштән быуып,*
*Нефть тапты, һалып торбалар.*

*Бер үк ҡайғы-хәсрәт, тол-ҡалыуҙар*
*Ҡисерһә лә ҡала ҡатыны,*
*Бөтә ауырлыҡты еңеп сығып,*
*Яҡты йондоҙ булып балҡыны.*

***

*Әсәй!*
*Ишетәһеңме, ана, һандуғасҡай*
*Дандар йырлай баҫып талыңа.*
*Ул да бөтәһен дә белеп тора,*
*Шуға килгән һинең яныңа.*

*Мин аңлайым ул ҡошсоҡтоң телен:*
*Һеҙҙе данлай моңло йырында.*

*Бар тәбиғәт һеҙҙе онотмаған,*
*Һеҙҙең батырлыҡтар турында.*

*Тракторсы булдың, комбайнер ҙа,*
*Бар ҙа ҡалды төшкә инеүгә.*
*Ашлыҡтарҙың һәр бөртөгөн йыйып*
*Оҙаттың һин бөйөк Еңеүгә.*

*Һин ебәргән икмәк ҡеүәт бирҙе,*
*Шөһрәт бирҙе изге был ергә.*
*Иҫтәлеге итеп тыуған яҡтан*
*Сәләм алып барҙы яугирға.*

*— Ҡайтҡас һәйкәл ҡуям! — тине яугир, —*
*Тылдың бөтә ҡатын-ҡыҙына!*
*Ризыҡ тәмләп, һалдат дошман ҡырҙы,*
*Күкрәп барҙы Еңеү яҙына.*

*Әммә һаман һеҙгә һәйкәлдәр юҡ,*
*Ҡуйылмаған шөһрәт таш һындар.*
*Һеҙ булдығыҙ ир ҙә, әсәләр ҙә,*
*Еңә алманы һеҙҙе дошмандар.*

*Һуғыш ҡатындары, баш эйәбеҙ,*
*Утлы яуҙы еңгән әсәгә.*
*Әммә тыныс ҡына китәһегеҙ,*
*Был ҡаберҙәр хәҙер нисәмә!*

*Яугир ҡатындары, йән аямай,*
*Бөтөнлөктө һаҡлап ҡалдығыҙ.*
*Бөтәбеҙгә килһен бер Еңеү, тип*
*Һыуға батып, утта яндығыҙ.*

*Фани донъяларҙа һәйкәлдәр күп,*
*Түбәләре тейә күктәргә!*
*Кешеләргә хеҙмәт иткәндәргә*
*Изге һындар тора күптәргә.*

***

*Бер мәл Мәскәү илгә күрһәтергә*
*Әсирҙәрҙе ҡыуып килтерҙе.*
*Моғайын, шул фашистарҙан берәү*
*Атайымды атып үлтерҙе.*

*Ят әсирҙәр ауыл әпәкәйен*
*Ашап сыҡты ошо урамға.*
*Ышандығыҙ, ошонан һуң фашист*
*Башҡа тотонмаҫ, тип, ҡоралға.*

*Тотонмаҫтар, ошо ҡатындарға*
*Һәйкәл торһа мәркәз түрендә.*
*Шунһыҙ икмәк, ҡорал, ҙур Еңеү ҙә*
*Булмаясаҡ илем күгендә.*

*Пушкин үҙенә шиғри һәйкәл ҡуйған,*
*Мин дә ҡоям һеҙгә, ҡатындар.*
*Һуғыш дәһшәттәрен һеҙ еңдегеҙ,*
*Шуға ла һеҙ миңә яҡындар!*

*Һәйкәл ҡуям ғәзиз ҡатындарға*
*Иман юлдарына заң һалып.*
*Ҡәберҙәргә сәскә алып киләм,*
*Һеҙҙең батырлыҡҡа таң ҡалып.*

*Һуғыш ҡатындары, набат һуғам,*
*Һеҙҙең рухты нисек һаҡларға?*
*Ҡиблаһыҙ ҙа ошо донъяларҙа*
*Нисек кенә һеҙҙе яҡларға?!*

*Шиғыр менән һәйкәл ҡуям һеҙгә,*
*Сағылдырып йөрәк һулҡыуын.*
*Бөтә донъя белһен батырлыҡта*
*Һуғыш ҡатындары балҡыуын!*

*Талдарыңа, әсәй, башым эйәм:*
*Һеҙҙең дандың юҡтыр тиңдәше.*
*Ә талдарҙан тама әллә ысыҡ,*
*Әллә инде әсе күҙ йәше...*



**Миңлегөл**
**ХИСАМОВА**

# «ӘСӘҢ КҮҢЕЛЕЛӘЙ САФ, ИЗГЕ...»

## *Нимә күрҙең?*

*Нимә күрҙең яҡты был донъяла?*
*Борсолоуҙар менән хафалар*
*Оҙата барыр һине аҙаҡҡаса,*
*Артыҡҡаса йәнде яфалар.*

*Нимә белдең яҡты был донъяла?*
*Мөхәббәтем менән нәфрәтем*
*Гөлдәй күңелемде вайран итте,*
*Тынғы табырмы һуң ғәфләтем?!*

*Нимә ҡалдыраһың был донъяла?*
*Күҙ йәштәре һеңгән дәфтәрем.*
*Кемгә хәжәт аһың тамған яҙма,*
*Ҡалһа ине башҡа хәстәрең.*

*Ниндәй васыятҡа тоғро һуң?*
*Ныҡлы булһын илең нигеҙе.*
*Тик телеңдән яҙма, телең — иман,*
*Ошо ике ҡеүәт — игеҙҙәр.*

*Үкенесең ҡалдымы һуң әле?*
*Хөрмәтем аҙ булды әсәмә.*

---

*Миңлегөл Хисамова (1948) Көйөргәҙе районының Ялсыҡай ауылында тыуған. БДУ-ның филология факультетын тамамлай. Оҙаҡ йылдар инде Өфөләге 28-се интернат-мәктәптә тәрбиәсе булып эшләй. Яҙыусылар союзы ағзаһы, бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы.*

*Һуңғы һулышҡаса йәнгә йылар*
*Йыуаныс юҡ — күпме йәшәмә.*

## *Донъя хәлен уйлап...*

*Сал ҡышыма яҡынайған һайын,*
*Һүрәнләнә айым.*
*Юғалтмаҫҡа хәтирәләр тауын*
*Табырмын, тим, яйын.*

*Айым ҡарап тора йәлләгәндәй:*
*Эй бисара кеше,*
*Донъя хәлен уйлап яфалана,*
*Ырамай бит эше.*

*Зәһәр ҡышҡа яҡынайған һайын,*
*Талымлана күңел.*
*Йырланаһы йырҙар ымһындыра,*
*Юлдар түгел еңел.*

*Буран баҫҡан тупһа шығырлаһа,*
*Донъя шауы — ҡойон,*
*Ябыҡ ишек ҡапыл асылыр ҙа*
*Көмөш ҡарҙар ҡойор.*

*Ап-аҡ ҡышҡа инәм, аҡ ҡышыма,*
*Донъя хәлен уйлап,*
*Ҡарҙар еләбер ни булмағандай,*
*Өйөрөлә уйнап...*

***

*Юғалтыуҙар көс һәм ныҡлыҡ бирҙе,*
*Асылып китте яҡты офоҡтар,*
*Түңкәрелгән күгем йәнә ҡалҡты,*
*Ошо мәлдә йәйғор тотоп ҡал.*

*Юғалтыуҙар юғалтмаҫҡа мине*
*Аҡлыҡ төҫөн, тормош бәҫтәрен*
*Өйрәттеләр: сәсәп йығылмаҫҡа,*
*Яндырмаҫҡа моңом дәфтәрен...*

## *Төркиәлә*

*Илеңә юл төштө, төрки туған,*
*Йәйҙең зөмрәт йәшел айында,*
*Минең илдән суҡ-суҡ сәләм менән*
*Оҙатып ҡалды ап-аҡ ҡайындар.*

*Минең илем булыр — йөҙөк ҡашы,*
*Үпкәләмә, төрки туғаным.*
*Һинең илеңдә һис яманлау юҡ,*
*Йән түрендә моңом тулғайны.*

*Һинең илеңдә мин тәүгә күрәм,*
*Әсир итте диңгеҙ ҡосағы!*
*Донъя көтөү — бар ерҙә лә ырыҫ,*
*Дөрләткәнһең бында усағың.*

*Ырыҫ һәм ҡот — ерең сәңгелдәге,*
*Сәңгелдәгең моңо — тынмаҫ йыр.*
*Нур һәм ҡояш — илдең балҡыштары,*
*Быңдай төҫтәр бер саҡ уңмаҫтыр.*

## Урта диңгеҙ

*Урта диңгеҙ, шаулы тулҡындарың*
*Саҡырыр ҙа йөрөр яныңа,*
*Хәтер сәхифәһен барлағанда,*
*Мин эргәңә ҡайттым яңынан.*

*Ҡояш ялҡынына йөҙҙө ҡуйып,*
*Тулҡыныңда яттым наҙланып.*
*Күк ожмахы диңгеҙ йәнендәме,*
*Ошо йәннәт миңә яҙғандыр.*

*Көн эҫеһе йөрәк ҡайнарлығын*
*Алмаштыра алмаҫ һис ҡасан,*
*Тәндәр янһа, әйҙә, янһын ғына,*
*Йән һыҙлауын әле мин баҫам.*

*Ҡабырсыҡтар таптым ярҙарыңда,*
*Ынйы тапҡан кеүек йырҙарҙан.*
*Йөрәгемдә һулҡылдатып торор,*
*Күңелдәге саф моң ҡур һалһа.*

*Ҡабырсыҡта ятҡан ҡуҫҡар кеүек,*
*Йомолдом мин тағы үҙемә.*
*Урта диңгеҙ, шаштыр тулҡыныңды,*
*Ишен тапҡан йәнем үҙеңдә...*

## Аяҡ баҫһам...

*Алыҫ юлдарымдан ҡайтҡан саҡта,*
*Именлектәр юрап илемә,*
*Күңел байрамдары кисерәм мин,*
*Аяҡ баҫһам тыуған еремә.*

*Сит яҡтарҙа ғына беленгәндәй*
*Үҙ ереңдең абруй, ҡәҙере.*
*Һағыштарың тула күкрәгеңә,*
*Онотола ваҡлыҡ, йәбере.*

*Ят донъяны күпме маҡтаһаң да,*
*Хозурланып гүзәл йәменә;*
*Тыуған тупраҡ көтөр моңһоуланып,*
*Сарсар йәнең шишмә тәменә.*

*Шишмәләрҙә һыуһын ҡандырғас та*
*Мең рәхмәтең телең осонда,*
*Ошо ләззәттәрҙе тойған өсөн*
*Артыҡ маһайма ла осонма.*

*Тыуған тупраҡ бит ул, тыуған ерең,*
*Әсәң күңелеләй саф, изге.*
*Шуға күрә йөрәк түрендә ул,*
*Гел юҡһынып ҡайтам мин һеҙҙе!*

## Серем бар ине...

*Шау сәскәнән генә ебәк күлдәк,*
*Бик яратып уны тектерҙем.*
*Һин һайлаған төҫтән күҙ ҡамаша,*
*Был байрамды һөйөнөп еткерҙем.*

*Хәтерләтте микән йәшлек мәлен,*
*Ҡыр-яландар төҫөн, нағышын,*
*Ошо төҫтө кейгәнгәме әллә, —*
*Артып барған кеҫек һағышың.*

*Һағышланма, йәрем, тик бер йәйҙе*
*Ҡайтарып та булһа әгәр ҙә,*
*Гөл-сәскәле аҫыл тыуған яҡты*
*Бүләк итер инем һин-йәргә.*

*Тулҡынланып көттөм был байрамды,*
*Матур күлдәгең дә килеште,*
*Татлы шампан ташты гәлсәрҙәрҙә,*
*Кем күтәрһен беҙҙең өлөштө?!*

*Уртаҡ байрам, уртаҡ хәстәрҙәр бар*
*Һинең менән минең булмышҡа,*
*Әйтер һүҙҙәрем дә тел осонда,*
*Күҙҙәремә йәштәр тулышты.*

*Әйтер һүҙҙәр әйтелмәйсә ҡалды...*
*Һинең өсөн серем бар ине,*
*Аңларһың да, йәнең тынысланыр,*
*Көтә беҙҙе ике яр инде...*

## Ғашиҡтар теләге

*Ожмах ҡына торғаны бер*
*Тирә-яҡ әйләнәмдә,*
*Һиңә һөйөү-наҙҙарым бар*
*Сәскәләр бәйләмендә.*

*Һиңә бүләк итер инем*
*Тотош ошо болондо.*
*Гел ҡояшлы итер инем*
*Ҡар-ямғырлы юлыңды.*

*Ҡайындарҙың елбер-елбер*
*Ебәк япрағы кеүек,*
*Һинең өсөн тыуҙыр инем*
*Ҡояш йөҙөндә көйөп.*

*Һин ҡайта тип, ишегемде*
*Елдәрҙән һаҡлар инем,*
*Ауыр һүҙҙәр ишеттермәй,*
*Яттарҙан яҡлар инем.*

*Ҡышҡы әсе буранадарҙа*
*Тыным менән йылытып,*
*Һиңә ҡаршы сығыр инем,*
*Бар донъяны онотоп.*
*Әгәр мине онотмаһаң...*

## Өс ҡатлы алҡа

*Өс ҡыҙыл ҡаш алҡаларҙа,*
*Бүләгең шундай матур!*
*Ни тип әйтергә лә белмәй,*
*Торҙом да ҡалдым ҡатып.*

*Наҙлы хистәреңде, бәлки,*
*Шулай белгерткәнһеңдер,*
*Ҡайнар тойғоларың бикләп*
*Йәндә йөрөткәнһеңдер.*

*Тик мин башҡаныҡы инем,*
*Йөрәгем тоғро йәргә,*

*Тормош даръяһына сыҡтыҡ*
*Бергә янып көйөргә.*

*Өс ҡыҙыл ҡаш — өс сер булып*
*Ҡүмелеп ҡалды йәндә,*
*Йәшлек үҙе — һағышлы моң,*
*Бәхетең тик тиңеңдә.*

## *Һине хәтерләтте...*

*Аҡ бурандар һине хәтерләтте...*
*Уйҙарымдың көмөш сылбырын*
*Елберләтеп, ҡарҙар шығырлатып,*
*Тыуған яҡҡа елә был һыным.*

*Йәшлектәге кеүек һин үҙең дә,*
*Үҙгәрмәгәнһеңдер кеүек һин,*
*Хәтереңә аҡ бәҫ һырығандыр,*
*Ҡар-йондоҙға инде мин дә тиң.*

*Эй бер ҡатлы күңел сафлыҡтары!*
*Алдана бит һаман, алдана.*
*Белмәй микән: һөйөү мәкер менән*
*Осраша ла төнгә ялғана.*

*Оноттора алмаҫ ҡырыҫ ҡыштар,*
*Осормон мин һиңә йондоҙҙай,*
*Яҡтыртырмын күкһел күктәреңде,*
*Һағышлымын... Йәнә йән һыҙлай.*

*Аҡ бурандар һине хәтерләтте...*
*Уйҙарымдың көмөш сылбырын*
*Елберләтеп елдәр осорҙо ла,*
*Бурандарға һеңде был һыным.*

## *Ишетмәһә ишетмәҫтәр...*

*Бер кемде лә яҡын юлатманым*
*Күңелемә — яңғыҙ булдым.*
*Өйөрмәләр килтереп бәргәндә лә,*
*Йәр менән дә яңғыҙ туңдым.*

*Ишетмәһә ишетмәҫтәр,*
*Яңғыҙ йырлап барҙым юлдан,*
*Ауаздар юҡ, ҡайтауаз юҡ —*
*Әллә уңам, әллә туңам.*

Күңелдәрҙең йыуанысын
Яҙғы моңдар уятҡанда,
Тәбиғәт — иш, тәбиғәт — ҡуш,
Илһам тыуа ҡояштан да.

Йәберҙәрҙән, арыуҙарҙан
Үләндәргә сумып ятам,
Тыңлап ятам йылға шауын,
Йылғаларҙан йырҙар отам.

Ишетмәһә ишетмәҫтәр,
Ни хәл тыҙмаҡ һағыштарға,
Әлеге мәл — мөкиббән саҡ
Ел биҙәге — нағыштарға.

Тик күңелем барыбер яңғыҙ,
Яңғыҙлығым яңғыҙ һынә,
Шәмсыраҡтай янып бөтәм,
Сабыр итәм, йәнем түҙә.

## Һағыныу көнө

Ал таң ҡунды керпек остарыма,
Гөлтләп китте күҙем алдары.
Төн шәүләһе киткәс күҙ алдынан,
Йәшәү ғәме йәнә ялманы.

Аһ, был көнөм, моңло йырҙай яҡты,
Һине һағыныу көнө, йәнгенәм.
Күмерләнеп, көйөп бөткәндә лә,
Иҫтә ҡалыр ошо мәлгенәм.

Аҡ ҡар ҡунды керпек остарыма,
Күҙ алдарым хәҙер буранлы,
Аҡ бурандар — һөйөү миҙгелдәре,
Юлдар гиҙеп, моңға урандым.

Үҙем юлда, ҡар-биҙәктәр ҡулда,
Йондоҙҙарға аша күңелем.
Һине һағынып, моңом бөрөләнә,
Йондоҙ яуа, ынйы түгелеп,
Йондоҙ яуа, ынйы түгелеп...

## Ҡайын туҙылай...

*Ҡайын туҙылай елберләп,*
*Елдәрҙә туҙҙым инде,*
*Яҙҙарҙа тынғы бирмәгән*
*Ҡуҙҙарым һүнде инде.*

*Бер кемгә лә буйһонмаған*
*Елдәргә рәхәтме ни?*
*Ҡайҙарҙа ятып илайҙыр,*
*Тын ятыу — бәхетме ни?!*

*Тегеләй ҙә былай гиҙә*
*Тыуған төйәген ташлап,*
*Әйләнеп ҡайта алырмы,*
*Кемдәр көтөр алҡышлап?!*

*Ҡайын туҙылай елберләп*
*Юлымдан китеп барам.*
*Күңелемдә әрней һаман*
*Яҙҙарым һалған яра.*

## Тынысланыр йәнең...

*Ниңә генә шатлыҡ-һөйөнөстәр*
*Көйөнөстәр менән йәнәшә*
*Йөрөй икән һәр саҡ эргәбеҙҙән,*
*Аңлап булмаҫ, хатта йөҙ йәшә.*

*Тормош шаулай шулай үҙ көйөнә,*
*Торғаны сер — донъя айышы.*
*Ҡөҙрәтенән тетрәп, илап-көлөп*
*Оҙатабыҙ ҡояш байышын.*

*Тормош өйөрмәһе хәтер кеүек,*
*Йүгерәбеҙ сәсәп, янабыҙ.*
*Һуңғы төйәгебеҙ — тыуған ергә*
*Күҙ йәштәре булып тамабыҙ.*

*Ғәзиздәрҙән-ғәзиз ятҡан ерең...*
*Тамырланһаҡ тыуған тупраҡта,*
*Елгә елберләгән сәскәләрҙәй,*
*Тынысланыр йәнебеҙ шул саҡта.*



Рәмил
ЙӘНБӘК

# «БИК ИНАНҒЫМ КИЛӘ...»

## *Бәхетлерәк булдыҡ*

*Беҙ — һуғыштан аҙаҡ тыуған быуын,*
*Күпкә бәхетлерәк, әлбиттә.*
*Әммә еле тейҙе беҙҙәргә лә,*
*Һағыш баҫа шуға, йәй етһә.*

*Ярты быуат тула вафатына*
*Атайымдың — яугир һалдаттың.*
*Һәләк булды алған яраларҙан, —*
*Яҙмыш уны шулай алдатты.*

*Яуҙан иҫән ҡайтып, ғүмер бирҙе*
*Беҙгә — яңы, йәп-йәш тоҡомға.*
*Күпме ир-азамат, бәхет күрмәй,*
*Һуғыш ялҡынынан йотолған.*

*Бөйөк Еңеү көнө ана шуға*
*Берсә — шатлыҡ, берсә — күҙ йәше.*
*Халҡым өсөн тоям ғорурлыҡ та,*
*Ә дошманға таша ут-йәшен.*

*Беҙ — һуғыштан аҙаҡ үҫкән быуын,*
*Бәхетлерәк булдыҡ, әлбиттә.*
*Һуғыш уты өттө беҙҙәрҙе лә —*
*Шуға моңһоу, йәмле йәй етһә.*

*Рәмил Йәнбәк (1952) — билдәле шағир, Яҙыусылар союзы ағзаһы, ете шиғри йыйынтыҡ авторы. Зәйнәб Биишева һәм Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премиялар лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

***

*Әле кисә йәп-йәш инем,*
*Ҡартайҙым ҡапыл ғына.*
*Һәр кем кисә дуҫ булғайны,*
*Бөгөн яңғыҙым бына.*

*Күңел йәш ҡала, тиҙәр ҙә —*
*Минеке олоғайҙы.*
*Ҡыштан йәйгәсә көн күрәм*
*Айырмай көҙҙө, яҙҙы.*

*Яңғыҙлыҡтың ҡоршауынан*
*Өҙөлә эс-бауырым.*
*Яуапһыҙ ғишыҡ — бер ғазап,*
*Һөйөлмәү — иң ауыры.*

*Бәлйерәнем көтмәгәндә,*
*Асылып зиһен күҙем:*
*Йәнем йөҙгән хыялдарҙа,*
*Ерҙә булғанмын үҙем.*

*Ҡарт күңел менән йәшәргә*
*Хоҙайым бирһен түҙем.*

## *Әҙермен...*

*Аяҡтарым өйөгөҙгә тартты,*
*Аҡыл борҙо кире шунда уҡ:*
*Унда мине көтмәй һис берәү ҙә,*
*Һин үҙең дә күптән унда юҡ.*

*Төҫө уңып, ҡапҡаң ҡаҡшаһа ла,*
*Ул бит миңә бик-бик ҡәҙерле.*
*Һине көтөп ҡапҡа һаҡлашырға*
*Мин әле лә, гүйә, әҙермен.*

*Ел иҫкәнгә алды шыбырлашып*
*Ҡар тирәктең ялбыр ялдары.*
*Пәрҙә һирпеп әллә һин ҡараның,*
*Әллә фантазиям алданы.*

*Юҡ бер ни ҙә.*
*Ауыл йоҡлай тып-тын.*
*Айныҡ көйө иҫерек мин генә.*
*Йөрәгемә ғәзиз ауылҡайым,*
*Йәшлек йылдар*
*Һәм дә һин генә.*

*Иртә менән тағы йырактарға*
*Алып китер яҙмыш елдәре.*
*Шуны беләм:*
*Кабат таба алмам*
*Саф йөрәкте, иркәм, һиндәге.*

***

*Тик уҙғаны менән йәшәй кеше,*
*Бөгөнгөһө уның — мәл генә.*
*Тап әлеге секунд! Бөттө-китте!*
*Үткән мәлдәр инде йәл генә.*

*Киләсәктә кеше йәшәй белмәй,*
*Тик һиҙемләй нимә көткәнен.*
*Был һиҙемләү аҙак хәтерендә*
*Инде кала булып үткәне.*

*Өс арауык — бәндә ғүмерҙәре:*
*Бөгөнгөһө тик күҙ йомғансы;*
*Киләсәге — томан эстәрендә:*
*Мираж ғына, гүйә, йомаксы.*

*Ә үткәне уның — тотош дәүер,*
*Тормай тик йәшәлгән йылдарҙан.*
*Атай менән әсәй хәтирәһе,*
*Ил хәтере бергә сырмалған.*

*Кешелектең, бөтә Ер шарының*
*Хәтерҙәре — берәү канында.*
*Тәнендәге кескәй бер күҙәнәк*
*Иҫләйҙер, тим, Йыһан таңын да.*

*Үткәндәрҙән кеше һабак ала,*
*Үткәндәрҙә калып юғала.*
*Киләсәкке көндәр ошо мәлдә*
*Кояш балкышында нурлана.*

## Яңы бура

*Һәр көн төшкә яңы бура керә,*
*Яңы бура, имеш, — үлемгә.*
*Былдай юрау, беләм, бик боронғо:*
*Мине лә бит бер сак күмерҙәр.*

*Әллә Хоҙай әшкәртәме минең*
*Бер төпкөлдә йәшәү теләген;*
*Ел-дауылдан касып, имештәрҙән,*
*Тыныс ғүмер һөргө килгәнен;*

*Телевизор күрмәй, гәзит тотмай,*
*Тәбиғәттең булып балаһы;*
*Яңғыҙ бүре төҫлө олой-шыңшый*
*Ҡарурманда кәлеп һалаһын.*

*Һәм, әлбиттә, йәшел сиҙәм ерҙә*
*Өр-яңынан ҡороп йорт-ҡура,*
*Ҡабат баштан тормош башларғамы*
*Ошо төшөм мине саҡыра.*

*Иң уңған һәм сибәр һауынсының*
*Сәстәренә бәйләп сәсемде,*
*Шыҡһыҙ донъям, бәлки, ҡотайтырмын*
*Һәм һиллеккә бер саҡ йәлсермен.*

*Өй тултырып бала-саға гөрләр,*
*Мал-тыуарым мөңрәр бурамда.*
*Күршеләрем ихлас, алсаҡ булыр,*
*Ярҙамсыл һәм эшкә уңғандар.*

*Аҡ толпарым кешнәп ҡаршы алыр*
*Ялын һыйпап, һоло биргәндә.*
*Ишек асыҡ торор ҡунаҡтарға*
*Һәм дә саҡырылмай килгәнгә.*

*Утлы һыуҙар күптән онотолор,*
*Мин ижаулап ҡымыҙ эсермен.*
*Юҡҡа ҡыҙмам ҡапыл.*
*Хөрмәтләрмен*
*Һәм олоһон, һәм дә кесеһен.*

*Ошо минән аныҡ яуап булыр*
*Айыҡ тормош өсөн өндәүгә;*
*Демографик хәлде яҡшыртыуға,*
*Башҡорт халҡы тиҙ үк бөтмәүгә.*

*Имән ҡойма тотҡан ихатамдың*
*Төньяҡтағы ташлы тышында,*
*Кәзә баҡырғандай тауыш итеп,*
*Пегас атым йөрөр тышауҙа.*

*...Һәр көн төштә яңы бура күрәм...*

***

*Әрепләштем әле үҙем менән —*
*Холоҡһоҙланам никтер ошо ара:*
*Дорфа яуаплайым яҡындарға,*
*Тәҙрә төптәренә йыш барам.*

*Ситлектәге меҫкен арыҫландай,*
*Тар бүлмәлә дала көҫәйем.*
*Иркенлеге иҫкә төшмәҫме тип,*
*Кипкән әрем алып еҫкәйем.*

*Үҙебеҙҙе, ташбаҡалар төҫлө,*
*Таш панцирға бикләп ҡуйғастын,*
*Донъя менән ара өҙмәҫ өсөн*
*Телевизорға күҙҙәр уйғастын;*

*Бесән сапмай, утын ташымағас,*
*Ҡарҙар көрәп, һуҡмаҡ һалмағас;*
*Мунса яҡҡан еҫте еҫкәмәгәс,*
*Беҙ, әйтерһең, — ҡатҡан ҡыу ағас.*

*Ашламалар, хатта тиреҫ бутап,*
*Күнәк-мискә һыуҙар һипһәң дә,*
*Беҙ ҡабаттан япраҡ яра алмабыҙ:*
*Тамырҙар бит беҙҙең кипкәндәр.*

*Ауылдарҙан китеп ҡалаларға,*
*Ғүмер буйы ауыл һағынып*
*Тормош иткәндәргә яҙмайҙыр ул,*
*Ыжғыр елдә ҡанат ҡағынып,*

*Күк яуларға дала киңлегендә —*
*Тарпан ялдарына һарығып.*
*Ҡала беҙгә йәшәү зарығып,*
*Тар бүлмәлә дала һағынып.*

## *Беҙҙең әсәйҙәр*

*Юҡ, юҡ! Кеше булып йәшәмәне,*
*Ҡол булдылар беҙҙең әсәйҙәр.*
*Тыйнаҡ ҡына көлөп, тыйнаҡ булып*
*Аңыбыҙҙа һаман йәшәйҙәр.*

*Улар һәр саҡ көтөп көн күрҙеләр,*
*Башта — ирен, аҙаҡ — улдарын.*
*Ас көйөнсә ашлыҡ урҙы улар —*
*Замананың зарһыҙ ҡолдары.*

*Балаларын аҫҡа ҡаҡлап, улар*
*Үҙ һыйырын екте һабанға.*
*Ятып ҡалған башаҡ һуҡҡан өсөн*
*Үҙҙәре, их, ҡалды яманға.*

*Бер ус ашлыҡ өсөн уполномуш*
*Ун ҡатынды ҡуйған бикләтеп —*
*Мәңге ҡурҡыу һалып йөрәктәргә,*
*Күңелдәрен мәңге миктәтеп.*

Шул замандан ҡалған хәүеф, ҡурҡыу
Әсәм зиһененән китмәне.
Шуғалыр ҙа һис бер зарланманы,
Түрә һүҙен инҡар итмәне.

Тамам йығылғанса донъя көттө,
Көңгөр-ҡаңғыр итеп, үҙенсә.
Бөгөнгәсә баш эйәмен уға,
Унда булған рухи түҙемгә.

Юҡ, юҡ! Бер ҡасан да күрмәнеләр
Донъя рәхәтлеген әсәйҙәр.
Шундай сабыр, тыйнаҡ, изге булып
Беҙҙең күңелдәрҙә йәшәйҙәр
Заманабыҙ ҡоло — әсәйҙәр...

## Бик инанғым килә

Йыһандарҙан ҡалҡып моң ағыла,
Нур сәселә Ерҙең өҫтөнә.
Бик инанғым килә Илаһ барға
Һәм Йыһандың серле көсөнә.
Бик инанғым — Илаһ көсөнә.

Ер — Йыһандың бер балаһы ғына,
Балалары һанһыҙ, сикһеҙҙер.
Башҡаларға нисек?
Миңә ҡалһа, Еребеҙҙе никтер ек күрҙе.
Кешеләрме шуға еткерҙе?

Ғәрәсәттәр, ел-дауылдар ҡуба;
Йәйге менән бутап ҡышҡыны,
Африкала бурап ҡарҙар яуа,
Алма сәскә ата ҡыш көнө —
Ер ҙә күсәренән ысҡынып,

Йыһан буйлап сығып китмәҫ тимә
Бәндәләрен һибеп, сәскеләп.
Эй, Илаһым! Йолоп бәләләрҙән,
Ергә изгелектәр сәс кенә.
Зиһендәрҙе ал да сәнскеләп,

Гонаһтарын кисер кешеләрҙең:
Шулай итеп һин бит яралттың,
Яралттың да зәғиф бәндәләрҙе
Ер буйлатып һиптең, тараттың.
Ниңә беҙҙе зәғиф яраттың?!

*Бәндәләрең зәғиф күңелле шул,*
*Шуға Ер өҫтөндә ҡан ҡойош,*
*Ер-һыу бүлеү, алтын-байлыҡ бүлеү, —*
*Мәңге тынмаҫ, ахры, был һуғыш.*
*Ерҙә үсләшеү ҙә ҡон ҡуйыш.*

*Йыһандарҙан талғын моң таралһын,*
*Нур һибелһен Ерҙең өҫтөнә.*
*Бик ышанғым килә Йыһандарға,*
*Илаһи ҙа Хоҙай көсөнә.*
*Ерҙең беҙҙе тартыу көсөнә.*

***

*Йән арыған. Күңел тынып ҡалған.*
*Йөрәк кенә ҡаға — ул тынмай.*
*Берсә ҡыҫып ала ҡыпһыуырҙай,*
*Берсә сәнсә-сәнсә һулҡылдай.*

*Әй, йөрәгем, ваҡыт тымыҙырға*
*Илаҡ бала төҫлө хисеңде.*
*Кисерәһе инде кисерелде,*
*Кисер һыуҙар инде киселде.*

*Баш юғалтып утҡа ташланыуҙар*
*Хәҙер, йөрәк, беҙгә төҫ түгел.*
*Тыңлайыҡсы аҡыл һәм зиһенде,*
*Тәндә булһын һәр саҡ төҙ күңел!*

*Үҙғандарҙан ҡалған яраларың*
*Бөтәшмәҫ тә — яйлап уңалыр.*
*Уңалһа ла, беленеп йөй ҡалыр.*
*Һулҡылдауың, бәлки, шуғалыр.*

*Йән арыған. Күңел тынысланған.*
*Йөрәккенәм, әйҙә, һулҡылда.*
*Һине, ахры, мәңге көйләп булмаҫ*
*Яйлы көйгә, тыныс тулҡынға.*

## ***Яҙға үтенес***

*Яҙғы йырғанаҡ йырҙары*
*Күңелгә йәмдәр өҫтәй.*
*Йәмләнгән күңел, илереп,*
*Йәнә мөхәббәт көҫәй.*

*Тиле йөрәк әүәлгесә*
*Күкрәктән сыҡмаҡ итә.*
*Йә һикереп, йә тибешеп*
*Үҙ-үҙен һырлап бөтә.*

*Төçмө миңә, олатайға,*
*Шул хәлде тойоп йөрөү;*
*Эстә ялҡын дөрләгәндә,*
*Йәнәһе, ойоп йөрөү?..*

*Хатта дошман олатайға*
*Былдайҙы теләмәçһең.*
*Уға — ярай.*
*Ә үҙең һуң,*
*Йә, нисек дөрләмәçһең!*

*Тамсылар, ана, тупылдай*
*Тормошсан көйгә генә.*
*Дәртте баçып, ултырырға*
*Нисек һуң өйҙә генә...*

*Мин тейеш етди булырға,*
*Булырға хатта ҡырыç.*
*Эй, гүзәл яҙ! Эй, ярһыу яҙ!*
*Беҙҙәрҙе аяп аҙ ғына,*
*Тыныс яҙларға тырыш.*

## *Хәбәрһеҙ юғалған һалдатҡа*

*Эҙләнеләр һине — тапманылар.*
*Һин хәбәрһеҙ шулай юғалдың.*
*Баттың микән һаҙлыҡ сөңгөлөндә,*
*Әсирлеккә әллә юл алдың?*

*Документһыҙ-ниһеҙ яндырғандыр*
*Бухенвальдтың крематорийы.*
*Хыянатҡа әллә ымһындырҙы*
*Хуш еçле бер икмәк ҡырыйы?*

*Яуабынан ҡурҡып, бүтән атта*
*Сит тарафта тороп ҡалдыңмы?*
*Ҡағыҙҙарың менән намыçты ла*
*Уттар тамағына һалдыңмы?*

*Һин юҡ инде хәҙер:*
*Туғандарҙың*
*Ҡәберлегендә һин ятһаң да;*
*Ҡисерҙеләр, йән һәм тамаҡ өсөн*
*Хатта Ватаныңды һатһаң да.*

*Көтөп-көтөп һине — арынылар,*
*Хәҙер инде мәңге ҡайтмаçһың.*

*Яңылыш ҡайтып төшһәң, ҡаъырға ла*
*Таныш ҡапҡаларҙы тапмаҫһың.*

*Һине белгән йән дуҫтарың юҡтар,*
*Әҙ-мәҙ белгәндәре — китәләр.*
*Һуңъы фотоң серей иҫке өйҙә,*
*Унығын да инде һүтәләр.*

*Исемлектәрҙә һин хәҙер юҡһың,*
*Хәтерҙән дә төшөп ҡалырһың.*
*Үҙ бурысың ләкин үтәнең һин, —*
*Йәнкәйҙәрең иңрәп яҙылһын.*
*Һин хәбәрһеҙ һалдат түгел хәҙер —*
*Тарих хәтеренә яҙылдың.*

## Мин ышана инем…

*Мин ышана инем әүәл-әүәл,*
*Һин дә ышанъанһың мөкиббән:*
*Оло мөхәббәттең барлығына,*
*Ихлас һөйөү ерҙә мөмкингә.*

*Мин алданъан,*
*Һин дә алданъанһың*
*Ғишыҡ уттарында буш янып,*
*Мөхәббәттең сикһеҙ икәненә,*
*Саф, пак икәненә ышанып.*

*Бөгөн һинең һиҙгер ҡолағыңа*
*Ирендәрем буш һүҙ бышылдай.*
*Ышанмайһың,*
*Мин дә ышанмайым.*
*Ҡыланабыҙ ъына ысындай.*

*Һөйгәндәр бит һөйөү һүҙе әйтмәй,*
*Улар хатта белмәй һөйгәнен.*
*Улар белмәй ниңә шатланъанын,*
*Ниңә юҡ-бар өсөн көйгәнен.*

*Мин һөйөүһеҙ янып һүрелгәнмен,*
*Һин һүнгәнһең ялъан һөйөләп.*
*Һөйөп алданасаҡ, алдап һөйәсәктәр*
*Килә сәктең ъишыҡ яланында*
*Төркөм-төркөм тора өйөләп.*

## ЙӘШТӘР ТАУЫШЫ:
### *ни ишетелә, нисек ишетелә?*

Әҙәби тәнҡитсеме һин, ҡәҙимге уҡыусымы – барыбер ҙә кемдеңдер тәүге китабын ҡыҙыҡһынып та, өмөтләнеп тә, һағайып та ҡулыңа алаһың. Кем ул? Китап тиклем китап аша башҡаларға өндәшергә баҙнат иткәс, әйтергә теләгәне, моғайын да, күңеленә тынғылыҡ бирмәйҙер. Тик үҙенә тынғылыҡ эҙләп тотонамы ҡәләмгә, әллә бәндә яҙмыштары тип тә ихлас борсолоу бармы? Нисек кенә булмаһын, күңелен асып кешеләргә барыусының тәү ижад емешен иғтибарһыҙ ҡалдырыу – республикалағы төп әҙәби баҫма өсөн ниндәйҙер кимәлдә хилафлыҡ кеүек. Бындай осраҡта нисек тә булһа форсат табып, яйын сығарып, һүҙ – баһа еткереү бик кәрәк.

Күптәребеҙгә мәғлүм: ижад кешеһенең, айырыуса беренсе аҙымдар яһағанының тиреһе бик йоҡа – саҡ ҡына һаҡһыҙыраҡ ҡағылһаң да, йыртылырға, тишелергә тора.

Бөйөктәрҙән береү башлап яҙыусыларға: “Яҙмайынса йәшәй алаһығыҙ икән – яҙмағыҙ!” – тип тә кәңәш биргән береүен. Уҫал әйтелгән, әммә ҡолаҡ һалыу зыянға түгелдер һымаҡ. Ысынлап та, ижад – йәшәү рәүешеңә әйләнгәндә генә әҫәрҙәрең тейешле кимәлдә булыуы мөмкин. Ә урыҡһурыҡ яҙышыу, ижадты – илһам килгән мәл емеше тип кенә аңлау – төптө хата ул. Эдисондың: “Гений – 99 процент хеҙмәт һәм 1 процент талант”, – тип билдәләүендә тәрән мәғәнә бар. Һүҙ титаны Лев Толстой үҙенең эпопеяһын туғыҙ (!) тапҡыр күсереп яҙа. Ҡулдан! (Ә беҙҙең ҡайһы бер йәш ҡәләмдәштәр ҡулъяҙмаһын ҡабатлап уҡып та тормай баҫмаға килтерә!)

Әммә төп хикмәт шунда: әҫәр өҫтөндә тир һығырлыҡ эшләгән хәлдә лә һинең ижад емешеңдән тир еҫе аңҡырға тейеш түгел йәки киреһенсә, хушбуй еҫе генә бөркөлөп тормаһын. Йәғни урманды тасуирлайһың икән, уҡыусы үҙен урманда хис итһен, драматик күңел кисерештәрен һүрәтләгәндә йөрәге һулҡылдаһын.

Йәштәргә бөгөн әҫәрҙәрен үҙ мәлендә уҡыусыға еткерә алыу мөмкинлеге ҙур. Был йәһәттән бигерәк тә ваҡытлы баҫмаларҙың ишле булыуы ҡыуаныслы. Китабың уҡыусыға тиҙ арала етә алмаған хәлдә лә, үҙеңде таныта алаһың, тимәк. Матди ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, нәшриәт тә хөкүмәт ярҙамы менән, төрлө юлдарын табып, башҡорт китабын, әҙиптәр теләгәнсә үк булмаһа ла, сығара килә. Йәштәрҙе лә ҡыйырһытмаҫҡа тырыша. Элекке һәйбәт башланғыстарҙы (“Йәш көстәр” альманахы; “бер ҡыйыҡ аҫтында” 5-6 авторҙың 1-2-шәр табаҡ күләмендәге айырым китаптары; бер тышлыҡ эсендә 6-7 әҙиптең ижад емеше) Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәте бөгөн дә уңышлы дауам итә:

“Йәштәр тауышы” серияһын булдырҙы. Кәм тигәндә лә өс табаҡлыҡ күләмдәге был китаптарға формаһы, биҙәлеше, эшләнеше яғынан һүҙ тейҙерерлек түгел. Ә йөкмәткеләре инде, тәбиғи, – төрлөсә.

“Йәштәр тауышы” тип исемләнһә лә, авторҙарҙың йәш айырмалығы 18-ҙән 50-гә тиклем (күрәһең, был серияны ла кемдер бик “уңышлы” файҙалана. 50-гә яҡынлаған “йәш” авторҙы ғәйепләмәйем, ә шундай аҙымға этеүсе “яуаплы” түрәләргә дәғүә ҡуйып булыр ине). Ерлекле һөйләшеүҙе был серияла 2009 йылда нәшер ителгәндәрҙең иң йәшенән башлайыҡ.

**Урания ВАХИТОВА.**

***Алтын шөңгөр: шиғырҙар***

Автор Рәми Ғарипов исемендәге 1-се һанлы республика башҡорт гимназия-интернатында уҡып йөрөй. Ваҡытлы матбуғат баҫмаларында, әҙәби сараларҙа әүҙем ҡатнаша.

Ураниның ижадында, шиғырҙы шиғыр итеүсе образлылыҡҡа юлығып, ҡыуаныслы тойғолар кисерҙем. Бына ябай ғына күренеште тасуирлаған “Апайыма” шиғыры. Апаһының яратып, тәүләп еләк тәмләтеүенә яуап итеп, аҙағыраҡ үҙе лә устарына ҡыҫыуҙан иҙелеп бөткән еләк һуҙыуы хәтерҙә ҡала. Иҙелгән еләк – баланың ихласлығын, изгелекте аңлауын, рәхмәтле була белеүен күрһәтеүсе уңышлы деталь ул.

Йәш булыуына ҡарамаҫтан, Уранияла уйсанлыҡ бар. Фәлсәфилеккә ынтылыш, тематик киңлеккә тартылыу, форма йәһәтенән эҙләнеүҙәр һиҙелә. Мәҫәлән, “Аҡман-тоҡман” шиғырында лирик герой тарихи риүәйәтте иҫенә төшөрә, буран теле аша ата-бабаларының рухы менән аралашҡыһы килә уның. “Бөрйән думбыраһына” шиғырын үтәнән-үтәләйгә туған халҡың менән ғорурланыу тойғоһо һуғарған, шуға ла думбыра сыңы күңелдәргә үтеп инмәле:

*Думбыраның ҡылын сирттеме ул,*
*Йөрәк ҡылын әллә сирттеме?..*

Аҡмулланан өйрәнеп, уға эйәреп яҙылған әҫәрҙәре лә уңышлы ғына (“Һыйырға эйәр һалғандан”, “Донъя”, “Тиҙҙән шаян гөрләүектәр”).

Шулай ҙа әлегә күргәнде хикәйәләү, хәбәр һөйләү, билдәле күренештәрҙе төртөп күрһәтеү өҫтөнлөк итеңкерәй. Әйтәйек: “...Йәшлек ике ҡабатланмай” йәки:

*Зәп-зәңгәр сәскә – күгәрсен күҙе.*
*Ҡарап туймаҫлыҡ матур ул үҙе.*
*Үҫә был сәскә урман алдында,*
*Уға һоҡланып торам янында, –*

(“Күгәрсен күҙе”)

тип раҫлауҙарҙан мәғәнә лә, фәтеүә лә аҙ. Иғтибарһыҙлыҡ та үҙен һиҙҙерә:

*Таңғы ай бата,*
*Ҡояшҡай ҡалҡа.*
*Офоҡ ситенә*
*Ал шәфәҡ ята...*

(“Таң”)

Шәфәҡ бит эңергә бәйле күренеш. “Томбойоҡ”та:

*...Кис түңгәләк булып сәскә*
*Күл төбөндә бәүелер...*

Күл төбөндә нисек бәүелергә мөмкин?!. Йәки бынауындай юлдар:

*...Күңел һандығымда һүҙҙәр етмәҫ,*
*Бар өмөтөм минең ҡәләмдә...*

(“Урал моңо”)

Ҡәләм – күңелдәгене аҡҡа күсереүсе генә ул, ә әлеге шиғырҙа ул үҙенән-үҙе өмөттө, хыялды тормошҡа ашыра һымаҡ килеп сыҡҡан. Автор урыны-урыны менән “килештереп яҙыу” өсөн “ябай һүҙҙәр” (“Ҡайын”), “алтын һүҙҙәр” (“Әсәй”) таба алмауға бошона (Салауат тиклем Салауат та, һөйөү һүҙҙәрен таба алмауға бәйле, “телем зәғиф” тип әйткән бит, тиерҙәр. Дөрөҫ, тик ундағы һүҙбәйләнеште яугир-сәсән образлы уйната алған шул – бына ҡайҙа хикмәт!). Шиғыр – ҡабатланғыһыҙ донъяны үҙеңсә күреүгә бәйле күңел торошо, күңел торошона бәйле уйхыялдар. Донъя ла, күңел торошо ла

һәр саҡ үҙгәрештә. Тимәк, “бөҙрә” һүҙҙәр таба алмауға ҡайғыраһы юҡ. Телең, күңелең бай икән, туплана килеүсе тормош тәжрибәһенә, ижади һәләтеңә ярашлы һүҙҙәре лә табылыр. Еңелме, ижад ғазабы аша табыламы (Эдисондың әйткәнен онотмайыҡ!) – быныһы икенсе мәсьәлә.

Дөйөм алғанда, йыйынтыҡ һәйбәт тәьҫир ҡалдыра. Образлылыҡ бар. Ассоциатив фекерләүҙәргә йүнәлтерлек уңыштары ла юҡ түгел. Былар иһә – Урания ижадына өмөт менән ҡарарға нигеҙ булырлыҡ һыҙаттар. Әйткәндәй, уның “Фатиха” тигән шиғыры был йәһәттән иғтибарҙы йәлеп итерлек. Билдәле шағирҙың йәш ҡәләмдәшенә ижадҡа фатиха биреүе тураһында һүҙ бара унда. Үҙ өҫтөнә ни тиклем оло яуаплылыҡ алыуын аңлай йәш кеше. Ә яуаплылыҡ тойғоһо ижадсы өсөн бик мөһим ул.

**Фәнил БҮЛӘКОВ.**

**Ҡибла эҙләгәндә: шиғырҙар**

Йыйынтыҡтың исеме есеменә тап килә: автор эҙләнеү юлында. “Кем мин?” тип тә һорау ҡуя ул шулай башланыусы исемһеҙ шиғырында. Яуабы ла әҙер:

*...Ир-егетмен!*
*Илгә елекмен,*
*Ташҡа тамырланыр*
*Һынмаҫ селекмен...*

Икенсе бер шиғырында:

*Йөк атымын,*
*Бауырлығым*
*Ҡыҫып бәйләнгән.*
*Тәртәләрҙән*
*Сығыу ауыр,*
*Һыртлыҡ сейәлгән...*

(“Йөк атымын...”)

Тояҡтарын ярғылаған бәйле саптар итеп тә күрә ул үҙен:

*Баһаларҙан арып, баҙарҙарҙа,*
*Тояҡтарын ярып таш юлда*
*Бәйле арғымаҡтың сапсынғаны –*
*Ул мин икәнмен дә асылда.*

(“Баһаларҙан арып, баҙарҙарҙа...”)

Эйе, хәйерһеҙ заман ир-егетмен, һынмаҫ селекмен тигәндәрҙе лә һындыра, сөнки унда “саптарлыҡ”, йәғни тәбиғи талант тейешенсә баһаланмай. Былдай хәл менән килешергә теләмәгән лирик герой дау күтәрә. Бер үк мәлдә ул яҙмыштағы ауырлыҡ-ҡыйынлыҡтарҙың әҙәм балаһын сыныҡтырыуын да яҡшы белә:

*Тормош еле ныҡлап тарағас,*
*Ныҡынамын, гүйә, ҡарағас...*

(“Имәндәй мин ныҡ та түгелмен”)

Йәшәүҙе ул йылғала ағып барыу менән сағыштыра:

*...Шул һыуҙан ағып барыш...*
*Кәмәлә йөҙөп барыш...*

(“Был донъя үҙе алыш”)

*Был донъялар, гүйә ташҡан оло Иҙел,*
*Ағым менән ыңғай йөҙһәң генә еңел...*

(“Мейеләрҙә меңләп уйҙар иҙелгәндә”)

Ф. Бүләковтың табыш тип ҡарарлыҡ шиғырҙары осраштырһа ла, ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, мәғәнәүи яҡтан һай әҫәрҙәре байтаҡ. Был – “ялтыр” һүҙҙәр менән мауығыуға, хатта уңышлы булырҙай образдың рудалағы аҫылташтай “эшкәртелмәйенсә” ҡулланылыуына бәйле булһа кәрәк. Мәҫәлән:

*Саҡ-саҡ дөрләй шыңшып усаҡ,*
*Утын йота ҡосаҡ-ҡосаҡ...*

(“Саҡ-саҡ дөрләй шыңшып усаҡ”)

Һуң, ҡосаҡ-ҡосаҡ утын йотоп торған усаҡ нисек инде саҡ-саҡ ҡына дөрләһен?!. Шиғырҙың бер ҡанаты образлылыҡ булһа, икенсеһе – мәғәнәле фекер. Осош иһә – аксиома – пар ҡанат булғанда ғына мөмкин. Үкенесле, икеһенән дә мәхрүм шиғырҙар осрап ҡуя. Ундайҙар менән зауыҡһыҙ уҡыусыны ғына албырғатып булалыр. Бынау юлдарға иғтибар итәйек:

*Иңдәремә донъя йөгөн тейәп,*
*Күҙҙәремде үҙ ҡиблама төбәп,*
*Юлдарымдан барам аҡһаҡлап...*

– шулай башлана шиғыр һәм:

*Иңдәремә донъя йөгөн тейәп,*
*Алашамды йүгәненән һөйрәп,*
*Әле барам, һаман абынам, –*
*Үҙ ҡиблама бары табынам...*

(“Иңдәремә донъя йөгөн тейәп...”)

– тип тамамлана. Теге саптар алашаға әйләнгән, йөктө ни өсөндөр үҙ иңенә һалып, аҡһаҡлап, абына-һөрөнә атлаусы хужаһы артынан эйәреп кенә лә барғыһы килмәй. Ындай мәғәнәһеҙлектәргә икенсе бер шиғырында яуап табылғандай:

*Сикһеҙ уйҙарым болғана*
*Башымда минең...*
*Күңелемә дүрт тарафтан*
*Ишек уйылған,*
*Күп уйҙарым, болоҡһотоп,*
*Иҫтән юйылған...*

(“Сикһеҙ уйҙарым болғана...”)

Икенсе урында:

*Меңәр уйҙар телә йәнемде...*

(“Яраһаҙҙа бейей торналар...”)

Һуң, “башыңда болғанған”, инде “иҫтән юйылған”, йәнеңде телгән меңәр уйҙарың булыуын хәбәр итеүҙән ни хәсиәт? Иҫтән юйылырлыҡ икән, уларҙың баһаһы ла ташҡа үлсәйемдер, моғайын. Эйе, фараз итергә генә ҡала. Ғөмүмән, Ф. Бүләков әҫәрҙәренең байтағы етлегеп бөтмәгән. Улар йыш ҡына яҙа-йоҙа ишеткән, күргән-белгәндәрҙе, ҡабалан-ҡарһалан төшөргән эскиздарҙы хәтерләтә. Ҡыҙыҡлы ғына һыҙмалар ҙа бар кеүек, урыны-урыны менән сағыу ғына буяуҙар ҙа ҡулланылған, ә тулайым картина ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Был ризаһыҙлыҡ уҡыусыны хөрмәт итмәүҙе аңлауҙан да тыуалыр, бәлки.

**Айгөл ИШЕМҒУЖИНА.**
***Йырлы йортом: шиғырҙар, нәҫерҙәр***

Китапҡа исем биргән шиғырында автор (Баймаҡ районының “Һаҡмар” гәзитендә хәбәрсе):

*Йырлы йортом имен булһын,*
*Күп йыр әле тыумаған, –*

тип ышандыра. Эйе, алдағыға өмөт булыуы һәйбәт. Әммә лирик герой:

*Ғүмер буйы ниҙер көтөп йәшәп,*
*Нимәгәлер өмөт иткәнгә,*
*Үткәнемә ҡарап тертләп китәм:*
*Күпме йылдар көтөп үткәндәр, –*

(“Ғүмер буйы ниҙер көтөп йәшәп...”)

тип тормоштоң ғәйәт ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы булыуын асып һала. Шуныһы ҡыҙыҡ: был юлдарҙы яҙғандан һуң ете йыл үткәс, әлегеһе уй-кисерештәргә яуап рәүешендә автор былай ти:

*Көтмәй йәшәү генә ҡыйын,*
*Йәнгә бигерәк һалҡын...*
*Мәңге көтөргә ризамын,*
*Көткәнем булһа алтын.*

(“Көтмәй йәшәү генә ҡыйын...”)

Икенсе шиғырында:

*Көтә белһәң, һөйөү – бәхет...*

(“Ташҡын менән Аҡташ һөйөүе...”)

булыуына ышандыра. Һәйбәт! Тик алда ни көткәнен белмәйенсә көтөргә тура килә шул күп ваҡыт. Бөтәһе лә асыҡ булһа, еңелерәк булыр ине лә ул, тик тормоштоң ҡыҙығы юғалыр ине, моғайын. Айгөлдөң лирик геройы өсөн иң мөһиме: һөйөп-һөйөлөп йәшәү. Шул осраҡта уға һөйгәненә бәйле көйөнөстәр ҙә аҙаҡ бәхет булып күренәсәк.

Йыйып әйткәндә, А. Ишемғужинаға ижади әүҙемлек етешеп бөтмәй һымаҡ. Ижадты йәшәү рәүешенә әйләндергәндә генә һәләтте камиллаштырырға, артабан үҫтерергә мөмкин.

**Индира МУЛЛАЯНОВА.**
***Йән йәрем: шиғырҙар***

Индира Муллаяновала (әлегеһе мәлдә “Толпар” журналында бүлек мөхәррире) шиғырҙы шиғыр итеүсе сифаттарҙы нескә тойомлау һиҙелә. Бына “Хыял”ды алайыҡ:

*Осто хыял...*
*Күккә ашты,*
*Күктә осто.*
*Ҡанаттары*
*Арыҕансы,*
*Утлы йәне*
*Һәләкәткә*
*Тарыҕансы.*
*Ергә төштө,*
*Әйләнеп ул*
*Саҡматашҡа.*
*Әйтте шул саҡ:*
*“Мин тора алмам*
*Ерҙән башҡа!”*

Йәки:

*“Беҙ китәбеҙ, һин ҡалаһың”, –*
*Тип йырлаҕанда аҡ ҡар,*
*“Һеҙ китәһеҙ, беҙ ҡалабыҙ”,–*
*Тип үкһей йәндә аһ-зар...*

(“Ялҡындар”)

Артабан:

*...Ошо һалҡын мендәр тулы*
*Бары күҙ йәштәрем.*
*Уны киптермәксе булып,*
*Бер төндө йәшнәнем...*

(“Тылсым булып яғыл”)

Күренеүенсә, шағирә бәндә яҙмыштарының тетрәндергес драматик бороҡлоштарын аҡылға аңлайышлы, күңелгә яғылышлы, зиһенде һиҫкәндерерлек, ассоциатив фекерҙәр уятырлыҡ итеп әйтеп бирә. Әйтәйек, умырзая хаҡында күпме шиғыр яҙылған?!. Бергә туплаһаң, үҙе бер ҡалын йыйынтыҡ булыр ине. Әммә И. Муллаянова башҡаларҙы ҡабатламай, сәскәне үҙенсә күрә:

*Ап-аҡ ҡарҙа – умырзая...*
*Аңламаҫһың*
*Был нәҙберек заттар*
*Донъяһын...*
*Ҡайсаҕында һин йәнеңде*
*Ҡотоптарҙай итеп тояһың,*
*Ә улар һуң –*
*Ана нисек*
*Йәшәйештең тәмен белә:*
*Ҡар өҫтөндә йән яңырта,*
*Йәш аралаш көлә-көлә.*

(“Умырзая”)

И. Муллаянованың юлдар һаны буйынса ла төрләләккә ынтылышы ҡыҙыҡлы. “Айым” ике юллығы, мәҫәлән:

*Тулҕан айҕа ҡарап уйлап торам:*
*“Айым, үҙ яртыңды таптыңмы ни?”*

Дүрт юллыҡта ижадсыға бәйле хәҡиҡәтте ябай ғына юлдар аша асып һала:

*Кем, шаҕир дуҫ,*
*Тәүҙә кеше бул:*
*Сын кешенән –*
*Шаҕирлыҡҡа юл.*

(“Шағирлыҡҡа юл”)

Биш юллыҡтары араһында афоризмдай ҡабул ителерҙәйҙәр осрай:

*Һин – миңә*
*Минең күҙҙәр*
*Менән баҕаһың.*
*Күгем, әйелһәнә,*
*Күҙеңде һөртәйем!*

(“Күгем”)

Иманым камил: артабан ныҡышмалы эшләһә, Индира үҙ уҡыусыларын зауыҡлы ла, фекерле лә әҫәрҙәре менән һөйөндөрәсәк әле.

**Кристина АНДРИАНОВА.**
***Интервью с мечтой: стихи***

Был йыйынтыҡта һөйөү тигән мәңгелек темаға ҡағылышлы (улар менән аралаш ижадҡа, Рәсәйгә бәйлеләре осрай) шиғырҙар күп булғанға, уны “Мөхәббәт теләү” тип тә исемләп булыр ине, бәлки.

Кристина тәүге китабы менән үк үҙенең һәләтле шағирә булыуын тулыһынса иҫбатлай. Тик уға Оло Ватан (Рәсәй) төшөнсәһе менән йәнәш һине бәпләгән Кесе Ватан (Башҡортостан) булыуын да онотмаҫҡа ине. К. Андрианова хаҡында Альберт Карозаның “Истоки” гәзитендә (2010 йыл 24 февраль, № 8) ярайһы ентекле генә мәҡәләһе булғанға, бында ошо мәғлүмәттәр менән сикләнәйек.

**Фәиз ХАРРАСОВ.**
***Төн: хикәйәләр һәм нәҫерҙәр***

Күңел торошо менән тығыҙ бәйле шиғырға ла фекер кәрәккән бер

осраҡта, сәсмә әҫәрҙең ул төп этәргес көсөнә әүерелә. Ф. Харрасовтың нәҫерҙәрендә күҙ төртөлөрлөк фекерҙәр юҡ түгел. Мәҫәлән, “Ҡояшым! Кисер инде кешеләрҙе! Үҙҙәрен өҫтөн ҡуйһалар ҙа, түбәндә улар” (“Ҡояшым”); “Кемгәлер кәрәк булыу... Был донъяла ошонан да олораҡ бәхет булырға мөмкинме һуң?!” (“Күҙгө уйҙар”). Хикәйәләргә бәйле иһә, теле шыма булыуға ҡарамаҫтан, ваҡиғаларҙың һөйләп кенә сығыуға ҡоролоуҙары, сюжеттың, конфликттың ышандырырлыҡ та, мауыҡтырғыс та булмауы хаҡында әйтмәй ярамай. Геройҙарҙың ҡылыҡтарын, эш-хәрәкәттәрен художестволы дәлилләү-нигеҙләү ҙә юҡ самаһында. Әммә нәҫерҙәр авторға өмөт менән ҡарарға урын ҡалдыра, минеңсә.

### Аида ХӘЙРЕТДИНОВА.
***Йәшлек йырым:***
***хикәйәләр һәм нәҫерҙәр***

Автор, Башҡорт дәүләт университетын тамамлағандан һуң, “Балтач таңдары” гәзитенең баш мөхәррир урынбаҫары булып эшләй.

“Саҡырыу килде” хикәйәһенең төп геройы полковник Рәмил яҙмышын, ауылда ҡалмай, хәрби хеҙмәт менән бәйләгәненә үкенгәндәй итә. “Шиңгән розалар”ҙа әхирәте көнләшеп әйткәнгә генә егетен ташлаған Эмма аҙаҡ был аҙымы өсөн үкенә. “Ғәфү үтенмәһәң” геройы – бәғерһеҙ уҡытыусы Хәниә, уҡыусыһын урынһыҙ рәнйеткәнгә, күп йылдар уҙғас, выждан ғазабы кисерә. Әлбиттә, тормошта үкенерлек хәлдәр етерлек. Хикмәт уларҙың әҫәрҙән әҫәргә күсеп йөрөүендә лә түгел. Художестволы әҫәр ҡеүәһе образлы тел аша тормош күренештәрен, күңел кисерештәрен уҡыусы ышанырлыҡ, уй-хистәрен ҡуҙғытырлыҡ кимәлдә еткерә алыуҙа. Һүҙ барған йыйынтыҡта иһә ваҡиғалар фәһеме генә бар. Ваҡиғалар фәһеме публицистикала уңышҡа килтерһә лә, әҙәбиәттә хәл иткес күрһәткес була алмай. Хикәйәләр ышандырыу яғынан да йомшаҡ.

### Нияз АЛСЫНБАЕВ.
***Эйәрҙә ҡалған егет:***
***хикәйәләр, пьесалар, повесть***

Егерме йылдан ашыу ваҡытлы матбуғатта, радиола эшләгән Н. Алсынбаевты күптәр һәләтле хәбәрсе итеп белә. Бер үк мәлдә уның прозала үҙен һынап ҡарауы ла иғтибарҙы йәлеп итерлек: теле ярайһы шыма, сюжеттар ҡыҙыҡлы ҡоролған, хатта фантастикаға тартым әҫәрҙәрендәге ваҡиғаларҙың (“Рамзай мажаралары”, “Серле мосафир”) булыу ихтималлығына, жанрҙың үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, ышана башлайһың.

Йыйынтыҡҡа исем биргән хикәйәлә Ҡараһаҡал яуына бәйле фильм төшөрөлөүе бәйән ителә. Күмәк эпизодтарҙа башҡорт яугирҙарын һүрәтләргә тейешле ауыл егеттәре, алдан (аванс алып!) эсеп, кәйеф-сафа ҡорғанға, “яу”ға ла инә алмайынса аттарынан осоп ҡала. Ә сценарий буйынса “үлергә тейешле” Әхмәт “хәтәр ажғырып экранға инеп килә”. Бындай “хәтәр” деталде милли рухлы башҡорт әҙибе генә “уйната” алыуы мөмкин. Бына ошо бер генә, әммә берәгәйле деталь-эпизод тәрән уйҙарға һала. Берҙән, ул башҡортта әле сая яугирлыҡ ҡала алыуына ныҡлы ышандырһа, икенсенән, яуға инә алмаясаҡ маңҡорттар ишәйеүен күрһәтеп, аяныслы хәлгә тарыуыбыҙҙан һыҙланырға мәжбүр итә.

“Серле мосафир” повесы – 1962 йылда Зәки Вәлидиҙең тыуған иленә ҡайтып әйләнеү мөмкинлеге булыуына нигеҙләнгән фантастик әҫәр. Ул төп геройҙың көндәлеге рәүешендә ҡоролған. Шул һиҙелә: автор Зәки Вәлиди “Хәтирәләр”ен ныҡлы өйрәнгән, уның стилен уңышлы үҙләштергән. Шуға ла повесть, әйтергә яраһа, “Хәтирәләр”ҙең үҙенсәлекле дауамы һымаҡ та ҡабул ителә.

Нияз Алсынбаев “Бельские просторы” журналында (2010, № 2) руссаға тәржемә ителгән хикәйәләр шәлкеме менән дә сығыш яһаны. Әҙәбиәт яратыусылар ҡыҙыҡһынып ҡабул иткәндер, ыңғай баһалағандыр, тип өмөтләнәм.

**Венер ИСХАҠОВ.**
***Таяҡ: юмористик хикәйәләр***

Республика матбуғаты аша яҡшы таныш (әле “Һәнәк” журналында) Венер Исхаҡов үҙен әҙәбиәттең сатира-юмор өлкәһендә һәләтле генә эшләүен күрһәтте.

Авторҙың тәүге йыйынтығына утыҙ хикәйә тупланған. Уларҙың сюжеты ришүәтселеккә (“Таяҡ”, “Дуҫым кәнәше”, “Диплом мәнфәғәте”, “Тәүге дәрес”, “Изгелек”, “Имтихан”, “Сауаплы эш”, “Ҡойроҡ”), эскелеккә (“Хәйер”, “Ғәлимйән”, “Телһеҙ дуҫ”, “Бал”) бәйле, эш яғына һәлкәүҙәрҙән (“Тун”, “Ҡайҙа яҡшы”), эстән ҡалтыраһа ла, тыштан ялтырап торһон, “Беҙ кемдән кәм!” тигән принциптарҙан сығып эш итеүселәрҙән (“Күрһәтеү”, “Мансардалы Мөслимә”) көлөүгә ҡоролған. Һығылмалы тел, халыҡсан һүҙбәйләнештәр (ҡоҙалары иркен йәшәй; тараҡһыҙ тарай – расхудландыра; ашау барҙа – йәшәү бар; ашау – байҙарса; ауыҙҙарынан сыҡҡан һүҙҙәрҙе, майлап һалһаң, эт еҫкәмәҫ) хикәйәләрҙе уҡымлы итә. Стиль саралары жанр талаптарына ярашлы ҡулланыла. Бөтәһен дә әйтеп бөтөрмәй, уҡыусыға уйланырға ҡалдырыуы ла уңышлы. Ҡайһылыр бер осраҡта бары һуңғы һөйләмдә генә әҫәрҙең елеге асыҡлана. Бындай һәләт бигерәк тә юморист, сатирик өсөн иң кәрәге, тиер инем. Шулай ҙа тапалған сюжеттарға яңыса боролош бирә алмағанда, уларға ҡағылмау хәйерлерәктер.

**Александр ДВИНСКИХ.**
***Точка Кюри:***
***юмористические рассказы, сказки***

Александр Өфө дәүләт авиация техник университетын тамамлаған. Белорет металлургия комбинатында эшләй.

Хикәйәләре йырлап тора. Телгә бай. Башҡорт солғанышын тасуирлағанда милли колорит тыуҙыра белә. Сюжетты ҡыҙыҡлы ҡора алыу маһирлығына эйә. Иң мөһиме: уҡыусыны мауыҡтыра, рухи ҡиммәттәрҙең булыуына ышандыра, изгелек тигән төшөнсәләрҙе ҡибла итеп алып, үҙенең артынан уҡыусыһын да әйҙәй. Был хатта уның әкиәттәренә лә ҡағыла. Хатта, тием, сөнки әкиәтте әкиәт итеп кенә ҡарау бар, ә Александр “ысын” әкиәттә хәҡиҡәт булыуына инандыра. Бына “Әкиәт хаҡында әкиәт”ен алайыҡ. Әкиәт (ҡыҙыҡай), төрлө мажараларға тарып, Әкиәтсене, йәғни әкиәттәр яҙыусы киң билдәле әҙипте, барып таба. Нимә ти инде Әкиәтсе: “Әкиәт былай ғына урамда йөрөй алмай. Ғөмүмән, улар донъяла юҡ, уларҙы тик уйлап сығаралар...” Әммә Әкиәт ысын мәғәнәһендәге Әкиәтсене, үҙенең буласаҡ тормош юлдашын, таба барыбер. Ошондай әҫәрҙәр менән танышҡас, үҙең дә һиҙмәҫтән: “Браво! Талант – ни әйтәһең!” – тип ҡуяһың.

Александр Двинских, Кристина Андриановаларҙың Башҡортостандың урыҫ телле әҙәбиәтендә ғорурланып телгә алырлыҡ кимәлгә күтәреләсәктәренә ышанысым ҙур.

***

Күренеүенсә, йәштәр тауышы төрлөсә яңғырай. Шулай булыуына аптырайһы ла түгел. Иң мөһиме – яңғырай (һәйбәт мәғәнәһендә!). Тыңлайышетә белеү, аңлау – уҡыусының зауығына бәйле.

Халыҡта, бишектәге бишкә төрләнә, тип тә, алтылағы – алтмышта, тип тә әйтәләр. Өмөттәр ҙә, хафалар ҙа бергә, тимәк. Тормошта иһә күп нәмә шәхестең үҙенә бәйләнгән. Һәләтең бар икән, ҡәҙерен бел, артабан үҫтер. Башҡалар ижадына иғтибарлы, ихтирамлы бул. Тик бөтәһе лә ал да гөл булырына ғына өмөт итмә. Ысын ижад – йән ғазабы... Тән ғазабы ла...

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**



**Рамаҙан**
**ӨМӨТБАЕВ**

# КӨМӨШ ДАҒА

**ПОВЕСТЬ**

*Бөйөк Ватан һуғышынан*
*ҡайтмаған яҡташтарҙың*
*яҡты иҫтәлегенә*

Ҡартайҙы, ҡаужыны Һөйәрбикә әбей. Эскә соҡорайып батҡан урты эсендә хәҙер ни бары тырым-тырағай ултырған биш-алты бөртөк кенә теше тороп ҡалды. Ҡасандыр төйгөс шикелле тығыҙ тәнендә ит әҫәре лә һиҙелмәй, тора-бара ул ҡатыраҡ ел осороп алып китерлек, кәүен генә йоҙроҡтай әбей булып ҡалды. Аяғын һөйрәй-һөйрәй ишеккә килеп, уның яңағында ҡатып ҡуйылған таныш көмөш дағаны һыйпап алды ла тәрән уйға сумды. Үҙенән-үҙе ваҡыт сылбыры тағатыла башланы…

Һөйәрбикәне, һәр ваҡыт та шулай булған, тип уйлай күрмәгеҙ. Уның да заманында баҫҡан һайын табанынан ут сәсрәтеп, тал сыбығы шикелле һығылмалы кәүҙәһенең, талымһыҙ ҡулдарының алды ла, ялды ла белмәгән саҡтары бар ине. Ирҙәр салғыһын ҡулына алып, «Хәкимйән туғайы»нда ҡолас йәйеп Һөйәрбикәнең ауыл ир-егеттәре менән бер ҡатарҙан бакуй сыҡҡанын Ялан ауылы ҡарттары әле лә һағынып һөйләй. Һуғыш башланырҙан бер йыл алда иген һуҡҡан мәлдә, колхоз бригадирының уй-байына ҡарамай, ирҙәр менән ярышып, лобогрейкала Һөйәрбикәнең Салғыя тауы итәгендә һоло сабыуы һуңғы тыныс йылдың ҡәҙерле иҫтәлеге булып шул заман кешеләренең күңел түрендә оҙаҡ һаҡланды.

«Ай, бигерәк ҡарыулы, уңған ине шул, теләһә ниндәй эште башҡарыр ине, бар ине замандар… Һуйып ҡаплаған шикелле атаһы мәрхүмгә оҡшаған бит, атаһы ла шулай егәрле булды, әҙәм йоҡоһонан Ирәндеккә китеп, иртәнге сәйгә тиклем бер йөк ыҡтыра тейәп утын алып ҡайтыр ине, бисара…» Шундай һүҙҙәрҙе ауыл халҡы ауыҙынан күп йылдар үткәс тә ишетергә була ине.

---

*Рамаҙан Ғимран улы Өмөтбаев (1924—1997) — күренекле дәүләт эшмәкәре һәм башҡорт прозаһына күркәм биҙәктәр өҫтәгән әҙип ине. Әлеге повесы уның шәхси архивынан алынды һәм әҙәбиәт һөйөүселәр иғтибарына беренсе тапҡыр тәҡдим ителә.*

Һөйәрбикә, башҡа ҡыҙ-ҡырҡын кеүек, ир-егеттәрҙән битен йәшереп, оялып, тартынып та үҫмәне. Бөтә кешегә бер тигеҙ асыҡ-ярыҡ булды, бар ауыл халҡының күҙ алдында буй еткерҙе, ҡыйғас ҡашлы, муйыл шикелле күҙле, ҡарағусҡыл сейә һымаҡ һутлы ирендәре кемдәрҙең генә йәш йөрәген елкендермәне.

Әрмегә ҡаралырға йыйынған ҡырҡма мыйыҡ егеттәр ҙә, армия тултырып ҡайтҡан ҡыҫма билле оҙон шинель, аяҡтарына ҡояш нурында ялтырап торған кузлауай итек кейгән, сиртһәң ҡаны сығырлыҡ, киң күкрәктәренән көс-дәрт бәреп торған егеттәр ҙә Һөйәрбикәнең күңел ҡылдарын сиртkeләп ҡарағыланы. Уға егеттәрҙең хаттарын тапшырып, мөхәббәт ялҡынында дөрләп янған аһ-зарҙарында улар менән ҡуша хәсрәтләнгән әхирәте Хөмәйрә, иптәшенең ҡырыҫлығына ғәжәпләнеп, нисәмә мәртәбә әйткәне булды:

– Китсе инде, Һөйәрбикә, шул тиклем дә кешене ялындырырға мөмкинме ни?.. Исмаһам, ҡәләм тибрәтеп, береһенә сәләм хаты яҙһаң ни була? Нишләп шул ҡәҙәре тәкәбберләнеп танауыңды күккә сөйәһең, ә? Әллә берәр батша малайын көтәһеңме?

Һөйәрбикә ғәҙәтенсә тыныс ҡына яуап бирә:

– Ваҡыт әрәм итеп яҙмаһындар! Яуап яҙа башлаһаң, һауалана башлай бит улар. Егеттәр ауыҙында хәбәр ятамы, иртәгә үк бөтә ауылға фаш ителеп даның сығар.

Хөмәйрә лә тиҙ бирешә торғандарҙан түгел һәм һаман да теңкәһенә тейеүен дауам итә:

– Күрмәйһеңме ни Шаһисолтанды? Әфисәр булып, ҡулына сәғәт тағып ҡайтҡан да инде. Районға милиция эшенә алалар, ти. Бына шунда милиция бисәһе булып, эшләмәй генә өйҙә ятырһың әле, – тине ул, хәл иткес һөжүмгә ташланып.

– Ярар, ярар, Хөмәйрә, яҙырмын, ләкин мин Хәлим почтаһына һалырмын хатты, – тип Һөйәрбикә вәғәҙә лә бирҙе.

Шатлығынан нишләргә белмәй, Хөмәйрә үрле-түбәле һикерҙе, әйтерһең дә, үҙе өсөн тырыша.

– Әгәр шул Шаһисолтан миңә хат яҙыу түгел, теленең осо менән генә бер шатлыҡлы хәбәр ысҡындырһа, шул минутында уҡ йәбешер инем. Мин һинең шикелле ил һылыуы түгелмен шул, әгәр минең ошо битем шаҙра булмаһа, мин дә кеше һайланып ултырыр инем шул… – тип моңһоулана Хөмәйрә, былдай саҡтарҙа уның эре шаҙра күҙәнәктәрен болоҡһоу һыҙаттары солғап ала.

– Ярар, вәғәҙә биргәс, яҙырмын. Сознательный булыр кәрәк, әбизәтильнәйә, – тип мәрәкәләй Һөйәрбикә. – Миңә шулай өҙгөләнәһең, һиңә лә яҙғаны билен һыға быуып берәр ерҙә йөрөйҙөр әле, – тип шарҡылдап көлә лә әхирәтенең битенән үбеп ала.

– Һиңә көлкө лә ул, ә минең эсемдә ут яна, – тип уфтана Хөмәйрә, уның ягымлы сырайына моңһоу ҡара болот күләгәһе төшә.

Һөйәрбикә ҡулына ҡәләм, ҡағыҙ алып хат яҙырға ултырҙы. Ләкин шаян уйҙар, урғылып торған йәшлек хистәре аҡ ҡағыҙға һис кенә лә етди һүҙҙәр теҙергә ирек бирмәне. «Былай Шаһисолтан яратмаҫлыҡ егет тә түгел, буй-һыны ла бик килешле, һыу һоҫоп эсәрлек һылыуылығы булмаһа ла, төҫө-башы ярайһы ғына»,– тип фекер йөрөтә Һөйәрбикә. Ләкин иблис шундуҡ уның ҡолағына икенсене бышылдай: «Ҡуйсәле, бөтә донъяла йәрҙәр бөткәндә лә шуның ҡосағына барып кермәҫһең инде, күрмәйһеңме ни, ҡоро ҡыуыҡ, танауын шаңҡайтып күккә ҡарап йөрөгән бер трикупай ҙа инде». «Ысынлап та, миңә уға мөхәббәт хаты яҙып, шул буш ҡыуыҡты ишшыу ҡоторторға, әллә кем булып, урамға һыймай йөрөр», – тип теге иблис һаман да үҙ һүҙен ныҡыны. Ә икенсеһе: «Уның трикупайлығы – йәшлек ғәләмәте генә ул, ҡулына һәнәк-көрәк тота башлаһа,

өҫтөндәге шинелен һалып, өйҙәге бишмәтен кейеп алһа, уның һауалығы хәҙер генә елгә осасаҡ, һайланма, һайланған – һаҙға батҡан, тип боронғолар белмәй әйтмәгән ул», – тип өгөтләй. Ләкин Һөйәрбикәнең эске келе тәүге иблис һүҙенә ятыңҡырай. Ул Шаһисолтандан баш тартырлыҡ, йәш күңеле төңөлөрлөк сәбәптәр эҙләй. Әһә, табылды! «Ул маҡтансыҡ, ҡупырыш. Минән башҡа күрше ауылдың уҡытыусыһы менән өс йыл хатлашып ятты, битһеҙ! Хәҙер ҙә уға “Бәғрем, алтын тояғым” тип хат яҙып яталыр әле. Бер көн клубҡа инер алдынан болдорҙоң беренсе баҫҡысына аяғын ҡуйҙы ла ҡунысынан һоро бәрхәт сығарып, итектәрен йылтыратып тора бит әле, маҡтансыҡ. Әйтерһең дә, армиянан ул ғына итек кейеп ҡайтҡан. Туҡта, мин ҡыҙыҡ итәйем әле уны», – тигән йылғыр уй Һөйәрбикәнең ҡулына тотҡан ҡәләмен тибрәтеп ебәрҙе. Аҡ ҡағыҙҙа ошондай юлдар пәйҙә булды.

*Ал һинең теүәтәйең,*
*Гөл һинең теүәтәйең,*
*Хөкүмәткә файҙа булһын –*
*Алтмыш тин түләтәйем.*

«Бына булды ла, вәссәләм! Бына почта аша матур ғына итеп ошо буш конвертты ал әле, башҡаса, ҡыҙҙарға хат яҙам, тип ҡулыңа ҡәләм дә алмаҫһың!»

Иртәнге тамаҡ мәлендә ауыл почтальоны һикегә ултырмай, башҡаларҙан айырым, стенаға һөйәлгән өҫтәл артында сәй эсеп ултырған Шаһисолтанға “доплатить” тигән мисәт һуғылған йоҡа ғына конверт тоттороп китте. Шатлығынан уның ҡулынан сынаяғы төшөп китә яҙҙы. Ул, эскән сәйен онотоп, тышҡа йүгерҙе. Эске тулҡынланыуынан уның йөрәге күкрәгенә һыймай дарҫлап типте, ҡалтыранған бармаҡтары менән ул, ҡыуаныстан йығылып ҡуймайым тигән шикелле, лапаҫ ҡапҡаһына арҡаһын терәп, Һөйәрбикә ҡулының йылыһы бәреп торған конвертты һаҡлыҡ менән генә асты. Күҙгә хаттың тәүге юлы салынды:

*Ал һинең теүәтәйең…*

Хаттың ҡалған өлөшөн уҡырға уның хәле етмәне. «Ярай, ярай, эт ҡыҙыҡай!» Конвертты ваҡ ҡына киҫәктәргә йыртҡылап аяҡ аҫтына ырғытты. Шунан һуң ҡара ер өҫтөнә яуған эре ҡар бөртөктәре һымаҡ унда-бында ағарып ятҡан ҡағыҙ киҫәктәрен бергә өйҙө лә итегенең үксәһе менән һарыҡ тиҙәгенә ҡуша тызырға кереште.

Ошо сәғәттән һуң Шаһисолтанды Ялан ауылында күрмәнеләр. Ул, был мәсхәрәгә түҙә алмай, фанер сумаҙанын ҡулына тотоп, ауылды мәңгегә ташлап сығып китте. Район үҙәгенә барып милицияға урынлашты.

Был хәл тураһында ләм-мим өндәшмәһә лә, утыҙ ике теш артында хәбәр оҙаҡ торамы ни: уның егенән сыҡҡан имеш-мимеш ғәйбәт ел түбәненә осҡан төтөн шикелле аяҡланып, бөтә Ялан ауылын шундуҡ әллә нисә ҡат урап та сыҡты. «Анауы ҡыҙ-тәкә, йыртанас Һөйәрбикә һыу һөлөгөләй егеттең башына етте, мәсхәрәһен күтәрә алмай китте бит, бисара. Ундай егеттәр теләһә ҡайҙа тәгәрәп ятмай ул, ана, районға барҙы ла милицияға эшкә керҙе. Башҡалар һымаҡ көрәкһәнәк тотоп тиҙәк көрәп йөрөмәй, исмаһам урында ултыра», – тиеште уның туған-тыумасалары.

«Буйы етмәгәнгә үрелмәһен, тоҡомонда бер йүнле кеше бармы ни, гел трикупай ҙа зыргүтән. Типһә тимер өҙөрҙәй кешегә милиция ла булған бер кәсеп. Бөтә эшкинмәгән, йыйын ялҡау йөрөй шунда, алтатарын биленә тағып, бисә-сәсәне ҡурҡытып…» Бындай хәбәрҙе, билдәле, тегеләр яғына Һөйәрбикәнең яҡындары атты.

Ҡайһылай ғына булмаһын, Һөйәрбикәгә Шаһисолтандың хаты һуңғы

ҡарлуғас булды. Инде бүтәнсә бер ниндәй ҙә мөхәббәт ҡошсоғо уның тәҙрәһен килеп ҡаҡманы. Һөйәрбикәнең тәкәбберлеген ауыл егеттәре бөтөнләй ҡыйратмаһалар ҙа, байтаҡ ажарын алдылар. Уның һауаланыуы ла бер аҙ һүнә төштө, һуңғы ваҡиға төндәрен уны тәрән кисерештәргә, һағышлы хистәргә дусар итте. Ул беренсе тапҡыр үҙенең яңғыҙлығын, үҙе менән әхирәттәре араһынан һалҡынса ел өрөп үткәнен һиҙҙе. Тыштан һыр бирмәһә лә, эстәге һағыш уты уның йәнен өттө, йөрәген өҙгөләне. Һөйәрбикәнең тумалаҡ алсаҡ битенә моңһоулыҡ шәүләһе ятты, ҡарлуғас ҡанатындай ҡыйғас ҡаштары урталайға һынған кеүек тойолдо. Унын эсендә ғәрлек уты ҡайнағанын яҡындары, бигерәк тә әсәһе бөтә йөрәге менән тойҙо.

Ғәрләнмәҫлекме ни? Октябрь байрамдары үтеп, ҡырпаҡ ҡар төшкәс, ауылда шаулы туйҙар башланып китте. Һәр бер яңы туй Һөйәрбикәнең йөрәгенә ырғытылған хәнйәр булып ҡаҙалды.

«Йә инде, анау Әхмәтҡужаның киле буйы Раҡыяһын районда бухгалтер булып эшләгән Хатип ҡоҙалаған, ти… Кәкре танаулы, секрей күҙ Йәмиғәне яңы армиянан ҡайтҡан Латиф һоратҡан, ти… Анау мунса ташы, Һөйәрбикәнең почтальоны шаҙра Хөмәйрә лә ауыл мөғәллиме Хәсәновҡа сыҡҡан, ыста… Шул буйһыным менән ауыл ҡыҙҙары араһында сүпләнеп йөрөп, бер үҙем тороп ҡалдым да баһа…» Бына ниндәй күңелһеҙ уйҙар уға төндәр буйы тынғы бирмәй йөрәген өйкәне.

Ләкин мөхәббәт сире менән ауырып һарыға һабышҡан кешегә өмә сығып ярҙам итеп булмай шул, ундай кеше эстән һыҙа. Һөйәрбикә эстән дә, тыштан да, һүҙгә лә, эштә лә бик етдиләнә төштө, элекке һымаҡ ҡайһы саҡтарҙа шардыуанланып ҡысҡырып көлөүҙәрен берсә кәметте. Ләкин үҙенең эске серен тышҡа сығарманы, бер кем менән дә ул турала уртаҡлашманы. Кемгә әйтәһең, үҙәгеңде өҙгән, йөрәгеңде өйкәгән һағышты кемгә асып һалаһың? Буй еткән ауыл ҡыҙҙары, уның иң яҡын әхирәттәре, бөтәһе тигәндәй, һурылып бер-бер артлы кейәүгә сығып бөттө. Тормошҡа сығып, ирҙең йылы ҡосағында наҙланып, һөйөшөүҙең татлы балын бәхет сынаяғына лыҡа тултырып ләззәт кисергән кисәге әхирәттәренең хәҙер ғәме башҡа, улар, Һөйәрбикә һымаҡ, үҙ мендәрен ҡосаҡлап, мөхәббәт ғазабы кисермәй, ҡайһы саҡтарҙа төндәр буйы керпек тә ҡаҡмай таң һарғайғанын көтөп үҙ түшәгендә ҡырҡҡа әйләнмәй, пар күгәрсендәй гөрләшеп аҡ бәхет күгендә осҡан был йән эйәләренә дилбегәләй оҙон көҙгө төн арҡалыҡтай ғына ҡыҫҡа күренеп, гөрләп аҡҡан шишмәләрҙе шыҡырайтып туңдырған һалҡын төн эҫе бәреп торған мунса ташы кеүек тойола. Көн дә ҡалъя ашап ғүмер иткән туҡ әҙәм ас кешенең хәлен беләме? Бәхет диңгеҙендә йөҙгән кеше бәхетһеҙҙең кисерешен аңлаймы?

Һөйәрбикә үҙ ҡайғыһын эш менән күмергә, онотолорға тырыша, иртә китә, кис ҡайта. Колхоз бригадиры уны маҡтап бөтә алмай: «Ҡана һуң, бөтә бисәләр ҙә ошо Һөйәрбикә ҡарындаш шикелле ҡушҡан эшеңде емереп алып барһалар икән, юғиһә кисәге колхоз эшендә егелеп эшләгән ҡыҙҙар тормошҡа сығалар ҙа, ирҙәрен ҡосаҡлап өйҙәрендә тик ята»,– тип тә ебәрә. Шунан быйыл көҙ һәм ҡыш барышында кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙарҙы кәкре бармаҡтары менән һанарға тотона. Үҙенә ҡалһа, үҙ һүҙе менән ул, йәнәһе, Һөйәрбикәне эшкә дәртләндерергә маташа, уның уңғанлығын тағы ла маҡтап телгә ала, ә асылда уның был дөрөҫ һүҙҙәре ҡыҙҙың күңеленә ауыр таш булып ята, уның былай ҙа һыҙлаған йөрәген тағы ла нығыраҡ әрнетә. Уның эсендәген белгән шикелле, бригадир ҡайһы саҡтарҙа шаяртып та ебәрә:

– Ҡайғырма, ҡарындаш, түҙгәнгә түш тейә, һиҙемләүемсә, һиңә яҙғаны ла был донъяла үҙ яҙмышын көтөп йөрөйҙөр әле. Тик тап булыша алмайһығыҙ

ғына, – тип Һөйәрбикәгә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер икәнен белдергәндәй, етди генә хәбәр ҙә ысҡындыра.

Ошо һөйләшеүҙән һуң күп тә үтмәне, колхоз бригадиры – тәүге әтәс менән бергә тороп, үҙенең йөнтәҫ һары атында ауылдың түбән осон, үҙе әйтмешләй «түбән бригат»ты әллә нисә ҡат әйләнеп сыға торған Ирназар ҡарт, көндәге шикелле үҙ заданиеһын тәҙрә аша ғына түгел, Һөйәрбикәләрҙең өйөнә инеп биреп сыҡты.

– Бөгөндән колхозда иген һуғыу башлана. Симәнәгә тигән эҫкерттәргә һалып ҡыш һуғыу өсөн ҡалдырғайныҡ бит. Анау яңғыҙ «Коммунар» тигән нәмәһе йәй бар игенде һуғып өлгөрә алманы бит, хәйерһеҙ. Бына бөгөн мин һине барабансыға памушник итеп назначать итәм. Эҫкерт башынан ташланған игенде биреп торорһоң. Көлтәле иген эләкһә, көлтә бауын ҡырҡып торорға ураҡ алып бар, – тип әмер бирҙе лә ҡуҙғала башланы.

Эшкә тип кейенгән Һөйәрбикә уның артынса уҡ тышҡа сыҡты.

– Ә барабан төбөндә, Ирназар ағай, кем тора? – тип һораны Һөйәрбикә бер сирек тәмәкеһен ҡабыҙып атына атлана башлаған бригадирҙан.

– Сабур тора. Тимерсе Сабур ағайың торасаҡ, – тип ҡабатланы Ирназар. – Бер ҡайҙа ла китмә, уға әтдильнә ат ектергәнмен. Ул ырҙынға, комбайн боҙолоп-фәлән ҡалһа, үҙенең тимер-томорон һалып алып бара. Хәҙер килеп туҡтар,– тине лә бригадир ары китте.

Бер аҙҙан Һөйәрбикә эргәһенә, атын уйнатып, санаға аяғүрә баҫҡан Сабур килеп туҡтаны.

– Әйҙә, ҡарындаш, һикер минең кашауайға, үҙеңде бер йөрөтөп алып ҡайтайым, – тип мәрәкәләне ғәҙәттә бер ҡасан да кешегә беренсе өндәшмәҫ тимерсе. «Ҡара, ҡара, Сабур ағайҙың да теле асылған», – тип уйланы Һөйәрбикә, саналағы бесән өҫтөнә ултырып. Ул йән-фарман ат ҡыуған Сабурға ҡараны: өҫтөнә фуфайка-салбар, аяғына төплө бейма кейеп алған, көн саҫҡау ғына булыуға ҡарамаҫтан, йондоҙо алынған шлемының ҡолаҡтарын өҫкә ҡайтарған, бейәләйһеҙ көрәктәй ҡулдарынан күтәрелгән йылы пар артта ултырған Һөйәрбикәнең танауына бәрелеп ҡытыҡлай. Уның дүрткел һынына, өҙлөкһөҙ сүкеш һуғыуҙан яурындары көмөрәйеп һалпая төшкән иңбашына ҡарап, Һөйәрбикә үҙ уйын уйлай: «Бынауы Сабур ағай тышҡы ҡиәфәте менән хас таштан эшләп ҡуйған һымаҡ икән». Салғыя тауының һыртына барып етергә байтаҡ ҡына ер бар, ләкин тимерсе үҙенең «на, на» тип дилбегә шапылдатып ат ҡыуыуынан башҡа бер ни белмәй.

– Сабур ағай, шул тиклем атыңды ҡыҫтап... Әллә иген янып барамы? Хәҙер атың йығыла бит! – тип көлдө лә Һөйәрбикә, битен дебет яулығы эсенә йәшерҙе.

– Нисауа, йығылһа ла ҡайғырма, атты ла, һине лә үҙем һөйрәп алып барып еткерермен, – тип мәрәкәләне Сабур. Хәбәр тағы тынып ҡалды. Һөйәрбикәнең ошо серле зат менән нишләптер һүҙҙе дауам иткеһе килде.

Сабур йәштән генә атаһы һөнәренә өйрәнеп, армияға китерҙән алда ҡулына сүкеш алған егет ине. Тиҫтерҙәре араһында артыҡ ҡатнашмай, бер ни ҙә өндәшмәгәне өсөн йәштәр уға «Балыҡ Сабур» тигән ҡушамат бирҙе. Шул ҡушамат менән ул һуғыштан ярты йыл алда, ҡышҡа ҡаршы, башҡалар менән бергә йылын тултырып ҡайтҡан булды. Ҡайтты ла, башҡалар шикелле аҙналар буйы ауыл һайын уйындан уйынға сапманы, үҙе ҡалдырып киткән тимерлеген яңынан тоҡандырып ебәрҙе. Көнө-төнө тимер тауыштарын сығарып туҡтауһыҙ эшләй башланы тимерлек. Ауылдаштарының йомоштарын да үтәне. Сепарат төҙәтте, самауыр, ҡомған йәбештерҙе, биҙрә төпләне. Әгәр инде ауыл ҡыҙҙары «ағай, ағай» тип өндәшеп ялынһа, уларға көмөш беләҙек, ташлы балдаҡ, ҡумыҙға әүәҫтәренә ҡумыҙ ҙа яһаны, тик ауылдаштарынан үҙ эше өсөн бер тин дә аҡса

һораманы, биргәнде лә алманы. Тик ҡайһы ваҡыттарҙа ғына, бигерәк тә выжданлы күршеләре йәки башҡа таныштары, үҙе өйҙә юҡта, әсәһенә биш-алты ҡаҙаҡ он, берәр йомғаҡ май йәки сеүәтәләп яңы айыртылған ҡаймаҡ бирепкитерҙәр, йомартыраҡтары «көмөшсөгә көмөш ярай» тип, шаяртыптыр, Микулай замандағы аҡса менән хисаплашыр ине.

Алыҫта сабылған ҡамыл өҫтөндә һалынған, өҫтө аҡ ҡар ябынған эҫкерт күренә башлағас, Сабур ҡара тиргә төшкән Турысайын тағы ла тығыҙлап йәһәтләне. Һөйәрбикә түҙмәне, уранып ултырған шәленән битен сығарып, Сабурға яңынан өндәште.

– Һине, Сабур ағай, мин, каүәлирҙә хеҙмәт иткәндер, тип уйлағайным, ләкин… – тип һүҙен дауам итергә уҡталған ҡыҙҙы Сабур бүлдерҙе.

– Нимәһе ләкин… Минең кавалеряла хеҙмәт иткәнде һин ҡайҙан белдең, кем әйтте? – тип Сабур үҙенең ҡаршы өргән ҡарлы елгә ҡыҙарған киң битен Һөйәрбикәгә борҙо.

– Бер кем дә әйтмәне, үҙем беләм.

– Ҡайҙан беләһең? Мин һиңә армиянан хат яҙып ятманым шикелле, – тип ул, яңынан «на, на»лап, дилбегә ҡаҡты.

– Армиянан ҡайтып төшкән егеттәрҙең шинель яғалары осондағы билдәнән беләм.

– Йә, йә, быуна ҡыҙыҡ. Минекендә ниндәй билдә күрҙең?

– Һинең шинелең осондағы зәңгәр дүрткелдең өҫкө мөйөшөндә дағаға бер-береһенә һөйәп ҡуйылған ҡылыс менән мылтыҡ күрҙем. Был билдә ҡыҙыл-армеецтың атлы ғәскәрҙә хеҙмәт иткәнен күрһәтеп тора.

Сабур юлдашының ысын күңелдән һөйләгән һүҙенә: «Ҡара һин, ул үткер ҡыҙҙарҙы!» – тип рәхәтләнеп көлдө.

– Яға осона тегелгән бишбармаҡ һалмаһына оҡшаған шул дүрткел сепрәк петлица тип йөрөтөлә. Тағы кемдәрҙең петлицаһында ниндәй билдәләр күрҙең? – тип Сабур ҡыҙыҡһыныуын дауам итте.

– Шаһисолтан ағайҙың яғаһында яраплан һүрәте төшкән, ә Шиһап ағайҙыҡында танк бар, – тип Һөйәрбикә һанарға кереште.

Шаһисолтан исемен ишеткәс, Сабурҙың яурындары тағы ла көмөрәйгәндәй тойолдо, ул, байтаҡ ҡына һүҙһеҙ барғандан һуң, үҙ тауышына ниндәйҙер көнләшеү сифаттары ҡушып һораны:

– Һин нимә, Шаһисолтан петлицаһына самолет һүрәте тағып алғас та, әллә армияла ул летчик булған, тип уйлайһыңмы?

– Эйе, мин ни, яраплан йөрөткәндер, тип уйлағайным.

– Йөрөткән атаһының башын! Ҡулына масленка тотоп самолет тимерҙәрен майлап торған... Самолет осор ваҡытта уны ҡойроғонан тотоп торған һинең Шаһисолтан ағайың, – Сабур күкрәк төбөнән сыҡҡан ҡарлыҡҡаныраҡ тауыш менән яуап бирҙе лә артҡа ҡарап: «Быуна кем ул, һинең ҡоро ҡыуыҡ Шаһисолтаның!» – тигән шикелле, һыуыҡҡа шешмәкләнгән ирендәрен салшайтып ҡуйҙы.

Ауылдан килеп өлгөргән йәштәр шаулаша-гөрләшә иген эҫкерте тирәһендә төндә яуған ҡырпаҡ ҡарҙы, эҫкерт башында аҡ юрған булып ятҡан ҡатҡан көрттө таҙарттылар. Алты пар үгеҙ егеп, ситтәрәк ултырған «Коммунар» комбайнын эҫкерткә арҡыры терәп ҡуйҙылар ҙа, уны ҡабыҙып, иген һуға башланылар. Бригадир Ирназар ағай әйткәнсә, Сабур барабан төбөндә комбайнға иген ебәреп, ә Һөйәрбикә өҫтән төшкән игендәрҙе таратып, көлтә бауынураҡ башына эләктереп ҡырҡып, тағатылған көлтәләрҙе биреп торҙо. Улар эш мәлендә һөйләшә алмаһа ла, юҡ-юҡта яғымлы ҡараштары менән осрашты. Икеһенең биттәре һыуыҡтан алһыуланды, матурланды. Һөйәрбикәгә Сабурҙың ҡосағына

тултырып алған игенде сырмалтып, ҡайһылай етте, шулай барабанға тыҡмай, һәлмәк, дөрөҫ хәрәкәттәр менән гел генә башаҡ яғы менән биреп тороуы, ә Сабурға, биленән иген көлтәләренә күмелеп тороуына ҡарамаҫтан, Һөйәрбикәнең көлтә бауын һәләт ҡырҡып, алдындағы өйөм-өйөм булып ятҡан оҙон һаламлы ашлыҡты таҡта буйлатып тигеҙ генә этеп тороуы оҡшаны.

Улар көн буйы ашлыҡ һуғып, тик ҡышҡы көн кискә ауышҡас, ҡыҙыл тоноҡ ҡояш күгәреп ятҡан Күсем ташы артына йәшеренгәс кенә, ҡайтыр юлға сыҡтылар. Сабур атын егеп бөткәс, өҫ-башын ҡағып маташҡан ҡыҙҙар яғына ҡараш ташланы һәм күңеле менән Һөйәрбикәне эҙләгәндәй итте. Аты егелгән булһа ла, сана тирәләй бер-ике әйләнде лә һуғылған иген өҫтөнә ябылған бүлектең ситен килеп тартҡыланы. Ләкин: «Һөйәрбикә, әйҙә санаға ултыр», – тип өндәшергә уның батырсылығы етмәне. Уның ҡарауы, Һөйәрбикә, бөтә кешенең шәм шикелле ҡарап тороуына ҡарамаҫтан, ышаныслы аҙымдар менән Сабур эргәһенә килде лә үҙе өндәште:

– Әйҙә, Сабур ағай, тағы бер елдереп алып ҡайт әле, – тип, һорап та тормай, уның санаһына атылды. Тимерсе йәнә сана үрәсәһенә баҫып алды. «Тағы ла һерәйеп алға тороп ала инде, исмаһам, кеше күҙенән юғалғас ҡуштап ултырһасы»… Уның уйҙарын һиҙгәндәй, Сабурҙың эске ҡаушауынан йөрәге елкенде, тыны етмәй башланы. Оҙон дилбегәһен ҡулына урап тота алмай маташып та алды, нисек тә башҡа кешеләрҙән алдараҡ ҡуҙғалырға ашыҡты. Юлға төшөп, Турысайы ылдым ғына юрта башлағас, Сабур ҡаршы өргән елгә ҡабырғаһы менән боролоп бер аҙ барҙы ла, баҫып торған урынына – Һөйәрбикәнән берәй сажин алғараҡ – санаһына ултырҙы. Һөйәрбикәнең бының мәшәүлегенә асыуы килде.

– Ҡуштап ултыр. Әллә ауыл ҡыҙҙары ҡыҙылармеецтарҙы ашар тип белдеңме? – тине Һөйәрбикә һәм артынан уның яҫы ҡайышына йәбеште. Ҡыҙҙың был ҡылығынан Сабур бөтөнләй ҡойолоп төштө, ләкин артҡа шылып, йәнәш ултырҙы. Бер-береһенә ҡабырға терәп улар оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ барҙылар. Һүҙ йомғағының осон тағы ла тартып сығарырға тура килде ҡыҙға.

– Ауылдың бөтә ҡыҙҙарына ла көмөш балдаҡ йә беләҙек сүкеп бөттөң, ә миңә тигәне ҡайҙа? – тип уның һул ҡабырғаһына һыйынды. Уға терәлеп ултырған Сабурҙың тәненә ҡапыл йәш ҡыҙҙың бөркөп торған башты әйләндерерлек йылыһы йүгергәндәй булды. Уның бөтә тәнен, электр ағымына тоташтырылған шикелле, рәхәтлек тойғоһо солғап алды. Сабурҙың ошолайтып бер-береңә һыйынышып ултырған көйөнсә санала ғүмер буйы юлын бергә дауам иткеһе килде. Ул үҙҙәре ултырған бесән санаһын бәхет диңгеҙендә сәйәхәткә сыҡҡан ап-аҡ карап һымаҡ хис итте. Ләкин Һөйәрбикәнең һуңғы һорауы уның сөйәлле аяғына баҫҡан шикелле тәьҫир итте.

– Һиңә беләҙекте, ана, районда милицияла ҡупырайып йөрөгән… Шаһисолтаның яһап бирһен, – тине бар асыуы менән Сабур. Күрәһең, ошо һүҙҙе ул Һөйәрбикәгә күптән әйтергә йыйынған: өҫтөнән ауыр йөк алып ташлаған кеүек, ҡаты көрһөнөп әйтте. Был, билдәле, Һөйәрбикәнең мин-минлеген бер аҙ сәрпеп үтте, ләкин ул да бирешергә теләмәне.

– Ул һинең шикелле оҫта түгел дә инде, әгәр ҡулы белһә, күптән эшләп кейҙерер ине, – тине Һөйәрбикә, ҡыйғас ҡаштарын һикертеп.

– Зато уның теле шәп, беҙгә ҡарағанда белеме лә күберәк, – тине тимерсе һәм байтаҡҡа һүҙһеҙ һүнеп ҡалды.

– Ә һин уға минең ниндәй яуап яҙғанды ишетмәнеңме ни? “Мин һине өҙөлөп яратам, һин тигәндә – мин иҙәндә…” тип яҙғаным юҡ!

– Уныһын беләм, ишеттем инде, – тине лә Сабур, ауыҙының мөйөшө менән генә йылмайҙы.

– Шулай булғас, ниңә уға ҡылтайырға? Әгәр инде мин уға баш эйеп, тағылып йөрөһәм, икенсе хәл, – тине Һөйәрбикә тауышына үпкә билдәләре өҫтәп һәм башын ситкә борҙо.

Сабурҙың көслө ҡулдары менән ҡыҙҙы дебеткә уралған муйынынан һыға ҡосаҡлап, ҡайнар ирендәрен үбеп алғыһы килде. Тағы ла тәмле хыялдарға бирелеп бер аҙ һөйләшмәй барҙылар.

– Ә бөтә егеттәр үлә яҙып хат яҙышып ятҡанда… һин ниндәйҙе ҡаранның? Хат яҙырға ҡағыҙ, ҡәләм таба алмаһаң, үҙем алып барып бирер инем, – тип көлдө лә Һөйәрбикә, Сабурға ҡарап мөләйем генә йылмайҙы.

– Ә мин кемгә яҙайым?

– Ниңә? Әллә мин һиңә кеше түгелме?

– Яуабыңда миңә лә шул теүәтәй тураһында яҙыр инеңме?

– Юҡ. Мин һиңә шулай итеп яҙыр инем:

*Һөйәм һине, һөйәм һине, һөйәм һине, сәсәгем,*
*Һөйәмен һине, сәсәгем, мәңгегә һөйәсәгем…*

Ошо бер ҙә көтөлмәгән һүҙҙәрҙән һуң Һөйәрбикә ҡапыл Сабурға әйләнеп, уны биленән ҡосаҡланы. Сабурҙың ҡапыл башы әйләнде, ҡулынан дилбегәһе төшөп китте, ләкин Һөйәрбикәне һыға ҡосаҡлап, алһыу ирендәренән һурып үбергә батырсылығы етмәне.

Тәүге көндө улар шулай бармаҡ остары менән булһа ла үҙ тойғоларының ҡылдарын сиртеп таралышты. Бынан һуң Сабур бөтөнләй йоҡонан яҙҙы. Ятһа ла, торһа ла, уның күҙ алдына ҡыйғас ҡаштары аҫтындағы муйыл шикелле күҙҙәренән мөхәббәт нурҙары һирпеп Һөйәрбикә килеп баҫты. Ул ҡоласын йәйеп, уның ҡосағына үҙе атыла төҫлө тойолдо Сабурға. Өҫтөндәге шинеленең еҙ төймәләрен йылтыратып, сасҡау һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, аяғына төплө быйма урынына ялтыр һалдат итеге кейгән Сабурҙың көн дә таң һарыһынан килеп, иген һуғырға һорап Ирназар ҡартты уятып йөрөүенән, егеттең эске шатлығын йәшерә алмай һоро күҙҙәренең йылтырап, томанлы сырайының яҙғы ҡояш кеүек көлөп тороуынан бригадир үҙе эстән уйлап йөрөгән эшенең әлегә бешмәһә лә, яйға һалына башланыуын һиҙҙе.

– Сабур ҡустым, һине иген һуғыуға старший итеп тәғәйенләйем. Түрә кешегә бесән санаһына ығыш ат егеп йөрөү килешмәҫ, ана, минең Һоро Ҡуҙыбайҙы кашауайға ғына егеп барып ҡайт әле бөгөн, – тине Ирназар, мут йылмайып.

Шунан шығырлап торған итегенә ҡараш ташлап:

– Тик, мырҙа, аяҡтарыңды өшөтөп ҡуйма, запасҡа быйма һалып алһаң да ярар ине, – тигән булды.

Сабур уның тәҡдименә:

– Ирназар ағай, Алыҫ Көнсығышта беҙгә ҡарағанда йылы түгел. Ике йыл итек кейеп хеҙмәт итеп ҡайтылды бит, нисауа, бирешмәбеҙ. Өшөй башлаһа, барабан таҡтаһында бер аҙ бейеп тә алырмын, – тип көлдө.

Бер һүҙ менән әйткәндә, «Балыҡ Сабур»ҙың ғәҙәттәге уйсан битендә бөгөн яҡты нур балҡый.

Ул, кашауай санаға ултырып, Һөйәрбикәләр өйөнә килеп туҡтағанда, уныһы ла дебет шәл урынына башына биҙәкле яулыҡ ябынып, һайыҫҡандай ян-яғына ҡаранып, өй артында көтөп тора ине инде. Һөйәрбикә, һорап та тормай, бесән һалынған кашауайға һикереп ултырҙы ла, Сабурҙың өҫ-башына күҙ йүгертеп:

– Һин, Сабур ағай, бөгөн әллә Салғыя һыртына ҡунаҡҡа йыйындыңмы? Бигерәк ыҫпай кейенеп алғанһың, – тип йылмайҙы.

– Нисауа, армияла тимерлектә өҫкә кейеп эшләй торған халатты һалып

алдым мин, шинель өҫтөнән ағайыңдар бөгөн шуны кейеп ебәрә ул, – тип, һәр һүҙендә ишетелеп торған шатлыҡ билдәләренә баҫым яһап, күтәренке тауыш менән яуапланы Сабур.

– Әллә һин, Сабур ағай, әрмелә шул тимерлектә гел эшләп торҙоңмо? Ә мин һине, Чапай һымаҡ, биленә ҡылыс тағып, аҡбуҙ ат уйнатып йөрөгәнһең тиһәм! – мыҫҡыл ҡатыш шаярыу тауышы менән шырҡылдап көлөп ҡуйҙы Һөйәрбикә.

Сабур тиҙ генә яуап бирмәне. Тик ат тояғы аҫтынан ырғыған туң ҡар киҫәктәренән битен ҡаплап, ашыҡмай ғына аңлата башланы:

– Һөйәрбикә, кавалерияла бөтә ҡыҙылармеец та ҡылыс тағып, һин әйткәнсә, ат уйнатып ҡына йөрөмәй ул. Унда тимерсеһе лә, аш бешереүсе лә, йөк ташыусы ла мотлаҡ кәрәк. Хатта кавалеристар йәйен ҡылыстарын ташлап, ҡулына салғы тотоп, аттарына бесән сабырға төшөп китә.

– Нисек инде, армияға барып, өҫкә шинель кейеп, ир башы менән ҡаҙан эргәһендә аш бешереп тормаҡ кәрәк!

– Торалар шул. Бына мин, мәҫәлән, ҡыҙылармеец – кузнец-коваль булдым. Кузнец нимә булғаны аңлашыла инде, ә коваль тигәне – ковать, йәғни ат дағалау тигәнде аңлата. Ундай эште бөтә часта бер нисә кешегә генә ҡушалар, сөнки ул һөнәр барыһының да ҡулынан килмәй. Кавалерияла дағаһыҙ ат менеп йөрөү юҡ. Дағаһыҙ ат – һапһыҙ балта, һуғыш өсөн яраҡһыҙ. Ә ул дағa тигән нәмә бик тиҙ генә ашалып бара, шуға күрә уны йыш ҡына алмаштырып торалар. Ә уның өсөн беҙ, кузнец-ковалдар, кәрәк. Полкта яҡшы кузнец-коваль булһа, дағалаған аттар ҙа тояғын һуҡмай шәп йөрөй. Атың шәп булһа – кавалерист та шәп, етеҙ. Бына нисек ул, Һөйәрбикә. Һәр нәмәнең донъяла рәте бар…

«Ҡара, ҡара, өндәшмәҫ “Балыҡ Сабур” тип көлһәләр ҙә, хәбәрен нисегерәк килештереп һөйләп бара. Ул, күрәһең, кеше араһында ғына шулай шомбай булып йөрөйҙөр», – тип уйлаған Һөйәрбикә икенсе төрлө өндәште:

– Ә, шулай икән дә. Мин ни, армияға алынған һәр егет тик мылтыҡ, ҡылыс тағып ҡына йөрөй, тип уйлағайным.

Һөйәрбикәнең килә торғас әхирәт ҡыҙҙарының һөйләгәндәре иҫенә төштө, имеш, Сабур ишек башына алтын дағa элеп ҡуйған.

– Сабур ағай, мин күптән һорарға йыйынып йөрөйөм: һеҙҙең өйөгөҙҙә алтын дағa эленеп тора тип һөйләйҙәр, шул хәбәр ысынмы?

– Ысын, тик ул алтын түгел, көмөш. Алтын уға ялатылған ғына.

– Уны ҡайҙан алдығыҙ?

– Уны миңә маршал Блюхер үҙ ҡулы менән тапшырҙы.

– Ни өсөн? Уны биргәнсә, берәр орден биреп ҡайтарһа, ана, Фаттах апа һымаҡ, шинелең түшенә тағып йөрөр инең.

– Мин армияға алынғас, күп тә тормай, Алыҫ Көнсығышта ат дағалау буйынса ярыштар үткәрелде. Мин шунда беренсе урынға сыҡтым.

– Ыста, ундай ярыштар ҙа була икән дә. Мин ни, һабантуйҙағы ярыштарҙан башҡа бер ни ҙә юҡтыр, тип йөрөһәм... Шулай ҙа ҡайһылай маладис булдың. Беҙҙең Ялан ауылының бер егете шул тиклем мәхшәр араһында алға сыҡһын әле! Унда әллә ни һан кеше әллә ҡайһы яҡтарҙан йыйылғандыр, эйеме?

– Эйе, кеше бик күп булды.

– Һөйлә әле, ағай, ул ярыштар нисек була? – тип һораны ла Һөйәрбикә, үҙе һиҙмәҫтән, Сабурға һыйынды.

– Төрлө частарҙан килгән тимерселәр күмәк ат бәйләнгән арҡыры бүрәнәгә баралар ҙа, алдыңда ултырған ҡумтанан дағa һайлап алып, теҙелеп торған аттарҙың аяғына дағa үлсәй, шунан сөй ҡаға башлай, – тип һөйләне Сабур тулҡынланыуынан ҡалтыранған тауыш менән.

Ҡыҙыҡһыныуы артҡан Һөйәрбикә төпсөнөүен дауам итте.

– Һеҙҙең тимерлек алдында ат бәйләй торған станок бар бит әле. Ә армияла бар инеме?

– Частағы тимерлектә бар ине. Ә күпселек осраҡтарҙа унһыҙ дағаларға тура килде. Кем әҙерләп ҡуйған һиңә ундай станоктарҙы ҡола яланда? Бына сираттағы ат алдынан ҡабырғаһына киләһең дә йөгөнөкләп ултыраһың. Шунан һул ҡулың менән аттың бәкәленән тотоп бөгөлгән аяғын тубыҡ өҫтөнә һалаһың да, уң ҡулыңа сүкеш алып, сөйҙө ҡата ла башлайһың.

– Әгәр ат тулап өҫтөңә менеп китһә?

– Өс аяҡлы ат тулай алмай ул. Бына ошолайтып тотаһың да... – Сабур Һөйәрбикәнең аяғын ҡапҡан шикелле эләктереп тә алды. – Йә, хәҙер тулап ҡара. Ҡыбырҙай алырһыңмы?

– Уй, алла, ҡулың ҡыпсыуырмы ни? Был тиклем дә көсөң булыр икән! – тип Һөйәрбикә ысҡынырға самалағайны, ләкин булдыра алманы һәм санаға һуҙылып ятырға мәжбүр булды.

– Ҡаты ҡуллы егеттәргә ҡарт бисә эләгә, тиҙәр. Бына берәй ҡарт ҡыҙ ҡуйынында ятырһың әле, – тип көлдө Һөйәрбикә.

– Беҙгә ҡарт ҡыҙҙар хәжәт түгел. Ҡарт ҡыҙ алып әллә...

– Кем белһен инде... Ләкин, даға өйгә бәхет алып килә, тип юрайҙар бит, һинең көмөш дағаң да, бәлки, ҡосағыңа берәй һылыуҙы күктән килтереп төшөрөр.

Уға ошоға тиклем бер ауылда йәшәп, уның менән бер ҡасан да бер бөртөк һүҙ ҙә алышмаған Сабур ауыҙынан ана ни хәтле хәбәр ишетеүе, уның мөхәббәт тураһында ла ихласланып сиселеп китеүе бик мәҙәк тойолдо. «Бына һиңә шомбай...»

Тора-бара Һөйәрбикә, уға табан иркә күҙҙәрен уйнатып, «ағай-фәлән» тип тә тормай, тағы ла хат яҙышыуҙы килтереп сығарҙы:

– Сабур, һин тәки миңә хат яҙманың бит, бигерәк эре кешеһең икән!

– Ғүмеремдә бер кемгә хат яҙғаным юҡ, яҙа ла белмәйем. Ҡыҙҙарға хат яҙып ваҡыт әрәм иткәнсе, мин колхозға ун ат дағалап бирәм.

«Был әҙәм ошо ат дағалау эше менән хыялый булған икән», – тип уйларға ла өлгөрмәне, Һөйәрбикә бер ҡасан уйына ла кермәгән яңылыҡ ишетте.

– Мин һиңә ни өсөн хат яҙмауымды әйттем инде. Ярар Шаһисолтан һинән яуап алғандың икенсе көнөнә, белеме булғас, ауылды ташлап сығып китте лә милицияға эшкә керҙе. Мин йәш саҡтан ут ялҡынында тирем һеңешкән тимерлегемде нисек ташлап китәйем? Мин тиҙерәк ғәрлегемдән һыуға батып үлер инем. Әйткәндәй, йылғабыҙҙың хәҙер кеше батып үлерлек һыуы ла юҡ әле, – мәрәкәләгән шикелле, башын ситкә бороп, Сабур уйға ҡалды. Шунан тағы һүҙен тағата башланы. – Мин улайтып ҡыҙҙарға хат яҙып, уларҙан ниндәй яуап килер икән, тип ҡайғырып йөрөгәнсе, күңелемә оҡшаған ҡыҙға тотам да яусы ебәрәм!

– Ә һуң ошо көнгә хәтлем нишләп яусы ебәрмәйһең?

– Кемгә?

– Ә мин һиңә тиң ҡыҙ түгелме? Ҡайһы ерем килмәгән, – тип Һөйәрбикә шарҡылдап көлдө лә Сабурҙың һыуыҡ сикәһен йылы ҡулы менән наҙлы ғына һыйпап алды.

– Көлмә әле, Һөйәрбикә! Яусы ебәреү – күршегә иләк һорап йомошҡа инеп сығыу түгел дә инде.

– Һис көлмәйем. Ысынын әйтәм. Кеше тойғоһонан көлөргә мин бер йыртанас елғыуар түгел дә инде. Раҫ! Мин риза, – тине лә Һөйәрбикә, Сабурҙың көслө муйынына аҫылынып, һалҡын сикәһенән супылдатып үпте.

Сабур, уның һүҙенә һаман ышанып етмәгән шикелле, кисәтеп ҡуйҙы:

– Мин иртәгә үк атайыңдарға яусы ебәрәм. Ләкин минең менән дә шаярырға

уйлаһаң, ҡара, ҡыҙыҡай, өйөгөҙҙөң көлөн күккә осорасаҡмын, миңә, тимер иретеп өйрәнгән кешегә, һеҙҙең донъяны көл итеү бер ни ҙә тормай.

– Атаҡ, атаҡ, әле мине ҡурҡытып алмаҡсыһыңмы? Улай булһа, беҙҙең өй тирәһендә эҙең булмаһын! Хәҙер үк шулай ҡапаҡлап ултырғас, һеҙгә килен булып төшһәм, һин мине өйөңдән дә сығармай бикләп тоторһоң, Аллам һаҡлаһын! Ҡайһылайыраҡ һөйләшкән була! – тип ғүмерендә быңдай һүҙ ишетмәгән, иркен генә йәшәгән, ҡырыҫ холоҡло, ауылда үҙ баҙарының хаҡын яҡшы белгән Һөйәрбикә Сабурға һырт биреп боролоп ултырҙы.

Улар шулай бер кашауайҙа ултырып йөрөүҙәренә ҡарамаҫтан, хәҙер икеһе лә “шомбай балыҡ”ҡа әйләнеп, һөйләшмәҫ булдылар. «Балыҡ Сабур» әҙерәк күңеле кителеп, иңбашына килеп ҡунған ауыл сибәрен ҡулынан ысҡындырыу ҡурҡынысы ни тиклем йөрәген өйкәһә лә, түҙҙе, һиҙҙермәне, ләкин асыҡ холоҡло, эсендәге һәр саҡ тышында булған, күңелендәге һөйләр һүҙ ауыҙынан сығарҙан алда алсаҡ йөҙөндә сағылған Һөйәрбикә ике-өс көн ара боҙолоп өндәшмәй йөрөүҙе бик тәрән кисерҙе. Уның яҡты сырайына һағыш шәүләһе ятты. Сабур менән бергә ике телһеҙ кеүек ултырып, тигеҙ генә юртҡан аттың бышҡырыуынан башҡа тауыш ишетмәй, балтаһы һыуға төшкән кеше шикелле, икеһе ике яҡҡа ҡарап өнһөҙ-һүҙһеҙ килеү Һөйәрбикә өсөн ысын ғазапҡа әйләнде. «Исмаһам, бер һүҙ өндәшһәңсе, телһеҙ балыҡ, ошо минең тойғоларҙы аңламаҫҡа боҙ йөрәкле булырға кәрәк бит, тиле бәрән!» – тип дала яңғыратып ҡысҡыраһы килде. Ләкин ҡыҙ ғорурлығын үҙ аяғы аҫтына һалып тапағыһы килмәне, сыҙаны.

Беренсе булып, ни тиклем генә ғәмһеҙ, туң күңелле булырға тырышмаһын, Сабурҙың ғорурлыҡтан һалынған ҡоймаһы емерелеп төштө. «Балыҡ Сабур» Һөйәрбикә менән йөрөй, түбән остоң бригадиры «Төлкө Ирназар» кашауайын уларға бушҡа ғына үҙ атына ектереп бирмәгән, улар шул кашауайға бер кемде лә ултыртмай, шыҡы-мыҡы йөрөй икән – шундайыраҡ имеш-мимеш Сабурҙың әсәһе ҡолағына ла килеп сағылғайны. Был хәбәрҙе генә түгел, уларҙың һуңғы ваҡыттарҙа ҡаш һикертеп, иген һуғыу туҡтаған араларҙа бер-береһенең ҡосағына атылырҙай булып эҫкерткә арҡа терәп мөләйем генә һөйләшеп тороуҙарын Сабурҙың һеңлеһе, Һөйәрбикәгә етә килгән, үҙенең дә йөрәгендә байтаҡтан бирле мөхәббәт сәскәләре бөрөләнә башлаған Мәстүрә һиҙемләй ине, ләкин, ағаһына оҡшап, эсендәге серҙе тышҡа сығармай бикләп тота белә торған ҡыҙыҡай был хаҡта бер кем менән дә уртаҡлашманы. Тик үҙ эсенән генә: «Һөйәрбикәгә минең ағайым тиң түгел, ағайымды ул тик алдаштырып, теҙгенләп кенә йөрөтә, күп булһа, ауылдың тағы бер егетен мыҫҡыл итергә уйлайҙыр. Эй, ағаҡайым, буйың етмәгәнгә бушҡа ғына үреләһең», – тип бер ҡатлылыҡта ғәйепләп, уға асыуланып та йөрөнө.

Ләкин бөгөнгө Сабурҙың эштән ҡайтыу менән хәрби кейемдәрен ҡаҡҡылап, итектәрен таҙартып, көҙгөгә ҡарай-ҡарай, ауыҙын тумтайтып ҡырынып ултырыуына өйҙәгеләр аптырап төштө.

– Ҡайҙа йыйынаһың, әллә берәй ауылға уйынға китергә булдыңмы, улым? – тип һораны әсәһе.

Сабур иҫе китмәй генә яуапланы:

– Әсәй, туйға әҙерләнә башла. Кәләш алам!

Улының етди төҫ менән ысҡындырған был хәбәре орсоҡ иләргә тотонған әсәһен дә, тәҙрә төбөндә ҡулъяулыҡ сигеп ултырған һеңлеһен дә аяҡтан йыға яҙҙы.

– Ыстағафирулла, балам! Иҫке ауыҙҙан яңы хәбәр. Егет булғас ни, кәләш әйттермәй булмаҫ, һуң минең менән, анау ултырған Мәстүрә менән әҙерәк кәңәш итһәң ни була һуң? Йә Хоҙай! – тип Сәбилә әбей илауларға тотондо.

– Ул килен булып төшәһе бала кем була һуң? Ҡайһы ауылдыҡы, ата-әсәләре

бармы? Тоҡомдары арыумы һуң? – тип әҙерәк башы шаңҡығандан һуң иҫенә килгән Сәбилә әбей улына һорауҙар яуҙырҙы. Ишеккә аяғын ҡуйып итеген таҙартып торған ағаһы тиҙ генә өндәшә һалмағас, Мәстүрә, ҡулъяулығын кеҫәһенә тығып, урынынан торҙо ла, ынйы кеүек тигеҙ тештәрен күрһәтеп, йоҡа ирендәре менән ҡаймалған матур ауыҙын түңәрәкләтеп:

– Һө… йәр… би… кә, – тип ҡысҡырҙы.

– Кем, кем? Йә, татаҡланмай ғына әйт әле, – тине түҙемһеҙлектән хәле бөткән әсәһе.

– Кем булһын, Һөйәрбикә инде. Барый ағайҙың өлкән ҡыҙы! Үҙе һылыу, хатта һыу сибәре шикелле, буй-һыны таҙа, ҡойоп ҡуйған һымаҡ, тағы һиңә ни кәрәк, – тип Мәстүрә һике йөҙлөгөндә ике ҡулын түшенә ҡуйып хайран ҡалған әсәһен ҡосаҡлап алды.

– Тукта әле, балам, сабыр ит, – тине Сәбилә әбей, бер аҙ тынысланғас.

– Барыһы ла хәл ителгән, әсәй, тағы ниндәй һорауҙарың бар? – тип тәпәшәк өй түшәменә башы менән терәлеп тигәндәй торған Сабур көмөш дағалы итек үксәләрен бер-береһенә шаҡылдатты.

– Уй, балаҡайым, ебәргән яусыны кире бороп сығарһалар, әҙәм страмына ҡалырбыҙ бит! Беҙгә тиңме һуң улар? Беҙҙең мынау донъяға хушһынырмы? – Сәбилә үҙенең дүрт тәҙрәле ҡумта һымаҡ йәтеш кенә өйөнөң эсен күҙе менән байҡап сыҡты. – Ярай ҙа һуң, Алла бойорған булып, һине тиң күреп, татыу ғына донъя көтөп китә алһағыҙ.

Әле төҫ ташламаған хужабикә, маңлай һырҙарын бергә йыйып, тәрән уйға ҡалды.

– Нисауа, әсәй, ҡайғырма! Һеҙ уйлағанса, ул тәкәббер, һүҙ күтәрмәҫ ҡыҙ түгел, ипле бала, мына килен булып төшкәс, ҡыуанып бөтә алмаҫһығыҙ әле, – тип көлдө Сабур.

– Ағайым уны өндәшмәй генә еңә ул, – тине Мәстүрә, ағаһы менән Һөйәрбикәнең араһы һуңғы көндәрҙә боҙолоп тороуын белгән кеше шикелле.

– Ярар, хәйерлегә булһын инде, изге юлға. Яусың кем һуң? – тип һораны Сәбилә.

– Яусы булып бөгөн үк Ирназар ағай барып ҡайта.

– Китсе, әҙәм ҡыланмағанды эшләп йөрөргә, яусы булып ғүмер буйы Өмөгөлсөм әбей бара торғайны түгелме һуң?! Уның алыш-бирешендә һөйләшеү кәрәктер бит? – тип Сәбилә тағы өтәләнде.

«Ярар, ярар, һеҙҙең һүҙегеҙ бөтмәҫ» тигән шикелле, Сабур сығып та юғалды. Яңынан ярты сәғәттән бер салбар балағын ҡунысы тышынан сығарып, Ирназар ҡарт Барыйҙар өйөндә сәй эсеп ултыра ине инде. Бригадир башы менән яусы вазифаһына тотонған Ирназар ҡарттың әҙәм йөҡларға ятыр алдынан балағын тышҡа һалып килеп инеүенә өйҙәгеләр аптырашҡа ҡалды. Ошо араларҙа күңеле болоҡһоп, ниндәйҙер яңылыҡ өмөт итеп йөрәге һыҙлап йөрөгән Һөйәрбикә Ирназар ағаһының, күктән төшкән кеүек, ишекте шар асып инеүенә ни шатланырға, ни ҡайғырырға белмәне. Уның дәррәү килеп атаһы, әсәһе һәм башҡа бәләкәй балалар менән дә алсаҡ йөҙ менән күрешеп сығыуы, иң аҙаҡтан нишләргә белмәй, йөҙөнә борсолоу һыҙаттары сығарып, бер урында ҡатып торған Һөйәрбикәгә ҡыҫыҡ күҙҙәрен уйнатып ике ҡулын һуҙыуы өйҙәгеләрҙе хайран итте.

*(Аҙағы бар.)*



**Зөбәржәт**
**ЙӘНБИРҘИНА**

## *Йән өҙөлә*

Рәшит Солтангәрәев иҫтәлегенә

*Иң яҡыны инең дуҫ булараҡ,*
*Тоъро дуҫым, юҡһың арала.*
*Иҫкә алып бергә, шат саҡтарҙы,*
*Күңелемдә йырҙар ярала.*

*Ихласлыъың сиктән ашҡан ине —*
*Йөҙөң нурлы, булдың көләкәс.*
*Съездарҙы йәмләп тәнәфестә*
*Кем генә һуң һөйләр көләмәс?!*

*Кешелекле булдың, дуҫтарыңа*
*Һин үҙең дә торҙоң йән атып,*
*Шаталаҡ та саъың — байрам ине,*
*“Шайтангәрәй” тинек яратып.*

*Ун дүртенсе съезд иң-иңдәрһеҙ —*
*Йәштәр генә бер ни аңламай.*
*Йылмайырға итәм, моңһоулыҡты*
*Ҡыуыр көсөм генә тыңламай.*

---

*Зөбәржәт Йәнбирҙина Көйөргәҙе районының Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ совхоз-техникумын тамамлай. Зоотехник булып эшләй. Күмертау төбәк яҙыусылар ойошмаһын етәкләй, Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһында әҙәби консультант була.*

*Туғыҙ китап авторы ине, Башҡортостан Республикаһының Почет грамотаһы менән наградланғайны.*

Йән өҙөлөп китә эс бошҡанда,
Һағындыра һине, Солтангәрәй.
“Һин юҡ” тигән уйҙы йыуыр төҫлө —
Күҙҙәремдән сурлап йәш тәгәрәй.

## Тик ҡунаҡҡа килдем

Үзбәкстан, тик ҡунаҡҡа килдем —
Сәскә генә тотош урамың.
Һағынһам да ғәзиз илкәйемде,
Сихәт бирә сәскә-бураның.

Ку-ку-ку ҡош диуар баштарында,
Күкәкукләп ғүмер һанаймы?
Ул да әллә, беҙҙең кәкүк кеүек,
Ғүмер ҡыҫҡа, тиеп янаймы?

Барып ҡына ҡайтам, тигән инем...
Ғүмер үтә белмәй саманы.
Ҡайтаһылар килгән минутымда
Һис кем екмәй атҡа сананы.

Бер кем екмәй, бер кемгә лә хатта
Кәрәгем юҡ бында, яттарға.
Бар сарамды табып ҡайтып киттем,
Ултырып та тормай аттарға.

Эй тыуған ил! Бөйөклөгөң белдем —
Рәхмәт инде ата-бабама.
Тыуған ер тип киҫектергән мине,
Өйрәтермен мин дә балама.

Аҙмы ни һуң беҙҙең ергә килеп,
“Илем” тигән һүҙҙән яҙғандар.
Беҙҙә тыуып үҫеп, нанды ейеп,
Үҙебеҙгә баҙ-ям ҡаҙғандар.

Аҙмы ни һуң беҙҙең һыуҙы эсеп,
Үҙ иленә ҡарап суҡынған.
Беҙ тораһы йортто биләп тороп,
Көлгән була беҙҙең тоҡомдан.

Ерен яҡламаған — илһеҙ ҡалған,
Был ерҙә лә һатлыҡ ерекмәҫ.
Күпме бүреккә һал, урман тиер,
Һөйләшкәндә һүҙе берекмәҫ.

*Меҫкенлеге көслө, тыҙмай тулай,*
*Ҡаны һыҙа, көҫәп — илкәйен.*
*Париж еткән башҡорт иле өсөн,*
*Эйәр ҡашы ҡағып билкәйен!*

*“Ерен яҡламаған — илһеҙ ҡалған!” —*
*Атам һүҙе китмәй ҡолаҡтан.*
*Мин дә шулар көнөн күрер инем,*
*Сит-ят ергә китеп олаҡһам.*

*Әлдә генә үҙем үҙ илемдә,*
*Үҙ еремдә ныҡлы аяғым.*
*Этһәләр ҙә, был ер — минең ерем,*
*Сырылдаһын, әйҙә, баяғы!*

## Рәсәйем

Рус түгелмен, ләкин россиян мин...

М. Кәрим

*Ярты мең йыллыҡты быуҙыҡ бергә —*
*Төрлө хәлдәр булды, Рәсәйем!*
*Тел әйләнмәй, әммә сараһыҙҙан*
*“Россиянмын” тим дә сәсәйем...*

*Һиңә хәжәтем юҡ, илла үҙ нужаңды*
*Бик тиҙ белдерәһең, кәрәкһәм.*
*Ата-бабаларҙай, баш һалына,*
*Ауҙарыңа килеп эләкһәм.*

*Яулап алған суверенитетым*
*Матди ягын һыулай* кеҫәңдең.*
*Күҙ иркәләр байраҡ елберҙәй, тип*
*Үпкә уйҙарымдан кисәм мин.*

*Ҡояш ҡуянсығы кеүек, берсә*
*Уңға сыға, һулға гербыбыҙ,*
*Рәсәй, һинән оло булып булмай,*
*Ҡайҙа элһәң, шунда торорбоҙ.*

*Инде нисә йылдар һәр иртәлә*
*Гимн ауазынан уянам.*
*Әйтер һүҙҙәре күп, моңло халҡым*
*Сик көрсөгө ҡоло — уйланам.*

---

* *Һыулай — тулыландыра, тукландыра.*

*Ысынбарлығында ысын ирек*
*Тәтемәгән инде башҡортҡа...*
*Ҡайһылай ҙа башты эйҙергәндәр...*
*Эйелә лә биреп, суҡынған да булып,*
*Бүрек һалып килеп* баш йортҡа!*

## Үрмә гөл

*Эй, һөйөклө ғүмер, ғәмгә-йәмгә сумып,*
*Ниндәй генә хыял үрмәнем.*
*Йәшәү йәмдәреңә ҡырҡа ғашиҡ булдым –*
*Үткәнеңдә хатта күрмәнем.*

*Эй, ҡәҙерле ғүмер, ниңә улай бик тиҙ*
*Йыһан үрҙәренә үрләнең!?*
*Үҙең менән һәр саҡ бергә генә йәшәр*
*Баҫҡыстарҙы ниңә үрмәнең?*

*Эй, ғәзиз дә ғүмер, бүләк иткәнһең бит*
*Алтын бишек, йәшәү түрҙәрен.*
*Ғүмер генәм үткән көрәш-алыштарҙа,*
*Яулай, яулай тормош үрҙәрен.*

*Эй, һин, үткән ғүмер, кире ҡайтырыңды*
*Көткән кешеләрҙе күрмәнем.*
*Ҡайтмаҫыңды беләм, йәшәү ғәзиз һаман –*
*Ҡайтырыңдан күңел һүрмәнем.*

*Эй, һин, ғәзиз ғүмер, кире ҡайтыр булһаң,*
*Аҡ ҡапҡалар асыҡ, бермә-бер.*
*Аһ!*
*Ҡайтыр юлың ябыҡ, шуның өсөндөр ҙә*
*Матурһыңдыр, ғүмер – үрмә гөл!*

## Бер автобус ирҙәр Себер китте

*Бер автобус ирҙәр Себер китте –*
*Бушаны ла ҡалды автовокзал.*
*Елдәр үкһеп перрон һепергәндә,*
*Ҡуптара бит йәнем аһы янъял.*

*Былар нимә – поезд, самолетта*
*Күпме китә Себер башҡорт ире.*
*Шулай яйлап күсә сит ҡулдарға*
*Башҡортостан тигән башҡорт ере.*

---

**Бүрек һалып килеп – урыҫтар килгән осорҙарында һәр ваҡыт баш кейемен һалып, суҡына-суҡына эйелеп башҡорттарҙы сәләмләр булғандар.*

*Үҙ иләндә ҡыҫырыҡланғандан*
*Китәлер ҙә Себер — бар сәбәптер.*
*Оҙон аҡса эҙләп китмәй башҡорт,*
*“Дуҫ” ҡыйратыр тапмаҫ мөсәббәптер.*

*Киткәс үҙе, күпме йөрөп ята*
*Ҡырым-Ҡытайҙарҙан килгән халыҡ.*
*Ҡулда ордер, килһәнеп ер биләй,*
*Беҙҙең түрәләрҙе һатып алып.*

*Башҡортостан, гөлөстаным, тиеп*
*Күңел асҡан саҡта һис хәбәрһеҙ,*
*Һатыла бит донъя сит-ят ҡулға,*
*Аһ, милләтем минең!*
*Ҡасандан һуң шулай һин хәстәрһеҙ?*

*Мулостан, тип күккә сөйөүҙәре*
*Бер ҡатлылығыңдың ҡазаһымы?*
*Әйҙүкләгән дуҫтар өйөрөнөң*
*Ипкә килмәй йәшәр язаһымы?*

*Йәшәп ятҡан дуҫтар һөйләшкәнен*
*Тыңлағанға яҙғы моң була ки,*
*Ҡолағымда ауаз — халҡым һүҙе:*
*Ике дуҫтың береһе ҡол була, ти.*

*Күпме йәбер күргән башҡорттарым,*
*Һанай китһәң батша башлыҡтарын.*
*Тик ул заман сығып китмәгәндәр —*
*Яуға күтәрелгән башҡорттарым.*

*Салауаттар ерен һаҡлар халыҡ,*
*Ҡайҙа таралдығыҙ һеҙ, тоҡомом?!*
*Аҫабалар ере көтә күптән,*
*Мая булып ҡалып ил ҡотоноң.*

*Башҡортостан буйлап йәнем үкһей,*
*Донъя буйлап ҡутарғандай янъял.*
*Эй, кешеләр, илде һаталар, тип*
*Сүкеш уй саң ҡаға, түбәм — һандал.*

# *Һыу — тереклек сығанағы*

## ТӘБИҒӘТ ХӨКӨМӨ

*Тәбиғәттә һыуҙың әйләнеше тураһындағы теория буйынса, ер өҫтөндәге һыу – йылға, күл, быуа һ.б. – парға әйләнеп һауаға күтәрелә һәм, артабан ямғыр йәки ҡар булып, киренән ергә яуа. Ошо күҙлектән ҡарағанда, һыу яткылыктарында тәрәнлек кимәле лә үҙгәрешһеҙ ҡалырға тейеш кеүек. Ғәмәлдә иһә, уҙған быуаттың 60-сы йылдарынан алып, йылға-күлдәрҙә һыу ҡотолғоһоҙ рәүештә кәмей, вағыраҡтары иһә бөтөнләй ҡороп, юҡҡа сыға. XVIII быуатта Өфө губернаһында байтаҡ йөрөп, күп кенә ҡиммәтле мәғлүмәттәр ҡалдырған П. Рычковтың яҙмаларына ҡарағанда, ул дәүерҙәрҙә Ағиҙел йылғаһы Өфө ҡалғаһе янында үҙенә килеп ҡойған Ҡариҙелдән ике тапҡыр мул һыулыраҡ булған. Бөгөн иһә улар – икеһе бер сама, хатта Ағиҙел һайыраҡ та кеүек. Тимәк, һуңғы ике йөҙ йылда Башҡортостандың төп йылғаһы яртылаш һайыҡҡан. Был күренеш киләсәктә лә дауам итһә, йырҙарҙа данланған Ағиҙел тағы ла 200 йылдан караптар йөҙөрлөк йылғанан тауыҡ та аша атлап сығырҙайға әүерелмәҫме?*

*Болгарияла йәшәгән мәшһүр күрәҙәсе Ванга мәрхүмәнең, киләсәктә һыу проблемаһының нефттән дә ҡиммәтерәк буласаҡ, тигән фаразы тураһында, үкенескә ҡаршы, Рәсәй йәмғәтселеге бер ҙә уйланмай кеүек. Ә Ванганың күрәҙәһе бөгөн үк үҙенең ысынбарлыҡҡа яҡынлығын күрһәтеп тора. Былтыр йәй, мәҫәлән, Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһында халыҡты һыу менән тәьмин иткән быуа тиҙ арала юҡҡа сыҡты, ҡала халҡы байтаҡ ваҡыт һыуһыҙ интекте. Волга йылғаһында ла, мәҫәлән, Түбәнге Новгород ҡалаһы янында караптар үтә алмаҫлыҡ һайлыҡтар барлыҡҡа килде.*

*Әлбиттә, ер аҫты һыуҙарының түбәнәйеүе – йылға-күлдәрҙең һайығыуы, моғайын, ошоноң менән аңлатылалыр – фән тарафынан йүнләп өйрәнелмәгән процесс. Бөгөнгө фән, киреһенсә, ни өсөн донъя океанының күтәрелеү сәбәптәре өҫтөндә күберәк баш вата. Был да аңлашыла, сөнки артабан Бөйөк Британия, Голландия кеүек дәүләттәрҙе һыу баҫыу хәүефе айҙан-айға арта бара. Донъя океанының күтәрелеүен ғалимдар Антарктидала боҙҙарҙың иреүе, донъя климатының йылыныуы менән аңлатмаҡсы, сөнки полюстар алмашынғанда бындай күренештәр, йәнәһе, ҡотолғоһоҙ.*

*Ошо күҙлектән ҡарағанда, донъя океаны күтәрелеү ер аҫты һыуҙарының да күтәрелеүенә килтерергә тейеш кеүек. Ғәмәлдә – киреһенсә, ҡыштар – күберәк ҡарһыҙ, йәй ҙә ямғырҙар бик аҙ яуа. Башҡортостанда, мәҫәлән, аҙ ҡарлы ҡыштар хәҙер ғәҙәти хәлгә әйләнеп бара. Был, әлбиттә, ыңғай күренеш түгел, бигерәк тә ауыл хужалығы өсөн. Һөҙөмтәлә яҙғы ташҡында һыу запастарын ишәйткән йылға-күлдәр һайыға.*

*Республика йылғалары һәм күлдәренең һайығыуы теге йәки был ҡала йәки*

*районда ниндәй сағылыш таба, уның сәбәптәре тағы ла нимәлә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап эҙләп, «Ағиҙел» журналы редакцияһы бер нисә район гәзите редакцияһына һәм Һыу ресурстары федераль агентлығы Кама бассейны һыу идаралығының Башҡортостандағы һыу ресурстары бүлегенә мөрәжәғәт итте. Улар әҙерләгән материалдарҙы һәм башҡа мәғлүмәттәр нигеҙендә әҙерләнгән түбәндәге яҙманы журнал уҡыусылары иғтибарына тәҡдим итәбеҙ. Бәлки, проблеманы хәл итеү өҫтөндә уйланған кешеләр үҙҙәренең тәҡдимдәрен яҙып ебәрер. Ни генә тимә, республиканың милли байлығының хәленә битарафлыҡ менән һис кенә лә килешеп булмай.*

## «Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын»

Бөгөнгө башҡорттар, Ағиҙел йылғаһын сүп-сарҙың, производство, тимер юл, төрлө ял итеү йорттары, һыу таҙартыу системаһы булмаған бәләкәй ҡасабаларҙан ағып төшкән хужалыҡ, техноген ҡалдыҡтарҙың ниндәй дәрәжәлә ағыулауын белһә, «Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын, эсә күрмә ғүмерең йәл булһа» тип йырлар ине. Ҡасандыр Башҡортостаныбыҙҙың аҡыҡ ҡашындай аҡ йылғаһын кем бысрата ла, йылға ярҙарындағы ағастарҙы аяуһыҙ ҡырып, йылғаларҙы кемдәр һайыта һуң? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йылғаларға ҡарап һоҡланыусы ла, уны бысратыусы ла ошо ер кешеһе.

Ағиҙел йылғаһы һәм Урал һыу бассейндары объекттары торошон өйрәнеү буйынса Федераль дәүләт учреждениеһының Белорет ҡалаһында урынлашҡан агентлығының баш белгесе Наталья Беляękованың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Ағиҙел йылғаһының Ломовка ҡасабаһы янындағы һыуҙы тикшереү урыны ябылған, сөнки уны финансларға аҡса етмәй. Был ғәмәлдә, иҡтисади кризис тулҡыны Ағиҙелдекенән көслөрәк булып сыҡты, тип аңларға кәрәктер.

Шулай ҙа ҡаланың һыу бассейндарын тикшереү лабораторияһынан Ағиҙел йылғаһының Белорет ҡалаһы янындағы торошо хаҡында мәғлүмәт алыу мөмкинлеге табылды. Металлургия комбинаты, рессор пружиналары заводы, «Водоканал» предприятиеларының таҙартыу ҡоролмалары аша ҡыуҙырылған һыу сифаты буйынса мәғлүмәтте ошо лабораторияға ай һайын тапшырып тора икән. Һыуҙың сифаты ете категория буйынса тикшерелә, уның 27 компоненты һәм сифат күрһәткесе була. Мәҫәлән, 2009 йылдың апрелендә алынған һыу өлгөһө буйынса Ағиҙел йылғаһында тимер мөмкин булған кимәлдән – алты, баҡыр менән цинк – биш, марганец ике тапҡырға күберәк булған. Белгестәр фекеренсә, һыуҙа тимер һ. б. металдарҙың күплеге предприятиелар сығарған ҡалдыҡтарға ғына түгел, ә тәбиғи шарттарға ла бәйле булыуы ихтимал.

Әйтергә кәрәк, һуңғы йылдарҙа һыу ятҡылыҡтарын бысратҡан өсөн предприятиеларға ҙур штрафтар һалыу йылғаның хәлен күпкә яҡшыртҡан. Эре предприятиелар һыу таҙартыу ҡоролмаларын төҙөргә, етештереү ҡалдыҡтарын махсус урындарға түгергә тырыша. Белеүебеҙсә, металлургия комбинатында тиҙҙән тағы бер һыу таҙартыу ҡоролмаһын сафҡа индереү планлаштырыла.

«Урал» гәзите биттәрендә Ағиҙелде бысраныуҙан, һайығыуҙан «ҡотҡарыу» тураһында мәҡәләләр, фекерҙәр бик күп баҫылды һәм әле лә донъя күреп тора. 1989 йылда, мәҫәлән, Магнитогорск дәүләт металлургия институты доценты А. Никулиндың «Ағиҙелде кем ҡотҡарыр?» тигән һорау-мәҡәләһе донъя күргәйне. «Магнитогорск ҡалаһында тыуып үҫеп, ғүмерем буйы шунда йәшәһәм дә, йәмле Ағиҙел йылғаһын һәр саҡ яҡын күрҙем, – тип яҙа автор. – Йәйҙәрен

атайым менән әсәйем мине Белоретта йәшәгән олатайымдарға алып барып ҡуя, һәм мин дуҫтарым менән йәй буйы Ағиҙелдең саф һыуында ҡойоноп, ҡояшта ҡыҙынып рәхәтләнә инем. Ул саҡта «экология» тигән һүҙҙе ишеткән дә булманы.

Башҡортостан халҡы! Донъяла бик һирәк осрай торған милли байлыҡ хәҙергә һеҙҙең ҡулда. Ағиҙелдең «Урал Байкалы»на әүерелеүе ихтимал. Был гүзәл йылғаны һаҡлап алып ҡалыу өсөн көрәште бөгөндән үк башларға кәрәк. Илебеҙҙең төрлө мөйөштәренән килгән туристар менән һөйләшеү ошо хатты яҙыуға сәбәпсе булды. Янымда булһалар, был хатҡа Калининградтан алып Владивостокка тиклемге ҡалаларҙан килгән туристар ҙур теләк менән ҡул ҡуйыр ине. Йылға буйлап экологик экспедиция ойоштороуға (мин унда ҡатнашырға ризамын), уның «ауырыуҙары»н өйрәнергә һәм ваҡытында дауаларға кәрәк. «Йылғаның бөтә таулы өлөшөн Милли парк итергә» тигән тәҡдим индерәм.

Волга рус халҡының киң күңеллелеген сағылдырған йылға булған кеүек, Ағиҙел дә – башҡорттарҙың асылын күрһәткән милли ғорурлығы ул. Әйҙәгеҙ, ҡулға-ҡул тотоношоп, тәбиғәт бүләк иткән ошо гүзәл йылғабыҙҙы һаҡлап ҡалайыҡ».

А. Никулиндың Ағиҙелдең бысраныуы өсөн көйөп-янып яҙған мәҡәләһе сыҡҡандан һуң 20(!) йыл үтеп тә киткән... Ошо ваҡыт эсендә авторҙың һәм башҡаларҙың аҡыллы фекерҙәренә ҡолаҡ һалыусы табылдымы һуң? Юҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кешелек йәмғиәте, тимәк, ер өҫтө һәм ер аҫты байлыҡтарын шәхси һәм ил мәнфәғәттәрендә файҙаланған кешеләрҙең мәсьәләгә бер яҡлы ҡарашы бөтә тәбиғәтте һәләкәткә алып барыуын әле һаман бөтә хәүефлегендә аңларға һәләтле түгел. Бындай хәлдең бик ауыр, бәлки, төҙәтә алмаҫлыҡ эҙемтәләргә килтеререн күҙалламай.

Ағиҙел тураһында һүҙ алып барғанда, уның ҡушылдыҡтары хаҡында ла әйтергә кәрәктер. Белеүебеҙсә, Ағиҙелгә уң яҡлап Ҙур Әүжән, Нөгөш, Һәләүек, Усолка, Еҙем, Эҫем, Өфө, Бөрө, Танып һ.б., һул яҡлап Ҡағы, Үҙән, Ашҡаҙар, Ҡуғанаҡ, Өршәк, Дим, Ҡармасан, Сәрмәсән, Сөн һәм башҡа бик күп эреле-ваҡлы йылғалар ҡоя. Әгәр ҙә Ағиҙел бөгөн ҡаты сирле икән, тимәк, уның ҡушылдыҡтары ла сәләмәт түгел, йәғни ошо йылғалар ярына һыйынып ултырған ауылдар, ҡасаба-ҡалалар халҡы, башҡорт мәҡәлендә әйтелгәнсә, үҙе эскән һыуға үҙе төкөрә.

Белорет металлургия комбинатынан сыҡҡан төтөн, тимер юл бысрағы һ.б. ҡалдыҡтарҙың, ауыр тимерҙең әллә нисәмә төрөнән Ағиҙел йылғаһы ҙур зыян күрҙе һәм әле лә күрә. Шуныһы ғына ҡыуандыра кеүек: бер нисә йыл элгәре, комбинат тулы көскә эшләгән сағында, Ағиҙелдән алған өлгөләр унда ҙур күләмдә ауыр тимерҙәр барлығын күрһәтһә, һуңғы йылдарҙа производствоның күпкә ҡыҫҡартылыуы сәбәпле, һыу бер аҙ таҙарған. Тимәк, эшселәрҙең эшһеҙ ҡалыуы, иҡтисад зыян кисереүе икенсе яҡтан ыңғай күренешкә әйләнеүе лә бар икән. Был хаҡта Ағиҙел һәм башҡа йылғаларға анализ яһау буйынса эшләгән белгестәр ошондай мәғлүмәттәр килтерә. Тик, нисек кенә булмаһын, комбинаттан күрелгән зыяндың кәмеүе «йылға сафланды» тигәнде аңлатмай, сөнки уны бысратыусы башҡа объекттар, ойошмалар, төҙөлөш предприятиеларының көндөң-көнө арта барыуын да онотмайыҡ. Шәхси эшҡыуарҙар, етәкселәр ҙурыраҡ килем алыуҙы ҡайырған мәлдә, бер ниндәй экология һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау комитеты ла, белгестәр ҙә йылғаларҙы тулыһынса һаҡлай һәм яҡлай алмаясаҡ. Тик ҡаты закон һәм уның үтәлешен эҙмә-эҙлекле күҙәтеү, бойомға ашырыу ғына хәл торошон ыңғай яҡҡа үҙгәртә аласаҡ. Бөгөн республикабыҙҙың төп йылғаһы, бер ҡасан да булмағанса, кеше, хөкүмәт, ил башлыҡтары, урындағы

етәкселәрҙең айыҡ аҡылына мохтажлыҡ кисерә. Донъя ғалимдары фараз ҡылыуынса һәм дәлилдәр менән раҫлауынса, бер нисә йылдан бөтә кешелек алдына нефть түгел, ә эсәр һыу етешмәүе кеүек хәүефле мәсьәлә килеп баҫасаҡ. Шул көндө яҡынайтмаҫ өсөн барыбыҙ ҙа бәләкәй генә йылғаның, шишмәнең һәм һыу ятҡылыҡтарының, Ағиҙел, Инйәр, Ҡыҙыл һ.б. йылғаларыбыҙҙың ҡәҙерен бөгөн белергә бурыслыбыҙ. Бөгөн Ағиҙел йылғаһы буйында Белорет һәм Йомағужа һыуһаҡлағыстары урынлашҡан. Ошо йылға буйында Белорет, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Өфө, Благовещен, Бөрө, Дүртөйлө, Ағиҙел ҡалалары һәм район үҙәктәре халҡы көн итә. Күпме халыҡ Ағиҙелгә генә ҡарап тора, әммә ләкин уның тамсы ғына ла ҡәҙергенәһен белмәй: тиҙәген, сүбен, мазутын, ағыуын – бөтә төр техник ҡалдыҡтарҙы ла шунда ташлай, техникаһын, башҡа бысранған нәмәһен шунда йыуа. Ошо аҡылһыҙлығы менән йылғаларҙың, тимәк, кешелектең ғүмерен ҡыҫҡартыуын ғына аңлай алмай кеше!

**З. АБЗАЛОВА.**
**Белорет районы**.

# Эсер һыуҙан Хоҙай айырмаһын

Һыу – йәшәү сығанағы. Тәбиғәт ҡанундары буйынса, кешелек һауа, утһыҙ йәшәй алмаған кеүек, һыуһыҙ ҙа йәшәй алмай. Эсәр һыуҙы беҙ, нигеҙҙә, йылға-күлдәрҙән, саф һыулы шишмәләрҙән алабыҙ. Шөкөр, районыбыҙ һыу байлыҡтарына мохтажлыҡ кисермәй. Башҡортостандың иң оло йылғаһы – Ағиҙелдең районыбыҙ буйлап ағыуы менән дә ғорурлана алабыҙ. Тик үткән йылғы көйҙөргөс ҡоролоҡ, экологик талаптарҙың дөрөҫ үтәлмәүе, тәбиғәтте артыҡ тәләфләү күп кенә йылға-күлдәребеҙҙең һайығыуына килтерҙе. Һөҙөмтәлә һыуға мохтажлыҡ артты. Меңәр йыллап тарих хәтерен һаҡлап килгән йылғалар, ваҡ шишмәләребеҙҙең юҡҡа сыға барыуы – оло борсоуға һалырлыҡ хәл. Ысынлап та, һуңғы осорҙа шишмәләр ҡороп, йылға-күлдәрҙең һайығыуына бәйле көнүҙәк проблемалар йышайҙы. Уның сәбәптәрен асыҡлау өсөн, «Таң» гәзите редакцияһы оло быуын вәкилдәренең бер нисәһенә мөрәжәғәт итте.

**Абдулла ВАҺАПОВ**, *Иҫке Собханғол ауылының һуғыш һәм хеҙмәт ветераны:*

– Әүәле, йылғалар ҡорой, тигәнде хәтерләмәйем. Ололар һәр саҡ: «Һыу буйҙарын бысратмағыҙ, эргә-тирәһендәге ағастарҙың ботаҡтарын һындырмағыҙ!» – тип иҫкәртә торғайны. Әллә тәртип шундай көслө булды, беҙ, балалар, ололар һүҙенә ҡолаҡ һалдыҡ. Һаҡһыҙ тәләфләү, тирә-яғындағы ағастарҙы ҡоротоу тигән нәмә булманы, һыу таҙа булды. 30-сы йылдарҙағы Алағуян йылғаһын хәҙергеһе менән сағыштырып ҡарайым да, иҫ-аҡылым китә. Йылға бөтөнләй һайығып, бөтөп бара. Ҡыш көндәре йылға төбөнә ҡуша туңып, хатта балыҡтар үлеп бөтә. Эргә-тирәһендәге ҡуйы әрәмәлекте, ерек, йөҙ йыллап үҫеп ултырған тирәк ағастарын ҡырҡып бөтөрөп баралар. Ағиҙелдәге ҡабырсаҡ эсендә ятҡан ҡусҡарҙар һәм ҡыҫалалар үҙҙәре үк һыуҙың таҙалығын күрһәтә ине. Һыу бысранып бөткәс, улар ҙа юҡҡа сыҡты. Колхоз малдарын шунда һыу эсергәндә, малдарҙы саҡ аша күммәй ине йылға. Ә хәҙер тауыҡ кисеп үтмәле ҡалды. Алағуян тамағының һыуы кәмеп, бөтөнләй ҡороп, таштары ғына һерәйешеп ята. Тирә-йүнендәге ағастарҙы ҡырҡҡас, ағас тамыры һыуҙы тартып сығара алмай. Тағы бер мөһим сәбәптәрҙең береһе – йылға ярында йәшәүсе халыҡтың һәр береһе үҙе йәшәгән йорт эргәһенән йылғаны соҡоп, таш менән быуып

бөтөрә. Үҙенә һыу булһа етте, башҡа кешене уйлап та бирмәй. Ул ғына ла түгел, буйынан-буйына трактор менән йылға ярын һөрҙөрөп, ағышын боҙоп бөтәләр. Ә киләсәк быуын өсөн нимә ҡалыр – билдәһеҙ.

**Әхмәт ЗӘЙНУЛЛИН**, *Байназар ауылынан, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны:*

– Былтыр ҡоролоҡ бигерәк көслө булды шул. Ауыл янындағы Ҡарайғыр, Ҡурғашлы йылғалары ҡороп бөттө. Көлтәүгер, Бешеке кеүек кесе йылғаларҙың һыуы ҡырҡа кәмене. Ни тиклем оло йылға тип иҫәпләнгән Ағиҙел һайығып ҡуйҙы. Ҡасандыр ул йылға буйлап һал, бүрәнә ағыҙалар ине. Бөгөн иһә ҡайһы бер урындарҙа кәмәләр ҙә йөҙөп сығырлыҡ түгел. 1975 йылғы иң көслө ҡоролоҡта ла йылғалар бик ҡоромағайны әле. Былтыр көслө ҡоролоҡҡа балыҡтар ҙа зыян күрмәй ҡалманы.

**Ҡазыйхан ИШМОРАТОВ**, *Иҫке Собханғол ауылынан, хеҙмәт ветераны:*

– Боронғо заманда һәр йылдың эйәһе булған. Һәр йыл айырым хайуан исеме, мәҫәлән, Сысҡан, Эт, Ҡуй, Һыйыр, Маймыл һәм башҡа йылдар менән атап йөрөтөлгән. Ҡайһы йылдың нисек килеүен ошо хайуандар исеменә бәйләп фаразлағандар. Сысҡан, Эт, Йылҡы йылдары ҡоро килһә, Тауыҡ, Йылан йылдарын да маҡтамағандар. 1921, 1941, 1975 һәм 2009 йылғы ҡоролоҡтар ҙа тәбиғәткә тәьҫир итмәй ҡалмаған. Ваҡытында ҡар-ямғыр яумағанлыҡтан, ер, һыу ҡороно, ағастар дымды һаҡлай алмай, йылғалар һайыҡты. Һыу кәмеүҙең икенсе сәбәбе – кешеләрҙең йылға буйында үҫеп ултырған ағастарҙы күпләп ҡырҡыуында. Элекке ваҡытта һыу буйына өс саҡрым яҡын урынлашҡан ағастарҙы ҡырҡыу тыйылған. Ағиҙел йылғаһының бирьяғында ла ҡуйы әрәмәлек үҫте, туғай еләге лә бар ине.

**Әмир САФИН**, *Кейекбай ауылы:*

– Йылғаларҙың ҡороуы иң элек ямғырҙарҙың һирәк яуыуына бәйле, тип уйлайым. Ярай, беҙҙең районда тау-ҡаялар дымды һаҡлап тора. Быйыл Кейекбайҙа Көргәс йылғаһының һыуы кәмене. Сәбәбе – ҡоролоҡ. 1975 йылдағы ҡоролоҡ һаман да иҫтә. Шүлгәнташ ҡурсаулығына етмәҫ борон, Йылҡысыҡҡан күле буйындараҡ, Ығышма күле бар. Шулай бер көн иртән тороп һыуға килдем. Биҙрәмде тултырып һыу алып ҡайтып киттем. Төш мәлендәрәк йәнә шунда ыңғайланым. Күл буйына яҡынлашҡас, ғәжәпләнеүемдән телһеҙ ҡалдым: күлдә бер тамсы ла һыу ҡалмағайны. Көндөң хәтһеҙ эҫе тороуы, күрәһең, һыуҙы шулай юҡҡа сығарған. Күп тә үтмәне, ҡойоп ямғыр яуырға тотондо. Тәүлек эсендә күл ҡабаттан һыу менән тулды. Был хикмәтле тәбиғәт серен аңламаҫһың. Шуға быйылғы ҡоролоҡҡа ла артыҡ борсолаһы түгел. Һыуға мохтаж йылғалар бер күкрәп ямғыр яуыу менән элекке хәленә ҡайтыр, тип уйлайым.

**Ирек ШӘРӘФЕТДИНОВ**, *туризмды үҫтереү буйынса координацион советы ағзаһы:*

– Берҙән, йылға буйында үҫеп ултырған күпме ағас ҡырҡыла; икенсенән, йыл һайын йылға буйлап күпме турист ағып төшә. Ярай ҙа, тәбиғәткә һоҡланып ҡына ҡайтып китһәләр. Яр буйҙарында туҡтап, эргә-тирәһенә сүп-сар түгеп, тәбиғәткә зыян килтерә бит улар. Айырым туҡталыш та ҡуйылмаған, тағы ла туристар төркөмө өсөн рекрацион биләмә кәрәк ине. Закон булмағас, ҡайҙа етте шунда туҡтап, арттарынан әллә күпме сүп ҡалдырып китәләр. Утынды үҙҙәре

менән алып килмәйҙәр, ағасты ҡырҡып яғалар. Әгәр урындағы етәкселәр, ауыл Советтары, экологик белгестәр тарафынан көслө күҙәтеү сараһы күрелһә, бындай хәл бик үк булмаҫ ине.

**З. ӘМИРОВА.**
**Бөрйән районы.**

## Йылға ярҙамға мохтаж

Өлкән быуын кешеләре шаһит: һуңғы 20 – 30 йылда йылға-инештәр күҙгә күренеп һайыҡты, бик күп шишмәләр, күлдәр юҡҡа сыҡты. Уларҙан туйынған Ағиҙел кеүек ҙур йылғалар ҙа күпмелер дәрәжәлә һайыға төштө. Ерҙәге сөсө һыуҙың күләме кәмемәне, әлбиттә, ул ер аҫтына китә бара. Һыуһыҙ далалар, ҡомлоҡтар шулай барлыҡҡа килә. Уларҙа ла, тәрәнгә соҡоһаң, һыу табырға мөмкин.

Йылғалар һайығыуҙың сәбәбе – урмандарҙы киҫеү, һаҙлыҡтарҙы ҡоротоу, баҫыуҙарҙы йылға ярҙарына терәтеп һөрөү. Тәбиғи процестар ҙа бара, мәҫәлән, йылдар үткән һайын йылға, ерҙе ашап, түбән төшә. Был бейек «минераль» ярҙар барлыҡҡа килтерә. Ғалимдар фекеренсә, улар, ҡан тамырын киҫкәндәй, ер аҫты һыуҙарының юлдарын аса. Һыу шыбырҙап ағып ятмаһа, аҡрын ғына парға әйләнә. Үҙ сиратында был йәнә шишмәләр һанын кәметә, йылғаларҙың өҫлөгөн аҫҡараҡ төшөрә.

Йылғалар һайығыуҙың тағы бер сәбәбе – гидротехник эштәрҙе уйламай алып барыу. Дүртөйлө районы Күсергес ауылы янында Ағиҙелдең күл рәүешендә ҡалған иҫке юлы бар. Уны урыҫса Старица, урындағы телдә «Үле Иҙел» тиҙәр. 1950 йылдар башына ҡәҙәр Сәкәт күле ҡаршыһында Ағиҙел ҙур «элмәк» яһап аҡҡан. Шул элмәк башланған һәм тамамланған тәңгәлдә ярҙар араһы бер саҡрымдан артмай. Яҙғы ташҡында, билдәле, был тирәләр, һыу баҫып, ҙур-ҙур тулҡындар ҡосағында ҡала һәм пароход-баржаларҙы болон-туғайҙар аша тураға ағыҙа башлай. Шуға күрә, Ағиҙелдең юлын «турайтырға» булып, 40-сы йылдар аҙағында киң траншея ҡаҙыйҙар. Йылға яңы юл буйлап ағып киткәс, иҫкеһе аҡрынлап һайыға. «Ҡорһаҡтары» төпкә тейә башлағас, баржалар ҙа йөрөүҙән туҡтай. Ауыл янындағы элеватор ябыла.

Ағиҙелде турайтыу уны күпмелер дәрәжәлә һайыҡтырған. Бормалы йылға юлының ярҙары, һыуҙы тоткарлап, тәрәнлек-киңлек мөнәсәбәтен һаҡлай, һыу матур булып йәйелеп, талғын ғына аға. Бындай урындарҙы «шаршы» тип атайҙар. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: йылғалар туп-тура аҡһа, юлдары тәрәнәйеп-тарайып, ҡыҙыу ағымлы канал яһалыр ине. Тәбиғәт закондары буйынса былай ҙа һәр йылға «турайырға» тырышып аға. Ағиҙел, Кама, Иҙел кеүек оло йылғалар буйында ҡыйғас-ҡыйғас булып ятҡан күп һанлы оҙонса күлдәр – уларҙың иҫке юлы. Топонимика телендә әйткәндә, ҡылы күлдәр. Һыу ерҙе ашап, йылғалар яңы юл ярған, быуаттар дауамында һиҙелерлек турайған. Был – йылғаларҙы һайыҡтырыусы тәбиғи процестың икенсеһе.

Йылғаға насар йоғонто яһаған йәнә бер гидротехник сара бар. Ташҡын ваҡытында, Ағиҙел киң йәйелеп, ҡылы күлдәрҙе һыу баҫа. Был улар өсөн файҙаға ғына, сөнки ташҡын уларҙы хәрәкәткә килтерә, йәйҙе күлдәр таҙарып ҡаршылай. Һыу ташҡанда Ағиҙелдән балыҡтар керәп, шунда ыуылдырыҡ сәсә. Әммә Ағиҙелдең түбән ағымындағы унлаған күлде хәҙер һыу баҫмай, сөнки Түбәнге Кама һыуһаҡлағысын төҙөү күп урындарҙа һыу баҫыу ҡурҡынысы тыуҙырҙы.

90-сы йылдарҙа Ағиҙелдең түбән ағымында дамбалар төҙөй башлағас, күп күлдәр йылғанан айырылып ҡалды. Быуаттар буйы килгән һыу режимы боҙолдо, балыҡтар ыуылдырыҡ сәсергә урын тапмай яфалана. Ағиҙел һыуҙары «йыуып» сыҡмағас, күлдәр тынсый, һайыға һәм һаҙлана. Ярҙарындағы ҡылы күлдәрҙең ҡороуы ла йылғаны һайыҡтыра төшә.

Һайығыуҙың йәнә бер сәбәбе – йылғаны тәрәнәйтеү эштәренең ныҡ һүлпәнәйеүе. 80-се йылдарҙа Ағиҙел буйлап йылына уртаса 8 миллион тонна йөк ташығандар. Һәр ун-ун биш минут һайын теплоход йә иһә баржа үтеп китә торғайны. Ул йылдарҙа, суднолар күп йөрөгәс, һыу юлын тәрәнәйтеү эштәре әүҙем барҙы. Хәҙер ташылған йөк күләме миллион ярым тоннаға ла етмәй. Былтыр, кризис арҡаһындалыр, йөк ташыу бөтөнләй кәмене. Ҙур дәүләт сауҙа предприятиелары ябылып, һатыу-алыу эштәре ваҡ сауҙагәрҙәргә ҡалды. Ә уларға иһә йөктө машина менән ташыу ҡулайыраҡ. Хәҙер шаршылар аҙ тәрәнәйтелә, баржалар яртылаш ҡына тейәлә. Тәрән ултырыусы баржалар бөтөнләй йөрөй алмай. 1990 йылдарға тиклем Ағиҙелдә тәрәнлекте 240 сантиметрҙан кәметмәнеләр. Йылғала ҡом алыусы 17 земснаряд эшләһә, хәҙер улар бөтә ойошмаға икәү ҡалған.

Ҡоро килгән йылдарҙа Ағиҙелдең өҫкө ағымында ҡом утрауҙары хасил була. Түбәнерәк төшкән һайын ағым аҡрыная, йылға тәрәнәйә. Селиванов тауҙарын үткәс, Йосоп шаршыһынан һуң йылғаның һайығыуы бөтөнләй һиҙелмәй. Шулай ҙа пароходсылыҡтың Әңгәсәк участкаһында эшләүсе өлкән механик Павел Куликов әйтеүенсә, йылғаның шулай һайығыуын былтыр ул тәүләп күргән. Ҡышын ҡар аҙ булды, йәй ҙә ҡоро килде. Йылғаның тәрәнлегенә ҡар-ямғырҙар күләме лә ныҡ тәьҫир итә бит.

Әйткәндәй, Түбәнге Кама һыуһаҡлағысының кимәлен күтәреү хаҡында һүҙ бик күптән йөрөй. Типкене Дүртөйлө тирәһендә Ағиҙелдең минималь тәрәнлеген 3,5 метр тирәһендә тотор, суднолар йөрөү шарттарын яҡшыртыр ине. Әммә шул яғы бар: был, ағымдың тиҙлеген кәметеп, тирә-яҡтың һаҙланыуына килтерәсәк. Яҙ һайын ташҡындар йыуып үтһә генә, йылға таҙа тора.

**И. ТИМЕРХАНОВ.**
**Дүртөйлө районы.**

## «Sos!» тип әйтер ине Ағиҙел

Ағиҙел – республикабыҙҙың төп һыу байлығы. Был исем уға, моғайын, борон, саф, аҡһыл-көмөш төҫөндә булғаны өсөн бирелгәндер. Йылға Учалы районының Яңы Хөсәйен ауылынан дүрт саҡрымда Әүәләк һыртының көнсығыш битләүенән ағып сыға. Артабан ул Белорет, Бөрйән, Мәләүез, Күгәрсен, Көйөргәҙе, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Ғафури, Ауырғазы, Ҡырмыҫҡалы, Архангел, Иглин, Өфө, Благовещен, Кушнаренко, Бөрө, Дүртөйлө, Борай, Илеш һәм Краснокама райондары биләмәләре буйлап ағып, Кама йылғаһына ҡоя. 1430 саҡрым оҙонлоғондағы Ағиҙел – Каманың иң мул һыулы ҡушылдыҡтарының береһе. Йылғаның 13 меңгә яҡын эреле-ваҡлы ҡушылдығы булып, уларҙың дөйөм оҙонлоғо 57,3 мең километрға етә. Ә 11 йылғаның оҙонлоғо иһә 200 километрҙан да оҙонораҡ. Ағиҙел башлыса ҡар һыуҙары менән тулылана.

Физик-географик шарттары буйынса республиканың төп йылғаһы өс өлөшкә: таулы (сыҡҡан урынынан Мәләүез ҡалаһына ҡәҙәр), тау-тау алды (Өфө ҡалаһына тиклем) һәм үҙәнгә (Өфөнән тамағынаса) бүленеп йөрөтөлә. Йылғаның

таулы өлөшө Урал, Ҡыраҡа, Баштау, Йүрмәтау һ.б. урындар аша ағып үтә. Бында башлыса рифей һәм палеозой осоронда барлыҡҡа килгән кварц, ҡом, эзбиз, сланец тоҡомдары өҫтөнлөк итә. Тәүҙә Ағиҙел көньяҡ-көнбайыш йүнәлештә һаҙлыҡлы үҙәнгә буйлап аға. Тирлән ҡасабаһынан ары уның үҙәне ҡапыл тарая, ҡайһы бер урындарҙа, ярҙары текә булып, урмандар менән ҡапланған. Мәләүез районының Һыртлан ауылынан түбәндә йылға киң үҙән буйлап аға. Бында уның киңлеге урыны менән 200 – 500 метрғаса етә. Ярҙары ла бик бейек.

Мәләүез ҡалаһынан һуң Ағиҙел йүнәлешен ҡапыл төньяҡҡа үҙгәртә. Уның һул яҡ яры урманлы дала һәм даланан хасил булһа, уң яғы иһә ҡатнаш урмандар менән ҙур булмаған ҡалҡыулыҡтарҙан тора. Ҡариҙел килеп ҡушылғандан һуң, Ағиҙел үҙән йылғаһына әүерелә. Урыны менән 16 километрға еткән үҙән буйлап аҡҡанда, йылға ҡултыҡтарға бүленә. Белорет һәм Йомағужа һыуһаҡлағыстары Ағиҙел йылғаһы иҫәбенә тулылана.

Башҡортостандың Белорет, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Өфө, Благовещен, Бөрө, Дүртөйлө, Ағиҙел ҡалалары ошо йылға ярҙарын төйәк иткән. Уң яҡ ҡушылдыҡтары: Оло Әүжән, Нөгөш, Һәләүек, Егән, Усолка, Еҙем, Ҡариҙел, Бөрө, Йүгерек Танып һ.б. Һул яҡ ҡушылдыҡтары: Ҡағы, Үҙән, Ҡана, Ашҡаҙар, Ҡуғанаҡ, Өршәк, Дим, Ҡармасан, Сәрмәсән, Яубазы, Кеүәш, Базы, Сөн һ.б. йылғалар. Ағиҙел буйында 2720 күл булып, уларҙың майҙаны 428 квадрат километр тәшкил итә.

Йылға бассейны тигеҙ булмауы менән айырылып тора. Мәҫәлән, уның уң яғы һул яғынан ике тапҡыр ҙурыраҡ. Шартлы рәүештә йылғаны ағымына ҡарап та өс өлөшкә бүлергә мөмкин. Сыҡҡан урынынан алып Мәләүез районының Ира ауылына тиклем Ағиҙелгә бик күп ваҡ йылғалар: Әүнәр, Нура, Төньяҡ Үҙән, Көхтөр, Ҡағы, Әүжән, Ырғыҙлы килеп ҡушыла. Урыны менән йылғаның тәрәнлеге 1 – 2,5 метрға етә. Ағиҙелдең урта ағымында ярҙарын ашау күренеше йыш күҙәтелә. Бында ул ныҡ киңәйә, күлдәр, ҡултыҡтар хасил итә. Мәләүез, Стәрлетамаҡ ҡалалары тирәһендә йылғаның киңлеге 7-8 километрға етә. Ошонда Ағиҙел, Мәнәүез, Оло Нөгөш, Ашҡаҙар, Егән, Еҙем, Эҫем, Ҡармасан, Өршәк йылғалары иҫәбенә тулылана төшә. Эҫем йылғаһынан өҫтәрәк йылғаның тәрәнлеге ике метр булһа, ҡалҡыу урындарҙа 25 – 60 сантиметрҙан уҙмай. Артабан Ағиҙелдең тәрәнлеге өс-дүрт метрға етеп, ҡалҡыу урындарҙа 50 – 60 сантиметрға тиклем һайыға.

Ҡариҙел килеп ҡойғандан һуң – ә ул Ағиҙелдең иң мул һыулы ҡушылдығы – йылға киңәйә, тәрәнәйә: киңлеге уртаса 400 метрға тиклем етә. Шул уҡ ваҡытта Бөрө ҡалаһы янындағы «Һандуғас тамағы» һәм Дүртөйлөгә яҡын «Ҡаҙ тамағы» тип аталған урындарҙа Ағиҙел 100 метрғаса тарая. Һуңғы ағымында йылғаның иң тәрән ерҙәре 5 метрға етә, ҡалҡыуыраҡ урындарҙа 1 – 1,5 метр тәшкил итә.

Республикабыҙҙың төп йылғаһының һуңғы йылдарҙа күҙгә күренеп һайығыуы бер кемгә лә сер түгел. Ошо айҡанлы «Башкирэнерго» асыҡ акционерҙар йәмғиәте, Ҡариҙел һәм Ағиҙел йылғаларында һыу кәмеүҙең сәбәптәрен асыҡлауҙы һорап, 2008 йылдың 25 июлендә Һыу ресурстары федераль агентлығы Кама бассейны һыу идаралығының Башҡортостан республикаһындағы һыу ресурстары бүлегенә мөрәжәғәт итә. Бүлек начальнигы В. Горячев ҡул ҡуйған «Ағиҙел йылғаһы бассейнында һыу кимәле түбәнәйеү тураһында аналитик яҙма» тигән документта түбәндәге юлдар бар. Йылғаның һайығыуы тәбиғи һәм техноген сәбәптәр менән аңлатыла. Һуңғыһына йылға үҙәненә кешенең

күпләп ҡыҫылыуы, һыуҙы күпләп тотоноу, йылғанан төрлө ҡаҙылма байлыҡтар алыу, йылға төбөн тәрәнәйтеү эштәре, яһалма ҡоролмалар-күперҙәр, туҡтау урындары (причал), һыу аҫты торба үткәргестәре төҙөү һ.б. күренештәрҙе индерергә мөмкин. Кеше эшмәкәрлегенең иң ҙур зыяны итеп белгестәр йылға төбөнөң эрозияһын, унда ҡатламдарҙың үҫә барыуын һәм йылға ярҙарының ашалыуын иҫәпләй. Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары төбөнөң Өфө ҡалаһы янында йыл һайын 3 – 5 сантиметрға күтәрелеүе күҙәтелә. Ошондай уҡ күренештәр Октябрьский, Туймазы, Күмертау, Стәрлетамаҡ ҡалалары урынлашҡан йылғаларға ла хас. Йылғаларҙа һыу кимәленең түбәнәйеүе унда транспорт йөрөтөүгә ҡамасаулай, яһалма ҡоролмаларҙың тотороҡло эшләүен кәметә, йылғаларҙағы һыу күренештәрен күҙәтеүҙе ҡатмарлаштыра һәм хужалыҡ эшмәкәрлегенә һыу алыу ҡырҡа ҡыйынлаша.

Һыу аҫтынан ҡом-ҡырсын алыу менән бергә, төрлө юл эштәре лә йылғаларҙың һайығыуына килтерә. Мәҫәлән, Өфө – Бөрө ҡалалары араһында һуңғы 15 йылда йылға төбөнән йыл һайын 1,4 – 4 миллион кубометр ҡом-ҡырсын алынған. Баш ҡаланан 80 – 90 километр түбәндә Ағиҙел йылғаһының төбө айырыуса ҙур зыян күргән.

Һуңғы йылдарҙа алып барылған күҙәтеүҙәрҙән күренеүенсә, Ағиҙелдә һыу кәмеүҙең иң түбән нөктәһе 1998 йылдың 9 августында теркәлгән – 130 сантиметр. Был көндө Павловка һыуһаҡлағысынан секундына 173 кубометр һыу ағыҙылған. 2003, 2006, 2007 йылдарҙа, һыу ташмау сәбәпле, Ағиҙел ныҡлы һайыҡты. Был күренеш ентекле өйрәнелмәһә лә, шуныһы асыҡ: күп йыллыҡ күҙәтеүҙәр етди саралар күреүҙе талап итә. 2003 йылдың ноябрь аҙаҡтары – декабрь баштарында баш ҡаланың 2-се ТЭЦ-ы, УНПЗ һәм НУНПЗ предприятиелары һ.б. хужалыҡ итеүселәр һыу етмәү арҡаһында эште туҡтатыу хәүефе кисерҙе. Уларға Павловка һәм Нөгөш һыуһаҡлағыстары ярҙам күрһәтмәһә, эш ни менән барып бөтөрө билдәһеҙ ине. 2006 һәм 2007 йылдарҙа ошондай ҡытлыҡ тағы ҡабатланды. Һыуҙарҙың зарарлы йоғонтоһо буйынса ведомство-ара республика комиссияһы Павловка һыуһаҡлағысынан күпмелер һыу ағыҙыу тураһында ҡарар сығарырға мәжбүр булды.

2004 йылдың 1 мартында Башҡортостан хөкүмәте «Йылғалар һайыҡҡан мәлдәрҙә һыу кимәлен кәрәкле дәрәжәлә тәьмин итеү саралары тураһында»ғы күрһәтмәне раҫланы. Ошо документтың 24-се пунктында билдәләгәнсә, Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғаларының төбөн өйрәнеү буйынса ғилми-тикшеренеү, проект-эҙләнеү эштәре алып барыу ҡаралғайны. Был эшмәкәрлек башланған кеүек тә ине, әммә аҙағына еткерелмәне.

Юғарыла атап үтелгән Һыу ресурстары федераль агентлығының Башҡортостандағы бүлексәһе йылғаларҙа хәлде төҙәтеү өсөн түбәндәге сараларҙы тәҡдим итә:

1. Республика прокуратураһына Башҡортостан Республикаһы хөкүмәтенең 2000 йылдың 2 ғинуарында ҡабул ителгән «Руда булмаған файҙалы ҡаҙылмалар сығарғанда һыу менән һаҡ эш итеү ҡағиҙәләре» тураһында ҡарарын боҙоусыларға ҡарата тейешле саралар күрергә ҡушырға.

2. Йылғаларҙа ҡаҙылма байлыҡтар сығарыу һәм яһалма ҡоролмалар (күпер, туҡтау урындары, һыу аҫты торбалары) төҙөү кеүек күренештәрҙең йылға үҙәненә йоғонто яһауын ентекле өйрәнергә.

3. Файҙалы ҡаҙылма байлыҡтарҙы сығарыуға рөхсәт биргәндә теге йәки был

предприятиеның һыу кимәлен һаҡлау буйынса өҫтәмә саралар күреүенә өлгәшергә һ.б.

Рәсәй Федерацияһы һыу менән тәьмин ителеше буйынса – бер кешегә иҫәпләгәндә, йылына 29,3 мең кубик литр тура килә – донъяла иң бай дәүләттәрҙең береһе. Ләкин географик урыны менән бәйле Башҡортостан үҙенең һыу запасы менән маҡтана алмай, сөнки беҙҙә был күрһәткес ни бары 8,7 мең кубик метр тәшкил итә. Ағиҙел йылғаһы буйында урынлашҡан Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат ҡалалары йылына тиңдәшле рәүештә 305 – 345 миллион, 130 – 140 миллион һәм 55 – 65 миллион кубик метр һыу тотона. Һандар ҙур, шул арҡала һыуҙы һаҡсыл тотоноу мәсьәләһе хәҙер айырыуса ҡырҡыулаша. Йылғалар кимәле ҡырҡа кәмегән мәлдәрҙә ҡалаларҙағы эре предприятиеларҙы, халыҡты Павловка (һыйҙырышлылығы 1,4 миллион куб. метр) һәм Нөгөш (400 миллион куб. метр) һыуһаҡлағыстары ауыр хәлдән ҡотҡара.

Белгестәр фекеренсә, Рәсәйгә яҙғы ташҡындар түгел, ә һыу ҡытлығы хәүефе янай һәм ул айырыуса Волга төбәгенә ҡағыла. Ә бында йылғалар һайығыу 20 –30 йыл һайын ҡабатланып тора, ти белгестәр. Һыу етешмәү – ҡатмарлы күренеш һәм ниндәйҙер өҫтәмә саралар күреүҙе талап итә. Мәҫәлән, һыуһаҡлағыстарҙы тәрәнәйтеү, һыу алыу ҡоролмаларының эшен камиллаштырыу һ.б. Һыу ресурстары агентлығы тәҡдим иткән саралар араһында барлыҡ тармаҡтарҙа ла, айырыуса һуғарыуҙа һыу тотоноуҙы кәметеү, ғөмүмән, һыу ҡулланыуҙы арттырмау, ҡалаларҙа һыуҙы сәғәтләп кенә биреү, үҙенең һыу һурҙырыу ҡоролмалары булған предприятиеларға дөйөм селтәрҙе ябыу кеүек популяр булмаған саралар ҙа бар.

Был саралар араһында шишмә-инештәрҙе ләм баҫып китеү кеүек йылғаларҙың һайығыуына килтереүсе сәбәптәрҙе булдырмау өсөн йылғалар үҙәнен таҙартыу кәрәклеген, моғайын, иң мөһиме тип иҫәпләргә кәрәктер. Был Ағиҙел йылғаһына ғына түгел, ә уға ҡойған эре һәм ваҡ йылғаларға ла ҡағыла. 2008 йылдың декабрендә, мәҫәлән, Өфө ҡалаһы янында Ағиҙелдең кимәле 128 сантиметрға түбән булған бер ваҡытта Ҡариҙелдең Шаҡша ҡасабаһы янындағы кимәле 105 сантиметрға юғарылығы теркәлгән. Ысынлап та, Ҡариҙел, ҡасандыр Ағиҙелдән ике тапҡыр һайыраҡ йылға, хәҙер Башҡортостандың төп йылғаһын был йәһәттән уҙып китте. Тимәк, бында һауа шарттарының йоғонтоһон ғәйепләп булмай. Ҡариҙел үҙе лә, уға ҡойған башҡа йылғалар ҙа үҙҙәренең һыу кимәлен һаҡлай алған, ә Ағиҙел иһә – юҡ. Ошо миҫал үҙе үк Башҡортостандың төп йылғаһы менән хәлдәрҙең көсөргәнешлелеген күрһәтеп тора.

Оло быуын кешеләренең фекеренсә, Башҡортостан гүзәленең һайығыуына элекке йылдарҙа күпләп һал ағыҙыу ҙа үҙенең мөһөрөн һуҡмай ҡалмаған. Йылға үҙәнендә батып ҡалған ағастар байтаҡ һәм улар, билдәле, ләмдәр барлыҡҡа килтереп, йылғаны шаҡтай дәрәжәлә һайыҡтырған.

90-сы йылдар баштарында, япон эшҡыуарҙары ошо ағастарҙы (топляк) һыу төбөнән йыйып алырға тәҡдим иткән дә, республика хөкүмәте быға ризалыҡ бирмәгән, имеш, тигән хәбәр ишетелеп ҡалғайны. Ғәмәлдә япондар йылға үҙәнен таҙартһа, Ағиҙелдең сифаты ғына яҡшырып ҡалмаҫ, төңөлөп ятҡан шишмәләре лә асылып, һыуы тәрәнәйер ине. Ҡыҙғаныска ҡаршы, беҙҙә сәйәсәт, йыш ҡына зыянлыһы, алдан йөрөй шул.

Әлбиттә, йылға үҙенең ҡушылдыҡтары иҫәбенә тулылана, тәрәнәйә. Хәтерҙә, 60-сы йылдарҙа мин тыуып үҫкән Табылды ауылы (Стәрлебаш районы) аша аҡҡан Ҡоро Күндрәк йылғаһы ла әлеге Ашҡаҙарҙан байтаҡҡа мул һыулыраҡ була

торғайны. Ә инде күрше Күндрәк йылғаһы иһә ул саҡтарҙа әлеге Димдән дә кәм булмағандыр. Ни бары ярты быуат үткән. Ә эҙемтәләр – иҫ китерлек.

Миңә 2009 йылдың йәйен Дим йылғаһы буйында үткәрергә тура килгәйне. 2008 йылғы менән сағыштырғанда йылға кәмендә бер метрға түбән булып, июнь урталарындағы 30 – 35 градус эҫелектә ул тағы ла нығыраҡ һайыҡты. Димде мин уҙған быуаттың 70-се йылдары аҙағынан бирле күҙәтеп киләм. Ул саҡтарҙа йылға әлеге кимәлдән кәмендә 30–40 процентҡа мул һыулыраҡ, тирәяғында әллә күпме эреле-ваҡлы күлдәр ҙә бар ине. Былтыр уларҙың хатта ҙурыраҡтары ла юҡҡа сыҡты. Йәй урталарында Дим дә яртылаш тиерлек бөҫкәрҙе.

Был йылғаның һайығыуына килтергән сәбәптәрҙең береһе – уның үҙәнендә ауып ятҡан эре ағастарҙың күп булыуында. Уларҙың ҡайһыһын ҡондоҙҙар бысып ауҙара, ҡайһылары яры ашалыу арҡаһында йылға үҙәненә арҡыры ауа һәм ләм йыйып ята. Ағиҙелгә ҡойорҙан алда Өфөләге «Алтын балыҡ» кафеһы янында ла Дим үҙенең һул яҡ ярын ашап, йылдан-йыл эскәрәк үтеп инә. Оҙаҡламай уның автомобиль күперенә лә хәүеф тыуҙыра башлауы ихтимал. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ярҙы нығытыу буйынса тейешле саралар күрелмәй.

Ғөмүмән, киләсәктә, тимәк, эсеү өсөн генә түгел, ә хужалыҡ мохтажлығы өсөн дә һыу проблемаһының ҡатмарлашыуы бик ихтимал. Шуның өсөн йылғалар торошон ентекле өйрәнеү һәм уларҙы тулыландырған шишмәләр һәм инештәрҙе таҙартыу – күптән хәл итеүҙе көткән мәсьәлә. Был – кеше эшмәкәрлеге арҡаһында килеп тыуған проблема һәм уны кешенән башҡа бер йән эйәһе лә хәл итә алмай. Әлбиттә, бик ҡатмарлы һәм мәшәҡәтле был эште бер-ике йылда ғына атҡарып сығыу мөмкин түгел. Берҙән, кәрәкле техника, икенсенән, матди сығымдар кәрәк буласаҡ. Иртәме-һуңмы властар был проблеманы таныясаҡ. Ләкин үтә һуң булып ҡуймағайы.

Был – бер. Икенсенән, һыу тотоноу культураһы ла беҙҙә тейешле кимәлдә түгел. Дөрөҫөрәге, һыуҙың бөтөнләй ҡәҙере юҡ. Был тәртипһеҙлекте төрлө бысраҡты, айырыуса машиналарҙы йылға эсендә йыуыуҙан башлап һыуҙы сама белмәй түгеүгә тиклем күҙәтергә мөмкин. Ошо йәһәттән экономиялау мәсьәләһен етди күтәреү, хатта ниндәйҙер ҡаты саралар күреү зарурлығы бөгөн айырыуса мөһим.

## Саф һыу – алтын бәрәбәренә

Дөрөҫ, хәҙерге цивилизация сәнәғәттә баш әйләнерлек уңыштарға өлгәшкән мәлдә йылғалар һыуының көмөштәй сафлығына өлгәшеү тураһында һүҙ алып барыу әкиәт һөйләүгә тиң. Академик Николай Доллежалдың һүҙҙәре менән әйткәндә, кеше аяғы баҫҡан ерҙән тәбиғәт ҡаса. Бысранмаған йылғаларҙың бөгөн кеше йөрөмәгән урындарҙа ғына ҡалыуы ихтимал. Уҙған быуаттың 70-се йылдарында СССР матбуғатында Европалағы Рейн йылғаһын «үле йылға» тип атаған бер нисә материал донъя күрҙе. 1989 йылда ГДР-ҙағы Заале йылғаһында ап-аҡ һабын күбектәреләй ойошоп аҡҡан химия ҡалдыҡтарын күреп, мин шаҡ ҡатҡайным. Немецтар, билдәле, ул һыуҙы эсмәй, хатта унда һыу ҙа ҡойонмай. Европала, ғөмүмән, һыуҙы крандан түгел, ә магазиндан һатып алып эсәләр. Ватан сәнәғәтендәге процестар ошолай дауам итһә, беҙ ҙә, һис шикһеҙ, Европа хәленә ҡаласаҡбыҙ.

Ярын республиканың иң эре ҡалалары төйәк иткән Ағиҙелдең һыуын бөгөн кемдер эсергә яраҡлы тип атаһа, уға бер кем дә ышанмаҫ ине. Металлургия,

химия, нефть химияһы, электр энергияһы етештереү, яғыулыҡ, урман, ағас эшкәртеү, машиналар эшләү, металл эшкәртеү предприятиеларынан, торлаҡ-коммуналь хужалыҡтарҙан ағып сыҡҡан бысраҡ һыуҙар Ағиҙелде ҡот осҡос дәрәжәлә ағыулай. Һыу ресурстары федераль агентлығы мәғлүмәттәре буйынса, йылғала ҡайһы металл ҡалдыҡтары күпме дәрәжәлә икәнлеген асыҡлау өсөн, Ағиҙел һыуы ун урында – Белорет, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Өфө, Бөрө, Дүртөйлө ҡалаларында алынып, йөкмәткеһе тикшерелеп тора. Йылғаның үрге ағымында – Шушпа станцияһы (Белорет районы) тирәһендә һыу сифаты 2008 йылда IV кластан III класҡа («бик бысраҡ») яҡшырған, йәғни унда марганец, баҡыр, һәм тимер ҡушылмалары тиңдәшле рәүештә ете пдкнан («предельно допустимая концетрация» – иң юғары кимәл) ике һәм өс пдкға тиклем кәмегән. Башҡа күрһәткестәр буйынса әллә ни үҙгәреш теркәлмәгән.

Белорет ҡалаһынан түбәнерәк йылға металлургия комбинаты, рессорҙар һәм пружиналар эшләү заводы, коммуналь хужалыҡ селтәренән ағып сыҡҡан ҡалдыҡтар йоғонтоһон кисерә. Шуға күрә бында ул IV класҡа тап килә. Күҙәтеүҙәрҙән күренеүенсә, тимер, марганец, баҡыр һәм нефть продукттары ҡушылмалары буйынса һыу һуңғы осорҙа бик аҙ дәрәжәлә таҙара төшкән. Был, һис шикһеҙ, ҡала предприятиеларында иҡтисади хәлдең насарайыуы менән бәйле. Мәләүез ҡалаһында Ағиҙел «Минераль ашламалар етештереү» асыҡ акционерҙар йәмғиәтенән һәм Күмертау сәнәғәт, «Башнефть» асыҡ акционерҙар йәмғиәте предприятиелары һәм ауылдарҙан бысранып ағып килгән Мәләүез йылғаһы иҫәбенә төрлө зарарлы ҡушылмаларға тағы ла «байыға» төшә. Был тирәлә лә һыуҙың сифаты IV кластан III класҡа тиклем яҡшырған, ләкин марганец (һигеҙ пдк) һәм баҡыр (дүрт пдк) ҡушылмалары буйынса хәлдең киҫкенлеге һаҡлана. Салауат һәм Ишембай ҡалалары янында ла Ағиҙел һыуының сифаты III класс талаптарына ғына яуап бирә. Марганец буйынса – һигеҙ пдк, ә тимер һәм баҡыр өс-дүрттән артмай.

Стәрлетамаҡта һыу сифаты ике урында тикшерелә. Ҡала һыуҙы III класлы итеп ҡабул итә һәм IV класлыға әйләндереп сығара. Бында кеше эшмәкәрлегенең зыяны айырыуса ҙур, мәҫәлән, марганец ҡушылмаһы буйынса – 12, ә баҡыр һәм тимер биш пдкға етә. Ҡырмыҫҡалы районының Прибельский ҡасабаһы янында Ағиҙел III класҡа тиклем таҙара, ләкин марганец, нефть продукттары һәм төрлө химик берләшмәләр унда ла күп булып ҡала.

Өфөлә Ағиҙелдең сифаты дүрт урында тикшерелә. Йылға порты янында һыуҙа марганец (биш пдк), баҡыр, нефть продукттары, төрлө химик берләшмәләр (ике пдк) бар. Баш ҡаланан түбәнерәк, Туғай ауылы янында, Ағиҙел IV класс кимәленәсә ағыулана, бысрана. Благовещен ҡалаһы тирәһендә лә ул шулай булып ҡала. Ә бына Бөрө, Дүртөйлө ҡалаларына еткәнсе Ағиҙел бер ни ҡәҙәр (III класс) таҙара, әммә үрҙә әйтеп үтелгән ҡушылмалар унда ла юғары.

Ағиҙелдең ҡушылдыҡтары 15 урында тикшерелә. Оло Әүжән, Оло Нөгөш, Һәләүек, Инйәр йылғаларының сифаты III класс талаптарына яуап бирә. Уларҙа баҡыр, тимер һәм нефть ҡалдыҡтары күп булыуы күҙәтелә. Ашҡаҙар, Өршәк, Сәрмәсән, Йүгерек Танып йылғалары иһә бысрағыраҡ – IV класс. Бында марганец, тимер, баҡыр ҡушылмалары күп.

Ағиҙелдең иң ҙур ҡушылдығы Ҡариҙел Башҡортостанға Свердловск һәм Силәбе өлкәләре аша ағып килә. Уның урта ағымында Павловка һыуһаҡлағысы урынлашҡан. Ҡариҙелдең сифаты ла дүрт урында күҙәтелә. Свердловск өлкәһенең Үрге Һөйән ауылы янында һәм Павловка һыуһаҡлағысында йылға һыуының сифаты

бер үк төрлө – IV класлы. Бында уға, үрҙә атап үтелгән ҡушылмаларҙан тыш, фенол да өҫтәлә. Моғайын, һуңғыһы Павловкала батҡан ағастарҙың күплегенә бәйлелер. Артабан йылға бер ни тиклем таҙара һәм Ағиҙелгә III класлы булып килеп ҡушыла.

Дим йылғаһын, яр буйында сәнәғәт предприятиелары булмауға ҡарамаҫтан, саф һыулы тип әйтергә ярамай. Миәкә йылғаһы ҡушылған ерҙә Дим IV класс талаптарына ғына яуап бирә. Баҡыр менән тимергә бында цинк та килеп ҡушыла.

Һыу сифатына автомобиль транспортының йоғонтоһо ла көсәйә. Ағиҙел йылғаһы аша көньяҡ күпер аша көнөнә меңәрләгән еңел һәм йөк автомобиле уҙа. Дөрөҫ, йәй айҙарында уларҙың тирә-яҡ мөхиткә ниндәй дәрәжәлә йоғонто яһағанын күҙәтеп булмай. Ә бына ҡыш көндәрендә бер-ике аҙна ҡар яумай торһа, күпер аҫтындағы аҡ ҡар ҡара-зәңгәргә әйләнә. Былар – күп һанлы машиналарҙан сыҡҡан ауыр металл ҡалдыҡтары. Яҙ етеп, йылғаларҙа боҙ иреү менән ошо ағыулы матдәләр йылғаға төшә һәм һыуҙан файҙаланыусы тере организмдарға үтеп инә. Бындай күперҙәр Ағиҙел аша берәү генә һалынмаған. Затон биҫтәһенә илтеүсе ҙур күпер аша ла тәүлегенә йөҙәр-меңәрләгән автомобиль республиканың көнбайыш тарафтарына уҙа. Ошондай уҡ күперҙәр Бөрө һәм Дүртөйлө ҡалаларында ла бар. Улар ҙа республиканың төп йылғаһын ағыулауға үҙҙәренең «тос өлөш»өн индерә. Әлбиттә, күперҙәрҙе ябып ҡуйып булмай, ә бына машина ҡалдыҡтарын, Ағиҙелгә көрәп төшөрөү урынына, йыйып алып, ситкә түгеүҙе ойоштороу һис кенә лә оло мәшәҡәт түгел дә бит. Тик беҙҙең ҡулланыу-тотоноу культураһы үтә лә самалы булған йәмғиәтебеҙҙә был хаҡта, моғайын, уйлап ҡараған кеше лә юҡтыр.

Йылғаларҙың элекке сафлығын ҡайтарыу мәсьәләһен бөгөн фән дә, йәмғиәт тә күтәрмәй. Күрәһең, хәл ошо килеш ҡалырға тейештер. Тимәк, сөсө һыу ятҡылыҡтарының бөтөүгә барыуы, уларҙа тере организмдарҙың һәләк булыуы йәки төрлө мутациялар кисереп, кеше өсөн зарарлыға әүерелеүе менән улар тулыһынса килешә. Ҡыҙғаныс, әлбиттә, әммә шундай һорау тыуа: әҙәм балаһы үҙе ҡайһы мөхиттә һаҡланып ҡалырға, нәҫелен нисек дауам итергә йыйына икән? Донъяла климаттың ҡырҡа үҙгәреүе менән бәйле һауаға углекислый газ бүлеп сығарыуҙы кәметеү буйынса Киото протоколын Рәсәй властары таныманы, хәҙер ошо уҡ проблема буйынса Копенгагенда килешелгәндәр менән дә эш итергә теләмәй. Теләмәй, сөнки был бәләләр беҙгә ҡағылмаҫ, урап үтер, тип өмөтләнә.

Донъя океаны күтәрелеү сөсө һыу ятҡылыҡтарының кәмеүе иҫәбенә барғаны хәҙер бер кемгә лә сер түгел кеүек. Дөрөҫ, диңгеҙ һыуын сөсөләндереүсе агрегаттар ҡуйып файҙаланған илдәр ҙә бар. Мәҫәлән, Сәғүд Ғәрәбстаны үҙенең 1 миллион самаһы халҡының ихтыяжын шулай ҡәнәғәтләндерә. Ләкин Рәсәй өсөн был ҡулдан килерлек түгел. Берҙән, ил ҙур, икенсенән, сығымдар – көс етмәҫлек.

Урыҫтар әйтмешләй, йырып сыға алмаҫлыҡ түңәрәк барлыҡҡа килде. Үкенес, шул түңәрәк эсендә әҙәм балаһына урын юҡлығы әлегә бер кемде лә борсомай.

**Мәхмүт ХУЖИН әҙерләне.**

# БӨЙӨК РУС ЯҘЫУСЫҺЫ АНТОН ЧЕХОВ… ИҪӘПСЕ

Ватан әҙәбиәтенә битараф булмағандар быйыл бөйөк рус яҙыусыһы Антон Чеховтың юбилейын билдәләне. Мәҙәниәтле кеше уның яҙыусы ла, драматург та һәм табип та икәнлеген яҡшы белә. Чеховтың тормош сәхифәләрендә тағы ла бер бит бар: ул халыҡ иҫәбен алыуҙа әүҙем ҡатнашҡан. 2010 йыл – Антон Павлович өсөн ысынлап та юбилей йылы: 150 йыл элек ул донъяға килгән, 120 йыл әүәл Сахалин утрауына китә һәм ысын-ысындан халыҡ иҫәбен алыу менән шөғөлләнә. Быйыл иһә иҫәп алыусылар өсөн үтә лә мөһим ваҡиға – Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу башлана. Чеховтың 1890 йылда Сахалин утрауында иҫәп алыу менән шөғөлләнеүе уның «Сахалин утрауы» тип исемләнгән китабында сағылыш таба. Был китапты ғәҙел рәүештә, шул осорҙоң нәфис документы, тип тә атайҙар. Кешеләр менән аралашҡанда ишеткән төрлө тарих, иҫәп алыусының ауыр, әммә ҡыҙыҡлы тормошо – барыһы ла ошо китап эсендә. Халыҡ тураһында мәғлүмәттәрҙе эсенә алған меңдәрсә карточка тарихсылар өсөн баһалап бөтөргөһөҙ сығанаҡ булып, йәш Чехов быуаттан ашыу элек йыйған мәғлүмәттәр Сахалин тормошон күҙ алдына баҫтырырға мөмкинлек бирә. Ниһайәт, XX быуаттың 90-сы йылдарында был материалдар төплө ғилми эҙләнеүҙәр өсөн нигеҙ булып тора.

Яҙыусы Сахалиндың арҡырыһын буйға йөрөп сыға, һөргөнгә ебәрелгәндәр, урындағы крәҫтиәндәр тормошо менән таныша. Ул төрмәләрҙең техник һәм санитар торошон ҡарай, торлаҡ йорттарҙы йөрөп сыға, ауыл кешеләре, төрмәгә ябылғандар менән һөйләшә. Һөҙөмтәлә 10 меңләп статистик карточка барлыҡҡа килә. Уларҙа сағылыш тапҡан мәғлүмәттәр үтә лә үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫлығы менән айырыла. Карточкаларға ҡарап, утрауҙа йәшәгән халыҡтың үтә фәҡир тормош алып барыуын, наҙанлығын күрәһең. Белеме тураһында һорауҙы яҙыусы Корсаковка, Михайловка, Красный Яр, Армудан, Арковола йәшәгәндәрҙең барыһына ла биргән. Чехов иҫәп алған осорҙа Сахалинда барлығы 28113 йән, шул иҫәптән 7641 ҡатын-ҡыҙ, көн күргән. Крәҫтиәндәрҙең грамотаһыҙлығын яҙыусы үтә лә юғары тип баһалай. Енестәр нисбәте араһында ла айырма бик ҙур: мең ир затына 372 генә ҡатын тура килгән.

Сахалиндан йөрөп ҡайтҡас та Антон Павлович иҫәпсе һөнәрен ташламай: Рәсәй империяһы халыҡтарының иҫәбен алған 1897 йылғы кампанияла ул Мәскәү губернаһының Серпухов өйәҙендә 15 иҫәп алыусы өҫтөнән инструктор-күҙәтеүсе булып бушлай ҡатнаша һәм «1897 йылғы тәүге Бөтә Рәсәй халҡы иҫәбен алыуҙағы хеҙмәте өсөн» миҙалы менән бүләкләнә.

Беренсе иҫәп алыуҙан һуң быуаттан күберәк ваҡыт уҙыуға ҡарамаҫтан, халыҡ иҫәбен алыу ил тураһында тулы һәм теүәл мәғлүмәт йыйыуҙа берҙән-бер алым булып ҡала. Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға – 14 октябргә тиклем – һанаулы ғына көндәр ҡалды. Иҫәп алыусы эшенең нескәлектәрен өйрәнеү өсөн «Сахалин утрауы»н уҡып сығыу ҙа етә ул.

**Мәхмүт ХУЖИН** әҙерләне.

## Матильдаға ғашиҡмын…

Кәрим Ҡараның «Ағиҙел» журналында (№ 6, 2008 йыл) баҫылып сыҡҡан «Матильда» исемле повесын уҡып бик тетрәндем.

Беренсенән, повеста һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар тормошсан, йәғни тап ошондай хәлдәр ысынбарлыҡта урын алмаһа ла, шуға оҡшаш һәм хатта унан да сетереклерәк хәл-әхүәлдәр булыуы бик ихтимал. (Әгәр ҙә минең үҙем менән йәш саҡта ошоға тартым бер ваҡиға булмаһа, былай тип әйтә алмаҫ инем.) Әҫәрҙең сюжеты ла ябай ғына. Иптәштәре менән бер колонна булып Ҡаҙағстандан он тейәп ҡайтып килгәндә КамАЗ шоферы Рәмилдең машинаһы боҙола. Һөйрәтеп килтереп, уны бер ташландыҡ ауылға ҡалдырып китәләр. Ошонда башлана ла инде повестағы төп хәл-ваҡиғалар: Рәмилдең йорт хужабикәһе, ирһеҙ йәш ҡатын Матильда һәм уның бәләкәй улы Гарсия менән танышыуы, ауылдағы ҡомһоҙ коммерсант Юра менән осрашыуҙары һ. б.

Повеста төп урынды Рәмил менән Матильда араһындағы мөнәсәбәт алып тора. Үҙ ҡатыны Мәймүнәнән бер ҡасан да ҡәҙер-хөрмәт күрмәгән, ул ғына ла түгел, һәр саҡ хурланған («хайуан», «ыстырам», «подлец» һ. б.), хатта үҙенә хыянат иткән ҡатынынан айырмалы, ошо ауылға осраҡлы килеп юлыҡҡан сиған ҡатыны Матильданың бәхетһеҙ тормош юлы менән танышып, уның оло йөрәкле, намыҫлы, кешеләргә ҡарата ихтирамлы, иғтибарлы, бер һүҙ менән әйткәндә, ысын кеше икәнлегенә инана Рәмил.

Рәмил дә насар кеше түгел. Ҡайҙа ғына булмаһын, һәр саҡ намыҫы ҡушҡанды эшләй, алдаша ла, урлаша ла белмәй. Бик ауыр шарттарҙа армия хеҙмәтен үтәп ҡайта, унан «үткерлеге» менән билдәле Мәймүнә үҙ ҡармағына ҡаптыра уны. Ҡатыны тарафынан Рәмилдең урыны билдәләнгән: ир күберәк һәм йышыраҡ аҡса килтерергә тейеш, ә Рәмилгә нисек булһа ла ярай, уға ғаиләлә һан да, кешесә ҡараш та юҡ. Ҡатын менән йәшәү ошолай булалыр, күрәһең, тип уйлап та ҡуя ул. Мәймүнәнең бар шөғөлө – биҙәнеү-яһаныу, кейем-һалым, ательелар. Етмәһә, эсергә яратыуы, Рәмилдең начальнигы «Бычок» менән типтереүе…

Матильда – шул тиклем дә изгелекле, кеше йәнле ҡатын. Ике-өс көнгә генә туҡтаған Рәмилгә ашарға әҙерләй, кейемдәрен йыуа, үтекләй, мунса яғып индерә. Бындай хөрмәтте, йылы һүҙҙе үҙ ҡатынынан ғүмерҙә лә күрмәгән, ишетмәгән Рәмил хайран ҡала, «ундай ҙа ҡатын-ҡыҙ буламы икән ни?» тип аптырай. Бөтә яҡшылыҡтары, изгелектәре өсөн Рәмил дә Матильданы ихтирам итә, сиған халҡын яратыуын да белдерә. Әҫәрҙәге һәр тетрәндергес ваҡиғаны (ә улар аҙ түгел) автор бик оҫта һүрәтләй. Бының өсөн яҙыусыға, нескә хисле булыу менән бер рәттән, кеше күңелен тәрәндән аңлаусы һиҙгер психолог, зиһенле философ

та булыу зарурҙыр. Һәм ысынлап та Кәрим ҡустының тап шундай шәхес булыуына иманым камил!

Матильда башҡаларға ҡарата, бигерәк тә ир заттарына, бик гуманлы, кеселекле, ярҙам итергә ынтылып ҡына тора, кешеләге һәйбәт һыҙаттарҙы тиҙ генә күрә лә белә. Бына нисек маҡтай ул Рәмилде: «Бына һин ниндәй изгелекле, яҡшы күңелле, йылмайыуың матур һинең, гел ҡарайһы килеп тора. Күптәр, беҙҙең заттарҙы әйтәм, тартҡылашып, баш булыу өсөн көрәшеп, ирҙе үҙенән түбән ҡуйырға тырышып ғүмерҙәрен үткәрәләр… Әгәр ирҙе етерлек дәрәжәлә хөрмәт итеп, яратып, уның тормошо менән йәшәһә, һәр ҡатын бәхетле була бит». Хаҡ һүҙҙәр! Борондан килгән ошо алтын ҡағиҙәләрҙең күп осраҡта үтәлмәүе арҡаһында күпме ғаиләләр тарҡала, ғәзиз балалар етемлеккә дусар ителә.

Шул уҡ ваҡытта ир заттарын да аяп бармай Матильда. Уларға ҡарата ла ғәҙел ҡарашы, ҡәтғи талабы бар уның. Рәмилгә ҡарашы бөтөнләй икенсе сиған ҡатынының, ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ул уны «үтәнән-үтә» күреп тә өлгөрә. «Ике көн эсендә арбаның күңелемде,– ти ул. – Һөйләшеүең, йөрөшөң ипле, телең татлы, ярҙамсылһың, йомартһың… Һин хәйләкәр, башта минең йөрәгемде иреттең, үҙеңә эҫендерҙең…» (59-сы бит).

…Бына шулай осраҡлы яҙмыш осраштыра Матильда менән Рәмилде. Яңы ялҡған оло мөхәббәт матур дауам итһә ине лә бит! Юҡ шул. Быларҙың баштарына ла килмәгән драматик хәлдәр арҡаһында рәхимһеҙ суд ҡарары менән Рәмил ҡаты режимлы төрмәгә ябыла.

Тамам кешелектән сығаралар уны. Һаулығы ныҡ ҡаҡшай. Тормош тәмен юғалта ул, муйынына бау һалырға ла күп ҡалмай.

Ләкин, автор әйткәнсә, «күңеленең иң төбөндә, төпкөлөндә, бер ҡуҙ һүнергә теләмәй ине әле: Матильда! …Уны уйлап ҡына үлгән еренән терелде, аҡылын юғалтманы» (37-се бит).

Мең ғазаптар күреп, төрмәнән ҡотолоп сыға Рәмил. Ауылына ҡайта, Матильданан хат ала. Бына ошондай оптимистик рухта, алдағы тормошҡа өмөт менән тамамлана повесть.

Минең инаныуымса, әҫәр бик фәһемле, ышандырғыс, башта әйткәнемсә, тормошсан. Яуызлыҡ – изгелек, ялғанлыҡ – дөрөҫлөк, нәфрәт – мөхәббәт, оятһыҙлыҡ – намыҫлылыҡ һ. б. мәңгелек ҡапма-ҡаршылыҡтар бәрелеше тураһында был повесть. Үҙебеҙ йәшәгән әлеге ҡатмарлы тормош күренештәренә лә ауаздаш ул. Һәр төрлө йүнһеҙ «Бычок»тар, Мәймүнәләр, Юралар – илебеҙҙә хөкөм һөргән «ҡырағай баҙар»ҙың иң оятһыҙ, тәкәббер, һаран, алдаҡсы, саманан тыш нәфселе ҡолдары. Әммә ләкин Ер йөҙөндә яҡшылыҡ-изгелектәр ҙә, Матильда, Рәмил кеүек ысын кешеләр ҙә күптәр.

Йомғаҡлап, шуны әйтке килә: кешеләрҙе матур, ғәҙел тормош өсөн көрәшкә саҡырған ошондай әҫәрҙәр күберәк тыуһын ине.

Ә был бик шәп повесты ижад иткән хөрмәтле Кәримов Һаҙый Барый улына оло рәхмәт һүҙҙәремде әйтәм. Уға ныҡлы һаулыҡ, киләсәктә лә һәйбәт, эстәлекле әҫәрҙәр яҙыуын теләйем.

**Булат АҠМАНОВ,**
**Бөйөк Ватан һуғышы һәм хеҙмәт ветераны.**
**Ейәнсура районы,**
**Иҫәнғол ауылы.**

Хөрмәтле «Ағиҙел»!

Ишғәли Нурғәлиевтың «Ҡарабаш турғай» әҫәре баҫылған һанды уҡыр өсөн ауылдаштарым хатта… сиратҡа торҙолар журналға. Рәхмәт авторға, ул тормош төпкөлөнән сыҡҡан «бәләкәй кешеләр»ҙең тормошон ысынбарлыҡта күрһәтә алған. Шул тиклем ауырлыҡтар аша үтеп, ут-һыуҙарҙы кисеп, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татып барыбер үҙ маҡсатына ирешкән бит башҡорт балаһы. Был бит – халыҡ яҙмышы, тормош дөрөҫлөгө. Күпме кәмһетелеүгә дусар булған, шуға Ишғәле ағайҙы герой тип әйтһәк тә була.

Ысынлап та, Әптек ауылы ерҙәре тартып алынған, әле лә халҡы саңһурғыс заводында эшләй, ә балалары Яңы Әптек ауылында уҡый. Шулай ҙа был ауылдан бик күп кенә уҡымышлы кешеләр сыҡты.

Һәләүекте шул тиклем яратып яҙған ағай. Ысынлап та, 20–30 кг балыҡтар тота торғайнылар. Мин хәҙер 61 йәштәмен, башҡорт теле уҡытыусыһы булып эшләнем. Бер саҡ (1979 йыл ине) күрше егет балыҡ алып ҡайтты Һәләүектән, ҡойроғо ергә һөйрәлеп килә. Күҙ шарҙай булды; башын ҡырҡып бағанаға элеп ҡуйҙылар – биҙрә ҙурлыҡ, ә итен турап һаттылар, 30 кг. тартҡан. Һәләүек буйы һуңғы йылдарҙа матурланып бара. Сөнки колхоздар бөтөрөлдө, малдар бик аҙ, сусҡалар бөтөнләй юҡ. Һәләүек бер төрлө киңәйеп, матурланып китте. Хәҙер эҫе йәйҙә көндәр буйы балалар һыу буйында. Эйе, ағайыбыҙ экология темаһын бик урынлы күтәргән.

Был әҫәрҙе китап итеп сығарырға ине!

…«Ағиҙел»де бөтә кеше лә алдыра алмай. Хәҙер журналға яҙылырға дәрт, теләк артты. Йәнә шул: китапханаға һуңғы ике йыл эсендә башҡорт баҫмалары ҡайтарыла башланы. Көн-төн кеше өҙөлмәй, Гәүһәр Абдулхай ҡыҙы Латипова кинәнеп-һөйөнөп китап уҡыусыларына тәҡдимдәрен әйтә, кәңәштәрен бирә.

**Варака ҒӘЛӘҮЕТДИНОВА.**
**Ишембай районы,**
**Новый Антик ауылы.**

***

Иҫәнмеһегеҙ, Ишғәли Нурғәлиев!

Һеҙҙең әҫәрегеҙҙе бер кистә – төндә уҡып сыҡтым. Мин үҙем 1936 йылда тыуғанмын, 1951–1955 йылдарҙа Ишембай нефть техникумын бөтөрҙөм, шуға күрә һеҙ яҙғандар миңә яҡын, таныш. Мин дә аслыҡта, яланғаслыҡта үҫтем. Атайым 1943 йылда һуғыштан яраланып ҡайтҡайны, 2 айҙан һуң үлде, әсәйем ҡулында 4 бала тороп ҡалдыҡ.

Мин үҙем Күгәрсен районында (элекке Йомағужа районы) Дауыт-Ҡайып ауылында тыуғанмын.

Хәҙер Ырымбурҙа торам, пенсия алам. Һеҙҙең яҡтарҙы беләм, туған. Петровскиға барғаным булды, унда беҙҙең ауыл кешеһе Сәғитов Рәшит МТС-та баш бухгалтер булып эшләй ине.

**Рауил ИСЛАМҒОЛОВ.**
**Ырымбур өлкәһе.**

РЕДАКЦИЯНАН: уҡыусыларыбыҙға журнал һәм уның биттәрендә баҫылған әҫәрҙәр хаҡында фекерҙәре өсөн рәхмәт күндерәбеҙ. Шуны ла белдерәбеҙ: «Ҡарабаш турғай» яҙмышнамәһенең дауамы әҙерләнә һәм ул быйылғы йылдың икенсе яртыһында нәшер ителәсәк.

# Изге бит ул туған тел

Бисмиллаһи ррахмани ррахим.

Туған тел тураһында күптән яҙырға йөрөй инем. Йыш ҡына хатта оло ғына йәштәге кешеләр ҙә туған мәҙәниәтен, телен белмәй. Һин уға үҙ телеңдә өндәшәһең, улар урыҫса яуаплай. Эйе, хәҙер сит телдәрҙе күп белеү модала. Мин үҙем дә инглиз, немец, латин телдәрен өйрәндем, ләкин туған телгә етәме ни!

Мин тел белгесе түгел, әммә ҡайһы бер фекерҙәремдең фәһемлелегенә шигем юҡ. Ҡәләмгә тотонорға 2008 йылдың аҙағында халыҡ шағиры М. Ғафури иҫтәлегенә арнап "Ихлас" мәсетендә, артабан шағирҙың Мемориал йорт-музейында үткәрелгән бер сара мәжбүр итте. Унда ғалимдар, шағирҙың туғандары, йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашты. Ошо сараларҙа ҡатнашыу минең кем булып китеүем, туған телемдең, туған мәҙәниәтемдең йоғонтоһо тураһында уйланырға мәжбүр итте.

Мин 1924 йылда Татар АССР-ының Бөгөлмә ҡалаһында күп балалы ғаиләлә тыуғанмын. Беҙҙең ғаиләне, олатайым Рәсәй IV Дәүләт думаһының депутаты М. Миңлеғәлиев менән бергә кулакка сығарып, Чита өлкәһенең Шилко станцияһына һөргәндә, алты ғына йәштә инем. Мал вагондарына ултырып барғанда өс йәшлек ҡустым Омск станцияһында үлеп ҡалды. 75 йәшкә етеп, олатайым да вафат булды. Уның мәйетен Жарча тигән урында ташлы ергә күмделәр. Олатайым ғүмере буйы һайлап ҡуйылған вазифаларҙа эшләне, кешеләргә ярҙам итте. Әҙәби хеҙмәт менән дә шөғөлләнә торғайны, күренекле ғалимдар, әҙәбиәтселәр менән аралашты.

1934 йылда беҙ Красноярск крайының төньяғына, тимер юлдан 700–800 саҡрым ситкә күсерелдек. Вельмо ҡасабаһында шахта, магазин, мәктәп, клуб, мунса бар ине. Айырыуса мөләйем уҡытыусылары булған мәктәп яҡшы хәтерҙә ҡалған. Беҙ унда урыҫ, украин, сыуаш һ.б. милләт балалары менән бергә белем алдыҡ. Ошонда мин 9 класлы урыҫ мәктәбен тамамланым, атайым менән әсәйемдән туған телгә һөйөү ҡабул иттем. Изге "Ҡөрьән" сүрәләрен ятланым. Шунан бирле Аллаһы Тәғәләне йөрәгемдә йөрөтәм. Олатайҙарымдан ҡалған "Ҡөрьән" китабы миндә әле лә һаҡлана. Уҡытыусыларымды, мәктәпте мин ныҡ яраттым, сөнки улар миңә белем бирҙе, әҙәпкә, мәрхәмәткә өйрәтте. 1942 йылда мин Ҡыҙыл Армия сафына алындым, һуғышта разведчик булдым. Дүрт тапҡыр яраланһам да, иҫән ҡалдым – Аллаһы Тәғәлә һаҡланы. 1944 йылда яҡташым менән осраштым, беҙ туған телдә аралаштыҡ. Ул миңә үҙ туғаным кеүек яҡын булды. Һуғыштан һуң Өфөгә килеп урынлашырға ҡарар иттек, ләкин ул, һуғыш тамамланғас, үлеп ҡалды. Өфө минең өсөн тыуған ҡала кеүек булып китте. Һуғыштан ҡайтҡас, тыуған ерҙә йәшәү, туған телдә аралашыуҙың ҙур бәхет икәнен тойҙом. Шул уҡ ваҡытта милли мәҙәниәтте белеп еткермәүемде аңлап, уны ныҡлап өйрәнә башланым. Милли әҙәбиәт уҡыным, Башҡорт академия драма театрына йөрөнөм, китаптар йыйҙым, республика гәзиттәрен алдырҙым. Үҙем дә яҙышып, 70–80-се йылдарҙа "Совет Башҡортостаны" гәзитенең лауреаты исеменә лайыҡ булдым. Уҡыған тәүге китаптарым М. Ғафури, Ғ. Туҡай әҫәрҙәре ине. "Ҡара йөҙҙәр" спектаклен драма театрында ҡараным. Ғөмүмән, башҡорт театрына мин бик йыш йөрөнөм, А. Мөбәрәков, И. Йомағолов, Т. Бикташева, Р. Йәнбулатова, Ф. Камалетдинова, Х. Ҡудашев, Ғ. Ғиләжев, З. Кәримов

һ.б. минең ятаҡҡан актерҙарым булды. М. Ғафуриҙың “Ҡара йөҙҙәр”е минең күңелемдә тәрән эҙ ҡалдырҙы. Спектаклдә бер нисә роль башҡарған Зариф Кәримов менән беҙ дуҫлашып киттек. Рәсәйҙең халыҡ рәссамы Р. Нурмөхәмәтов менән дә мин оҙаҡ йылдар тығыҙ мөнәсәбәттә булдым. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ул 60 йәшендә яҡты донъянан китеп барҙы. Рәшиттең “Ҡара йөҙҙәр” драмаһы буйынса яҙылған “Шәриғәт ҡорбандары” тигән картинаһы башҡорт мәҙәниәте өсөн үтә лә ҡиммәтле. Туған телде өйрәнеүем менән мин мәҙәниәткә, китаптар уҡыуға бурыслымын. Ошоноң менән мин, йәш быуын ата-олаталарының тел, мәҙәни, дини традицияларын онотмаһын ине, тип әйткем килә. М. Ғафуриҙың “Ҡара йөҙҙәр”ен уҡымаһам, спектаклде ҡарамаһам, мин дә, бәлки, туған телемде әлеге кимәлдә белә алмаған булыр инем.

Хәҙер миңә 84 йәш. Тарихтан, бер быуын кешеләре тәжрибәһенән сығып та, туған тел, ғөрөф-ғәҙәттәр, мәҙәниәт һаҡланған урында халыҡ, милләт һаҡлана тип әйтергә мөмкин. Йәки киреһенсә. Күптән түгел мин автобуста ике йәш кешенең урын биреүен һораным. Ләкин улар ҡуҙғалманы ла. “Мин һуғыш инвалиды” тигәс, береһе, “хәҙер уның әһәмиәте юҡ”, тип яуапланы. Милли традицияларҙа тәрбиәләнгән балалар улай итә алмаҫ ине. Ҡартлыҡҡа, туған телгә, мәҙәниәткә, милли ғөрөф-ғәҙәттәргә ихтирам – рухыбыҙҙың нигеҙе. Тамырҙарыбыҙҙы юғалтһаҡ, беҙҙең проблемалар һис шикһеҙ артасаҡ. Мөхәммәт пәйғәмбәр сүрәләренең береһендә: “Тыуған илде һөйөү – дингә инаныуҙың бер өлөшө ул”,– тиелә. Был фатиха кеүек ҡабул ителә.

**Әсхәт МИНҺАЖЕТДИНОВ.**

**Өфө ҡалаһы.**

***

Редакция Удмуртстан республикаһында йәшәгән шағир Вячеслав Ар-Сергиҙан түбәндәге йөкмәткеле хат алды:

«Ағиҙел» журналының хөрмәтле хеҙмәткәрҙәре! Һеҙгә минең шиғри күстәнәстәрем баҫылған журналдың быйылғы 1-се һанын ебәргәнегеҙ өсөн оло рәхмәтемде белдерәм. Электән миңә мәғлүм»: һеҙ журналдың һәр номерын ихлас зауыҡ һәм юғары профессионализм менән донъяға сығараһығыҙ. Ай-һай, хәҙерге бигүк «әҙәби» булмаған заманаларҙа бындай илһам өлгөһө – үҙе бер ҡаҙаныш. Тимәк, нәфис һүҙ тигән тылсымлы көс Уҡыусыбыҙ күңеленән бер ҡасан да ситкә тайпылмаясаҡ. Был хаҡта әҙәбиәтебеҙ классигы Кузебай Герд (1898 – 1937) былай тигән: «Беҙ орлоҡтарҙы сәсәбеҙ ҙә сәсәбеҙ, ә уңышын урырға башҡалар үҫеп торасаҡ!» Ысынлап та, журналығыҙҙың авторы булып һаналыуыма, унан бигерәк, ҡәҙимге ижад емештәремдең ғүмер баҡый күрше һәм моңдаш башҡорт халҡының күңел баҫыуына сәселеүенә сикһеҙ шатмын. Һоҡланғыс шағир, маһир тәржемәсе Салауат Әбүзәрҙең ҡулын туғандарса ҡыҫам. Бөтәгеҙгә лә ижад баҫыуында иң мөһим һаналған артылыш – уңыш теләйем. Ҡалғаны, әлбиттә, яҙмыштан тора. Ә беҙҙең яҙмышыбыҙ бер-беребеҙҙе дуҫтарса аңлауҙан ғибәрәт. Иншалла! Эскерһеҙ хөрмәт менән – Удмуртстандың халыҡ яҙыусыһы Вячеслав Ар-Серги».

# *Әҙәби-мәҙәни мөхит*

***

Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты «Башҡорт халҡының демографик үҫеш мәсьәләләре» темаһына «түңәрәк өҫтәл» ойошторҙо.

Төп доклад менән БДУ-ның тарих факультеты деканы, тарих фәндәре докторы, профессор Марат Ҡолшәрипов сығыш яһаны. БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Рөстәм Ҡуҙбәков, БР Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһының ғилми хеҙмәткәре Рифҡәт Ғәлин, БДУ профессоры Роза Буканова, Башҡортостан Фәндәр академияһы вәкилдәре Илгиз Солтанморатов һәм Азат Бирҙин һ.б. халҡыбыҙҙың төрлө тарихи этаптарҙағы демографик хәле тураһында бәйән итте, үҙҙәренең фекер-тәҡдимдәре менән уртаҡлашты.

***

Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры артистары, Зәһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенттары Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Бикбаевтың «Хазина» поэмаһы буйынса спектакль күрһәтте. Поэма һәм уның авторы хаҡында Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, шағир Ҡәҙим Аралбай тәбрикләү һүҙҙәре әйтте.

Йәштәр театры артистары Лилиә Кинйәбаева, Лилиә Иҫҡужина, Роберт Йылҡыбаев, Илгиз Таһиров, Салауат Юлдашбаев, Шәһит Хамматов, Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенттары Зөлфир Басиров, Тимур Рамаҙанов һәм башҡалар поэманың төп асылын тамашасыға еткерерлек мәғәнәле спектакль күрһәтте.

Шиғриәт һәм мәҙәниәт тормошонда оло ваҡиға булған был сәхнә әҫәрен Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисткаһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, профессор Таңсулпан Бабичева ҡуйҙы.

***

Силәбе өлкәһендә Башҡорт әҙәбиәте көндәре үткәрелде. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, шағир Ҡәҙим Аралбай, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаттары Ирек Кинйәбулатов менән Таңсулпан Ғарипова, Республика башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары рәйесе, шағирә Гүзәл Ситдиҡова, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррир урынбаҫары, шағир Рәмил Йәнбәктән торған делегацияны Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиле М.И. Хафизов ихлас ҡаршы алды.

Ҡунаҡтар тәүҙә Силәбе ҡалаһының Ш. Бабич исемендәге китапханаһында әҙәбиәт һөйөүселәр менән осрашты, әҫәрҙәрен уҡыны, һорауҙарға яуаптар, автографтар бирҙе. Шулай уҡ М. Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә етәксеһе, шағир һәм педагог Ҡамса Мортазин, шағирҙар Алевтина Вәлиева, Урал Ҡолошов, Венера Нуретдинова һ.б. сығыш яһаны.

«Айгөл» халыҡ бейеү ансамбленең 50 йыллыҡ юбилей байрамында уның элекке етәксеһе, күренекле шағир Рамаҙан Шәғәлиевты иҫкә алыу булды.

Икенсе көндө делегация Арғаяш тарафтарына юл алды. Башҡорт әҙәбиәте көндәрендә ҡатнашыусыларҙы район хакимиәте башлығы И.М. Вәлишин ҡабул итте. Район мәҙәниәт йортонда уҙғарылған әҙәбиәт байрамы Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналды.

***

Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Республика милли китапханаһында «Тәнзилә Үҙәнбаева. Тормошо һәм ижады» китабының исем туйы булып үтте. Сарала Башҡортостан Хөкүмәте вәкиле В.В. Латипова ҡатнашты.

Сығыш яһаусылар – шағирҙар Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, Тамара Ғәниева, Фәнил Күзбәков, фән докторҙары Фәнүзә Нәҙершина, Розалия Солтангәрәева, филармония директоры Данир Ғәйнуллин, китапхана директоры Азат Ибраһимов, «Китап» нәшриәтенең баш мөхәррире Зөлфиә Ҡарабаева, педагог А. Х. Чембарисова уҡыусылары, ЮНЕСКО-ның Башҡортостандағы вәкиле, яҡташтары, дуҫтары Башҡортостандың халыҡ, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисткаһының сағыу фотоһүрәттәре, уға арналған очерк-мәҡәләләр, шиғырҙар тупланған йыйынтыҡтың йөкмәткеһе менән дә, зауыҡлы биҙәлеше йәһәтенән дә иғтибарҙы йәлеп итеүенә баҫым яһаны.

***

Былтыр Өфөлә билдәле журналист, яҙыусы Марсель Сәлимовтың “Ҡараға аҡ менән” повестар, хикәйәләр, мәҫәлдәр, шиғырҙар, фельетондар һәм юморескалар йыйынтығы донъя күргәйне. Яҡташыбыҙҙың яңы китабы Халыҡ-ара яҙыусылар союзы тарафынан юғары баһаланды, Бөтә донъя көлкө көнө алдынан Марсель Сәлимовҡа Сергей Михалков исемендәге халыҡ-ара әҙәби премия тапшырылды. Әҙип – 26 китап авторы, РФ-ның атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Дуҫлыҡ ордены кавалеры, “Алеко” халыҡ-ара юмористар конкурсы (Болгария) лауреаты.

***

Әбйәлил районының «Йәйғор» әҙәби берекмәһе быйыл үҙ эшен Урал урта мәктәбендә һәләтле шағир, драматург Рәмил Ҡол-Дәүләттең хәтер һәм ҡәҙер кисәһен үткәреүҙән башлағайны.

Ишбулды ауылы мәҙәниәт йортонда иһә Хәлил урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, шағир Радик Өмөтҡужиндың 50 йәшенә арналған тантана һәм уның «Һуңғы Һартай» тип исемләнгән спектакленең премьераһы булып үтте. Ҡуйыусылары – Байым мәҙәниәт йортоноң халыҡ театры. Авторҙы кисәлә ҡатнашҡан ҡәләмдәш дуҫтары, ауылдаштары, туғандары тәбрикләне.

***

“Ағиҙел” журналының баш мөхәррире Әмир Әминев, бүлек мөхәррирҙәре Сабир Шәрипов, Фәнил Күзбәков БДУ-ның Учалы институтында, район үҙәк китапханаһында, 12-се башҡорт лицейында әҙәби осрашыуҙар уҙғарҙы. Сарала шулай уҡ урындағы яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе Фәрит Хәсәнов, күренекле әҙип Мәүлит Ямалетдин ҡатнашты. Ҡайҙа ла әҙәбиәт һәм милли матбуғат хаҡында әңгәмәләр үтте, шиғырҙар һәм йырҙар яңғыраны. Ҡунаҡтарға шулай уҡ Өргөн ауылында Фәрит менән Гүзәл Хәсәновтарҙың шәхси тарихи-этнографик музейын ҡарарға насип итте.

Ҡайтышлай “Ағиҙел”селәрҙе Белорет лицей-интернаты коллективы (директоры – РФ дөйөм белем биреү почетлы хеҙмәткәре Гөлйемеш Садиҡова) йылы ҡаршыланы.

***

С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, шағир Ирек Кинйәбулатов, филология фәндәре докторы, шағир, әҙәби тәнҡитсе Фәнил Күзбәков, М. Аҡмулла, Һ. Дәүләтшина исемендәге премиялар лауреаты, прозаик, журналист Факил Мырҙаҡаев, «Йәшлек» гәзитенең бүлек мөхәррире, шағир, прозаик Мөнир Ҡунафин Миәкә районының Илсеғол гимназияһында уҡытыусылар һәм уҡыусылар менән осрашыуҙа булды.

***

**Ҡотлайбыҙ!**

Яҙыусылар союзы идараһы Ҡабул итеү комиссияһының йәшерен тауыш биреү һөҙөмтәләрен раҫланы. Шулай итеп, РФ һәм БР Яҙыусылар союздарына шағирҙар – Абдуллин Кинйәғәли Әбүбәкер улы (Күмертау ҡалаһы), Алтынбаева Зөһрә Нариман ҡыҙы (Өфө ҡалаһы), Күсмәева Мәрйәм Тимерхан ҡыҙы (Мәләүез ҡалаһы), Сәлихова Зәйфә Мирғәзейән ҡыҙы (Бәләбәй ҡалаһы) һәм прозаиктар Багаев Мөҙәрис Бакир улы (Ишембай ҡалаһы), Сәғитов Рәсүл Хәсән улы, Лапицкий Денис Бронеславович, Нуриев Марс Ғималетдин улы ҡабул ителде (Өфө ҡалаһы).